Рәсәй фәндәр академияһы
Өфө ғилми үҙәге
Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты

# ДӘҮЛӘКӘН ЫҺЙЫЛАРЫ

Өфө
2008

УДК398 (=943/43)
ББК 82/3 (2 Рос=Баш)
Д 95

*Рәсәй Фәндәр академияһы*
*Өфө гилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының*
*гилми советы тарафынан баҫмаға раҫланды*

Төҙөүселәр:
А.М.Хәкимйәнова, Р.Ғ.Мөхәмәтғәлин

Яуаплы редакторы –
филология фәндәре докторы Фәнүзә Нәҙершина

**Дәүләкән ынйылары / Төҙ. А.М. Хәкимйәнова, Р.Ғ. Мөхәмәтғәлин.** – Өфө: "Эшлекле династия", 2008. – 328 б.

ISBN 978-5-91608-002-5

Йыйынтыҡ төрлө йылдарҙа Дим буйы башҡорттарынан яҙып алынған фольклор материалдарынан төҙөлдө.

Китап гуманитар фәндәр өлкәһендә эшләгән ғалимдарға, аспиранттарға, студенттарға, ғөмүмән, башҡорт халыҡ ижадына битараф булмағандарға тәғәйенләнә.

ISBN 978-5-91608-002-5 © ИИЯЛ УНЦ РАН, 2008

# РЕДАКТОРҘАН

Был йыйынтыҡтың әҙерләнеүе лә, донъя күреүе лә бер ни тиклем үҙенсәлекле. Материалдарҙы йыйыусы уҡытыусы Рәүеф Мөхәмәтғәлин фольклор әҫәрҙәре менән бер рәттән халыҡтың көнкүрешенә ҡағылышлы мәғлүмәттәрҙе лә ҡағыҙға теркәп, ҡайһы бер осраҡтарҙа уларға баҫылып сыҡҡан яҙма сығанаҡтарҙан алынған белешмәләрҙе ҡатыштырып, йыйылма “текст” әҙерләгән. Төбәктең тарихы менән ҡыҙыҡһыныусы кешеләрҙең яҙмалары, мәктәп музейҙарына тапшырылған материалдар байтаҡ. Шуға күрә яҙмаларҙың стиле төрлө: әҙәби тел нормалары нигеҙендә бирелгәндәре лә, ерле һөйләш менән ҡатнаштырылғандары ла бар. Дәүләкән башҡорттарының теле башҡорт теленең көньяҡ диалектына ҡарай. Ғилми әҙәбиәттә уны күберәген “Дим һөйләше” тип йөрөтәләр. Был һөйләштең төп үҙенсәлеге – “һ” урынына “ҫ” өнө ҡулланыу. Уҡыусы иғтибарына тәҡдим ителгән әлеге йыйынтыҡта, бер нисә тексты иҫкә алмағанда, әҙәби телгә яҡынлаштырып тапшырылған текстарҙың яңғырашы ҡалдырылды. Тотошлайы менән әҙәби йә ерле һөйләш теленә күсереп биреү тупланған яҙмаларҙың үҙенсәлеген үҙгәртеүгә килтерер ине.

Дим буйы башҡорттарының ауыҙ-тел ижады материалдары “Башҡорт халыҡ ижады” томдарында, Фәнүзә Нәҙершинаның”Рухи хазиналар” китабында (Өфө, 1992), һәм уның материалдары нигеҙендә Башҡортостан телевидениеһы төшөргән “Рухи хазиналар эҙенән” исемле ике сериялы документаль видеофильм һ.б. яҙмаларҙа сағылыш тапты. Әммә халыҡ ижады мул һыулы йылға кеүек. Ундағы байлыҡты бер ҡасан да бер генә китапҡа индереп бөтөп булмай. Шуға ла тупланған һәр материалға һаҡсыллыҡ күрһәтеп халыҡтың үҙенә ҡайтарыу хәстәрен күреү – изге эш.

Был йыйынтыҡҡа индерелгән материалдар электән баҫылып сыҡҡан яҙмалар даирәһен киңәйтә. Әлегәсә иғтибарҙан ситтә ҡала килгән дини йүнәлешле текстар, төбәктә билдәле нәҫел-ырыу тармаҡтары хаҡындағы мәғлүмәттәр уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырыр, тип уйлайым.

## ТӨҘӨҮСЕЛӘРҘӘН

“Дәүләкән ынйылары” йыйынтығына ошо төбәктә тыуып, әлеге ваҡытта Ағиҙел ҡалаһында йәшәүсе тарих уҡытыусыһы, Халыҡ мәғарифы отличнигы Р.Ғ. Мөхәмәтғәлин йыйған Дим буйы башҡорттарында һаҡланған ауыҙ-тел ижады өлгөләре инде. Бер нисә тиҫтә йыл һуҙымында яҙып алынған был бай материал минең тарафтан һайлап алынып, жанрҙар буйынса системаға һалынды.

Йыйынтыҡ халыҡ ижады өлгөләрен һаҡлап, теркәп ҡалыу маҡсатынан төҙөлдө, артабан “Башҡорт халыҡ ижады” томдарын төҙөгәндә, ғилми тикшеренеүҙәр өсөн дә сығанаҡ булараҡ файҙалы мәғлүмәт булып торор, тигән ниәттә ҡалабыҙ.

Китап Р.Ғ. Мөхәмәтғәлиндың баш һүҙе менән асыла. Артабан текстар, информанттар исемлеге килтерелә. Һәр текстың аҙағында бирелгән йәйә эсендәге һандар, материалдың ҡайҙан, кемдән яҙып алынғанлығын күрһәтә.

Китапты редакторлауҙа ҙур өлөш индергән филология фәндәре докторы Ф.А. Нәҙершинаға ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

*А.М. Хәкимйәнова*

## ИНЕШ

Башҡорт халҡының мәҙәни мираҫы ифрат бай, ул быуын-быуындан килгән рухи хазинабыҙ. Һәр өлкән быуын, аҡһаҡалдар, сәсән һәм мөғәллимдәр үҙенән һуң килгән быуынды, үҙенә ҡарағанда ла әҙәплерәк, зиһенлерәк, белемлерәк, аҡыллыраҡ, үҙ милләтенә тап төшөрмәҫлек итеп тәрбиәләргә тырышҡан. Һәр башҡорт милләтенән булған кеше ете быуын нәҫелен яттан белергә тейеш булған.

Халҡыбыҙҙың тәрбиә ҡанундары айырыуса уның ауыҙ-тел ижадында тупланған.

Мин үҙем 1970 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетында уҡыған йәшлек йылдарымда уҡ, тыуған яғым, гүзәл, матур тәбиғәтле Дәүләкән яҡтарының үткән тарихы, уларҙың көнкүреш йолалары, ауыҙ-тел ижады менән ҡыҙыҡһындым.

Был эшкә, әлбиттә, этәргес көс-кеүәт биреүсе булып, минең остазым Башҡортостаныбыҙҙың абруйлы һәм күренекле ғалимы Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов булды. Тәүге уҡыу йылдары баҫҡысында Дәүләкән районындағы археологик ҡомартҡылар, тәүтормош кешеләренең йәшәү урындары, уларҙың көнкүреше, ауылдарҙың ҡасан барлыҡҡа килеүе тураһында әһәмиәтле мәғлүмәттәр туплағас, диплом эшемде лә районды боронғо һәм хәҙерге тарихына бағышланым.

Уҡыу йылдарымда миңә бик күп тапҡырҙар Асылыкүл, Өршәк, Дим буйында йәшәгән башҡорт милләтенән булған ауыл аҡһаҡалдары, аҡ яулыҡлы тиҫбе тартып ултырған йор һүҙле инәйҙәр менән осрашып һөйләшергә һәм бик ҡиммәтле мәғлүмәттәр йыйырға тура килде. Ләкин төрлө

сәбәптәр арҡаһында йыйылған материалдарымды баҫтырыу форсаты теймәне.

Дәүләкән районы башҡорттарының фольклорын бер йыйынтыҡҡа туплау идеяһы тыуғас, мин күренекле ғалимдарыбыҙ Фәнүзә Нәҙершина, Розалия Солтангәрәева, Рәшит Шәкүр, Азат Камалов һәм Рәсимә Ураҡсина йыйған материалдарҙы ла файҙаланырға булдым.

Үҙемдең сәйәхәтемдә ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе мәктәп музейҙарынан алырға тура килде. Мин бигерәк тә Ҡоръятмаҫ, Ҡыҙрас, Мәкәш, 1-се һәм 2-се һанлы Ҡаҙанғол мәктәптәре, Дәүләкәндең 3-сө һанлы урта мәктәбе, Иҫке Мерәҫ, Дүртөйлө һигеҙ йыллыҡ мәктәбе уҡытыусыларына рәхмәтлемен.

Халыҡтың йөрәк тибешен тойоп, уның тамырҙарынан һут алып, шатлығына ҡыуанып йәшәгән кеше – иң бәхетле кешеләрҙең береһелер, моғайын. Шуға ла был китапты әҙерләгәндә, гүзәл Дәүләкән районының төрлө тарафтарында ынйы бөртөктәре кеүек һибелгән халҡыбыҙҙың рухи хазиналарын бер урынға йыйнау төп маҡсат итеп ҡуйылды.

Был фольклор материалдарын мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендәге кешеләр үҙ итер тигән ышаныста ҡалам.

Рәхим итеп, китап биттәрен ас, хөрмәтле уҡыусым!

*Рәүеф Ғәфүр улы Мөхәмәтғәлин,*
*Халыҡ мәғарифы отличнигы*

## ЙОЛАЛАР

**Бәпес үҫтереү йолаһы** (142)

Бәпес тыуыр алдынан уҡ, ата-инәһе алдан бәпескә кәрәк-яраҡтарын әҙерләп ҡуя, бүләктәр алына (һабын, ҡулъяулыҡ, баш яулыҡ, түбәтәй һ.б.). Бәпес тыуғандан һуң, яҡындары, таныштары, күрше-күлән һәм ауылдаштары бәпескә бүләк һәм инәһенә тәмле ризыҡтар бешереп алып киләләр. Килгән кешегә ата-инәһе бүләк бирә, бәпес бүләге тип. Ҙурыраҡ, оло йәштәге инәйҙәргә баш яулыҡтар, йәшерәктәренә һөлгө, еҫле һабын кеүек бүләктәр бирелә.

Бәпестең инәһе өҙләкмәһен өсөн, өс көнгә тиклем иң яҡын кешеләре генә килә, ә ҡалғандары һуңыраҡ, бәпестең 40 көнөнә тиклем, килеп бүләкләйҙәр. Килгән кешеләргә бәпес сәйе әҙерләнә.

Бәпес үҫтереү маҡсатында беренсе мунса яғыла. Оло кешеләр бәпесте мунса йыуындырып, ҙур, һау-сәләмәт булһын тип, ғөсөл ҡойондоралар. Парлы кеше быны эшләй, ата-инәһе ир затынан булған кешегә түбәтәй йә күлдәк бирәләр, ә ҡатын кешегә, беренсе мунса кереткәнгә, күлдәклек йә булмаһа баш яулығы бирелә. Бәпестең беренсе сәсен алған кешегә (быны ҡарт атаһы, йә булмаһа яҡын бабаһы башҡара) бүләккә бәрәс вәғәҙә ителә.

Балаға 40 көнө уҙғансы исем ҡушыла. Был табынға мулла, йә булмаһа уҡымышлы ир затынан бер бабай, һәм яҡын тыумасалары саҡырыла. Исем әйтелеп, вәғәз уҡыла. Унан һуң ата-инәһенең береһе, бәпес бүләге тип, табынға саҡырылған һәр кешегә исем ҡушылған бәпес исеменән бүләк тапшыра. Был көндө табынға саҡырылған ҡунаҡтарҙың кем булыуына ҡарамаҫтан, иҫерткес эсеү ҡәтғи тыйыла. Саҡырылған һәр кеше теләктәрен әйтеп, бәпескә бүләктәрен тапшырып, һаубуллашып ҡайтып китә.

Бүләк һалғанда балаға нык ҡарамайынса, бер һирпеп кенә уң яғына ҡарап, теләк теләйҙәр :

Собханалла һыуалла!

Бәләкәй генә бер бәпес,

Беҙҙән теләк ҡабул ит!

Атаңа һин терәк бул,

Инәңә һин кәрәк бул.

Һау-сәләмәт кеше булып,

Бәхетле булып үҫ!

Унан һуң уң ҡул менән ауыҙҙы ҡаплап, күҙ теймәһен тип түбәнгә ҡарап, өс тапҡыр “тфү-тфү-тфү”, – тиҙәр.

## **Мал-тыуарға, ҡош-ҡортҡа ҡот ҡойоу йолаһы** (129)

Мал, ҡош-ҡорт һатып алғанда, йә булмаһа һатҡанда, ҡош-ҡортттоң ҡанат аҫтынан бер нисә хәрәм йөнө алына. Былай эшләгәндә ҡош-ҡорттоң ҡото китмәҫ, йомортҡаһы күп булыр, үрсеме артыр. Малдың ҡултыҡ аҫтындағы бер нисә генә йөнө тартып алыныр. Был да мал-тыуарҙың ҡото китмәһен, бәрәкәтле булһын өсөн эшләнә.

Һатҡан кеше “бисмиллаһир-рахманир-рахим!” тип, башы менән үҙенә ҡаратып, алған хужаһына тотторор. Алған кеше ошо уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлап, ҡош-ҡорттоң башын үҙенә бороп: “әлхәмдиллаһи шөкөр” тип әйтер.

Алған кеше һатҡан хужа кешегә бүләк бирә. Бүләген ул тәүҙә мал-тыуарына тейгеҙеп, унан һуң һатҡан хужа кешегә тоттора.

Ҡош-ҡорт, мал-тыуар һатҡан кеше, ҡулына аҡса алғас, уң ҡулына аҡса тотҡан килеш мал өҫтөнән аҡсаны елпеп, бәрәкәте менән барығыҙ, бәрәкәте менән ҡайтығыҙ, тип әйтергә тейеш.

Табын әҙерләп сәй-фәлән эсергә ярай, ләкин иҫерткес эсемлектәр эсеү – ҙур гонаһ. Аллаһы тәғәлә һатыу-алыуға фатиха бирмәҫ, малдың, ҡош-ҡорттоң бәрәкәте китер, ырыҫы юғалыр тиҙәр.

Һатып алынған малды өйгә алып ҡайтҡас һарайға керетер алдынан ишек алдына бәйләп ҡуйып, янына тәмле ризыҡ бирелә.

Һарайға инер алдынан малдың аяҡ-тояғындағы бысраҡтары алынып, бер һауытҡа һалына. Ҡош-ҡорттоң тәпәйҙәрен йыуып, йыуылған һыуҙы һәм тояҡтан алынған бысраҡтарҙы сүп түгелә торған урынға алып барып, ергә күмәләр.

Таҙартылған мал, ҡош-ҡортто: "Төклө аяғың менән, малҡай!" – тип алып инергә.

Дим буйында ошондай йола ла таралған: малдың ҡото, һөтө күп булһын өсөн бер баш һарымһаҡ алынып, шуның ослайып торған яғы киҫеп ташлана. Ошо киҫелгән өлөшө менән малдың маңлайына яңы тулған ай һүрәте яһала. Был – бәрәкәтлек билгеһе, малың бер ваҡытта ла ауырымаҫ, мал-тыуарың ишле, күп үрсемле булып, ризыҡҡа яҙыр, тигәне.

### **Мәрхүмде ерләү йолаһы** (107)

Мәрхүмде ерләгәндә был яҡтарҙа ғына һаҡланып ҡалған элек-электән бер йола йәшәп килә. Мәрхүмде йыуғандан һуң, бик шәп кенә туры атҡа бер етеҙерәк малайҙы атландырып, ауыл буйлап "йыназаға барығыҙ" тип ҡысҡырталар.

Һыбай менгән кеше ҡапҡанан сыҡҡас, тәүҙә уң яҡҡа атын борорға тейеш (шулай иткәндә һауаплы, дөрөҫ була), унан һуң боролоп ике-өс өй тураһынан уҙған һайын "йыназаға барығыҙ" тип ҡысҡырып, атта сабып уҙа.

Ҡайтҡас, аттың тояҡтары таҙартыла, сүбе йыраҡ ергә итеп ташланыла. Был яҡтарҙа мәрхүм-мәрхүмәне оҙатырға ауылдың бар халҡы ашыға, мәрхүм-мәрхүмәне хөрмәт итеп хәйер һалына, фатиха ҡылына. Гүр саҙаҡаһына аяҡтарын йыуып, йорт ҡошо бирелә. Уны гонаһһыҙ, саф күңелле, уҡымышлы кешеләрҙең береһенә бирәләр. Ҡөрьән сүрәһе уҡылғас, мәрхүмдең өйҙә ҡалған яҡындарынан береһе бар халыҡ алдында: "Гүр саҙаҡаһын ошо кешегә бирәм" – тип әйтә.

Мәйетте ҡапҡанан алып сыҡҡас та, ҡапҡалар ябылып ҡуйыла. Был өйгә ҡабат ҡайғы-хәсрәт, ғазраил килмәһен тигән

мәғәнәне аңлата ул. Ҡырҡын уҡытырға, алдан ҡырҡ көн өйҙә ҡөръән сыҡҡан кешегә, хәйер саҙаҡаһы итеп, ҡулынан килгәнсә һәр кеше тояҡлы мал бирә.

Яҡындары мәйетте ерләгәндән һуң бер йыл эсендә, йылына саҡлы ҡәбер өҫтөнә нардуған эшләп ҡуйып, мәрхүмдәрҙең ташҡа исем-шәрифен яҙып ҡуйырға бурыслы. Етеһен, ҡырҡын, йылын уҡытҡанда һәр ваҡыт мәрхүмдәрҙең яҡындары, ярҙам иткән, һөйәккә кергән, ләхет ауыҙы алған кешеләрҙе саҡырып Ҡөръән уҡытыла.

Был табындарҙың барыһында ла мәрхүмдәрҙең рухына бағышлап, хәйер саҙаҡаһы бирелә.

**Мәрхүмде ерләү, иҫкә алыу йолаһы** (207)

Күмеүселәр ҡайтыуына өйҙән таба еҫе сығаралар. Йола буйынса, сөсө ҡамырҙан йомшаҡ ҡына итеп баҫып, белен, йоҡа йәймә бешерәләр.

Мәрхүм исеменә, беренсе көнөнән үк  кеше йыйып аят уҡыталар. Унда ла йәймә бешерәләр. Өс, ете, ҡырҡ йоҡа бешерәләр (ҡырҡ көлсә бешереү йолаһы).

Әгәр күмгән көндән алып, етеһенә тиклем мәрхүм төшкә инеп бимазалаһа,  ҡыҙыл сепрәк биреүҙе һораһа, өйҙөң бер ере йыуылмай ҡалған тигән һүҙ. Шуға күрә лә бындай осраҡта өйҙө яңынан һәйбәтләп йыуалар.

Үлгән кешенең ҡайһы бер таҙа кейемдәрен күмеүселәргә тараталар. Юғиһә, мәрхүм теге донъяла йылыға туя алмай, ти. Уны гүр һыуығы язалай. Йыуып ҡуйылған кейемдәрен ҡырҡ көндән генә алалар.

Мәрхүмдең өсөн, етеһен, ҡырҡын, йыллығын уҡытҡанда, оло бабайҙарҙы саҡырып, таҫтамал тараталар. Итле аш, туҡмас бешерелә, килгән бер кешегә әйбер өләшелә.

Ул көндәрҙә сөйҙәге таҫтамалды ҡағып-һуғып, йыуып, элеп ҡуялар. Үлгәндәрҙең рухы (әруахтар)  шунда ултыра, ти.

Мәрхүмдәрҙең көндәрен үткәргәндә, борон уларҙы иҫкә алып, илашып, һамаҡлап ултыра торған булғандар, сүрәләр, мөнәжәттәр уҡығандар. Әруахтар кесаҙна көн кис килеп, йома иртән ҡайтып китәләр, ти. Шуға күрә кесаҙна көн мейес алдын таҙартып, мейесте ағартып, ҡомған ултыртып ҡуялар. Кесаҙна

көн тауышлы эш (ҡағыу, һуғыу) тыйыла, ти. Тырнаҡ, сәс киҫеү ҙә тыйыла (юғиһә, үлек алып китә), теректең ғүмере ҡыҫҡара, ти.

Тәҙрәгә күбәләк, ҡош осоп ҡунһа, йә үрмәкес үрмәләп төшһә: “Мәрхүмдең изге хәбәре булһын”, – тиҙәр. Мәрхүм төшкә керһә, хәйер бирергә кәрәк.

Элек әүлиә ҡәберҙәре булған, ундай урындарға тәңкә ташлап, әүлиәнең исемен әйтеп, ҡорбан салғандар. Үткән-һүткән ҡәбер тирәләй аҡ таш һалып китер булған.

Эсеп, аҙып-туҙып, йә үҙенә ҡул һалып үлгән кешеләрҙе зыярат тышына күмгәндәр. Ҡоролоҡ, әфәт булғанда уларҙың ҡәберенә һыу һалғандар. Улар йыуылмай, тәһәрәтһеҙ күмелгән, үлер саҡтарына тамаҡтарына һыу тамыҙыусы булмаған. Шуға рәтһеҙ күмелгән, улар зар булып яталар, ти.

Үлгән кешене юҡһынып, ныҡ ҡайғырған кешегә ҡәбер тупрағын алып килеп еҫкәтәләр. “Үлек булһа ла – терек”, – тиҙәр. Зыярат янынан үткәндә: “Сөъал яуаптарығыҙ еңел китһен, гүрегеҙ яҡты булһын”, – тип эстән әйтергә. Йырларға, ҡысҡырырға ярамай. Ҡәбер эйәләре: “Ахыр заман ҡасан була?” – тип һорайҙар икән. Шуға ла янынан үткәндә:

Иҫәнмеһегеҙ, әруахтар,
Иҫәнмеһегеҙ, әруахтар,
Иҫәнмеһегеҙ, әруахтар,
Беҙ белмәйбеҙ,
Белгел – бер Хоҙай! – тип әйтергә тейештәр.

### **Мәйетте кейендереү** (278)

Мәрхүмде кейендергәндә уға иң алдан баштан алып тубыҡҡа тиклем, ожмах күлдәге тегеләә, арҡа яғына булмай. Кейем теккәндә бер төйөн дә булырға тейеш түгел. Тиҙерәк һүтелергә уңай булһын өсөн шулай итәләр, сөнки әгәр мәрхүм ожмахҡа эләкһә, унда уға яңы кейем бирәсәктәр.

Мәрхүмдең битенә бөркәнсек ябалар, аҫтына аҡ тауарҙан түшәк һалалар.

Кәфенде аҡ әйберҙән тегәләр. Ҡатындарға ете, ирҙәргә биш ҡат итеп бүләләр.Тәртип буйынса, ир кеше мәйете булғанда – кәфен өс ҡат, ҡатын булғанда – биш булыуы сөннәт. Теккәндә энәне кире ҡаратып сәнсәләр. Кәфендең һәр бер

ҡатының исеме бар: беренсеһе – ләфнә – тышҡы урау; икенсе ҡат – әҙер – эске яҡтан урау; өсөнсөһө – лифафа – оҙон әхирәт күлдәге, баштан аяҡҡа тиклем кейҙерелә; дүртенсеһе – ғәүрәт ябыуы – йән еренә ябыу (ир затынан булған мәйеттең йән ерен ябырҙан әүәл уның өҫтөнә бармаҡ буйы ҡушсатлы ағас һалалар (был түл өҙөлөүҙе аңлата); бишенсе – түшенә түшелдерек ябыу; алтынсы ҡат – яулыҡ йә бөркәнсек тип атала. Уныһы әхирәт күлдәгенә ҡуша тегелә, мәрхүмдең башын ҡаплай; етенсе ҡат – билбау – өс ҡат уратып билгә бәйләнә. 1-се ҡат кәфен баштан алып аяҡ осона етерлек, 2-се ҡат кәфен буйы менән типә-тиң була. 3-сө ҡат баш яғынан да, аяҡ осона да сығып тора. Ирҙәрҙең әхирәт күлдәге тубыҡ аҫтына төшөп тора.

Ирҙәр башына сәллә тегелә. Уның бер осо һалынып, мәрхүмдең арҡаһына төшөп торорға тейеш.

Бәләкәй мендәр тегеп, эсенә мәтрүшкә тултыралар ҙа, мәрхүмдең баш аҫтына ҡуялар.

Кәфен теккән еп артып ҡалһа, берәй ғәрипкә, етем-еһергә бирәләр. Ул епте ташларға йә өйҙә ҡулланырға ярамай.

Мәйет һаҡлағанда 12 кеше 99 йә 100 мәртәбә “лә илаһы” тыңлай. Бер мулла әйтеп уҡып ултыра. Әгәр кеше иҫәбе тулмаһа түлдән (ырыуҙан) ҡалған ҡатындар керә. Барыһы ла 41 кәррә һалымланған еп тартып (тиҫбе) ултыра.

Мәрхүмгә йыназа намаҙы уҡыла.

Уны уҡыу өсөн ҡайһы бер йола-шарттарҙың үтәлгән булыуы фарыз: тәһәрәтле булырға, һәр кем ғосолло булыу, кейемдәре таҙа, баш кейеме ҡағып-һуғып таҙартылған, бөтә урын, баҫҡан, ултырған урындыҡ таҙа булырға тейеш (йән сыҡҡан йорт эсендә сабата олторағына тиклем йыуыла, сөнки, йән биргәндә, әҙәмдең ҡаны ҡырҡ аҙымға тиклем һәммә ергә сәсрәй, ти).

Мәрхүмдең башы ҡибла яғына ҡаратып һалынырға, мәйет йыуылған булырға, уның донъялыҡтағы бурыстарын яҡын туғандары үҙҙәренә алырға (түләр өсөн), мәрхүмдең ниәте

атҡарылған (төҫөм итеп, бүләк итеп фәлән-фәләнгә ҡалдырам тигән әйберҙе тапшырыу) булырға тейеш.

**Ҡәбер ҡаҙыу йолаһы** (200)

Ҡәберҙе ғәҙәттә мәрхүмдең туғандары ҡаҙа. Ҡәбер ауыҙы асыусы алдан билдәләнә.

Ҡәбер өсөн урын таҙа, йәғни иҫке ҡәбер булмаған ерҙән һайлана, мәрхүмдең буйына ҡарап ҡаҙалар. Ир кешегә кендек тиңенән дә ярай, ҡатын кешегә түш тиңенән ҡаҙыла. Соҡорҙоң ҡибла яғына кеше һыймалы, ултырғанда башы теймәҫлек уйым яһала (ләхет). Шул рәүешле үҙенсә өй барлыҡҡа килә. Мәйетте күмеп кешеләр ҡайтып киткәс, һорау алыусы фәрештәләр Нәнкир менән Мөнкир килә һәм үлек тороп ултырып, уларға яуап бирә.

Ҡәбер әҙер булғас, мәйетте килтергәнсе, соҡор янында кеше һаҡта торорға тейеш. Юғиһә, ҡараусыһыҙ ҡалған ҡәбергә ен-шайтан эйәләшә.

Ҡәбер тупрағына баҫырға, төкөрөргә, абынырға ярамай. Ҡаҙыусылар тәһәрәтле, пак булырға тейеш. Ҡысҡырып һөйләшеү, көлөшөү ҡәтғи тыйыла. Юғиһә ҡәбер эйәһе рәнйей, уның йәне уларға зыян ҡылыуы мөмкин.

**Мәйет ҡуйыу** (141)

Мәйетте ҡәбергә төшөргәндә ҡәбер ауыҙын шаршау менән ҡаплап торалар. Ҡәбергә мәрхүмдең иң яҡын кешеләре төшә (мәйетте ҡан ҡәрҙәше һалһын, тиҙәр). Төшөргәс, кәфендең бәйҙәрен сисәләр. Бәйҙәр сиселгән урында ҡала (кәфендең бауын мәрхүм тороп ултырып яуап биргәндә уңай булһын өсөн сисәләр).

Мәрхүмдең элек йыя барған сәсен, тырнағын кәүҙәһе янына һалалар, күкрәгенә яуаплама – фәрештәләргә яуап биргәндә уҡыла торған доға ҡуялар.

Һуңынан мәрхүмдең өҫтөнә тәһел ташы тип, ваҡ-ваҡ ҡырсын һибәләр, шунан ләхет таҡталары һөйәйҙәр. Тупраҡ төшмәһен өсөн уның өҫтөнә йүкә ҡабығы йә туҙ йәйелә.

Аҫтыңдан уттар сәсрәр,
Өҫтөңдө тупраҡ баҫыр,
Йылан-саян килдениһә,
Ни тип яуап бирерһең?
Эй, Хоҙайым, ярлыҡа,
Доғаларымды тапшыр,
Белгәнемде ғәфү ит,
Белмәгәнемде белдер!

Мәйетте ҡәбергә ҡуйғанда шулай тип әйтһәләр, был үлек һәйбәт икән, быға йылан ебәрмәйек, тип әйтә, ти, ҡәбер фәрештәһе. Ҡәбергә төшөп, мәйетте урынлаштырып сыҡҡан кешеләргә һумлыҡ аҡса бәйләп таҫтамал бирелә.

Ҡәбергә тупраҡты тәүҙә услап, һуңынан көрәкләп һалалар. Көрәкте кешеләр бер-береһенә ҡулдан-ҡулға бирмәйҙәр, ергә һалалар. Ҡәбер үҙенең тупрағы бөткәнсе күмелә. Ҡәбер ҡаҙғанда ла, күмгәндә лә тирләргә ярамай, юҡһа, әҙәмде сир ала. Мәрхүмдең күкрәге тапҡырына тупраҡ бейегерәк, ә аяҡ осона һарҡыуыраҡ өйөлә.

Ҡарт-ҡоро тупраҡ һалғанда, доға уҡып, әйтемләп тора:

Яратҡан тупрағыма,
Ятасаҡ мәкамыма,
Бирәсәк сөъалыма,
Яратҡан яппарыма,
Сәләм әйткел, һеу Алла,
Сәләм әйткел, һеү Алла!

Күмгәс, ҡәберҙең 4 мөйөшөнә дүрт кеше ултырып, тағы ла йыназа уҡый, тәкбир әйтә. Муллаға гүр саҙаҡаһы бирелә.

Тим ағасын һүтеп, бер урынға һөйәп ҡалдыралар. Үлгән кеше исеменә ете (йә 12) йәштән йыйған гонаһына тип, мулла

Ҡөрьән уҡый (ҡатын-ҡыҙҙың ете йәштән, ир-аттың 12 йәштән гонаһтары иҫәпкә алына). Зыяраттан ҡайтҡанда аяҡ кейемендә тупраҡ булырға тейеш түгел, көрәкте йыуырға, юғиһә тупраҡ ҡайтһа, тағы ла мәйет сыға.

**Әруахтарҙы иҫкә алыу** (121*)

Үлем түшәгендә ятҡан кешенең баш осона ултырып ясин сүрәһе, унан һуң фатиха сүрәһе уҡыла.

Ерләгәндән һуң Ҡөрьән уҡытып, өсөн, етеһен, ҡырғын, йылын үткәреп, әруахтарҙың рухын шатландырырға кәрәк. Йыйылған мәжлестәге халыҡҡа саҙаҡа хәйере бирелә. 40 көн буйына бар белгән кешенән Ҡөрьән уҡытыла, хәленән килгән кешеләр гүр саҙаҡаһына күмгән көндө тауыҡтың аяғын ҡомғанға һалынған һыуҙан ағыҙып йыуып, бер уҡымышлы, аҡ диндә булған мосолман бәндәһенә тапшыра.

40 көн Ҡөрьән  сүрәләрен уҡыған кешегә дүрт аяҡлы ваҡ хайуан бирелә.

Уҡығанда бер нисә кеше лә уҡырға мөмкин. Бер нисә сүрәнән һуң, уң яҡтағы кешегә "сәҙәкәл ләһүл ғәлиүм ғәзим" тип, уҡырға күршеһенә бирә ала элегерәк уҡығаны.

Әруахтарҙың кем булыуына, нисек үлеүенә ҡарамаҫтан хәйер-саҙаҡа бирелә – был изге бурыс. Саҙаҡа биреүҙе, тәүҙә өйҙә, төп йортта, ҡалған кеше башҡарырға тейеш, унан һуң башҡалар. Кешенең уң ҡулына биреп; "Бисмиллаһир-

---

* *Фәзлиәхмәтов Миңлегәрәй олатай иҫкесә төрки китаптарын яҡшы уҡый, яҙа белә, Ҡөрьән сүрәләрен яттан белә ине, күп йылдар ауылда мулла вазифаһын башҡарҙы. Уның бик яҡшы бер ғәҙәте бар ине, эсеп, тәртипһеҙ ҡыланып, йәки үҙ-үҙенә ҡул һалып үлгән мәйеттәрҙе оҙатырға бармаҫ ине, саҡырһалар ҙа хәйлә ҡоропмо, бәлки, выжданы ҡушмағанмы, бындай кешеләргә бармаҫ ине.*

рахманир-рахим", – тиергә. Хәйерҙе был әруахтың нәҫел кешеләре генә түгел, әруахтар тыныс ятһын, ата-бабалар, беҙҙән хәйер-доға өмөт иткән кешеләр рухына тип, башҡа кешеләр ҙә бирә ала.

Аштан һуң йорт хужаларына, ошонда булышҡан барса кешеләргә рәхмәт әйтеп, доға уҡыла. Сығып киткәндә, ишектән уң аяҡтан башлап, әруахтың рухы рәнйеп ҡалмаһын, хужаларҙың хәйер саҙаҡаһы ҡабул булһын, изге ғәмәл башҡарҙылар, Аллаһы тәғәлә барығыҙға иҫәнлек-һаулыҡ бирһен, Аллаһы рәхмәтендә булығыҙ тип, һаубуллашыу мотлаҡ. Былай эшләгәндә, күңелең таҙарыр, мин был әруахҡа ысын күңелдән доға ҡылдым тигән уй һәр ваҡытта алдан йөрөр.

### **Ҡәбер тәрбиәләү йолаһы** (244)

Борон зыяратты, ҡәберҙәрҙе тәрбиәләп торғандар. Зыяратты бөтә ауыл бер булып ҡойма менән уратҡандар. Имән бағаналарға һәр кем үҙенең тамғаһын киртҡән. Шул бағаналарҙағы тамғалар ҡойма кемдеке булыуын әйтеп торған. Йығылған ағасты, һынып төшкән ботаҡтарҙы ла йыйыр булғандар. Күренекле кешеләр, әүлиәләрҙең ҡәберен аҡ таш менән уратыу ғәҙәте булған.

### **Ҡорбан салыу тәртибе** (121)

Аллаһы собханалла вә тәғәлә беҙҙең малдарҙы мосолманса ҡорбан салып ашарға тәҡдим иткән. Ҡорбан ашы ризыҡ булып барыр, уны ашағандарға сир кермәҫ тигән.

Мал салған кеше таҙа, тәһәрәтле булырға тейеш, кәйефе насар, ауырыу кеше малға яҡын килергә тейеш түгел. Сөнки ҡорбан салыу Аллаһы Тәғәлә бойороуы буйынса башҡарыла. Беренсе һүҙ Алла исеменә бағышлана. Ҡиблаға ҡарап, ҡулыңды алға ҡуйырға, "Бисмиллаһи Аллаһыу әкбәр!" – тип

әйтеп, доға ҡылына. Башҡа эштәрҙән айырмалы, “әр рахман рахим” тигән һүҙҙәр әйтелмәй.

Мал салғанда бысаҡ нығ үткер, бер генә һелтәү менән башҡарылырға тейеш, уң ҡул менән, изге ниәттә. Малдың төйөрө баш өлөшөндә ҡалып, тын юлы, ҙур тамырҙары ҡырҡылыу мотлаҡ.

Аллаһы Тәғәлә барса хәленән килгән мосолманға, Алла исеменә бағышлап, ҡорбан салырға ҡушҡан. Ҡорбан итенең бер өлөшөн үҙенә алып, ҡалған өлөшөн укый белгән, күңеле саф, хаҡ тәғәлә, ислам динендә булған бәндәләргә бирергә тейеш. Эскән, йүнһеҙ юлда булған кешеләргә биреү – гонаһлы, һауабы булмаç.

Ата-инәй, яҡындар рухына ҡорбан салыу тәртибе бар. Уны Ҡорбан ғәйете менән бутарға ярамай.

Мәжлес йыйып Ҡөрьән уҡытырға ла була, эсеү-эскелек былдай урында ҡәтғи тыйыла, был – Аллаһы алдында ҙур гонаһ.

Ата-инәң, яҡындарыңа ла ҡорбан салыу бар, тик быны Ҡорбан ғәйете менән бутарға ярамай: беренсеһе Аллаға төбәлһә, икенсе яҡындар рухына, күңел тыныслығы ниәте менән башҡарыла. Ҡиблаға боролоп ниәтен ҡылғанда: “Йә Раббым, һинең ризалығыңа өмөт итеп, ҡорбан салырға ниәт ҡылдым. Әжер һауаптарыңды атайым фәлән улы фәләнгә бағышлайым. Уның рухына ирештерһәң ине, йә Раббым”, - тип доға ҡылып, ғәмәлде башҡараһың. Әгәр дөрөç әйтмәһәң, Аллаһы тәғәлә әйтеп салған ҡорбанды ҡабул итмәç, бик ҙур гонаһ эшләп, әруахтарҙың күңеле рәнйер. Күргән төштәрең гел яманға булыр, йортоғоҙҙа йәм тапмаçһыҙ, күңелегеҙ гел төшөнкөлөктә булыр.

**Ҡорбан байрамы** (177)

Ҡорбанға орғасы малды тәғәйенләйҙәр. Бәлә-ҡаза күрһәң, ҡорбан салып, ҡунаҡ йыйырға кәрәк. Ҡорбанға етемдәрҙе, ғәриптәрҙе саҡырғандар. Ҡорбан итенең һөйәген эткә бирергә ярамай. Башын хәйергә биргәндәр.

**Һыйыр быҙаулағанда йола-ырым** (113)

Һыйыр быҙаулағас, ыуыҙын малай кешегә беренсе эсерһәң, киләһе йыл үгеҙ быҙау тыуар. Ҡыҙ кешегә эсерһәң, орғасы быҙау тыуа.

Һыйыр быҙаулағас, уның тәүге һөтө ыуыҙ була. Шунан ҡоймаҡ бешерәләр. Ыуыҙ ҡоймағына ҡунаҡ йыялар. Шулай эшләгәндә, һыйыр һөтлө була.

**Туй йолалары** (263)

(Информант уларҙы әсәһе Хәҙисә Ситдыҡ ҡыҙынан яҙып алған)

Никах уҡыған ваҡытта тышҡы ишекте бикләп ҡуялар ҙа, никах уҡылып бөтмәйенсә, бер кемде лә индермәйҙәр. Әллә ниндәй важный кеше булһа ла, ололар әйтеүенсә, был сара йәштәр араһына ен-шайтан шауҡымы теймәһен өсөн кәрәк.

Ишектән кергәндә кейәүҙән һәм кейәү егетенән балдыҙҙарға, еңгәләргә бүләк тейеш. Һәр кем хәленсә, уңғанлығына ҡарап бүләк әҙерләй. Был буласаҡ кейәүгә тормош көткәндә тел, терәк ярҙамы булырлыҡ кешеләрҙе үҙенә ылыҡтырыу өсөн кәрәк.

Кейәү мисҡәһе – һәр туйҙа мотлаҡ үтәлә торған йола. Кейәү мисҡәһен ҡыҙҙың ағай-еңгәһе йәки яҡын ағай-энеһе аса. Хәленә ҡарап, “Айыры тояҡ һарыҡ” әйтәләр, асалар ҙа табындағы кешеләргә тәмләтеп сығалар. Ә кейәү мисҡәһе өҫтөнә улар өсөн бүләк һалына (күлдәк һәм күлдәклек тауар 4-5 метр һ.б. шуның кеүек кәрәк-яраҡ әйберҙәр).

Туй мәжлесендә ағай-эненең татыулығына ҡарап, кейәү бейетеү, килен бейетеү таралған.

Ҡыҙ яғында кейәүҙе бейергә саҡырһалар, бейергә төшмәй. “Айыры тояҡ әйтеп бейетәм!” – тигәс кенә төшөп бейей кейәү.

Киленде егет яғында шулай уҡ айыры тояҡ әйтеп бейетәләр.

Ҡыҙ сәк-сәген тәмләп аҡса, бүләк һалыу ғәҙәте лә үтәлә һәр саҡ. Еңгә (килендәш) сәк-сәкте күрһәтә, өҫтәлдәге бүләкте ала, сәк-сәкте тәмләтеп, күрһәтеп мәжлестәге һәр кемде урап сыға. Аҡса, бүләк йәштәргә бирелә.

Ҡоҙаларға ҡайтыр ваҡыт еткәс бүрәнәгә бүрәнә менән төртөү ғәҙәте бар. Бер нисә кеше тыш яҡтан төп ҡоҙалар ултырған турала бүрәнә төртәләр. Был бер нисә ҡабат ҡабатлана. Шаян һүҙ, төртмә таҡмаҡтар менән ҡоҙаларҙы ҡуҙғаталар юлға.

Ҡайтып киткәндә, ҡоҙалар ваҡ аҡса, кәнфит һибеп китеү ҙә – матур йола. Ҡыҙы йәки улына яҡшы ҡараш, ҡоҙаларҙы маҡтап һөйләһендәр өсөн шулай башҡарыла. Һипкәндә: “Ризығы менән ҡалһын, килһен!” – тип теләк әйтелеп башҡарыла.

Ҡәйнештәргә, балдыҙҙарға, ҡайынһеңлеләргә бүләк таратыу – мәжбүри йола. Килен кеше һыу юлында алъяпҡыс, бирсәткә, ҡулъяулыҡ таратып, ҡәйнеш, ҡайынһеңлеләрен үҙенә ылыҡтыра. Сөнки донъя көткәндә улар иң кәрәк кешеләр, ярҙамсылар буласаҡ.

Ә кейәү балдыҙҙарына биҙәнсектәр бүләк итә, ҡәйнештәренә бәке биреп, үҙ яғына ауҙара. Һәр эштә, мәшәҡәттә улар менән бергә йәшәргә кәрәк бит, шунан сығып башҡарылған эш.

### **Бәпес үҫтереү йолаһы** (256)

Бәпес ҡайтып бер нисә көн үткәс, ағай-эне, дуҫ-иш, күрше-күлән, һәр кем үҙ-ара һөйләшеп, бәпес үҫтерергә киләләр.

Йәш әсәгә тәмле итеп аш, ҡоймаҡ, бәлеш бешереп алып киленә, йәш бәпескә бүләк алып, матур, бәхетле бул, ата-инәле, ата-инәңә ярҙамсы, илгә терәк, иман килтереүсе бул тип, теләктәр әйтелә һәм бүләк тапшырыла. Әсәй кешене мәшәҡәтләү, йөрөтөү ҡәтғи тыйыла. Һыйҙар алып килгән

кешеләр табынды үҙҙәре әҙерләп, үҙҙәре хөрмәт күрһәтә әсә менән бәпескә.

Баланың әсәһен, туғандарын саҡырып һыйлау ғәҙәте лә бар. Күстәнәс бик мул әҙерләнеп бирелә йәш әсәгә.

Баланың әсәһе йәки оләсәһе килеүселәргә бүләк (яулыҡ, ҡулъяулыҡ, еҫле һабын һ.б.) тарата. Бүләк "бәпес бүләге", "бәпес күстәнәсе" тип бирелә. Табында матур теләктәр әйтелә.

Бәләкәй балалар бәпес күрергә килә. Әсәй кеше уларға "бәпәй күстәнәсе" тип кәнфит, печенье һ.б. нимәләр бүләк итә. Йыр, шиғыр һөйләтәләр. Балалар бик ҡәнәғәт булып тарала.

Бәпес алып ҡайтҡан әсәгә атай кеше алтын йөҙөк, алтын алҡа бүләк итә. Бала өсөн шатланыу, баланы, әсәне ҙурлау билгеһе ул. Был матур йола башҡорт ауылдарында элек-электән йәшәп килә.

**Һабантуйҙа ат ярыштары** (34)

Һабантуйҙың иң ҡыҙыҡ, иң мөһим күренеше ат ярышы була торғайны. Һәр ауылда иң яҡшы аттарҙы, айҙар буйына ҡарап, ярышҡа әҙерләйҙәр ине. Элегерәк башҡорт аралары ауылында аттарҙа төрлө ярыштар уҙғарғандар.

Шуларҙың береһе – атта уҙышыу. Ул – "бәйге" тип атала. Йыйындың бер асыҡ урынында, йә тау башында ҡолғаға (ат бейеклегендәге) яулыҡ бәйләйҙәр ине, беренсе килгән ат (һыбайлы) шул яулыҡты эләктереп алып китергә тейеш.

Ат сабышыуҙың оҙонлоҡтары төрлөсә булған. Мәҫәлән, Ҡаҙанғол һабантуйҙарында иң йыраҡ ара Яңы Ябалаҡтан булды – 20 саҡрымдар тирәһе. Суҡраҡлы ауылынан – 15, Әлбәй ауылынан 10 саҡрым. Ҡолға төрлө йылда төрлө алыҫлыҡта ҡуйыла ине. Һуңғараҡ, һуғыштан һуңғы йылдарҙа, ҡолғаға яулыҡ ҡуйыу бөттө, былай ғына уҙышырҙар ине.

Элек, олатайҙар һөйләүе буйынса, бәйгенән тыш, ҡылыс менән тал баштарын киҫеү булған. Был – бик боронғо ярыш.

Һәр бер атҡа ат бейеклегендә 20-30-лап тал ҡаҙап, шуларҙы айырым рәт-рәт ҡағып ҡуйғандар. Аттар уҙышып, ат башындағы һыбайлы ҡылыс менән ошо талдарҙы ҡыйпып үтәргә тейеш булған, финиш янындараҡ нисәҙер алыҫлыҡта бер генә дөйөм тал ҡуйылған, кем беренсе булып ҡыйпып үтә, шул мәргән һыбайлы һаналған.

Өсөнсө ярыш 100 м. алыҫлыҡта бер-береһенә ҡапма-ҡаршы атта сабып килеп бер һыбайлы икенсеһен төртөп, йә тартып төшөрөргә тейеш булған, йә булмаһа ҡапсыҡҡа һалам тултырып, бер-береһен, ҡапма-ҡаршы атта сабып килеп ҡапсыҡ менән һуғып төшөрөү, етеҙ һыбайлылар өсөн ерҙән әйбер эләктереп алыу кеүек ярыштар ҙа булған. Был ярышты ярыш аттары түгел, бындай аттарҙа ла уҙғарырға мөмкин булған.

Ярыш аттарын бик яҡшы итеп ҡарарҙар ине, һабантуйҙарҙа һәр ваҡыт ышаныслы кешеләрҙән һаҡсы ҡуйырҙар ине. Сит-ят күҙҙәрҙе күҙе теймәһен, аттың ҡото китмәһен өсөн боронғо йола буйынса аттың ялын ҡыҙыл таҫма менән үреү ғәҙәте бар ине. Уны йома көн үреп йома көн алыштырып тороу ғәҙәте бар ине, имеш күҙ тейһә ошо ҡыҙыл сепрәктә ауырлығы ҡала, уны алып ташлап, бер урында түгел икенсе ерендә тағы үрерҙәр ине.

## **Түл йыйыу йолаһы** (36)

Мал үрсеһен өсөн түлен ергә күмергә кәрәк. Түл күмеү йолаһын беренсе мин Бирге Яппар ауылында, 13 йәшем тулғанда, күрҙем. Етем үҫкән бала – 8 йәштә инәйҙән, 12 йәштә атайҙан ҡалып – уны-быны белмәй инем. Бер ваҡыт мал һуйғандан һуң, мине аҫрауға алған бабай малдың енес ағзаларын кеше йөрөмәй торған ергә күмеп ҡуйҙы. Шуны күреп, сәбәбен Шәһәрбаныу исемле 80-гә еткән әбейҙән һораным (яҡынса 1834 йылғы, Арғы Яппар ауылынан 16 йәшендә килен булып төшкән).

Шул әбей әйтте, малдың үрсемен арттырыу өсөн ниндәй генә малды салмайһың, шулай эшләнә. Доға уҡып, енес ағзаларын йорт тирәһенә күмһәң – малың тиҙ үҫер, үрсеме артыр, сирләмәҫ, тине. Ҡош-ҡорттоң да шулай енес ағзаһы ергә күмелә.

Мин был йоланы бер ваҡытта ташлағаным булманы. Ҡаҙ таҙартҡанда, енес ағзаларын йыйып, ихатаның бер еренә күмеп ҡуям. Шуға ла минең йыл һайын 20-30 ҡаҙым үрсер

ине. Эре малдың да, ваҡ малдың да ағзалары алынып, шулай эшләнә.

Минең, ошо йәшемә етеп, бер ваҡытта ла малым зыянлағаны булманы.

Әгәр ҙә эткә бирһәң – малыңды эт-бүре ашар, ҡош-ҡортҡа бирһәң – малың сит-ятҡа китәр, малдың түле бөтәр тип әйтәләр ине.

Үҙ ғүмеремдә минең мал юғалтыу бер тапҡыр ғына булды. 19-сы йылда  атымды алып киттеләр. Бер ҡыҙылармеец алып киткәйне, алыç китә алмаған. Бирге Яппар менән Бигеш араһында атып үлтергәндәр үҙен, ат та яралы килеш 3-4 көн шунда ятҡан. Яппар кешеләре килеп әйткәс, барып бер ҡарттан салдырып, Ерекле йылғаһы буйында атымды күмдем Ни өсөндөр һуғыш гел ошо тирәлә булды, бер-ике көн торалар – ҡыҙылдар ауылды ала, ике-өс көн тора – аҡтар ала ине. Ике çарыҡты аҡтар ишек алдында çуйып ашанылар. Ошо уҡ зыян иткән кешеләремде ҡыҙылдар килеп, 227-се полк аҡма янында атып үлтерҙеләр. Төбәктә гел ҡәберлек. Әрәмәлә, Мәзин төбәгендә лә был ҡәберлектәр бик күп ине. Ул ваҡытта ике яҡтан да бик күп кеше ҡырылды.

Шул хәлдән һуң, аллаға шөкөр, бер ваҡытта ла малым зыян күргәне булманы. Шул Шәһәрбаныу әбей өйрәткән ырым ярҙам иткәндер тип, гел уның рухына хәйер биреп, доға ҡылдым.

Ҡаҙ үçһен өсөн ошондай ырымды өйрәткәйне: бәпкә йомортҡанан сығып кипшеренгәндән һуң, өйҙөң мейес алдын, йылы ғына урынды, таҡта менән уратып ала инем. Шул бүленгән ергә, иҙәнгә, ҙур итеп çарымçаҡ менән ай төшөрөлә. Унан ошо ерҙең ҡиблаға ҡараған өлөшөнә, сынаяҡ аçтына ай һыҙып, çарымçаҡ менән буяп, унан шул сынаяҡҡа ем һалып, өçтөн еүешләмәç өсөн берәй стакан менән ҡаплайçың. Гел шулай эшләнем. Минең бер ваҡытта ҡаҙ бәпкәләре үлгәне

булманы, ҡарға алыу, күҙ тейеү тигән нимә булманы. Шул ай çыҙылған ергә “бисмиллаһир-рахманир-рахим” тип берәм-берәм бәпкәләрҙе төшөрәçең.

Çыйыр быҙаулаça ла, тәүге çөтөн çауғанда биҙрә эсенә çарымçаҡ менән ай төшөрөлә. Шунан ризыҡҡа яҙа, çөт күп була, быҙауы көслө, ғәйрәтле булып үçә. Был “түл йыйыу” ырымын ауылда күп кешеләр белә ине. Әмирханова Бибекәй ғүмер буйы 15-20 ҡаҙ һуя ине.

**Ямғыр яумағанда теләккә сығыу** (196)

Элек Өршәк буйы ауылдарында оҙайлы ҡоролоҡ булһа, ауыл халҡы, өй беренсә ризыҡ йыйып, йылға буйына сығып, йыйын яһар булған. Тәүҙә Аллаһы Тәғәлә хаҡына ергә ултырып доға ҡылғандар. Унда бар халыҡ ҡатнашыр булған. Йола аҙағын һыу һибешеү, һыуға һалыу менән тамамланған. Күнәктәр менән һыу һибешкәндәр. Шуныһы мәғлүм: үпкәләшеү тигән нимә булмаған.

**Теләккә сығыу** (183)

Ямғыр яумаһа, яуын буткаһы йыйыны ҡоралар. Бәләкәй күл янына барып, бутка бешереп, сәй ҡайнатып эсәләр, теләк теләйҙәр, бер-береһен һыуға ырғыталар.

**Туй йолаһы** (314)

Мәкәш, Ташлы, Таштүбә ауылдары эргәһендә бейек тауҙа Килен ташы бар. Элекке йола буйынса, туй ваҡытында йәш килендәрҙе ошо тауға алып менеп, етәкләшеп киленгә арнап йыр йырлайҙар ине. Иçтә ҡалғандарҙан:

Эй, киленкәй, һылыуҡай,

Һиңә әйтер һүҙем бар:
Дәүләттәрең бай булып
Малдарың ишле булһын!
Йорт-кураң ҡотло булып,
Дәүләтең артып торһон!

Эй, киленкәй, зифаҡай,
Өлкәндәрҙе хөрмәт ит,
Кеселәргә үрнәк ҡылһаң
Дәрәжәң һинең артыр.

Һинән тыуған балалар
Итәғәтле булһындар.
Тыуған ерҙе хөрмәт итеп,
Илгә файҙа ҡылһындар.

Ошо йоланы үтәгәндә бай, итәғәтле, нигеҙле, саф күңелле, кешелекле, кеселекле, үрнәк булырлыҡ хужабикә булыр, тип әйтерҙәр ине.

**Йәйләүгә күсеү, тирмә ҡороуҙар** (241)

Өйҙөрәктең буйында Яппар ауылы ере булған. Унда Ҡоръятмаç ауылынан да күсеп килер булғандар. Өйҙөрәкәй буйына күсенеп килеүгә хозурланып, улар былай тип йырлағандар:

Өйҙөрәкәй буйы, ай, бүтәгә,
Ат аяҡҡайҙары күтәрә.
Был йөрөүҙәр беҙгә тәсбих түгел,
Әҙерәк-әҙерәк күңел күтәрә.

Йәйләүгә йылҡыларын ҡыуалар, һыйырҙарын алып баралар, ә ваҡ мал ҡышлауҙа, ауылда, ҡала. Уларҙы аҙнаһына бер барып ҡарап, теүәлләп килер булғандар.

Йәйләүҙә ағас туҫтаҡтар менән ҡымыҙ эскәндәр. Ҡымыҙҙы ҙур ағас аштауға ҡойғандар. Уның бер яғына бал ҡуялар, икенсе яғына – ҡорот. Шунан алып эсеп ултыралар. Юлдан үткән һәр бер кешене ҡымыҙ менән һыйлағандар. Юлсы үтеп китә башлаһа, атайҙар атҡа мендереп: "Ҡымыҙ эсергә боролһондар", – тип арттарынан саптыралар ине.

**Ҡаҙ өмәһе** (37)

Ҡаҙ өмәһе – Ҡырҡөйлө мең башҡорттарында киң таралған, элек-электән яратып, ҙурлап, көтөп алған байрамдарҙың береһе. Ҡаҙ, өйрәк, шулай уҡ күркә кеүек ҡоштар 8 ай самаһы бикләп, яҡшы итеп һимертелгәндән һуң, салыр көн элегерәк һыу ҡойондороп таҙартыла (ҡоштар таҙа булырға тейеш). Ҡаҙ өмәһенә аҙна элгәре тейешле кешеләр-өмәселәр саҡырылып ҡуйыла.

Байрамса йыйыштырылған өйгә иртән иртүк өмәселәргә сәй әҙерләнә, ҡоймаҡ, дөгөгә йөҙөм ҡушып бешерелгән гөбәҙиә, бауырһаҡ, сәк-сәктәр өҫтәлгә ҡуйыла. Сәй эскәндән һуң, һәр өмәсе үҙенә ҡаҙ һайлап ала, нәҫел ҡаҙҙары был ваҡытта икенсе урынға айырылып ҡуйылған була.

Ҡаҙ салыусы кеше, доға уҡып, ҡаҙҙарҙы сала, һәр салған ҡаҙ алға табан теҙелә бара. Шулай эшләгәндә, ҡаҙҙар бәрәкәтле булып, йыл һайын уңа, ишле булып үҫә тиҙәр. Ҡаҙҙарҙың ҡанатынан хәрәм йөндәре алып, ергә ҡаҙап ҡуйыла, муйындары бәйләнеп, башын-ауыҙын асып, таяҡ ҡуйыла.

Хужаларҙы ҡыуандырып,
Ҡаңғылдашып тороғоҙ.
Көҙҙәр еткәс өмәләргә
Беҙҙе саҡырып тороғоҙ! –

тип һамаҡлайҙар. Ҡаҙҙарҙы өйгә алып инеп, ваҡ йөнөн бер ергә, эре ҡанаттарын бер ергә йыя баралар. Ҡаҙҙарҙы йолҡҡанда ҡатын-ҡыҙ йырлаһа, ҡаҙ уңа тигән ышаныу бар. Төрлө мәҙәк хәлдәр һөйләнә.

Хужабикә мейескә яғып, йырлай-йырлай был ваҡытта белен бешерә. Белен был көндә күберәк тары ононан бешерелә.

Хужабикә ҡыҙҙарҙы маҡтап:

Ҡыҙҙарым уңған икән,
Эштәре уңдан икән.
Мине ҙурлап, ололап,
Өмәгә килгән икән.

Табанан сыҡҡан беренсе беленде бүлгеләп, берәр ҡабым тоҙ саҡлы, тәмле тип, һәр бер өмәсе тәмләп ҡарай.

Унан һуң хужабикә, һәр өмәсегә бағышлап, теләк белене бешерә. “Был беленде шул өмәсегә бешерәм, табаларға төшөрәм. Теләгеңде эстән әйт”, – тип, һәр бер өмәсегә өндәшә. Ҡаҙҙың йөнөн йолҡоп бөткәс, ҡойроҡ осондағы биҙ йөнөн киҫеп алып, һәр бер өмәсе, шуны тотоп урамға сыға. Шул ҡабарынҡы йөндө тотоп, “яҡын көндәрҙә кем менән күрешермен икән?” – тип, тиҙ генә ҡапҡанан сығып, әле уң, әле һул яғына ҡарап, өйгә инеп китә. Шулай 10-15 минут һайын бер өмәсе был йоланы башҡара.

Ҡаҙҙың эсен алып эшен бөтөргәс, көйәнтәләргә йөкмәп, ҡыҙҙар йылғаға ҡаҙ сайҡарға китә. Барғанда теҙелешеп, йыр йырлап барыу – барлыҡҡа була, тиҙәр.

Ҡаҙ түшкәләрен сайҡайбыҙ
Йәмле Дим буйҙарында.
Ҡыҙ баланы белеп булмай,
Кем икән уйҙарында?
Ҡыҙ балаҡай ҡаҙ йыуалыр
Дим буйының һыуында.
Хоҙай беҙгә насип итһә,
Осрашырбыҙ туйында.

Ҡыҙҙар ҡаҙ йыуған арала, төрлө уйындар, оҫталыҡ бәйгеләре ойошторола. Гармунда, элегерәк ҡубыҙҙа уйнап бейешәләр ине. Хужаларҙың береһе бәйгелә әүҙем ҡатнашҡан ҡыҙҙарға бүләк тапшыра.

Был ваҡытта өйҙөң хужабикәһе ауылдың бер нисә оло кешеһен ҡаҙ майы менән майлап бешергән белен сәйенә йыя. Кисен аш һалып, тәүҙә өмәселәргә һый-хөрмәт күрһәтелә,

һәр өмәсегә ҡаҙҙан өлөш ите биреп, “ҡаҙ күстәнәсе” тип, тәмле ризыҡтарҙан бүләк әҙерләнә.

Өмәселәр киткәндән һуң, ҡаҙ итенән ауыҙ итергә тип, ауыл кешеләренең хөрмәтле кешеләре киске ашҡа йыйыла.

Тәүҙә һәр ҡунаҡҡа ҡаҙ итенән тәрилкәләргә өлөш бирелә, бәрәңге, йәшелсә ҡуйыла. Ашай башлағас “ит һоғондороу” тигән йола башҡарыла: оло кешеләр, үҙ өлөштәрен бысаҡ менән ваҡлап, майға манып, аралағы бер ҡунаҡҡа йырлап, киҫелгән итен бирә. Алған кеше үҙ сиратында икенсе берәүгә йырлап, итен һоғондора. Шулай итеп, бар ҡунаҡ та йырлап, күңел аса.

### **Ҡаҙ өмәһе** (178)

Ҡаҙ өмәһе октябрь-ноябрь айҙарында үткәрелә. Кемдә ҡайсан булыуы, кистән үк киләсәк ҡатын-ҡыҙға хәбәр ителә. Өмәгә бигерәк тә етеҙ, таҫыллы ҡатын-ҡыҙҙар саҡырыла, сөнки ҡаҙ йолҡоу үҙенә күрә ҙур оҫталыҡ талап итә.

Ҡаҙ өмәһе барышында йыр йырлана. Әгәр оло быуын ҡатындар килһә, улар үҙҙәренең йәш саҡтарын, үткән тормоштарын һөйләйҙәр.

Ҡаҙ ҡанаттарын һайларға<br>
Төштөм һыу буйҙарына.<br>
Һыу буйында йөрөгәндә,<br>
Һин генә уйҙарымда.

Йолҡолған ҡаҙҙар таҙартылғандан һуң, көйәнтәләп йылғаға сайҡарға баралар. Унан һуң өмәселәр баш-күҙ төҙәтергә ҡайтып китәләр.

Кисен хужа йортона йыйылалар, хужабикә ҡаҙ ите менән һыйлай.

Тәүге өлөш ҡыҙҙарға бирелә. Ҡанат биргәндә: “Ҡанатланып өйөңдән тиҙерәк осоп сыҡ”, – тиҙәр. Борондан ҡыҙҙар ата йортонда ҡунаҡ һымаҡ ҡына булған, ҡарт ҡыҙ булып ҡалыу –ғаилә өсөн бәхетһеҙлек тип иҫәпләнгән.

Ҡыҙҙарға өлөш бүленеп бөткәс, ололарға бүленеп, ҡаҙ бото эләкһә: “Ҡаҙ шикелле бейеп тор!” – тиҙәр. Баш тотторһалар: “Башлы була!” – тип бирәләр. Һәр төрлө ит үҙенсә бүленә. Һәр өлөштө һамаҡлап бирһәң, икенсе йыл ҡаҙың уңа.

Был ҡаҙ ҡайҙа ултырған,
Бото өрөп тултырған?
Өлөшөң ҡулыңдан төшмәһен
Ипләп! Ауыҙың бешмәһен!

**Ҡарға бутҡаһы** (166)

Иген сәсеү эштәре бөткәс, Дим буйы башҡорттары "Ҡарға бутҡаһы"на сыҡҡан. Йола буйынса, "Ҡарға бутҡаһы"нда күберәк ҡатын-ҡыҙҙар, балалар ҡатнашҡан. Улар ҡырға сығып, сәй, бутҡа бешереп шунда төрлө уйындар ойоштороғандар. Ҡарға иң беренсе яҙҙы башлаусы ҡош булғанға, уны һыйлайһың, сәскән орлоҡ тиҙ шытып сығыр, ҡарға кеүек әрһеҙ булыр тигән ырым йәшәй. Солтанғәлина Мәймүнә (1889 й., Иҫке Шәрип ауылында ҡыҙында йәшәй) инәй әйтеүенсә, был байрамға йомортҡа бешереп алып сыҡҡандар, бешкән йомортҡаларҙы бер кеше тау башында тороп, аҫҡа табан тәгәрәтә, ҡалғандары – уларҙың күпселеге балалар – аҫта тороп, кемуҙарҙан тоторға тырыша. Тотҡан кеше йомортҡаны һамаҡлап ашарға тейеш.

Йоморо, йоморо йомортҡа
Йомарланған ояла,
Йомортҡа кеүек тәгәрләп,
Үҫһен иген баҫыуҙа, –

тип, ҡулдарҙы сәпәкәйләп бейергә, һикерергә кәрәк. Шулай әйтһәң, иген шәп, эре башаҡлы булып үҫәр, тиҙәр ине. Ҡабыҡтарын әрсеп, ҡош ашай торған ризыҡтарҙы ғына һайлап, ултырған урында ҡалдырырға, ә сүп-сар, ҡағыҙ, башҡа ҡалдыҡтарҙы ҡалдырыу – ҙур гонаһ. Йыйған игенең сүп-сарға сығыр тигән ышаныу бар.

Ҡарға әйтер ҡар-ҡар,
Ҡарға бутҡаһына килгәс,
Ҡалғанын миңә ҡалдыр,
Ҡанат ҡағып ҡыуанып,
Һине маҡтап йырлармын,
Сүп-сарыңды ҡалдырһаң,
Ҡарап тороп ҡарғармын, –

тип ашарҙар ине.

## ЙОЛА ПОЭЗИЯҺЫ
## ҺАМАҠТАР, ӘЙТЕМДӘР

**Кендек инәһенең теләк-һамағы** (199)

Аяғың менән килмә,
Башың менән кил.
Уңың менән кил,
Үҙ төйөнөңдө үҙең сис,
Үҙ һыуыңды үҙең кис.
Илаһым, рәхимеңде бир!

*Бала тыуа башлағас:*

Башыңдан башҡа булаһың,
Иншалла, тыуаһың, – тип ҡабул итергә.

**Баланы һөйгөс** (195)

Бәпес-бәпес, бәпестәй,
Бәләкәй генә бәпестәй.
Бәпелдәтеп һөйөргә
Арҡалары йәтештәй.

Бәхетле булғыры,
Тәүфиҡлы булғыры.
Белемле булғыры,
Ата-инәле үҫкере.
Баламдың балаһы –
Йөрәгемдең яраһы (204).

**Бала тыуғас теләгән теләктәр** (238)

(Р.М.Ураҡсина яҙып алған)

Кеше артты донъяла,
Ризығың менән, төклө аяғың менән!
Бәхетле, сәләмәт бул,

Тәүфиғың, аҡылың үҙеңдә булһын!
Әсәйеңә ярҙамсы, атайыңа иш бул,
Уҡып ҙур кеше бул!
Кешеләргә изгелекле-игелекле бул!

**Баланы йыуындырғанда** (238)

Балда, майҙа йөҙөп йәшә,
Бал ҡап, май ҡап!
Һүҙең, тормошоң яҡшы булһын,
Май ҡап, май ҡап!
Ҡылған эшең яҡшы булһын,
Бал ҡап, бал ҡап!
Ата-әсәңә алмашсы бул,
Бал ҡап, май ҡап!

**Һикерткес** (238)

Һоп-һоп, һоп-һоп! –
Хәҙер Балҡанға етә.
Мәкәшкә лә ул китә,
Матур кәләшкә етә!

**Бала уйнатҡанда** (238)

Әбей бутҡа бешергән,
Эсенә сысҡан төшөргән.
Уны алам тигәнсе,
Биш бармағын бешергән

*Бармаҡтарҙы берәмләп бөкләп:*

Атаһына, әсәһенә,
Ағаһына,
Апаһына, һеңлеһенә.
Үҙе быҙау ҡыуа киткән,

Безәү, безәү, безәү!
Ҡайтҡан да, әсәһенә:
“Әсәй, миңә бутҡа ҡалдымы?”
Әсәһе: “Ҡалды, ана ҡаҙан төбөндә, ҡыр!” – тип, ҡытый-ҡытый баланы ҡытыҡлайҙар.

**Уятҡыс** (159)
(Рәсимә Ураҡсина яҙып алған)
Ас, Мәрйәмкәй, күҙеңде,
Яратайым үҙеңде – тип, баланы уята инек.

**Бала һикерткәндә** (132)
Малай, малай, маллы бул,
Ҡурҡаҡ булма, батыр бул,
Дошмандарға ҡаршы бар!
Йәйәү булма, атлы бул,
Һоп, һоп, һоп!

Кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк (әкрен генә бәүелтә баланы),
Кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк (шәп итеп бәүелтә),
Кәк-күк, кәк-күк, кәк-күк (бик шәп итеп аяҡта һикертә) (132).

**Бала йыуындырғанда һамаҡлау** (266)
Бала тыуғас, уны үҙ әсәһе менән мунсаға алып баралар. Сабыйҙы йыуындырғанда кендек инәһе шулай тип һамаҡлай:
Бәхетле, тәүфиҡлы бул,
Татлы телле бул!
Мунса ташы,
Бүрәнә башы,
Таштай ныҡ бул,
Бүрәнәләй бүкән бул!

Аталы-инәле,
Алтын ҡанатлы бул!
Һүҙҙәрең өҫтөн,
Йөҙҙәрең күркәм,
Ҡулдарың эшсән булһын!

**Бала һикерткәндә әйтелә** (123)
Инәһе унын – ай кеүек,
Атаһы унын – тай кеүек.
Бишектәге бәпесем –
Йомарлаған май кеүек.

**Бала әүрәтеү** (265)
Тынғыл-тынғыл, бәпәйем,
Тынғылдатып һөйәйем.
Өй артында бүре бар,
Йылтыр-йылтыр күҙе бар.
Һыйыр һауғас, һөтөн бир,
Сеүәтәнде тотоп бир,
Күбек һөҙөп бирәйем.
Уны эсеп бөтмәһәң,
Артыңа сыбыҡ бирәйем.

Ҡыҙым, ҡыҙым, ҡыҙ кеше,
Ҡыҙыма килер йөҙ кеше.
Йөҙ кешегә бирмәмен,
Алып китер бер кеше.
Йөҙө яҡты бер кеше,
Ҡулы ипле бер кеше,
Күңеле изге бер кеше.

Балам, балам, бал ғына,

Тыуҙы инде ай ғына.
Ризыҡтары менән генә,
Ашаһын ул май ғына (265).

**Бала һикерткәндә** (185)

Тыңғыл-тыңғыл, бәпәйем,
Тыңғылдатып һөйәйем.
Өй артында бүре бар,
Йылтыр-йылтыр күҙе бар.
Һыйыр һауған ҡашҡа бар,
Сеүәтәңде тотоп бар.
Күбек һөҙөп бирәйем,
Аны эсеп бөтөрһөң.

**Бала тәпәй киткәндә** (204)

Кил әле, кил әле,
Килә алаһың микән?
Ҡамыт аяҡтарың менән
Баҫа алаһың микән?

**Баланың телен астырғанда** (204)

Ат, атай, тип әйт –
Әтәс ҡойроғо бирәм.
Әс, әсәй, тип әйт –
Әтәс кикереге бирәм.
Әб, әбей, тип әйт –
Әфлисун һиңә бирәм.
Ап, апай, тип әйт –
Ал алма алып бирәм,
Тешеңә йомшаҡ булыр.

**Баланы сәпәкәй иттереү** (204)

Сәпәкәй ҡағыр ҡыҙҙары,
Ауыртмаһын ҡулдары.
Билдәренә таянып,
Бейеп китәр улдары.
Ауыртһа ла ауыртһын,
Ҡул сапҡандың ҡулдары.
Сәпәк-сәпәк, сәпәкәй,
Бейетеп тора әсәһе,
Таҡмаҡ әйтә атаһы
Өҙөлөп тора атаһы.

**Уятҡыс (һамаҡ)** (45)

(Мөслимә инәй үҙ ваҡытында Матургөл исемле өләсәһенән отоп алған)

Эй, балам, минең күҙ нурым,
Уян әйҙә, ҡояш күптән һибә нурын.
Тор тиҙерәк, йыуын, кейен,
Самауырым күптән йырлай,
Тәмле сәйемде эс, тип.
Кистән инде һалып ҡуйған
Китап-әсбабым әҙер.
Изге юлдар теләп ҡалам,
Бар мәктәпкә, балам, тип.
Ғилем тауына үрләрһең,
Көн дә мәктәпкә барһаң.
Бер көн килеп шатланырһың,
Белемле кеше булһаң.
Хоҙайҙарҙан мин һорайым,
Таҙалыҡ бирһен, балам.

**Уятҡыстар** (136)

Төн пәрҙәһе асылды,

Яҡты нурҙар сәселде.
Тор, балам, битең йыу,
Тарап алсы сәсеңде!

Алтын, алтын, алтыным,
Минең йөрәк ялҡыным.
Уян, бәпкәм, күҙ нурым,
Ҡояш булып балҡырмын.

**Яңы аш, йәки емеш ҡапҡанда әйтелә торған һамаҡ** (123)

Иҫке ҡорһаҡ, яңы аш,
Йәмһеҙ йөнлө сирем ҡас.
Инна-һа-һа, иһа-һа! –
тип алып ҡаба торғайнылар.

**Яңылыш йығылғанда** (123)

Тфү! Тфү! Тфү!
Тәүбәләремде әйтәм –
Фәрештәләр ишетһен!
Еңеллеге тәнемә,
Ауырлығы пәрейгә!

**Яңы өлгөргән емеште ашағанда, яңы һуғым итен ҡапҡанда былай әйтелә**:

Яңы емеш, иҫке теш,
Зәннәт булһа, минән ҡас,
Яңы ҡапҡандан да ҡас,
Шифа бәрәкәт менән,
Яңы ашларың менән
Тәндәремә сихәт бир (98).

Ҡаҙ ҡауырыйының йөнөн һыҙырғандан һуң, ҡаурыйҙарҙы бер силәккә һалып, өйҙөң болдоронан алып һыуға барып еткәнсә, сәсә, һибә бараһың, һамаҡлап көйләп әйтә бараһың:

Киләһе йыл, иншалла,
Бәпкәләрем күп булһын!
Ҡаҙ булып үҫеп етһен,
Ҡаңғылдашып ихатамда
Күңелдәремде асһын!
Хоҙай тәғәлә насип итеп
Ризыҡларға яҙһын! (123).

**Көсөмкөс*** (82)

Ҡулға алып, бармаҡтан бармаҡка күсерә-күсерә осороп ебәреп, теләк әйтәһең:

Әй, көсөмкөс, көсөмкөс,
Әйҙә инде тиҙерәк күс.
Ана килә кейәүең,
Ҡулдарымдан осоп кит.
Минең һөйгән йәремә
Фатиманан сәләм илт! –

тип һамаҡлай инек.

**Аҡ тирәк, күк тирәк, беҙгә кем кәрәк?** (312)
(Минибева Сибәргөл Солтанбәк ҡыҙынан яҙып алынған уйын һамағы)

Өршәк буйы күк тирәк,
Беҙҙең ҡыҙҙар бик зирәк.
Ең һыҙғанып йәштән үк,
Тормош көтөүгә терәк.

– Ай, аҡ тирәк, күк тирәк,
Беҙҙән һеҙгә кем кәрәк?
– Сит-ятларҙан беҙ йыраҡ

* Дим һөйләшендә *көсөмкөс/күсемкүс* – ҡамҡа, *рус.* божья коровка.

Үҙ милләтемдән кәрәк!

– Ай, аҡ тирәк, күк тирәк,
Һеҙҙән беҙгә кем кәрәк?
– Милләтемдең йөҙөк ҡашы –
Батыр кейәүҙәр кәрәк!

– Ай, аҡ тирәк, күк тирәк,
Һеҙҙән беҙгә кем кәрәк?
– Милләтемде арттырырлыҡ
Уңған килендәр кәрәк!

**Миндек менән сабынғанда** (140)

**Билде сапҡанда әйтелә:**

Уң яғымдан уң керһен,
Шифалары күп булһын, иншалла!
Һул яғымдан ауыртыу,
Береһе ҡалмай сығып кит, иншалла!

**Аяҡҡа**:

Хәрәкәттә – бәрәкәт-бәрәкәт,
Аяҡтарым таҙа булһын, иншалла!
Бер туҡтауһыҙ йөгөрөп торһон,
Мине һәр саҡ тыңлап торһон, иншалла!

**Тәнгә:**

Тәнкәйҙәрем таҙа бул,
Сит сирләрҙән йыраҡ бул, иншалла!
Йөрәккәйем талғын ғына,
Бер туҡтауһыҙ эшләп тор, иншалла!

Аҙаҡтан, йыуынып бөткәс, өс тапҡыр ҡиблаға ҡарап ғосол ҡойонорға. Тәнем таҙа булып, ошо һыу менән бар ауырыу ауырлыҡтар ағып кит, иншалла-иншалла-иншалла – тип әйтерҙәр ине.

**Ҡайҙа дау (яу) сыға – шунда баш юғала** (298)

(әйтем)

Һылыу ҡайҙа – күҙ шунда,
Матурлыҡ арбай беҙҙе.
Йәшлектең саф ҡарашы,
Йөрәк утын тергеҙҙе.
Соҡор ҡайҙа – һыу шунда,
Ямғыр һыуы, ҡар һыуы.
Барыһы ла йыйыла,
Мөлдөрәп соҡор тула.
Әсә ҡайҙа – наҙ шунда,
Иркәләнә бар бала.
Һөйөү тулы ҡараштар,
Йөрәкте өтөп ала.
Күҙе ҡайҙа – ҡаш шунда,
Күге ҡайҙа – ҡош шунда.
Тауы ҡайҙа – таш шунда,
Дауы ҡайҙа – баш шунда.

**Һамаҡ** (58)

Ҡумыҙымдың ҡылдары,
Үткәнемдең йылдары.
Ҡумыҙымдан сыҡҡан моңдар
Күңелемде күтәрә, –
тип, һамаҡлап бейей инек элегерәк.

**Ҡоштар теле** (63)

(әйтем-һамаҡтар)

Йәмилә өләсәйемдән (1902 йылғы) “ҡоштар теле” тигән әйтем-һамаҡтар отоп алдым, улар баланың телмәрен, зиһенен, уйлау һәләтен үҫтереүгә ярҙам итә,ти торғайны ул.

**Сыйырсыҡ теле**

Сүпле сүпән көндәшем,
Үрәзмәтки, сүризәтки.
Пеҫ-күҫ ибе бай,
Эндән кенә, күсәк кенә, тыр-пыр.

**Әтәс теле**
Декерелләһи яғәфилүн.

**Күгәрсен теле**
Дүкү-дүкү – фетнә тәкем.

**Тауыҡ теле**
Тәпи ҡаси – ынныраxман.

**Ҡарға теле**
Тамғәм-ғәлле,
Тәмғам тәлле.
Ризыҡ ҡайҙа,
Беҙ шунда.

**Торна теле**
Тор, тор, торойыҡ, тырышып та, тырмашып.

**Һандуғас теле**
Фрилиҙә фри-фри,
Был донъя бит – фани
Булғаннар ниғмәтләре
Фриль-фриль ғәләмәти.

**Ала ҡарға**
Ҡыр-ҡыр ҡырҙан ҡайтам,
Ҡырҙа әле ҡар, ҡар!

**Һандуғас һайрауы** (204)
Ғаж-вәж мөхтәләф,
Ғаж-вәж мөхтәләф,
Һәдәрдәнки, һәләрнәки,
Әгмәгәнки Татлыбай.
На зари, тери-торыш,

Сып-сыр, сып-сыр, сып-сыр-р-ры!
Бына минеӊ бәхетем,
Бына минеӊ тәхетем.
Сөләймәндеӊ бәхетен күр-р-р ҙә
Тәхетен күр-р-р!

**Турғай булып һайрау** (204)
Сүплә сү бешкенә,
Шаһи лимән сух.
Әрмән тәнки, хөрмәтәнки,
Дәнки-дәнки, сери-пу-пу,
Сепри пырт!

**Ҡоштарҙы ҡыуғанда** (128)
Һайт-һайт, һайысҡан,
Күкәй һытҡан һайысҡан.
Тиҙлектә тиҙәктә,
Яңғыҙ башыӊ сүплектә,
Һайт-һайт һайысҡан!
Туҡ-туҡ туҡран,
Туҡылдатып ултырам.
Мейестә бәрәӊге бешәме?
Шуны көтөп ултырам.

**Балыҡ ҡаптырғандағы һамаҡ** (177)
Ҡап-ҡап, ҡармағым,
Ҡапсыҡ төбөн ҡарманым.
Ҡапсыҡ төбөн ҡармағанда
Бысыраны бармағым.
Тфү!Тфү!Тфү!
Төкөрөп һалдым һикер-ҡап!
Яр башында ялтырап ят.

Ялтырамаһаң, ялтырама,
Яр башында ҡалтырап ят!

**Эш башлағанда, балаҫ, тула һуҡҡанда** (52, 214)

Икендегә етмәһен,
Ике һуҡыр күрмәһен.
Күрһә күрһен күҙлеһе,
Ул да булһын йүнлеһе!

Шулай итеп һамаҡлағанда, эшең уң, матур була.

**Килгән ризыкты ҡуйын ергә ҡуйғанда** (178)

Ашып сыҡ, тулып сыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ.
Ашып сыҡ, тулып сыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ.
Ашып сыҡ, тулып сыҡ,
Ҡайҙан сыҡһаң, шунан сыҡ!

**Яңы кейем кейгәндә** (280)

Үҙең һике башына,
Күлдәгең сүплек башына!
Үҙең – кейәү ҡуйынына
Күлдәгең яңы башыңа!

**Иген мул үҫһен өсөн** (45; 166)

Һәр кем иген яҡшы үҫһен өсөн теләк әйтер булған. Әгәр теләк әйтһәң, иген уңыр тигән ҡараш йөрөй ине. Ҡойҡа нәҫелдәре араларында ошондай теләк әйтерҙәр ине.

Эй, Хоҙайым тәғәләм,
Үтенеп мин һорайым
Яҡшы уңһын бойҙайым,

Көндәрҙең бир яҡшыһын,
Ҡояш йылытып торһон,
Ямғырҙар яуып үтһен,
Игенем шаулап үçһен!
Урағым шажлап торһон,
Көлтәләр ҡуйы булһын,
Келәтем туйып торһон!
Тирмәндәрем әйләнеп,
Онон сығарып торһон.
Иләктәрем буш тормай,
Уны айыра торһон.
Силәктәргә онон һалып,
Иçеп ҡабара барһын.
Майлы табаларға төшөп,
Йылы мейестәргә керһен,
Йәмле өçтәлдәргә ҡуйып,
Ауыҙ итергә яҙһын!
Ризыҡтарым киң булып,
Доға ҡылырлыҡ булһын!

## **Ямғыр теләү әйтеме*** (45; 166)

Хоҙайҡайым, бир әле,
Ямғырҡайым, яу әле,
Ҡояшҡайым, сыҡ әле,
Игенкәйем, үç әле!
Эй, Хоҙайым, Хоҙайым,
Көн йылыһын бир әле.
Игенкәйем шаулап үçһен,
Ямғырҡайҙы бир әле!

---

* Исмәғил ауылында киң билдәле теләк.

**Ҡарғаға бутҡа ҡалдырғанда** (32)

Ҡарға килгән ҡунаҡҡа,
Тәмле бутҡа ашарға,
Хәҙер ашап ҡараймын,
Унан һине һыйлармын.
Баҫыуҙарҙы һаҡларһың,
Бөжәктәрҙән яҡларһың,
Игендәрем яҡшы уңһа,
Тағы һине һыйлармын.

**Ямғыр теләү** (32)

Ямғыр яу, яу, яу,
Иген үçһен тау, тау!
(Баланың исеме әйтелә)
Азамат батыр үçһен,
Беҙгә алмашсы булһын.
<u>Ҡыҙ кешегә</u>: Миләүшә һылыу үçһен,
Беҙгә алмашсы булһын.

**Ҡояш бер нисә көн сыҡмаһа** (165)
Ҡояш, сыҡ, сыҡ!
Батмандарҙан май алам,
Өçтәлдәргә бал ҡуйып,
Һине ҡунаҡҡа алам, – тип һамаҡлайҙар ине

**Сәфәр сыҡҡанда** (191)
Изге сәфәр, изге юл,
Йондоҙҙарың яҡты булһын,
Күңелеңә шатлыҡ тулһын!

**Йоҡо алдынан** (191)

Бисмиллаһир-рәхмәнир-рәхим!
Ятҡаным – ер,
Динем – ислам,
Иманым – Ҡөръән,
Көрәйеш йыланға
Минән сәләм!

**Икмәк баҫыр саҡта** (52)

Ҡулдың ҡеүәтен бирһен,
Киң ризыҡҡа яҙһын,
Иҫән-һау ашарға яҙһын! – тиҙәр.

**Май яҙғанда** (52)

Уң ҡулдан, һул ҡулдан,
Ҡотло ҡулдан! – тип тотонорға.

**Теш төшкәндә** (244)

Тараҡанға – ҡамыр теш,
Балама – тимер теш,
Йә хәҙрәт, Шәйәхмәт,
Хыҙыр Ильяс, бир ҡеүәт! –

тип, уны еккә ҡыҫтырырға, шулай эшләһәң, баланың теше ныҡ була.

**Юлаусыны оҙатҡанда** (244)

Ебәрҙем аманат,
Ҡайтарып ҡуй сәләмәт!

**Әрмегә, яуға киткәндә** (244)

Хәйерле сәғәт, изге ниәт булһын,
Хыҙыр Ильяс юлдаш булһын.

Әйүп пәйғәмбәр сабырлыҡ бирһен,
Сабыр бирһен дә, ғүмер бирһен.
Әжәленә сабырлыҡ бирһен.
Ябраил фәрештәнең ҡанаты аҫтында йөрөргә яҙһын!
Тел-тештән һаҡлаһын,
Юҡ яланан яҡлаһын!
Раббым-Хоҙайым!
Бер һиңә тапшырам,
Ҡазаларҙан ҡурсала!
Амин!
Ебәрҙем аманат,
Ҡайтар сәләмәт!

**Ҡыҙ йәрәшкәндә, ҡыҙ йәшергәндә** (217)

Ҡара бейә һуйҙығыҙ,
Ҡаҙыһына туйҙығыҙ.
Миңә тигән ҡыҙығыҙҙы
Төнөн ҡайҙа ҡуйҙығыҙ? –
тип һамаҡлаған кейәү тейешле кеше.

**Кәләш кейәүләгәндә һамаҡлау** (281)

Аҙна кистәре етәлер,
Ҡыҙҙар кейәү көтәлер.
Аҙна араһы етмәйсә,
Кейәү килеп етәлер.

**Сәфәр сыҡҡан кешегә теләк әйтеү** (281)

Хызыр Ильяс булһын юлдашың –
Мең дошманға торор бер башың.

**Яңы ай күргәндә** (248)

Ай күрҙем аман менән,

Ҡуйыным тулы ҡөръән менән.
Яңы айларҙы күргәнсе,
Йәшәт, Хоҙай, иман менән.

Ай күрҙем аман менән,
Күңелем тулы иман менән.
Ошо айҙарҙа вафат булһам,
Үткәр, Хоҙай, иман менән.

**Һармаҡтар, таҡмазалар**

Әтәс менгән өҫтәлгә
“Ки-ки-ри-күк” итәргә.
Әтәскә повестка килгән
Әрмеләргә китәргә.
Әтәс әйтә “бармайым”,
Тауыҡ әйтә “ҡалмайым”,
Һин әрмегә киткәс тә,
Бер күкәй ҙә һалмайым” (136).

Әтәс менгән ситәнгә
“Ки-ки-ри-күк” итергә.
Әтәскә лә хәбәр килгән
Әрмеләргә китергә.

Әтәс китте әрмеләргә
Котелогын күтәреп.
Тауыҡ бахыр илап ҡалды
Бағанаға терәлеп (136).
(Рәсимә Ураҡсина яҙып алған)

Барҙыҡ борсаҡҡа,
Тейәнек ҡорһаҡҡа.
Килеп сыҡты Ҡотоп,
Алды беҙҙе тотоп.
Килеп сыҡты Миргәрәй,
Бына беҙҙе биргәләй.
Килеп сыҡты Әпәләй,

Бына беҙҙе төпәләй.
Килеп сыҡты Шәүәләй,
Бына беҙҙе әүәләй.
Килеп сыҡты Николай,
Бына беҙҙе тапалай.
Ул китте үрәтниккә
Үрәтник әйтә "атам" тип,
Беҙ сығып йүгерҙек"ҡайтам" тип (195).
(Рәсимә Ураҡсина яҙып алған)

Нисек итһәң дә ит,
Шишмәгә барып ет.
Шишмәгә барып етһәң,
Бешә бутҡа менән ит (130)
(Рәсимә Ураҡсина яҙып алған)

**Тел төҙәткестәр** (132)

– Был нимә?

– Шешә – иртәгә ҡулың шешә,

– Суйын – иртәгә һинең туйың,

– Һаумы – әллә һин быҙаумы?

– Ун ике – иң матур ҡыҙ минеке,

– Таба – иртәгә бала таба,

– Шәпме – әллә һин ишәкме?

– Иртәгә – сыҡҡан кәртәгә.

**Һыу ингәндәге әйтемдәр** (132)

Бығыр-бығыр бығырлатам,
Йөҙ самауыр ҡайнатам (һыуға сумып тын сығарыу).

**Һыу инеп бөткәс** (132)

Иҫәнлеккә-һаулыҡҡа,
Таҙалыҡҡа, байлыҡҡа!

Шулай тиҙәр ҙә, башты артҡа ташлап, танауҙы баҫып сумалар, сәс тәртипкә килә.

**Тәмәкеселәрҙе үсекләү** (127)
(Рәсимә Ураҡсина яҙып алған)

Аңҡыш-мыңҡыш,
Тәмәкесе – тыңҡыш,
Торған өйө мунсалай,
Тартыуынан бушамай.
Мөрйә танау, мейес ауыҙ,
Борҡолдап тора яуыз.
Мейес һыларға ҡушабыҙ,
Тәмәкеңде ташлатабыҙ.

Нурый, Нурый,
Тәмәке тарта юрый.
Тәмәкеһен гел урай,
Уға япраҡ урлай.
Урай-урай төн сыҡҡан
Төтөнөнә тонсоҡҡан.
Унда көлөн төшөргән,
Салбарына ут ҡапҡан.
Урамға сығып ҡасҡан,
Салбарҙарын төшөргән,
Тубыҡтарын бешергән (134).
Тәмәкеһен ҡабыҙған,
Һеләгәйен ағыҙған.
Тәмәкеһе түгелгән,
Илай-илай йүгергән.
Тәмәкесе, минән кесе,
Тәмәкесе – хәйерсе (158).

**Үсекләшеүҙәр** (127)
(Рәсимә Ураҡсина яҙып алған)

Хәйбул – Хабыш,
Аяғы-ҡулы салыш.
Буйы-һыны бер ҡарыш
Тәмәкеһе биш ҡарыш.

**Бар ине, ти, юҡ ине, ти** (204)

(Ғәббәсова Гүзәл Муллағәли ҡыҙы яҙып алған һәм ебәргән)

Бар ине, ти, бер Нары,
Итәгенә тейәгән, ти, тары.
Бара торғас йығылды, ти, Нары,
Итәгенән түгелде, ти, тары.
Йыйылды, ти, тауыҡ,
Сүпләйҙәр, ти, ҡабып.
Йыйылды, ти, сыпсыҡ,
Сүпләйҙәр, ти, соҡоп.
Йыйылды, ти, ҡарға,
Сүпләйҙәр, ти, бары ла.
Нары илай, ти,
Сүпләй алмай тары,
Сүпләр ине тары,
Бара алмай ары.
Барыр ине ары,
Ҡарғанан ҡурҡа Нары.
Килер ине бире,
Торған ере – соҡорҙоң яры.
Йығылды ла үлде, ти,
Бара алмай шунан ары.

Элек ике егет Өфөгә мәҙрәсәгә имтихан тоторға барғандар. Береһе имтихандарҙы уңышлы тотоп, икесеһе бирәлмәгән. Шул бирәлмәгәне былай тип һамаҡлай икән:

Эй, Хәйбулла, Хәйбулла,
Беҙ киткәнгә ай була.
Һин дә мулла, мин дә мулла
Атҡа бесән кем һала.
Һинең атаң – итексе,
Минең булды – көтөүсе.
Имтиханды бирер инем,
Арттан булһа этеүсе.

Уҡып мулла булмаҫһың,
Суҡып ҡарға булмаҫһың.

Мин дә хәҙер ҡайтып китһәм,
Барыбер уҡый алмаҫһың
– тип алып ҡайтырға һамаҡлай, ти, уҡырға кергән егетте (305).

**Туйҙа тауар килтереү** (141)
Алып килгән тауары
Элеп кенә ҡуймалы.
Муйынсағы теҙелгән,
Таҫтымалы бөрөлгән.

**Димләүсенең сеңләүе** (304)
Асыуланмағыҙ миңә:
Дөрөҫ әйтәм һүҙҙәрҙе.
Мин буш эште башҡарам,
Килдем ҡыҙҙы күҙләргә.
Мин йәрәшкән кешенең
Күркәм булыр ғаиләһе.
Оҫта ҡуллы атаһы,
Төҙөк унын өйҙәре.
Фиғеле яҡшы булыр,
Матур биләмәләре.
Уңған унын инәһе
Өҫтәле ипле булыр.
Һүҙкәйе баллы унын,
Нәҫелдәре бик хәлле,
Холоҡтары ныҡ яҡшы,
Тыуған-тыумаса тиеп,
Өҙөлөп торған йөҙҙәре.
Егетебеҙ бер тигән –
Милләттең йөҙөк ҡашы.
Батыр ыласын кеүек
Булыр ғаиләнең башы – тип йырлағандар.

*Информант иҫкәрмәһе:* Сибәр еңгә күп йылдар Әлшәй, Дәүләкән тарафтарында димләүсе булып йөрөй.

## ТИҘӘЙТКЕСТӘР

Күрше күркә Ҡәйүм күҙҙәрен ҡыҫа-ҡыҫа, ҡулын ҡаҡ маңлайына ҡуйып, күккә ҡарай-ҡарай ҡояштың ҡыҙарып күтәрелеүен, ҡып-ҡыҙыл нурға күмелеп ҡырҙарға ҡалҡыуын күҙ ҡабағы аҫтынан күҙәтте (132).

Шыпыр-шыпыр, шыптыр-шыптыр, ҡыптыр-ҡыптыр, мейес артында, мейес аҫтында, шыптырлағыс шыптырлай (телмәрҙе үҫтереү, хәтерҙе яҡшыртыу өсөн)

Хәсрәттең тоҡсайының ҡапсығының ауыҙына бәйләнгән бауының ебенең һүрендеһенең осо (157).

Мәкәримов Мирсаяф Мирғәли  малайы машина майы менән маңлайын майлаған да мендәренә менеп мендәрҙе майлаған (“М” хәрефенә һүҙлек) (157).

Ҡапҡан таптым, ҡапҡанға ҡаптым,
Таҡта ҡаҡма, ҡапҡа ҡаҡ,
Ҡапҡа ҡаҡма, тотҡа ҡаҡ! (204)

## ҒӨРӨФ-ҒӘҘӘТ, ЫШАНЫУҘАР, ТЫЙЫУҘАР

**Тырнаҡ алыу көндәре** (302)
(Информант инәһе Мәрйәм абыстайҙан (1896 йылғы) яҙып алған)

Дүшәмбе – тырнаҡ киҫмә, ғауға сығар.

Шишәмбе – ярамай торған көн, ғүмерҙәрең ҡыҫҡарыр.

Шаршамбы – ярамай, насар бәндәләргә юлығырһың.

Аҙна кис – ярай, Хоҙай тәғәлә алдында таҙаланырһың.

Йома – ярай, Хоҙай тәғәлә сауабында булырһың.

Шәмбе – ярамай, гонаһларҙан һаҡлан.

Йәкшәмбе – ярамай, тормоштоң бәрәкәте китәр, йәм тапмаҫһың.

**Умартасылыҡҡа бәйле** (35)

Беҙ ғүмер буйы ата-бабайҙарым, ҡартым яғында солоҡсолоҡ, умартасылыҡ менән шөғөлләндек. Ҡайһы бер йылдарҙа умарталар һаны 30-40-ҡа еткән ваҡыттар булды. Бал ҡорто айырғанда, күсте йыйғанда ҡайным менән ҡәйнәм еҙ һауытҡа шаҡылдатырҙар ине, былай эшләгәндә тауышы матур сыға, ҡорттарҙың башы ауыртмай, тиҙ генә билгеләнгән урынға күләгәлеккә йыйыла. Хәтерҙә ҡалғандарҙан:

Күс, күс, күс иле,
Балҡортомдоң бер иле.
Күләгәлек ҡуйылған,
Шунда ғына ҡунығыҙ!
Осоп китеп йыраҡҡа
Әрәм-шәрәм булмағыҙ!
Тубылдарға инерһеҙ,
Һеҙгә күптән баҡсамда
Умарталар ҡуйылған.
Матур итеп йыуылған,

Кәрәҙләр ҙә ҡуйылған.
Ашарға ла бирермен,
Бик яҡшылап ҡарармын, –

тип, еҙ һауытҡа ҡаҡһаң, бәрәкәтле, бал ҡорттары хәрәкәтле, эшсән була, тиҙәр ине.

**Изге батыр ҡәберенә теләк хәйере** (138)

Ярыштауҙа бер изге батыр ҡәбере бар, шунда бөтөн йолаларҙы башҡарып, изге уй теләк менән барып, хәйер итеп баҡыр тәңкә һалһаң, бөтә теләктәрең ҡабул була. Ярыштауҙағы изге батыр ҡәбере – ихтилалда ҡатнашҡан юлбашсы ҡәбере ул. Күп тапҡырҙар ошо изге ҡәбергә теләк хәйере һалырға барҙым. Ул ҡәберҙә Ҫөләймән ҡарт ерләнгән тип һөйләйҙәр ине.

Барыр алдынан өс көн таҙарынып ғөсол ҡойонорға кәрәк. Ғәйбәт һөйләп, кеше менән әрләшеп, рәнйешеп барырға ярамай. Тауға барғас, ҡибла яғына атлап, уң аяҡтан “бисмилла-рахман-рахим, Хаҡ тәғәлә рөхсәте, ҡабул ит, изге батыр тауы”, – тип әйтергә кәрәк.

Изге уйҙа менеп, изге батыр ҡәберен 7 тапҡыр әйләнеп, ҡиблаға ҡарап ниәтеңде әйтәһең эстән, уң ҡулдан тәңкә ырғытып, доға ҡылаһың. Шулай иткәндә, теләктәр ҡабул була.

Элек ауылда Миңлеһылыу исемле бик нескә күңелле инәй бар ине, уның менән гел бергә, ҡыҙҙарҙы алып, еләккә барыр инек. Был инәй һәр ваҡыт тип әйтерлек тәңкәләр тағылған түшелдереген, уҡалап сигелгән сәсмәүен тағыр ине. Төртмә телле ҡыҙҙар шаяртып: “Инәй бигерәк матур кейенгәнһең, әллә берәйһе урманда көтөп торамы?” – тиҙәр ине. Матур итеп йылмайып инәй: “Балалар, тәңкә сыңлауын тыңлап ҡарағыҙ әле, был бит тылсымлы: беренсенән, күңелде күтәрһә, икенсенән, һәр эште ләззәт менән ошо тәңкәләр сыңлауына

ҡушылып ихлас башҡараһың. Әгәр артта ҡалһағыҙ, ошо тәңкәләрем сыңлауынан аҙашҡанда ла табырһығыҙ" – ти торғайны (82).

**Күҙ тейеү** (29)

(ырым йола)

Элек боронғо ата-бабайҙар бөтә нәмәнең дә йәне бар, тип уйлағандар. Күҙ ҡарашының да зыяны тейә, тиҙәр. Бигерәк тә балалар, йәш балалар күҙегеүсән булалар.

Малайҙарҙың түбәтәйенә, ҡыҙҙарҙың бишмәтенә ҡусҡар ҡабырсаҡтары теккәндәр. Насар күҙ ҡарашы шул нимәләргә ҡарау менән көсөн юғалта. Йәш балаларҙың маңлайына буяу, йә ҡором һөртөргә була. Әгәр күҙ тейһә артыш ағасын ыҫлайһың, йә күҙе ҡаты булған кешенең берәй күлдәгенең ебен һүтеп, һүрентеһен яндырыр булғандар.

Малға күҙ тейеүсән була, аттарға йә булмаһа башҡа малдарға, ялдарына, йә ҡолағын тишеп, ҡыҙыл сағыу төҫтә берәй нәмә тағыр булғандар.

Өйҙөң кергән төшөнә артыш ағасы ултыртыуҙың файҙаһы бик күп.

**Сихыр** (139)

Борон-борондан алама көстәр менән, сихыр менән эш иткән кешеләр булған. Сихыр эләккән кеше ауырыуға һалышыр, ялғышып һөйләшер, ғаиләлә татыулыҡ китер, мал-тыуар ҡырылыуға сәбәп булыр. Был михнәттән, алама көстәрҙән һаҡланыу өсөн элек-электән Дим буйында, мең башҡорттарында, көрәшеү сараларын күргәндәр:

1. Өйгә керер ерҙә буҫағала ат дағаһы беркетелеп ҡуйылған. Бындай өй доғалы була. Аллаһы тәғәлә уның хужаларын ҡара көстәрҙән һаҡлар, насар ниәттәге кешеләрҙең уйҙары шул урында ҡалыр. Иҙән йыуғанда дағаның ҡырыйын

һөртөп алғанда: “бисмиллаһир-рахманир-рахим, Аллаҡайым доғаларының көсө артып, ғаиләм, йорт-ҡура, мал-тыуарҙарымды имен-аман һаҡлаһын”, тип әйтергә.

2. Өйҙөң кергән яғынан, өй эсе яҡлап, ишек башына Аятел көрси элеү мотлаҡ. Алама көстәрҙән, алама уйлы кешеләрҙең уйҙары ишектең тыш яғында ҡалыр. Һәр тәҙрә, ҡашаяҡ башына ҡөръән сүрәләренең берәр аяттарын беркетеүҙең дә файҙаһы күп.

3. Ишек алдында, кергән кешегә күренерлек итеп, артыш ултыртыуҙың файҙаһы бик ҙур: насар ниәттәге кешенең күҙ ҡарашы шул изге ағаста ҡалып, ихатанан тышҡа алып ташлар. Артыш – муллыҡ, байлыҡ ағасы, мал-тыуарға бәрәкәтлек, йорт-тирәгә именлек, ғаилә кешеләренә иҫәнлек теләп тороусы, Алла тарафынан билдәләнелгән изге ағас. Уның ботағынан элек сырхау, сихыр тейгән кешегә сәй ҡайнатып биргәндәр. Бер ботағын алып, өйҙөң өрлөк ағасына ҡаҙап ҡуйғандар.

4. Бетеү тағылған кешегә һис ваҡыт сихыр эләкмәҫ тигән дә ырым бар. Күндән эшләнгән бәләкәй генә янсыҡҡа доғалыҡтар, йә мин Аллаһы тәғәләнән яратылған, мин Аллаһы тәғәләнең ышаныслы ҡоло, Хоҙай үҙе һаҡлар, тип яҙылған яҙыуҙы шул янсыҡ эслегенә ҡуйып теккәндәр. Быны һуғышҡа киткән, алыҫ сәфәргә юлланған кешеләргә биргәндәр.

5. Сөннәтләү – яңы тыуған баланы, йә булмаһа ауырыу кешене мунсала ҡарағай, шыршы, артыш ағасынан сыҡҡан йәшел һыуҙы алып, ҡиблаға ҡаратып, йыуындырған кешене, йә булмаһа үҙең кергәндә ҡиблаға ҡарау мотлаҡ, сүмес менән ошо һыуҙы алып, Аллаһы тәғәлә рөхсәте менән был донъяла сырхауһыҙ йәшә тип ҡойонорға. Унан һуң һөлгөгә һөртөнмәйенсә, тән кипкәс, һарымһаҡ йә булмаһа ҡыр йыуаһының бүлбеһен алып, шуларҙың тамыр өлөшөн киҫкәс.

маңлайға яңы тулған ай һыны яһала. Был кеше бер ваҡытта ла сихыр, күҙ тейеү тигән нәмәгә бирешмәҫ.

6. Уң яҡта уң фәрештәләр булыр. Һәр ваҡытта йоҡонан торғанда, уң аяҡтан алда баҫ. Буҫаға тупһаһынан үткәндә, уң аяғынды беренсе атлатып сыҡ. Уң аяҡтан булһа, уңырһың.

**Сихырҙы нисек итеп белеп була? Нисек һаҡланырға?**

1. Ишек, тәҙрә янында тутыҡ ҡаҙаҡ, энә, башҡа осло ҡаптырма кеүек әйберҙәрҙе күрһәң, ҡул менән тотмайынса, берәй нәмә менән берәй һауытҡа һепереп төшөр, йә булмаһа ҡыяғаҙ, башҡа нимә менән тотоп, үҙ ихата-йортоңдан сығарып, ергә күм. Кеше йөрөгән ер булмаһын. “Эй, Хоҙайым, ошо әйберҙәрҙе һинең рөхсәтең башҡарыуыңда кире хужаһына ҡайтарһаң ине”, – тип әйтергә. Ҡарашың ҡиблала булһын.

2. Сәс, тырнаҡ төргәге, йә булмаһа башҡа әйберҙәрҙе кеҫәлә йә башҡа урында тапһағыҙ, ихатанан алып сығып яндырығыҙ. Үҙегеҙ ҡулланған мейестә булмаһын. Яндырғанда: “Үҙ теләктәрең үҙеңә афәт булып ҡайтһын”, – тип әйткәндәр.

3. Сүп, йыуынты һыуҙарын төрлө урынға түгергә ярамай, ихатаның бер кеше йөрөмәй торған мөйөшөнә соҡор яһап, шунда түгеү файҙалы. Шулай эшләмәһәң, уң фәрештәләрҙе һул фәрештәләр еңер – ул ғаиләңә, яҡындарына сир булып ҡайтыр. Бәхетһеҙлек билдәһе – ауырыуға сәбәп булыр.

4. Өй эсендә энә кеүек әйберҙәрҙе билгеле һауытта һаҡла. Бысаҡ, сәнске кеүек осло әйберҙәрҙең һәр ваҡыт осло өлөшө аҫҡа табан ҡарап торһон: йөҙө менән өҫкә ҡараһа, был ыҙғышҡа, уң фәрештәләр менән һул фәрештәләр араһында тауыш сығар.

Балтаны тышта ҡалдырма, ишектән кергәс тә уң яҡҡа ҡуйһаң, яҡшыраҡ.

5. Урам яҡҡа ҡараған тәҙрәләрҙә һәр ваҡытта сәскә ата торған гөл ултырт: насар ниәттәге ҡараштар яҡшырыр,

дәүләтең имен-аман булыр. Тыш яҡтағы тәҙрәләрҙе йыуғандан һуң тоҙло һыу менән сайҡаһаң, насар уйҙар берекмәç.

**Мейес сығарғанда** (66)

Мейес сығарғанда хужабикә менән кәңәшләшеп, мейес нисегерәк була, ауыҙы ҡайһы яҡҡа ҡарарға тейеш – ошо турала алдан һөйләшелә. Унан һуң, беренсе кирбес һалғансы, доға ҡылып һамаҡлар инек:

Сығарылған мейескәйем
Өй эстәрен йылытһын.
Табаларға икмәк һалғас,
Ҡабарып тәмле бешһен!

Унан һуң "бисмиллаһир-рахманир-рәхим" тип, беренсе кирбесте майлап, ҡиблаға ҡарап ҡуяһың.

**Өй һалғанда** (98)

Өй һалғанда, өйҙөң 4 мөйөшөндәге нигеҙ ташына доға уҡып, 1-әр тәңкә аҡса ҡуялар.

Тормош муллыҡта булһын,
Дәүләтем байлыҡта булһын.
Нигеҙ йорттарым ҡоромаһын,
Нәçелем ырыçлы булып,
Һау сәләмәт ғүмер итһен.
Амин! – тип доға уҡыла.

**Йығылған ергә төкөрөп, типкеләп:**

"Бәрейгә таш, миңә аш бир, Хоҙайым", – тип, өс тапҡыр төкөрөп китергә (258).

**Мунсанан сығып киткәндә:**

– Минән һуң мулла менән оçтабикә килә, – тип ишекте ябырға. Ен-шайтандар байрам ҡормаһын өсөн шулай әйтелә (258).

**Һалдат оҙатҡанда** (256)

Һалдатҡа киткән егеттең әсәһе икмәк тешләтә, ҡалғаны аҡ сепрәккә төрөп, быяла йәки ағас һауытҡа һалып, һандыҡҡа, йә булмаһа шкафҡа алып ҡуйыла.

Баланы ризығы өйгә саҡырып торһон өсөн шулай эшләнә. Ҡайтҡас, ҡалған һынығты ашатаһың.

Яңы ай тулғанда әйтә торған теләк доғаһы була. Теләгеңде әйтеп, фатиха ҡылһаң, теләгең ҡабул булыр(163).

**Хәмер тураһында** (16)

Заһиҙуллин Вәлиулла Хәмиҙулла улы үҫмер саҡта Искәндәр исемле остазда һабаҡ ала. Уның ҡултамғаһы ҡуйылған 20-ләп иҫке төрки телендә йыйылған китаптар Зәһиҙуллина Тимербикә инәйҙә һаҡланған. Вәлиулла олатай Бөйөк Ватан һуғышына алынып, 170 СД ҡатнаша. 1942 йылдың март айындағы барған ҡаты алышта билдәһеҙ ғәйеп була (Өфө архив документтарынан). Иҫке төрки яҙыуын яҡшы белгән юғары белемле, Мәкәш ауылында тыуған Рәшитова Фәнисә Мәүлитҡол ҡыҙы тарафынан тәржемә ителгән бер нисә ҡыҙыҡлы яҙыу бар. Был китаптарҙың күбеһе Стәрлетамаҡ Нур типографияһында баҫылған.

Эй, мөьминдәр! Иҫерткес эсемлектәрҙән һаҡланығыҙ! Аҡылды томалаған һәр иҫерткес эсемлектән, отош уйындарының һәммәһенән, нәжес эшләрҙән йыраҡ булығыҙ. Хәмер – кешене юҡ итә торған иң көслө нәмә, ул кеше аҡылына, тәненә, диненә зыян килтерә; ғаиләне тәрбиә ҡылыу һәм ҡайғыртыуҙан айыра, ҡатынынан һәм балаларынан йыраҡлаштыра. Ул йәмғиәт, халыҡтарҙың рухи, матди һәм әхлаҡый тормошо өсөн ҡурҡыныс янай.

Хәмер менән бәйләнеү – һәр мөьмин өсөн гонаһтыр.

Хәмер таптырыусы, эсеүсе, хәмер эсеүсе менән бер өҫтәлдә ултырыусы;

Хәмер һатып алыусы һәм һатыусы, хәмер менән сауҙа итеүсе, хәмер һатыуҙан алған керемде ашаусы – быларҙың һәммәһе гонаһлы.

Мөьмин мосолман хәмерҙе бер ваҡытта бүләк итергә тейеш түгел. Хәмерҙе бүләк булараҡ ҡабул итеүҙән йыраҡ тор.

Бынан тыш. Мөьмин мосолмандарҙың йәшәү ҡағиҙәләре:

**Мосолманға 9 ҡағиҙә**

1. Кешеләрҙән мыҫҡыллап көләү, уларҙы мәсхәрәләү гонаһ. Аллаһы тәғәлә һеҙҙең тышҡы ҡиәфәтегеҙгә һәм байлығығыҙға ҡарамай. Ул һеҙҙең күңелегеҙгә һәм йөрәктәрегеҙгә ҡарай. Ғәрип, ярлы кешеләрҙән көләү – гонаһ.

2. Мосолманға башҡа кешенең яманатын һатырға, кеше турында яман һөйләргә, аны яманларға, кимселектәрен эҙләргә вә уларҙан көләргә ярамай.

3. Исламда бер-береңде үртәп, ҡушаматтар ҡушыу рөхсәт ителмәй. Быларҙы эшләүсе йәмғиәтеңдәге әхлаҡ, әҙәпте инҡар итә, туғандашлыҡты ҡурҡыныс аҫтына ҡуя.

4. Йәмғиәттә күңел сафлығында булығыҙ. Ышаныс менән йәшәргә кәрәк. Яман фекерҙә булыу – насарлыҡтыр.

5. Эске һәм тышҡы сафлыҡта булығыҙ. Хужаларҙан рөхсәт алмайынса һәм уларҙы сәләмләмәйенсә өйҙәренә кермәгеҙ. Әгәр өйҙә кеше булмаһа, керергә рөхсәт булғансы, атлап үтмәгеҙ.

6. Нахаҡ һүҙ һәм яманлауҙан йыраҡ булығыҙ. Берәүҙәрегеҙ башҡаларҙы улар юғында яманлау – гонаһ эштер.

7. Яманлау ниәтендә әйтелгән нахаҡ һүҙ һәм ғәйбәт ҙур гонаһ. Ғәйбәттән йыраҡ тор.

8. Кешенең дәрәжәһен төшөрөү, кәмһетеү, пакъ мөьминәне аҙғынлыҡта ғәйепләү, абруйын төшөрөү ямандыр. Мөьминдәр хаҡында яманат таралыуын яратыусыларға был тормошта вә әхирәттә ғазаплы яза булыр. Аллаһ тәғәлә белә, ә һеҙ белмәйһегеҙ!

9. Ислам кеше ғүмерен изгеләштерә вә йәнен һаҡлай. Кеше үлтереү, уның йәненә ҡул һуҙыу ауыр гонаһ иҫәпләнә. Мөьминде үлтереү – гонаһлы эш, язаһы –мәңгегә йәһәннәмдә яныр. Аллаһының асыуы ундайҙарға бөйөк, ҡарғышы көслө вә

әҙерләп ҡуйылған язаһы мәңгелек. Аллаһ тыйған йәнде хаҡһыҙ үлтермәгеҙ.

**Еләккә барғанда** (275)

Берәй әйбер юғалғанда йә еләккә барғанда:

Табып бир, табып бир,
Табып бирмәһәң,
Биш баланды үлтерәм, –

тип ҡурҡытып ендән эҙләтәһең.

**Башҡа сыҡкан йәштәрҙе ҡотлағанда** (199)

Көнөн күрһен, көлөндә аунаһын!

Шулай тигән теләк тә бар: Ярар, үҙҙәренә бер башҡа мөрйәнән төтөн сығарһындар! Үҙҙәре нисек теләй, шулай йәшәһендәр әйҙә, – тиҙәр ул саҡта.

Һунарға сыҡкан ваҡытта һунарсылар уй йәшерер булған, йәғни ауға сығарҙарын берәүгә лә әйтмәй, сер итеп тота. Һөйләһәң, кейек һиҙеп ҡала, тип уйлағандар (183).

**Ҡойон уйнағанда уртаһында ҡалмаç өсөн** (206)

Тфү! Тфү! Тфү!
Ҡара йылан ҡамсыһы!

Дауыл сыҡһа шулай 3 тапҡыр төкөрөргә. Дауыл-ҡойон эсендә ҡалырға ярамай.

**Сәс менән тырнаҡ алғанда** (206)

Бисмиллаһир-рәхмәнир-рәхим!
Был донъяла көл бул,
Теге донъяла гөл бул,
Яуап көнө гөл бул!

Сәсте мейескә яҡканда, шулай тиҙәр. Теге донъяла сәстең бөртөгө һайын һорау бирәләр, шунан яуап алалар, ти.

**Тырнаҡ киçкәндә** (206)

Бисмиллаһир рәхмәнир рәхим!
Бәрейгә – ҡамыр тырнаҡ,
Миңә тимер тырнаҡ! – тип әйтергә кәрәк.

**Сәфәр сығыусыға** (206)

Сәфәр сығыусының биленән икмәкте 3 тапҡыр ураталар ҙа, шулай тиҙәр:

Хызыр Ильяс Хөбби хужа ярҙамсың,
Хызыр Ильяс булһын юлдашың.
Юлың уң булһын,
Ун ике мөсәләң һау булһын.
Йә Ханнан, Йә Маннан,
Эй, Хоҙайым, үҙең һаҡла,
Дошмандың күҙен ҡапла,
Ауыҙын бәйлә, телен сис!

Кеше үлгәндән, мәйетте оҙатҡандан һуң, ҡапҡа бикләп алынырға тейеш. Ошо һүҙҙе әйтеү мотлаҡ:

Әлхәмдүлиллаһи рабби ғәләм
Ҡайғыларым ҡабат ҡаралма.
Ҡапҡаларым ҡабат асылма,
Әжәлләрҙе ҡабат йөрөтмә –

тип, тиҙ генә ҡапҡаларҙы ябып ҡуярға кәрәк (42).

Мосолман кешеһенең иң яҡшы сифаттарының береһе ул – сабырлыҡ, ти. Сабыр иткән кеше һәр ваҡыт уйлап эшләр.

Сабырлыҡ – ул алтын һары,
Һандыҡ төбөндә булыр.
Һәр эште фекер йөрөтөп,
Уйлап башҡарыу кәрәк.
Шул сағында ирешерһең
Ҡуйылған маҡсатыңа – тип өйрәтәләр ине элек мәҙрәсәлә (245).

Информанттың 81 йәшлек оләсәһе Миңлеһылыу исемле әбей 19-сы йылдар тирәһендә вафат була. Оло йәштәрҙә

булыуына ҡарамаҫтан, гел ауылын һағынып йырлар булған. Ҡаҙанғол – Иҫке Яппар аралары 5 саҡрым ғына булһа ла, көнөнә ауылына барып ҡайтыр булған. Яҙын ҡоштар килһә, көҙөн ҡоштар китһә лә, ҡайттылар, киттеләр микән тип һөйләр булған.

Был донъя менән хушлашыр алдынан ауылына барып нәҙер саҙаҡаһы тапшырам тип, юлға сыға. 80-дән уҙған әбей ауырып та тора, был яңылыша тип, Байбулатты ла эйәртеп ебәрәләр. Был инәй бик дини булған, нәҙер саҙаҡаһын 7 кешегә, аҡ диндә булған ауылдың хөрмәтле кешеләренә тапшыра. Нәҙер саҙаҡаһын былай башҡара: ҡуш ус аҡ ондо ямыяҡка һала, "бисмиллаһир-рахманир-рәхим" тип, төбәп килгән кешеһенә бирә. Алған кеше күкрәгенә, йөрәк янына, ҡуйып: "Аҡтан аҡ, сафтан саф булып, хәйереңде Хоҙай тәғәлә ҡабул итһен", – ти ҙә, уны ике ҡулы менән тотоп, ямыяҡты үбеп өҫтәлгә ҡуя. Шунан Ҡөръәндән сүрә уҡылып, хәйер бирелә һәм доға ҡылына. Ҡайтыр саҡта Миңһылыу әбей: ""Оҙаҡламай мин фани донъянан ҡайтып китәм, ҫөйәктәремде тәрбиәләп һуңғы юлға оҙатырһығыҙ, тыуған, тәүге тәпәй баҫҡан ерҙәремдә ерләрһегеҙ", – тип, әхирәттәрен белгертә. Күп тә үтмәй, 1 ай тирәһе яттымы юҡмы икән, йәй айҙарында Иҫке Яппар ауылында был әбей ерләнә (22).

### **Ҡарын сәсен алыу, ҡаш һыҙыу** (191)

Баланың ҡарын сәсе ҡырҡы сыҡмаҫ элек алына. Баланың ата-әсәһе ҡарын сәсен алыусыға бүләк бирә. Ҡарын сәсен утҡа яғырға ярамай, уны төрөп, ҡыҫтырып ҡуялар. Шунан ҡарын сәсе сәйен эсерәләр.

### **Йығылғанда** (24)

Кеше аяҡ аҫтында ятҡан әйбергә һөрөнөүсән. Утын ағасымы, тимерме, ташмы – барыбер: “Атам рухынан, әсәм рухынан” – тип, уны артыңа ташлайһың.

**Ашлыҡ сәсеү** (24)

Сәсеүсе билбау менән тубалды муйынына аҫып ала ла, ҡолас киреп орлоҡ һибә. Тәүге һибеүендә:

Йә Аллам, рәхмәтеңде киң ҡыл! – ти.

Икенсеһендә:

Ҡош-ҡорт ырыҫҡалына! – ти.

Артабан:

Мал-тыуарым ризалығына! – ти.

Бөтәһенә лә мул уңыштан өлөш юрай, тик үҙен генә әйтмәй.

**Ҡалҡан төйөү, ҡылыс һындырыу** (24)

Яуҙан еңеп ҡайтҡһалар, ир-егеттәр ҡалҡан төйәләр. Ҡалҡанды тубыҡтарына һалалар ҙа шунан устары, ҡушҡар һөйәге менән дөбөрләтәләр.

Илен һатҡан, ҡасып ҡотолған йә ырыу башлығына антын боҙған кешенең муйынынан тамғаһын алып ташлайҙар, баш кейемен һалдырып, өҫтөндә ҡылыс һындыралар.

Тыуған көнөңдә тырнаҡ алырға ярамай, сәс киҫергә ярамай.

Сәсте, тырнаҡты кешелә киҫергә ярамай.

“Бисмиллаһир-рахманир-рахим” тип, яндырырға кәрәк (289).

**Бала йыуындырыу** (281)

Баланы йыуындырғандан һуң, кендекәй “су-у-уп!” тип, сабыйҙың һырт буйынан аҡкан һыуҙы ирендәре менән аҫтан өҫкә ҡарай һыпырып алып, ситкә төкөрә (шуны бала

арҡаһынан йөн алыу, тиҙәр). Шунан әсәһе һөтө менән баланың тәнен һыпыра.

Сабыйҙы тәүге йыуындырғанда, йыуынтыға ете бөртөк тары һалалар. Икенсеһендә – 9 бөртөк, унан – 11. Шулай итеп мунсала йыуындырған һайын 41-гә тиклем таҡ һанына тары һалып сығалар. Был йола баланың тарылай тәгәрәп, ырыҫлы, ғүмерле булып үҫеүен теләүҙе аңлата (игенде лә ҡулланырға була).

Бала тыуғас, бер туғандарына күрһәткәндә элек аяғын күрһәтәләр. Шулай итһәң, улар татыу була. Өлкәне кесеһен йәберләмәй.

### Ни өсөн башҡорт ҡатындары сәскә тәңкә таҡҡандар?
(12)

Боронғо башҡорт йолаһы буйынса, сәс ике толомға үрелергә тейеш булған, осона ике көмөш тәңкә таҡҡандар.

Был фани донъяла һәм әхирәтлектә (теге донъя) ҡатын-ҡыҙ һәр ваҡыт ғорур, һис бер ваҡытта ауырлыҡтарға бирешмәй, баш эймәй йәшәргә тейешлекте, төҙ, һылыу йөрөргә тейешлекте белгерткән. Донъяға яралғанһың икән, һин һәр ваҡытта алға ҡарарға, үҙ маҡсатыңа ирешергә тейешһең. Сөнки һин әсә кеше, һиңә ҡарап, балаларың көслө булып үҫергә, донъяға яраҡлашырға тейештәр.

Икенсе яҡтан, көмөш тәңкәләрҙең һаулыҡҡа, арҡа мейеһенә файҙаһы бик күп, ауыртҡанлыҡ бөтә. Тәңкәләрҙең тауышы сихри тауыш сығарып, баш мейеһенә файҙа килтерә.

**Сәскә елкәлек ҡуйыу** – уңған, һәр эштә уң бул тигән маҡсат менән күберәген йәш ҡыҙҙарға ҡуйыла. Ҡыҙ кешенең елкә соҡорон ят күҙҙәр күрергә тейеш түгел. Елкә соҡоро ялҡаулыҡ билгеһе тигән ырым йәшәй. Тәңкәләрҙең сыңлауы ҡыҙ балаға һәр эште уйлап, йәштән үк теүәл, еренә еткереп,

аҙағына тиклем атҡарып сығырға өйрәнеү кәрәклеген белгертеп торған.

**Ҡалфаҡ, ҡашмау.** Йәш ҡыҙҙар етлегеү осорона тиклем ҡалфаҡ кейгәндәр. Ҡалфаҡ ҡатыраҡ туҡыманан ҡуласа рәүешендә тегелеп, ҡырыйҙарына бәләкәй тәңкәләр тағылған. Тәңкәләр һаны таҡ булырға тейеш. Был иһә ҡыҙ әле йәрәшелмәгән, тормошҡа сыҡмаған, яңғыҙ тигәнде аңлатҡан. Ҡыҙ бала булыу – һәр ваҡыт яҡшылыҡ, яман эштән йыраҡ булыу билгеһе.

Тәңкәләрҙең сыңлауы һәр саҡ ата-әсәнең йөҙөн ҡыҙартырлыҡ эш ҡылмауҙы иҫкәртеп торған. Улар ят күҙҙәрҙең ҡарашын күҙ тейеүҙән арбап, сыңлап ситкә ебәреү маҡсатында эшләнгән.

Оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар **ҡашмау** башлыҡ кейгән. Ҡатын-ҡыҙҙың былай кейенеүе – барса балаларға, ейән-ейәнсәрҙәргә изгелек теләү. Әсәнең бер ҡарашы, бер һүҙенән бала аңларға тейеш, ошо тәңкә сыңлауын улар һис оноторға тейеш түгел, ҡолаҡтарында ҡалырға тейеш. Ни өсөн тигәндә, ҡашмау кейеү, уның тәңкәләрен сыңлатыу балаларға бәхет теләү билгеһе булып торған. Ҡашмау – мәрйендәр (айырыуса ҡыҙыл төҫтә) теҙеп, тәңкә-сулпы баҫып, оҙон ҡойроҡ төшөрөп эшләнгән кейем. Ҡойроҡ (олон) арҡа үҙәге буйлап, тубыҡ бөгәренә тиклем етергә тейеш. Ҡашмауҙа быуын-быуынға байлыҡ, иҫәнлек, оҙон ғүмер теләү көсө бар тип иҫәпләнә.

**Ҡаралыҡ** – төрлө төҫтәге буяуҙарға манып эшләнгән сәсмәүлек остары. Суҡлап һумлыҡ, көмөш тәңкәләр йә суҡ ҡуйып эшләнә.

Был ҡаралыҡты һәр ваҡыт өс артмалы итеп эшләгәндәр. Был иһә һәр башҡорт ҡатыны өс быуынға үрнәк булырлыҡ тәртипле балалар, әҙәпле быуын тәрбиәләргә бурыслы тигәнде аңлатҡан.

**Сыңлы алҡа** һәр ваҡыт сыңлы, моңло тауыш сығарып, яҡшы хәбәрҙәр генә килтереү уйынан, аҡыллы, яҡшы кәңәштәр генә ишетергә теләү ниәте менән тағыла.

**Металл биҙәүестәрҙең сере.** Баҡыр тәңкәләрҙең көсө бик ҙур. Һыҙлаған ергә баҫыу өсөн тәңкә, ҡан баҫымын көйләү өсөн, йөрәк дөрөҫ типмәгәндә, баҡыр беләҙек, йөҙөктәр йөрөткәндәр. Көмөш тәңкәләрҙе һыуға, һөткә һалғанда насар, йоғошло сирҙәр йыраҡ булыр. Көмөштән эшләнгән һауытта һыу оҙаҡ боҙолмаҫ, уның һаулыҡҡа файҙаһы бик ҙур, тиҙәр.

Башҡорт кейемдәре ике башлы һөлөк биҙәге (лиана биҙәге – S) менән биҙәлгән. Был билге – мәңгелек билдәһе. Кеше донъяға килгән икән, тайпылмайса ошо донъя юлын үтергә, үҙенең нәҫел ебен өҙмәҫкә тейеш тигәнгә ишара был билге.

Башҡорт кейемдәрендә осраған ат башы биҙәктәре был тормошта ат менән башҡорт халҡының  тығыҙ бәйләнеүенән.

**Башҡорттарҙа иҫәнләшеү** (231)

“Әссәләмәғәләйкүм” тигәнгә, “Вәғәләйкүмәссәләм” тип яуаплау – оло кешеләр менән иҫәнләшеү, динлелекте, иманлылыҡты, мосолман кешеләренең берҙәм булыу билгеһе.

“Һаумыһығыҙ” – кешеләрҙең дәрәжәле, белемле булыу билгеһе.

“Иҫәнмеһегеҙ” – үҙеңдең яҡындарың менән иҫәнләшеү.

“Шәпмеһегеҙ” –атта һыбайлы кеше менән иҫәнләшеү, был бер үк ваҡытта атҡа ла сәләм биреү билгеһе.

“Арыумыһығыҙ” – ауырыу менән сәләмләшеү, йәғни “арыуланаһыңмы?” тигәнде аңлата. Өлкәндәр менән иҫәнләшкәндә йәш ир-егеттәр баш кейемен һалып, күкрәгенә ҡуйырға тейеш – был хөрмәт билгеһе. Ике ҡул менән күрешеү – дуҫлыҡ билгеһе. “Сәләм” тип, йәш-елкенсәк иҫәнләшә.

**Ышаныуҙар** (248)

Йома көндө кер йыуырға ярамай. Әгәр кем дә изге көндө кер, иҙән йыуһа, бысраҡ һыуҙарын, үлгәс, үҙенә эсерерҙәр.

Шишәмбе көнө юлға сыҡма. Оло эш башлама, уңмаҫһың, тиҙәр. Һәр кемгә лә ҡағылмайҙыр бәлки. Ололар әйтеүенсә, шишәмбе кире кирелемән кешегә генә ыңғай була, икән.

Дим, Өршәк буйы башҡорттарында күҙ тейеүҙән һаҡлау өсөн яңы тыуған ҡаҙ бәпкәләрен ат ҡыубашынан күҙ төбө аша үткәреү ғәҙәте булған (196).

Әгәр тауыҡ йомортҡа баҫырға ултырмаһа, уға ҡуян тиҙәге ашаталар. Тауыҡ шунда уҡ себеш баҫырға ултыра.

Себештәргә күҙ теймәһен өсөн, уларҙы иләккә һалып бер нисә минут төтөндә тоталар (264).

## ХӨРӘФӘТТӘР

**Арбаҙ эйәһе** (293)

Ҡышҡы һалҡында төнөн һыйыр быҙаулағанда, аҙбар эйәһе йоҡлап ятҡан хужаны: “Тор, һыйырың быҙауланы!” – тип уятыр булған. Йәки: “Ни эшләп ятаһың, мунсаңды яҡ!”, “Келәтеңә ҡараҡтар төштө!” – тип, өй эйәһе вайымһыҙ йоҡлап ятҡан хужаны иҫкәртер, ти.

**Хазина эйәһе** (308)

Берәйһе берәй ергә хазина йәшерһә, йылдар үткәс, шуға йән инә. Кешегә ул һарыҡ бәрәсе булып та, кеше, эт ҡиәфәтендә лә, башҡа төрлө лә күренә, ти. “әгәр уны күргән урынға көл йә ҡоро тупраҡ һалып сыҡһаң, ул ҡайҙа эҙен ҡалдыра, шул урынды соҡоп ҡарарға кәрәк: хазина шунда ятыр, ти.

## ИМ-ТОМ, ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Мунса ингәндә, кесерткәнгә ҡушылып эшләнгән ҡайын миндеге бик яҡшы, файҙаһы күп. Кейәү сәскәçен ҡайнар çыуға çалып, бер нисә тапҡыр ташҡа тигеҙеп алçаң, хуш еç тарала, тын алыу юлдары яҡшыра (140).

Элек ауылда Миңлеһылыу исемле бик нескә күңелле инәй бар ине. Уның менән гел бергә, ҡыҙҙарҙы алып, еләккә барыр инек. Шул иçтә ҡалған: урманда берәй ҡырмыçҡа өйөмөн күрһә, ҡурай ботағын һындырып алып, ошо өйөмгә индерер ине. Бераҙ торғас, ҡиблаға ҡараған килеш, ошо ҡырмыçҡа иләүенә эйелер ҙә, сәғәт йөрөшөнә ҡулдарын йәйеп, тейер-теймәç кенә йөрөтөр ине. Бераҙҙан иләү өçтөнән ҡулын алып, битен һыпырыр ине. Ҡулдарын йөрөткәндә былай тип һамаҡлауы хәтерҙә ҡалған:

Иләү-иләү иләктә,
Иләүҙәрҙә ҡырмыçҡа.
Минең башым ауырта
Ҡан баçымым бик түбән.
Һеҙҙең ғаилә бик күмәк,
Мин бер үҙем яңғыҙым.
Миңә ярҙам итегеҙ,
Хәлкәйемде белегеҙ.

Шулай итһәң, баш ауыртыуы бөтә, тиер ине. Иләүгә тығылған көпшәне алғас, ҡырмыçҡаларын һыпырып төшөрөп ебәреп: “Уны бер нисә тапҡыр һулаһаң, тын юлдары яҡшырыр”, – тиер ине (82).

**Күҙ тейгәндә** (98)

Балаға күҙ тейгәндә, элегерәк Ҡырҡөйлө мең башҡорттарында ошондай йола булған. Ул хәҙерге ваҡытта ла Дим буйы башҡорттарында һаҡлана.

Доға уҡыла, тәҙрәнең быуын алып, баланың башына, арҡа өлөшөнә һөртөлә, һөрткәндә ошолай тип һамаҡлайҙар:

Ерҙән килһәң – ергә кит,
Елдән килһәң – елгә кит,
Һыуҙан килһәң – һыуға кит,
Күҙҙән килһәң – күҙгә кит!
Минең күҙем теймәгән,
Ғәйшә-Фатиманыҡы,
Иншалла, төҙәлерһең,
Иншалла, терелерһең.

Өс яҡҡа ҡарап: “Тфү-тфү-тфү, Собханалла, иншалла”, – тип әйтергә кәрәк.

**Балаға күҙ тейгәндә** (98)

Таҙа, тишекле һөйәк алына. Тәүҙә күҙ тейгән кеше алдында бик таҙа итеп йыуылған ҡомғанға таҙа һыу һалына. Шунан таҙа таз ҡуйылып, һөйәкте күҙ тейгән кешенең башынан саҡ ҡына бейегерәк тотоп, таҙа һыуҙы ошо һөйәк аша үткәрергә:

Кемдең күҙенән тейгән,
Ошо күҙлектән аша
Аҡкан таҙа һыу кеүек
Сирҙәрең ағып китһен.
Һау, сәләмәт, таҙа бул! –

тип һамаҡлап доға ҡылырға кәрәк.

**Ҡайраҡ сирен имләү** (275)

Көйәнтә аша атлап сыҡһаң, шеш сыға. Был шеште ҡайраҡ, ҡайраҡ сире тип йөрөтәләр. Уны ҡайраҡ менән имләйҙәр.

Бирәү “ҡайраҡҡа” ҡайраҡ менән төртөп ала, икенсеһе: “Ни булған?” – тип һорай.

– Ҡайраҡ булған, ҡайраҡ имләйем – ти тегеһе.

Шулай өс тапҡыр ҡабатлана. Шунан: “Име-томо шул булһын!” – тип, ҡайраҡты ташлайҙар.

**Ауыҙлыҡ, йотҡолоҡ булғанда** (241)

Йотҡолоҡ булып тамағы ауыртҡан балаға ҡарап, имсе:

– Ни булған? – ти. Әсәһе:

– Йотҡолоҡ булған! – ти. Шунан ауырыу:

– Тауҙы, ташты йотам - хуп! – тип, өс тапҡыр төкөргән.

Тамағым ауырта, тау йотам,
Тамағым ауырта, таш йотам,
Тфү, тфү, тфү! – тиһәң дә ярай.

**Әпсенләү** (141)

Әпсен-төпсөн,
Бүрәнә баҫһын,
Бер биҙрә ҡаны сыҡһын,
Бер биҙрә биҙе сыҡһын.
Бөлдөргәне бөтөп китһен,
Әпсен-төпсөн, үтеп китһен.
Сир-сир, сирмешкә,
Им – имгә,
Сир мөйөшкә,
Әпсен-төпсөн
Шайтан үпһен!

**Йығылғанда** (244)

Тфү! Тфү! Тфү!
Балаға ҡағылма, енгә ҡағыл,
Енгә ҡағыл!
Ай, Аллам, вай, Аллам,
Вай Аллам, вай Аллам.
Тыңламаның бит, балам,
Енгә ҡағылма, балам!

Бала йығылып китһә, шулай һамаҡлайҙар.

**Тимерәүҙе имләү** (191)

Имләү өсөн ҡаҙандың йә мейестең ҡоромон ҡырып алалар. Шунан тимерәүгә һөртәләр. Ата тимерәү, инә тимерәү була. Тимерәүҙе имләгәндә өҫтөнән ҡайраҡ йөрөтөп:

Бисмиллаһир-рәхмәнир-рәхим!
Им – имерләү,
Тим – тимерләү.
Ата булһа – аҙмаһын,
Инә булһа име шул! –

тип, 3 йә 7 рәт һыҙалар. Һамаҡ та өс йә ете ҡабат әйтелә. Шунан былай тиһең:

Бисмиллаһир-рәхмәнир-рәхим!
Бында сыҡма, тышҡа сыҡ! –
Имең-томоң шул булһын!
Минең имем түгел,
Ғәйшә, Фатималар име.

**Йығылғанды имләү** (191)

Кисен йығылһаң, нәҫтә ҡағыла. Шуға ла:

Шайтанға – ауырлыҡ,

Бәндәгә – еңеллек,

Тфү, тфү, тфү!

Шайтан, миңә ҡағылма!

Ваҡытында Ҡаҙанғол ауылы Исхаҡ мулланың инәһе [әсәһе] Сәбилә абыстай бик белемле мөғәллимә була. Ул һүҙгә йор, бик оҫта сәсән, ауылда табиб та була. Уға төрлө яҡтан ауырыуҙар килә. Уның дәрестәренән бер нисә өҙөк:

– Сир кешегә аяҡтан йәки баштан керер, шуға был ағзаларҙы бик һаҡларға кәрәк.

– Ялан аяҡ иртәнге ысыҡ төшкән ерҙә генә йөрөү файҙалы, ҡалған ваҡытта һәр ваҡыт аяҡ кейемендә йөрөргә кәрәк.

Ауылда, урамда, бигерәк тә мал йөрөгән ерҙә йөрөһәгеҙ – ерҙән тиҫкәре көстәр генә аласаҡһығыҙ.

– Баш кейемендә йөрөү файҙалы. Ҡыҙҙар яулыҡ ябынмаһа, малайҙар түбәтәй кеймәһә, ҡояштың кире көстәрен генә түгел, башығыҙға насар туҙан ҡундырып, баш ауырыуҙарына юлығырһығыҙ. Ҡибланан иҫкән елдән генә ҡайһы ваҡыт сәстәрҙе наҙлатыу файҙалы.

Сәбилә абыстайҙың Һәрбилә исемле бик белемле табип ҡыҙы бар ине, теле менән күҙҙән сүп алыу, умыртҡа, быуын ултыртыу серҙәрен бик яҡшы белә ине (231).

# РИҮӘЙӘТТӘР

## **Гөлғәйшә тауы, Гөлғәйшә ҡаяһы** (59)

Элек Гөлғәйшә исемле  бик матур ҡыҙ булған. Уның яратып ғашиҡ булған бик батыр егете булған. Был ҡыҙға күҙе төшкән бер бик бай кеше үҙенә өсөнсө ҡатынлыҡҡа алырға уға яусы ебәрә. Ҡыҙҙың ата-инәһе ярлы булғас, ҡуш ҡуллап риза булалар. Һөйгән егетен хәйлә табып армияға ебәрәләр. Ҡыҙҙың ай-вайына ҡарамайынса, никах ашына ҡунаҡтар саҡыралар. Ҡыҙ Димдең бейек ҡаяһына килеп, һыуға ырғып үлә. Шунан был бейек яр ҡаяны Гөлғәйшә  тауы тип атайҙар.

## **Яңғыҙ ҡайын ере** (24)

Ауылда бер абзыйҙы Һары Абдулла тип йөрөтәләр ине, ошо уҡ йәштәрҙә икенсе бер абзыйҙы Ҡара Абдулла тип әйтерҙәр ине. Абдулла абзый Ҡаҙанғол ауылынан революцияға тиклем иң бай кешеләрҙең улы булған. 30-сы йылдарҙа был ғаиләне һөргөнгә ебәрәләр, әммә был абзый, нисектер иҫән ҡалып, әйләнеп ҡайта.

Һуғыштан һуң оҫталыҡ һөнәрен үҙләштереп, йорт-ҡураларын тергеҙә, хужалығында умартасылыҡ менән шөғөлләнә.

Абдулла абзыйҙың һөйләгәне: “Тәүҙә бер баш ҡына умартам бар ине. Унан һуң яһалма умарта эшләп, ошо яңғыҙ үҫкән  ҡайынлыҡ башына  элеп ҡуйҙым. Был ерҙе ауылда яңғыҙ ҡайын посадкаһы тип атайҙар. Унда хәҙер уҫаҡлыҡ, унан һуң – ҡарағас ағастары башланған ер (Ҡабаҡҡайындың уң яғында). Ике-өс көн һайын был яһалма умартаға ҡорт ҡуныр ине. Бер көн, арба тартып ҡорт күсен алып ҡайтҡанды күреп, ут күрше 1894 йылдарҙа тыуған Хоҙайәхмәтов Нурыйәхмәт юлымды бүлде. Иҫәнлек-һаулыҡ һорашып: “Улым, бәрәкәтле булһын ҡорт илең, ҡортон алған һайын, шул ағасҡа хәйер итеп тәңкә һалып доға  ҡыл, хәйерле булыр,

– тине. – Сөнки был ағас төбөндә, әгәр иғтибар итһәң, ҡәберлектәр. Таштары ергә һеңеп бөтһә лә, шәйләгәнһеңдер. Әүәл ошо урында  ҡуйы урманлыҡ булып, был тирәлә башҡорттарҙың йәшерен тимерлектәре булған. Бер яуҙан һуң хөкүмәт отрядтары быны һиҙеп ҡалып, был ерҙе күрһәтергә ауылдан өс кешене ҡулға алып, язалап, бында алып киләләр. Ҡартатайымдың һөйләүе буйынса, элек был тимерлектә Тимерсалих исемле ҡарт үҙенең ғаиләһе менән  шул ерҙә соҡоп эшләнгән йорттарҙа һәм тимерлектәрҙә йәшәгән. Драгун ғәскәрҙәре килгәс, был ҡартты ғаиләһе менән бергә ҡылыстар менән тураҡлайҙар. Шул ауылдан алып килгән кешеләр ҙә шул ерҙә һәләк булалар. Бер аҙ тынысланғас, ауылдан бер-нисә кеше барып, был кешеләрҙе ошо яңғыҙ ҡайын ерендә ҡәҙерләп ерләйҙәр. Элек был Тимерсалих исемле һөнәрмән, көнкүреш яраҡтарынан тыш, төрлө һөңгө баштары, уҡ-һаҙаҡ, ҡылыс кеүек һуғыш әйберҙәре эшләгән”.

**Çатлыҡ урыны** (207)

Димдең Дәүләкән күпере ерендә, бер нисә быуынға айырып аҡкан төштө “Çатлыҡ урыны” тип атайҙар.

Элегерәк Иçке Көрмәнкәй, Дүртөйлө ауылдарында Çултангәрәй менән Ибраһим исемле ике бер-береһенән айырылмаç дуç йәшәгән. Былар ҡайҙа барһалар ҙа бергә, бер-береһенә ярҙам итеп, көн иткәндәр. Таш сығарып, ҡыҙылташтан кирбес эшләп һатҡандар, ләкин бер ҙә ҡотая алмағандар. Ни тиклем генә тырышып эшләһәләр ҙә, быларҙың таштары матур булһа ла, башҡа уруç, йәһүдтәргә ҡарағанда, таштарын арзан хаҡ менән  алалар икән уруç байҙары.

Уйлашҡандар былар: “Әйҙә уруç диненә күсәйек. Икебеҙҙең дә ишле ғаилә, уларҙы ҡарарға кәрәк. Баш

күтәрһәң башты киçәләр, еләң елпеһә лә, ерҙе тартып алалар, балаларҙы уҡырға, эшкә алмайҙар”, – тип серләшәләр икән.

Былар Дәүләкән попына барып хәлде һөйләгәс, теге ҡуш ҡуллап риза булған. “Ярай, Димде йөҙөп сығаһығыҙ, бер стакан араҡы торор. Шуны эсеп, тәрене үберһегеҙ ҙә – суҡындырырмын. Унан һуң кейенеп, кәмә менән теге ярҙан ғаиләләрегеҙҙе алып сығырһығыҙ”, – тигән. Поп үҙе эстән генә шатлана, ти: “Был башҡорттарҙы батша ла буйһондора алманы, мин быларҙы яйлап суҡындырырмын”, – ти икән.

Ошо уңай менән Өфө, Бәләбәй, тирә-яҡтарҙағы поптарҙы саҡырған, ти, тәғәйенләнгән көнгә, тамаша күрергә.

Был ике дуç поптан һуң ауылдаштары менән хушлашырға, халыҡтан рөхсәт алырға тип, ҡорға килгән. Аҡһаҡалдарға хәлде аңлатып биргәндәр – халыҡ шул саҡ геү итеп ҡалған, ҡайһыһы битәрләй, ҡайһыһы йоҙроҡ төйнәй икән. Аҡһаҡалдарҙың береһе былай тигән: “Çултангәрәй, һин аçаба башҡорто, ерең бар, туғайҙарың. Бында һинең нигеҙең, ата-бабайыңдың ҡәберҙәре ята,  ҡан-ҡәрҙәштәреңә нисек итеп хыянат итәһең? Ибраһимды аңларға була, ул – әтәмбәй, ҡыуылған халыҡ, бер урындан икенсе урынға күсеп килгән, ырыуын да йүнләп белмәй, шәжәрәһен онотоп бөткән, ул ҡан-ҡәрҙәште теләһә ҡайһы ерҙә һатырға мөмкин. Әгәр китер булһағыҙ, беҙҙән бәхиллек көтмәгеҙ”, – тигән.

Ни булһа ла була инде, тип, былар һүҙҙәренән ваз кисмәгәндәр. Тәғәйенләнгән көндө, көҙҙөң һуңғы көндәре булыуына ҡарамаçтан (һыу ситтәре туңа башлаған була), былар суҡынырға риза булалар.

Ике ярҙа бик күп халыҡ йыйналған була. Уң яҡтағы тау баштарында бик күп башҡорт  йыйылһа, һул яҡ ярҙа урыçтар икән. Төрлө ерҙән йыйналған поптар ҙа тамаша ҡылырға килгән, әҙерәк уларҙан айырмалы урында Дәүләкән башҡорттары тамаша ҡыла, ти. Һыуыҡ көн булыуына

ҡарамаҫтан, поп тамашаны башлап ебәргән. Ҡулын һелтәүе була – Ибраһим исемле башҡорт, тиҙ генә өҫ кейемен һалып, Димгә төшөп китеп, тиҙ-тиҙ генә йөҙөп, йылғаның һул яғына сыға. Уң яҡта ҡалған Çултангәрәй дуçына ҡысҡыра икән: "Ибраһим, çыу çыуыҡмы?", ә тегеһе: "Башол (пошел – А.Х.), башҡорт басурман!" – ти икән. Шул һүҙҙе ишетеп, дуçының ғәйрәте китә: "Юҡ, мин үҙ халҡым менән ҡалам", – тигән. Ҡыҙып алған Ибраһим, ҙур коспой кәмәçенә ултырып, балаларын алып сығырға уң яҡҡа сыҡҡан. Әммә ҡатыны күҙ-йәш аралаш: "Юҡ, Ибраһим, һин әле дуçыңа "башол" тип әйттең, араҡы эсеп, нәмә эшләгәнеңде белмәйһең, беҙ башҡорт булып, ҡан-ҡәрҙәштәр менән ҡалабыҙ", – тигән. Шул саҡ ике ярҙағы башҡорттар дыу килеп ҡул саба, ти, бүректәрен һауаға ырғытып: "Афарин!" – тип ҡысҡыра икән. Аптыраштa ҡалған был Ибраһим кәмәçе менән Димдең уртаçына тиклем килгән дә, çалҡын çыуға кейеме менән сумған, шул сумыуҙан кире сыҡмаған. Хәҙер Димдең ошо урынын "Çатлыҡ урыны" тип атайҙар. Әле ошо яҡтарҙа бер нимә булһа, ошондай әйтем йәшәп килә: "Çатлыҡ ул шатлыҡ түгел инде".

*Иçкәрмә:* Çатлыҡҡа, эскесегә ҡарата бер кәлимә һүҙҙе информант Ибрай ауылы муллаһынан ишеткән:

Эй, çин, йүнһеҙ эскесе,
Нәфрәтемде белһәңсе.
Милләтемдең ғәрлеге,
Башҡортомдоң хурлығы.
Ата-бабайҙарҙың рухын
Һин биш тингә çатыусы.

**Гөләйфә** (140)

Элегерәк Яңы Яппарҙа бик бай, ырыçлы кеше булған. Уның иген баçыуҙарының, туғайлыҡтарының, малының иçәбе-

хисабы булмаған. Бик күп хеҙмәтселәре, һаҡсылары булған. Өс ҡатыны булып, улары гел ҡыҙ алып ҡайтҡан. Нигеҙен дауам итеүсе ир-егете булмаған, шуға бай бик көйөнгән.

Бәләкәй Гөләйфә исемле ҡыҙы әрһеҙ, арғымаҡҡа атланып та сабыр егеттәр кеүек булған. Буй-һыны еткәс, Ҡаҙанғол байының Баййегет исемле кешеһенә кейәүгә бирәләр, тик был ауылға Гөләйфә бармай, сөнки бер апаһы был ауылға тормошҡа сыҡҡан була. Ғөрөф-ғәҙәт буйынса, бер ауылға башҡорт бер ваҡытта ла ике ҡыҙын бирмәгән. Был бай ҡыҙы менән кейәүенә Ҡырыҫтал тигән ерҙән ер биргән. Ошонда Яңы Ҡаҙанғол тигән ауыл барлыҡҡа килгән. Ләкин ире ҫуғышҡа алынып, бер нисә йылдан губернаторҙан грамота алып ҡайтҡас, был Баййегеттең үҙенә Нарыҫтау яғында ер бүленеп бирелә. Ул хәҙерге Миәкә районы яғында.

Ире үлгәс, Гөләйфә ҡарт атаһын ҡарарға Яңы Яппарға ҡайта. Элек уның тураһында йыр ҙа бар ине. Иҫтә ҡалғандарҙан:

Һауаларҙа осҡан бөркөт ҡоштоң
Ҡанаттары елгә ҡайырылмаҫ.
Гөләйфә лә кеүек һылыу ҡыҙҙар
Тыуған яҡтарынан айырылмаҫ.

Элек ҡәбере лә билгеле ине, хәҙер селеклек менән ҡапланып бөткән инде.

**Гөләйфә тураты** (148)

Яңы Яппарҙа бер бай кешенең өс ҡатыны була, тик ҡатындары барыһы ла ҡыҙ бала таба. Төпсөк ҡыҙын, Гөләйфә исемлеһен, Ҡаҙанғол ауылындағы бер байҙың малайы һората. Әммә был ауылға бер ҡыҙҙарын биргән булалар. Гөләйфә егеткә шарт ҡуя: “Әгәр яңы ауыл булып бүленеп сыҡһаң, һиңә барырға ризамын”, – тигән. Гөләйфәнең атаһы, килешеү

буйынса, Ҡырысталдан ер бүлеп бирә. Шунда был йәштәр мал-тыуар, ялсылары менән Яңы Ҡаҙанғолға нигеҙ һалалар. Был Ҡымыҙлыҡ өйөнән йыраҡ түгел 200-300 метр тирәһе урында, хатта таштар ҡуйылған зыяраттары ла бар. Ҡаҙанғол совхозына бара торған юл улар иҫтәлегенә Турат юлы тип атала (тура юл элекке ҡымыҙ өйөнә 200-500 метр самаһы). Гөләйфәнең ире ерҙе мәңгеләштереү уйы менән губернаторҙан ер алыу өсөн 1812 йылғы француз һуғышына үҙ ризалығы менән китә. Аҙаҡтан улар Димдең үрге яғынан ер алалар. Халыҡ араһында Гөләйфәгә бағышланған йыр һаҡланған. Гөләйфә атта егеттәр кеүек бик етеҙ сапҡан. Ҡарт көнөндә һағынып, Яппарҙарға сәләм, тип, таҡыя үреп, Димгә һалыр булған.

Гөләйфә менгән тура аттың
Йүгәндәре алтын-көмөштәр.
Йыйындарҙа һәр саҡ алдан килгән
Һыбайлы ла батыр ҡыҙ икән.

Гөләйфә лә кейгән, ай, еләне
Алтын ефәктәрҙән биҙәлгән.
Һылыулығы булһа аҡҡош кеүек,
Батырлығы икән бөркөттәй.

Гөләйфә лә менгән тура аттың
Ялдарына таҫма үрелгән.
Һинең кеүек тирә-яҡта юҡтыр
Яппарларҙы өҙөлөп яратҡан.

Гөләйфә лә һылыу таҡыя үргән
Йәшел үҙәнлектәрҙә лә ултырып.
Бәйләм-бәйләм сәскә һала икән
Дим буйҙарына ла бер төшөп.

Ире үлгәндән һуң Гөләйфә ауылдарына ҡайта, уның менән сығып киткән кешеләр Миәкә районының Туҡһанбай ауылына күсеп ултыра. Был ваҡытта Гөләйфәгә 60 йәштәр самаһы була. 1816 йылда 7 йорттан 48 кешеһе булған ауылдаштары

Аллағол, Ҡунаҡкул, Рамаҙан, Абдулла Ғабдрахманов, Хәсән Мортазин күрһәтелә.

1859 йылда был ауылда 12 йорт һанала. 1870 йылғы перепись буйынса ауыл күрһәтелмәй.

**Бер туғандар бер-беренһенә һүҙ атһа ла [ауыҙын асһа], үс тотмаҫ** (144)

Элек ике бер туған йәшәгән беҙҙең яҡтарҙа. Береҫе бик бай, хәлле булған, бай ҡатлам кешеләре менән генә аралашып йәшәгән. Фәҡир булған ҡустыһын ҫанға ҫуҡмаған, быны саҡырҙың да саҡырманың, кейергә кейеме юҡ, кеше алдында оят, ҫүҙен әйтһә, үпкәҫе күренергә тора, тип уйлай икән. Был байҙың бөтә нәмәҫе булып та, бер нимәҫе генә юҡ. Ул да булһа – төндәрен йоҡлай алмай интегә икән. Йоҡлап китҫә, ниндәйҙер ауаз ишетелә, ыңғырашҡан тауыш килә икән баҙҙан. Шулай бик күп яфаланғас, был күрәҙәсегә барып хәлен һөйләгән. Теге: "Һинең баҙыңда, нигеҙгә етер-етмәҫ урында, бер мәйет ята, шул ыңғыраша. Яҡын кешеләреңде саҡырып ал да, Ҡөрьән сығып, ҡәҙерләп, зыяратҡа итеп ерлә", – тип әйткән, ти, күрәҙәсе.

Был дуҫтарына әйтеп ҡараған, тегеләре яҡын да килмәй: "Үҙең бешергән бутҡаңды үҙең аша, һинең арттан төрмәлә ултырыр хәлебеҙ юҡ", – тип баш тартҡандар. Килер кешеһе ҡалмағас, был бай, фәҡир туғанына килеп, хәлде ҫөйләгән.

Фәҡире былай тигән: "Эй, ағай, күптән үлгән кешенән ҡурҡырға түгел. Зыян ҡылһа, тереләре, генә зыян ҡыла", – тигән. Теге мәйетте баҙҙан табып, соҡоп алғандар ҙа зыяратҡа итеп, ҡәҙерләп, Ҡөрьән уҡытып ерләгәндәр икән. Шунан ҫуң был бай төндәрен тыныслыҡ табып, яҡшы йоҡлар булған.

Был фәҡир туғанын саҡырып алып ҡунаҡҡа һәр саҡ йырлар булған:

Эй, туғаным, эй, туғаным,
Һин бит минең ишләрем.
Һинән башҡа айырылһам,
Яңғыҙ башым нишләрем.
Эй, туғаным, эй, туғаным,
Бер бау ғына ҫуғаным.
Күңелем тулҫа, илайым да,

Һине маҡтап йырлайым.

Шул көндән бирле был ике туған һәр ваҡыт бергә йәшәр булған.

**Сураман исемле Дим буйы батыры тураһында риүәйәт**

(284)

(Хузиев Мөлкәмән бабай яҙып алған)

Әүәл-әлек Дим буйҙарының Дәүләкән, Әлшәй яҡтарында бер Сураман исемле тирә-яҡта дан тотҡан көслө батыр йәшәгән. Мең ырыуы башҡорттарының данын тирә-яҡтарға таратҡан, йыйындарҙа көрәшеп, һис тә бил бирмәгән. Шуға был батырға һәр ауылдың бай ҡатлам түрәләре иң шәп аттарын бүләк итер булған. Хатта был батыр үҙенең дуҫтары менән ҡаҙаҡ далаларына барып, батырҙар бәйгеһендә ҡатнашҡанда, бил бирмәҫ булған. Ошо тирә-яҡтағы башҡорттарҙың етәксеһе булып, күп кенә ихтилалдарҙа ҡатнашҡан.

Әлеге ваҡытта ла оло кешеләр ир енесенән тыуған балаларҙы мунсала миндек менән сапҡанда ошолай тип һамаҡлайҙар:

Бисмиллаһи-рахман-рәхим,
Әпсен-төпсөн, күҙ теймәһен.
Сураман кеүек батыр бул, иншалла,
Сураман кеүек көслө бул,
Сураман кеүек таҙа бул,
Сураман кеүек ҡыйыу бул,
Сураман кеүек түрә бул.
Сураман кеүек башлыҡ бул,
Сураман кеүек матур бул,
Сураман кеүек тыйнаҡ бул,
Сураман кеүек терәк бул,
Ата-инәңә итәғәтле,
Бәхетле, ҙур булып үҫ!

Теләктәрем ҡабул булһын, “собханалла, иншалла” – тип, өс тапҡыр миндек менән һыпырып, ғосол ҡойондоралар.

## ЕР-ҺЫУ АТАМАЛАРЫ, ЫРЫУ, НӘҪЕЛ, АУЫЛДАР ТАРИХЫ

### **Ҡыҙрас ауылы** (267)

Ҡыҙрас ауылы – ҡара табын ырыуына ҡарай. Был ауылда юлыш, ҡаҙаҡ, сыуаш, ҡарағалпаҡ, муйнаҡ, ҡалмаҡ, тауыҡ, торна аралары бар.

Тәңре ҡоштары – торна, изге ағастары – миләш. Элек-электән үҙ ерҙәрен кәләп тамғаһы менән билгеләп ҡуйыр булғандар. Бындай тамғалар менән яуҙа үлгән ҡәрҙәштәренең ҡәберҙәренә лә билдә һалынған. Исем-тамғаны ташҡа соҡоп яҙып ҡуйыр булғандар.

Ауылдың тарихы 1773-1775 йылдарҙа Салауат яуында ҡатнашҡан, унан һуң хөкүмәт ғәскәрҙәре яғына күскән полковник, башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев менән тығыҙ бәйләнгән. Ул тархандар нәҫеленә ҡараған. Ҡарттарҙың һөйләүе буйынса, быға тиклем ауыл Келәтаяҡ тип аталған.

Ҡыҙрас старшинаның сығышы*:




---

* *Шәжәрә В. Вельяминовaның "Записки императорской Академии наук" (1864. Т. 4., кн. 2. Приложение 6.) китабында баҫылған.*

| | | |
|---|---|---|
| 1842 йылда 70 йәшендә Урмәмбәт | Солтанбәк (1763-1826) | Солтанморат (1763-1831) |

**Иҫке Яппар** ауылында шырау нәҫеле бар. Ул – беҙҙең нәҫел. ***Шырау*** – дәртле, уйын-көлкөгә маһир кешеләр (123).

Ауылыбыҙҙа өндәшмәҫ нәҫелдәре лә бар. ***Өндәшмәҫ нәҫеленән*** сыҡҡан ир-егеттәр, ысын дуҫ, тоғро иптәш булып ҡалғандар. Был нәҫел кешеләре сер һаҡлай, яҡшы яугир, һәр ваҡытта аманатҡа тоғро булып, ерен, илен һаҡлаусы, яҡлаусы кешеләр булғаны менән үҙҙәренә яратыу, хөрмәт яулағандар (213) [Дүртөйлө ауылы].

Элек өләсәйемдәр әйтә торғайны: дөйә бик сыҙамлы мал, аҙналар буйына һыу эсмәй, ашамай тора ала. Беҙҙең нәҫел дә бик сыҙам, сабыр холоҡло. Шуға ла беҙҙе ***дөйә нәҫеле*** тип йөрөтәләр (105) [Иҫке Яппар].

Беҙҙең нәҫелдәр ауырлыҡ килгәндә, бер-береһенә терәк булып, ярҙам итеп йәшәр булғандар. Туғандары өсөн йән бирергә лә әҙер булғанға күрә "***Терәк, терәкәй нәҫелдәре***" тип атағандар (14) [Ҡаҙанғол ауылы].

Беҙ – ***сыуаш нәҫеленән***. Элек бик борон беҙҙең нәҫелдән бер башҡорт байы сыуаш ҡыҙына өйләнә. Сыуаштар ул ваҡыт мосолман динендә булалар, шуларҙан беҙҙең нәҫел киткән (302) [Фәриҙун ауылы].

Ҡоръятмаҫ ауылында иң күп нәҫелдәр: ***үҫәргәндәр, мәҙиәрҙәр, аҡ түбәтәйҙәр***.

***Аҡтүбәтәйҙәр*** – Ҡырҡөйлө мең ауылдары араһында иң уҡымышлыларҙан һаналған, шуға ла уларҙы "***аҡ түбәтәйҙәр***"

тип атағандар. Күп кенә ауылдарға ошо нәҫелдән мөәзиндәр күсеп ултырған. Ауылда ошо тирәлә Морат, Мерәҫ, Сөйәрғол исемле уҡымышлы кешеләрҙе бик яҡшы белгәндәр (287).

**Иҫке Ыҙма тауы** (235)

Василий Иванович Чапаевтың ҡыҙылармеецтары аҡтарҙы 1919 йылдың май аҙаҡтарында ошо тауҙа ҡамап алып тар-мар итә. Һуңынан ауыл халҡы барып, бик күп мәйеттәрҙе ерләгән. Бабайҙар шулай тип һөйләй ине.

**Шарламаҡ – килен һыуы юлы** (235)

Шарламаҡ Буранғол ауылынан бер саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Элек-электән был шишмәгә киленде һыу юлы күрһәтергә алып барырҙар ине. Алдан аҡ алъяпҡыслы, матур итеп кейенгән, ҡулдарына сәк-сәк тотоп алған еңгәләре, унан һуң яулыҡ ябынған, көйәнтәгә биҙәкләп аҫылған силәктәр менән килен, уның артынан бала-саға, йәш-елкенсәк гармунға йырлап барыр ине.

Барғас, килен кеше шарламаҡ төшкән урынға тәңкә һала, доға уҡый, теләк әйтә. Унан һуң ошо урында йырлап, бейеп, күңел асып алалар. Ҡайтҡанда килендең тулы силәктәрен алмашлап еңгәләре күтәрә. Осраған оло кешеләргә, бала-сағаларға килен кешенән бүләк таратыла. Ҡайтҡас, ошо шишмә һыуынан сәй ҡайнатыла. Был “килен сәйе” була. ”Килен сәйен” батмусҡа бүләктәр, аҡса һалып эсәһең.

**Көпшәкүл** (235)

(Ғабдрахманов Абдрахман Мөхәмәтдин улы 60-сы йылдарҙа Аҡколай ауылы Бикбулатов Рәхимйән Бикбулат улынан, 1895 йылғы, яҙып алған).

Ниндәйҙер ихтилал ваҡытында бик ҡаты алышта башҡорт яугирҙары ҡамауҙа ҡалалар. Батырҙарса көрәшеп, ҡайһы бер яугирҙар ғына ҡамауҙан сыға алған. Ошо тирә ауылдарҙың береһендәге яугир саптар аты менән ҡамауҙан сығып, Ибрай/Дүртөйлө туғайына табан әрәмәлеккә борола, артынан килгән карателдәр быны ошо туғайҙа ҡамап ала. Был яугир атынан төшә лә, ҡамсы менән һуғып, ярһыған атын ебәрә, үҙе тиҙ генә көпшә киҫеп алып, күлдең уртаһына сумып, ләм-томбойоҡтарҙы аҡрын ғына ҡуҙғатмай, һыу аҫтынан көпшәһен сығарып тын ала икән.

Туғайҙы арҡылы ла, буй ҙа йөрөп, ҡарамаған тал төптәрен, күл буйындағы ҡамышлыҡты ҡалдырмай эҙләйҙәр быны, ләкин тамам хәлдән тайған карателдәр уны таба алмай.

Аҙаҡтан был яугир сығып, нисек итеп күл ярҙамында иҫән ҡалыуы тураһында халыҡҡа һөйләй. Шунан һуң был күлде Көпшәкүл тип атай башлайҙар. Яугир үҙе Ибрай ауылыныҡы булған тип тә һөйләйҙәр ине.

**Бикә түбәһе** (274)

(Хузиев Мөлкәмән ишеткән һәм яҙып алған сығанаҡтарҙан)

Аҫылыкүл буйында Бикә түбәһе исемле тау бар. Элек-әүәл ошо тирәләге башҡорт ауылдарының береһендә атта етеҙ һыбай сапҡан, уҡ-һөңгө менән яҡшы ҡулланып төҙ атҡан Бикә исемле ҡатын була.

Был ҡатын ир-егеттәр менән бер сафта, арыу-талыу белмәйенсә, дошмандарға ҡаршы яуға саба, әммә бер алышта бик ҡаты яраланып, вафат була. Бикәне ире бик ныҡ яратҡан була: ҡатынымдың һөйәге сит-ят ерҙәрҙә ятмаһын тип, яуҙаштары менән Асылыкүл буйына алып ҡайта. Шундағы бейек ҡалҡыулыҡта уны ҡәҙерләп ерләйҙәр. Ошо көндән алып был тауҙы Бикә түбәһе тип атайҙар. Еләк йыйырға барғанда һәр ваҡыт оло кешеләр был ҡәбер янына туҡтап, ҡөръән

уҡып, хәйер һалырҙар ине. Ҡәбере элегерәк билгеле ине, хәҙер ташы ергә һеңеп, селектәр менән ҡапланып бөткән.

**Ярыштау, Ярыш шишмәһе** (285)

(Дәүләкән ҡалаһының 3-сө һанлы мәктәп уҡыусылары йыйған материалдарҙан)

Ярыштау – элек мең башҡорттарының йыйын йыйыу урыны булған. Уға төрлө тарафтан, төрлө башҡорт ауылдарынан, һабантуйға йыйылғандар. Иң һуңғыһы революцияға тиклем башҡорт байҙарының, муллаларҙың хәйриә аҡсаһына уҙғарылған һабантуйы булды. Элек-электән бында һәр ваҡыт ярыштар уҙғарылған: көс һынашыу, ҡул көрәше, гер күтәреү, туп ырғытыу, көйәнтә менән һыу ташыу, иң ҡыҙыҡлыһы – ат сабыштырыу.

Йыр, бейеү бәйгеләре, ҡурайҙа уйнау, сәсәндәр ярышы ла уҙғарыла ине. Ярыштауҙың Ярыш тигән шишмәһе бар. Тауҙың иң түбәһендә, Көрмәнкәй, Ибрай яғына ҡараған өлөшөндә, бер изге әүлиә ҡәбере бар. Унда Дим буйы башҡорттарының батыры*, өс көн алышҡандан һуң тауҙа башҡорттар еңелә, яҙғы һыуға ҡушылып ҡып-ҡыҙыл булып ҡан аҡҡан. Март, апрель айҙары булһа кәрәк.

Ул батырҙы Шәриптән бүленеп сыҡҡан бер ауылда, хәҙерге Сакалау ауылы ерендәрәк, булған тип һөйләйҙәр. Çөләймән тигән ауыл. Уны карателдәр ут төртөп яндыралар. Ул батыр тау башында үлә, уны аҙаҡтан ҡәҙерләп ерләйҙәр, ҡәберен таштар ҡуйып уратып алалар. Азатлыҡ, ирек өсөн көрәшкән, шуға уның ҡәберенә һәр ваҡыт барып, хәйер һалыр булғандар. Хөкүмәт ҡушыуы буйынса, килгән кешеләргә штраф һалғандар, тип һөйләйҙәр. Шуға был ҡәбер янына

---

* Ҡаҙанғол ауылынан Аҙнағолов Минегәле Аҙнағол улы әйтеүе буйынса, батырҙың исеме – Çөләймән.

төндә, Етегән йондоҙ ҡалҡан саҡта, килһәң, һауабы күп була, тиҙәр ине. Тау һыҡтап – шишмәләр барлыҡҡа килгән. Һыуы бик файҙалы, ауырыған кешегә ярҙам итә тип, халыҡ Ярыш шишмәһенә бара ине.

**Асылыкүл турында** (282)

“Асылыгүл” тип әйтеү, дөрөҫ түгел: элек-электән ата-бабайҙар уны “Аҫылкүл” тип атайҙар ине.

Яңы Тормош ауылы – Буранғолдан күсеп ултырған ауыл. Күсеү 1928 йылдар тирәһендә булды. 9 йорттоң 8-е буранғолдар, бер Ҡупояр мордва бар, ул хәҙер башҡортлашып бөткән инде.

Мин үҙем Буранғолдоҡо. Минең иҫәпләүем буйынса, шәжәрәләргә ҡарағанда, Буранғолға 1740 йылдарҙа нигеҙ һалынған. Беҙҙең бабайҙар Ырымбур губернаһы Верхурал [Верхнеурал] өйәҙе Абҙаҡ исемле ауылдан килгәндәр. Уларҙың ошондай данлыҡлы кешеләре булған: Ҡыҙрас исемле полковник, ағаһы Ильяс. Уныһы Туҡ буйында ҡала. Буранғол исемлеһе тархан нәҫеленән, ҡатыны – Бәбеш, уларҙың Йәмил исемле улы була. Улар бик яҡшы заттан: ҙур атаһы – Аҡынсаҡ тархан, тирә-яҡта бик данлыҡлы кеше була. Сабай – хәҙерге Сапай ауылына нигеҙ һалыусы. Буранғол Иҫке ыҙма буйына ултыра. Тармалыҡ тигән урында тарманы һыуға һалып киптереп, эшкәртеп күлмәк-ыштан теккәндәр.

Иҫке ыҙманан ярты саҡрым алыҫлыҡта Мәсет тауы бар. Буранғол, Сабай, Ҡыҙрас ауылдары – табындар, Буранғолда йәнә ил ҡаймағы, ыҙмайлылар, әҙ генә ҡатайлар бар. Сапай, Ҡыҙраста ҡарағалпаҡ, шыңғыр, торна, сыуаш аралары, аҙаҡ үтәкәйләр тигәне килгән.

В.И.Даль яҙыуынса, XIX быуатта Иҫке ыҙма урынында Иҫке ауыл булған.

Яңы Тормош ауылы ултырған ерҙә – Шәрифҡул, Ильяс ҡулы, Ҡар ҡулы, Сығыр ҡулы, Иманғол ҡолағы, Мисташ тигән урындар бар.

Асылыгүл янында элек Мисташ мәмерйәһе булған. Мисташ – “мейес таш” тигәндән алынған. Буранда эсенә өс саналы ат кереп тора, йәй көнө балыҡсылар шунда кереп ямғырҙан һаҡлана ине. Хәҙер ул ер убылып күмелде. Заятүләктең Күк дүнәне торған тау Ҡашҡатау тип атала. Ул ерҙәр хәҙер Ҡырынъюл, Ҡырынтау тип йөрөтөлә, сөнки шунан, ҡырын ерҙән, юл һалынған. Нуратау, Ҙур Ҡарағас тауҙары урынлашҡан.

### **Йырыбаҡҡан** (166)

Асылыгүлдән Өйҙөрәккә ташып сыҡҡан һыу юлы ул Йырыбаҡҡан [“Йырып аҡҡан” һүҙенән].

Солтанов Ҡасим бабайҙың һөйләүе буйынса, ошо юл – Яппар башҡорттарының юлы. Өҫкәрәк – Йүкәле Шишмәләре ошо ерҙәргә тиклем йәйге йәйләүҙәре йәйелгән.

Бик борон замандарҙа бер Яппар егете Асылыкүл буйындағы бер ҡыҙға ғашиҡ була. Былар бер йыл йәйләүҙә осрашалар, ике йыл… Өсөнсө йылына, Аслыкүл буйында туйлап, Яппарҙың хәлле генә кешеһе был ҡыҙҙы алып китә. Шунан Аслыкүлдең һыуы ошо Өйҙөрәк буйлап ҡыҙ юлынан Димгә ҡарап аға башлаған, тип һөйләйҙәр ине Ҡоръятмаҫ ауылындағы ҡарттар.

### **Буранғол ауылы** (282)

(Хузиев Мөлкәмән яҙмаларынан)

Был ауыл ҡаңлы табын ырыуына ҡарай. Ауылда әүәл аҡынсыҡ, буранғол, алаҡай, ҡаймағы [ил ҡаймағы], ҡатай, исмаил, имел, таҙ аралары бар ине. Тәңре ҡоштары – ҡарсыға. Ҡыйыу, баш эймәҫ һигеҙ нәҫел бергә берләшеп, ерҙәрҙе һаҡларға, һуңғы алышҡа ҡәҙәр ҡарсыға ҡошо кеүек ҡыйыу булып, торған нигеҙҙәрҙе һаҡларға тип, Ҡарағас тауына менеп

вәғәҙә бирешкәндәр. Изге ағастары ҡарағас булған. Был ағас әрһеҙ, һыуға талапсан түгел, тау-таш араһында үҫкән өсөн һайлап алғандар. Сөнки башҡорт яугирҙәре һәр ваҡытта ла тауҙан көс алған, элек аҡһаҡалдар ошолай әйтер булған:

Яуҙа яугир хәлең бөтһә,
Тау баштарын һайларһың.
Дошманыңа түбән ҡарап,
Көс ғәйрәтен алырһың.

Элек, Буранғол ҡарт килеп ултырғанға тиклем, бихисап башҡорт ауылдары булған был тирәлә, ни сәбәп менәндер улар юҡҡа сыҡҡан.

Буранғол ҡарт бик белемле булған. Уның Өмөтбай тигән улы Салауат яуында актив ҡатнаша. Был һүҙҙәр тарихи документтар менән дәлилләнә.

Буранғол ҡарттың Күҫәк Буранғол исемле улы 1736-1817 йылдарҙа старшина булып тора. Өмөтбай Буранғол исемле улы – 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиән восстаниеһында актив көрәшсе. Ул ошо тирә-яҡ башҡорттарының етәксеһе була. 1834 йылғы ревизияла Күҫәктең улдары – зауряд сотник Ғайса 46 йәшлек, уның улдары (Әхтәм, Әхтәрәй, Әхмәҙи) күрһәтелә.

Уртансы улы Исхаҡ – 62 йәшлек (улдары: Ғәйнулла, Сәйфулла, Фәткулла).

Оло улы Ғөбәйҙулла – 63 йәшлек (уның ҙур улы Ҡаһарман – улдары: Иргиз, Юныс; икенсе улы – Райман, өсөнсө улы – Зәйнулла һәм Нариман). Юсуп 64 йәшлек, беренсе улы – Сөләймән – Шаһигиҙгән – Хоҙайбирҙе.

Икенсе улы – Мөлкәмән (улдары: Әмирхан, Ноғоман, Ғилман). 1795 йылда был ауылда 24 йорт иҫәпләнһә, 88 ир затынан башҡорт иҫәпләнә. 1843 йылғы ревизия күрһәтеүе буйынса, 361 кеше йәшәп, 560 бот яҙғы иген культуралары сәсәләр.

1920 йылда 188 йорт иҫәпләнеп, уларҙа 884 башҡорт йәшәй.

<u>Иҫкәрмә</u>: Элек башҡорт ғаиләләрендә бер нисә ғаилә йәшәгән. Атаһы улдарын өйләндереп ҡырға түгел, төп нигеҙгә төкәтмә һалындырып, шунда сығарыр булған. Былай эшләгәндә бер нисәнән торған ғаилә бер ҙур ғаилә булып иҫәпләнеп, хөкүмәткә бер генә налог түләр булғандар. Был бик отошло булған. Ауылда ҡатын-ҡыҙҙар һаны айырым

осраҡтарҙа ғына иҫәпкә алынған, күберәк ир-ат затынан булған һандар тәшкил иткән.

Яңы Тормош ауылы – Буранғол ауылынан бүленеп сыҡҡан ауыл. Күҫәк Буранғол ауылда абруйлы старшина, уҡымышлы сәсән мулла булған, үҙ өйөнә төкәтмә мәктәп асып башҡорт балаларына белем биргән. (Төкәтмә – торған өйгә ҡушып эшләнгән йорт). Үҙе үлгәндән һуң Ғайса сәсән был эште дауам итә.

**Яңғыҙҡайын ҡәберлектәре** (23)

Ауылда иң беренселәрҙән булып тракторға ултырған механизатор Ишмөхәмәтов Хәбиәхмәт Ишмөхәмәт улы, Яңғыҙ ҡайынлыҡ ҡәберлектәре тураһында ошоларҙы һөйләне:

– Элек-әүәл, тимер юлы үткәнгә тиклем Дәүләкәндән, был ерҙәрҙә ҡуйы урманлыҡ булған, ағастар ҡырҡылып яндырылған – күмерен Дәүләкәнгә ылау-ылау менән илткәндәр. 30-сы йылдарҙа ошо ерҙәрҙә ер һөргәндә, биш-алты йорттоң нигеҙенә тап булдыҡ. Ерҙе соҡоп буралар буралған булдымы икән, ярым янған, сереп бөткән бүрәнәләрҙе өйөп, баҫыу уртаһында яндырҙыҡ. Ошо урында бихисап элекке таштан эшләнгән үткерләү сарҙары ла бар ине. Береһен Лоҡманхәким алып ҡайтты, нимә эшләткәндер инде. Яңғыҙ ҡайын ҡырын һөргәндә (хәҙер ошо ергә уҫаҡ, унан һуң ҡарағас посадкаһы ултыртылған), бер ҡәберлеккә тап булдыҡ, уның һөйәктәрен йыйып, ошо посадка эсенәрәк ерләнек. Был ағас янында тағы ла бер нисә ҡәберлек бар, ул турала тарих уҡытыусыһы Хәмзә Муса улы ла һорашып яҙып алғайны. Бер көн уға ошо урындарҙы, элекке тимерлек урындарын күрһәттем (60-сы йылдарҙа).

**Дүртөйлө ауылы** (215)

Беҙҙең ауыл бөрйән ырыуы, яйыҡ ҫыбы башҡорттарына ҡарай. Был ырыуға Ибрай, Дүртөйлө, Иҫке, Яңы Көрмәнкәй, Ҡыпсаҡ, Ҡайып, Тәүәтәй, Иҫке Себенле, Ҫарыш ауылдары керә. Әүәл ихтилалда ҡатнашҡандары өсөн Ирәндек буйына

Брагинды үлтереү вaҡиғаларынан һуң – батшаның каратель отряды ебәрелә. Аяуһыҙ күп халыҡ ҡырыла, ауылдарға ут төртөп яндыралар. Күп кеше Ябыҡҡарағай урманына инеп йәшеренеп ҡала. Бер килке халыҡ Дим буйындағы мең башҡорттарына килеп төпләнә. Иҫке Көрмәнкәйҙә – мең башҡорттары, улар рөхсәте менән бер килке бөрйән ырыу халҡы ошонда урын ала. Дүртөйлөгә яңы бөрйән ырыуҙары нигеҙ һала, был яҡынса 1756 йылдарҙа була (215).

Был яҡтарҙа Салауат яуында абруйлы, белемле, халыҡ алдында хөрмәт яулаған Аҫлай Көрмәнкәй исемле батыр етәксе була. Ул сығышы менән Иҫке Көрмәнкәй ауылыныҡы. Быны тарихи документтар ҙа дәлилләй (Крестьянская война 1773-1775 гг. на территории Башкирии. – Уфа, 1975. С. 281.)

Аҫлай ҡарамағында 144 йорт иҫәпләнә. Ошондағы һәр бер кеше старшинаға тоғро булып ҡала, улар ихтилалдың һуңғы көнөнә тиклем көрәшәләр. Шулай уҡ Көрмәнкәй ҡарттың икенсе улы ла уҡымышлы кешеләрҙән һанала. Уның исеме – Садыҡ мулла, ул, мәктәп асып, балалар уҡыта, 1746-1824 йылдарҙа мәктәп һалдыра.

Атаһы үлгәс, Иҙрис исемле мулла старшина булып ҡала, 1792 йылдан башлап түрә була. Ул атаһының эшен дауам итә. Уның ике улы Шиһап, Ирғыҙ, өсөнсө улы Хөсәйен – белемле офицер, есаул булып хеҙмәт итә. 1812 йылғы Ватан һуғышы яугире. Хөсәйенден дүрт улы була: Бикташ, Солтанғол, Солтангәрәй, Шәймәрҙан. Ейәне Ҡыҙрас Ҡатайун 1808 йылда тыуа.

1834 йылда Иҙрис Садыҡов һәм старшина Яҡшымбәт Илгәш менән яңы ауылға күсеп, 15 йорттан торған Яңы Көрмәнкәй ауылына нигеҙ һалалар. Ул Димдең уң яҡ ярында, Дәүләкәндән ике саҡрым алыҫлыҡта була.

1795 йылда был ауыл 44 йорттан тороп, 216 башҡорт иҫәпләнә. 1920 йылда, халыҡтың хисабын алған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Иҫке Көрмәнкәйҙә 444 башҡорт йәшәһә, Яңы Көрмәнкәйҙә 465 башҡорт һәм рустар йәшәй башлай. 1917 йылда Иҫке Көрмәнкәйҙә – 103 йорт, Яңы Көрмәнкәйҙә 98 йорт иҫәпләнә.

Был ауылдарҙа мең, бөрйән ырыуына ҡараған – йүкә, күсә, ҡуян, һайыҫҡан, эндәшмәҫ, иван ырыуы кешеләре йәшәй.

1812 йылғы Ватан һуғышында Итҡусты Әбделмәннәнов исемле батыр яугир ҡатнаша. Ул ошо һуғышта 2-се башҡорт полкында булып, Парижды алыуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн ике көмөш миҙал менән бүләкләнә.

1. Ғайсин Яхъя, Исмәғил ауылы
2. Зарипов Әблифазыл, Усманов Нәғимйән, Солтанов Ҡорманғәли
3. Таһиров Ниғмәтулла, Шаһиев Ш. Яңы Яппар ауылы.
4. Абдрахманов Әптрәхим, Ҡаҙанғол ҡасабаһы.
5. Сәйфетдинов Ғилметдин, Ҡаҙанғол ауылы.

Уларҙың һөйләүе буйынса, Ҡырҡөйлө мең башҡорттары ҡырҡ ырыуы килешеүе менән берләшкән. Был ырыуҙа Дәстән – беренсе тархан булған. Уларҙың үҙәге – Бигеш ауылы (Шишмә районы), хәҙер был ауыл Әлбәй ауылына ҡушылған. Был мәғлүмәттәр тарихи документтарға тап килә. 1795 ревизияла Әлбәй, Бигеш ауылдары Дәстән түбәләре тип атала.

Күп башҡорт ауылдары, 1795 йылғы ревизияға тиклем булған ауылдар,  восстаниела ҡатнашҡандары өсөн юҡ ителәләр.

Был турала тарих уҡытыусыһы, районды̧ң күренекле шәхесе Миниғолов Хәмзә Муса улы (1928 йылғы ) яҡшы белә ине. Шулай уҡ, уның һөйләүе буйынса, ошондай  ауылдар булған: Иҫке Йорт, йәки Түбәнге Яппар – ошо ауылдан Аллағол исемле юлбашсы, дәү, ҡурҡыу белмәгән батыр, ҙур болала  ҡатнашҡаны өсөн дар ағасына аҫыла. Уның Алпамыша тигән ҡушаматы булған. Бер аҙна үткәндән һуң ғына был батырҙы  ошо ҡалҡыулыҡҡа ерләй алғандар.

**Балҡантау турында** (251)

Был тау Мәкәш, Ташлы ауылдарында урынлашҡан. Олатайым Фәйзулла һөйләүе буйынса, элгәре тирә-яҡта дошмандарҙың килеүен иҫкәртеп тороу өсөн тау баштарына, ҡалҡыу урындарға һаҡ ҡуйылған. Яу хәүефен һиҙгән һаҡсылар ошо тауҙар аша дошман килерен алдан иҫкәртеп, төтөн, ут һалыр булғандар. Ҡыпсаҡ Асҡарҙа – Эткенәй,

Илсеғолда – Нарыçтау, Иçке Көрмәнкәйҙә – Ярыштау, Ҡаҙанғолда – Мәсет тауы, Яппарҙа – Алпамыша ҡалҡыулығы, Ҡараяҡупта Ҡыҙҙар тауы. Бер-нисә сәғәттә илгә әфәт килгәндә, башҡорттар ошо тауҙарға ҡарап яуға күтәрелер булғандар.

Эй, Балҡантау, бейек тау,
Эй, Балҡантау, нурлы тау.
Меӊ иленеӊ күп ғазаптан
Һин ҡотҡарған изге тау.

Эй, Балҡантау, бөйөк тау,
Эй, Балҡантау, данлы тау.
Күп батырҙар илем тейеп,
Башын һалған изге тау.

Эй, Балҡантау, һаҡсы тау,
Эй, Балҡантау, серҙәш тау.
Илгә әфәт килгәндә,
Хәбәр итә торған тау.

Эй, Балҡантау, күркәм тау,
Эй, Балҡантау, матур тау.
Аҡһаҡалдар кәӊәш иреп,
Түбәһендә йыйған тау.

Эй, Балҡантау, мәрхәмәтле,
Мөхәббәтле зифа тау.
Йәш-елкенсәк осрашып,
Вәғәҙә бирешкән һылыу тау.

Эй, Балҡантау, түбәләреӊ
Болоттарға олғашҡан.
Ата-бабам ҡул күтәреп,
Тәсбих әйткән изге тау.

Аслыкүл тирәһендәге башҡорттар – ҡыпсаҡ ырыуы башҡорттары. Изге ҡоштары – ҡарағош, ағастары – ҡарағас ағасы. Орандары – Салауат, тамғалары – тәҙрә. Изге байрамдар үткәреү урыны – Ҡарағас тауы. Ҡоръятмаҫ, Алға, Ҡыҙыл Тормош ауылдары инә.

Бынан тыш, ҡаңны ырыуына ҡараған башҡорттар күп, уларҙың изге ҡошо торна, ағастары – ерек, ораны – Тәңре булған. Ҡаңныларға Буранғол, Сапай, Ҡыҙрас, Ҡарапай, Ҡаңны-Төркәй ауылдары инә (266).

### **Минең шәжәрәм** (299)

Ҡапай

↓

Һөйәрғол

↓

Аллағол

↓

Хәсән

↓

Әсәҙулла

↓

Миңлеғәли

↓

Әлифә

### **Айғырял ҡалҡыулығы** (34)

(1876 йылғы Солтанғәлина Мөслимәнән ишеткән)

Элек Ҡаҙанғолда бер байҙың бик күп йылҡылары булған. Йылҡы өйөрөн һәр ваҡытта бик ғәйрәтле өйөр айғыры ҡарап йөрөгән. Иртән иртүк айғыр өйөрҙө алып сығып китеп, кис яңынан алып ҡайтыр булған. Ҡаҙанғол ауылынан 300 метр

алыçлыҡта (көньяҡтараҡ урынлашҡан ҡалҡыулыҡта), был өйөр айғыры һәр ваҡытта аттарҙы туплап ял итергә йыйнар булған. Шуға был ҡалҡыулыҡты "Айғыр ял итеү урыны" йә булмаһа "Айғырял ҡалҡыулығы", тип атай башлағандар.

Тарихи документтар буйынса, XIX быуаттың 60-сы йылдарынан алып, Ҡаҙанғол ауылында Йәғәфәр исемле кеше иң байы һанала. Ауыл ҡарттарының һөйләүе буйынса, таштан һалынған һарайҙары булған, бик күп һыйыр малдары, һарыҡтары була. Хеҙмәтселәр тотҡан. 20-нән артыҡ йылҡы малы тота. Был сығанаҡтар тарихи архив документтары менән дәлилләнә.

**Ниңә "Байрамыш" тип атала?** (47)

Байрамыш – Димдең эскә ингән ҙур ҡултығы. Ошо урында йыл һайын башҡорт ауылдарының аҡһаҡалдары байрам ашына, кәңәшмәгә йыйыла торған булғандар. Ошо урын менән бәйле бәйет*:

Кәңәшле ил көн күрер –
Боронғолар әйтеме.
Байрам ашына йыйыр
Илдең аҫыл ирҙәре.
Байрамыш буйҙары гөрләй,
Изге кәңәш ҡорғанда.
Төрлө тарафтарҙан килгән
Аҡһаҡалдар булғанда.

Ошо уҡ бәйетте Исмәғил ауылында йәшәүсе мулла Ғайсин Яхъя белә.

**Гөләшә ҡалҡыулығы** (61)

(Мәктәп музейынан алынған яҙыу)

---

* Бәйет – бында шиғыр мәғәнәһендә. – ред.

Гөләшә – гөл өләшә торған изге урын, унда ауыл зыяраты, әрүахтар ята. Ғөрөф-ғәҙәт буйынса, зыяратта элек-электән үҙ үлеме менән үлгәндәрҙе генә ерләгәндәр. Эсеп, боҙоҡлоҡтар ҡылған кешеләрҙе зыяратҡа индермәгәндәр.

Мөлим-мөлим ҡәрҙәштәр,
Ғәлиәссәләм пәйғәмбәр
Беҙгә әйтеп ҡалдырған:
Ислам дине бөйөктөр,
Биш фарызын үтәргә
Һәммәбеҙгә кәрәктер.
Саф булған, аҡ күңелле
Мөьмин мосолман кеше
Биш ваҡыт намаҙ уҡыр,
Ураҙаһын ҡалдырмаç,
Зәкәт саҙаҡа бирер,
Изге урындарға барып,
Саф күңелдән хаж ҡылыр.
Шуларҙы үтәгән кеше
Изгеләрҙән һаналыр,
Фани донъянан китеп,
Әхирәтлеккә ингәс,
Гонаһ ҡылмаған бәндәне
Хур ҡыҙҙары ҡаршылар.
Һинең алдыңа килеп
Гөл өләшә икән, ти,
Гөләшәгә итер, ти.

**Сирмеш күле** (6)

(Ҡаҙанғол музейы архивынан)

Ауылдың ситендә, Дим яры буйында, айырым бер йорт булған. Уның хужаһы ауылдағылар менән бик аралашып бармаған. Төп кәсебе – балыҡсылыҡ, мурҙа, йылым үргән,

ҡош-ҡорт оялары, суман (талдан эшләнгән ҙур һауыт иген һалыу өсөн), шуларҙы эшләп һатыу кәсебе менән шөғөлләнеп көн күргән. Балыҡ һалыу урынын, күлде, “Сирмеш күле” тип атайҙар. Ирле-ҡатынлы батып үләләр был күлдә.

**Биктимер тирәге** (6)

Ҡышҡы юл – Димдең аръяғына сыға торған урын, һыу туңғас – шул ерҙән 30 метр самаһы бер ҡарт өйәнке үҫә. Шул өйәңкенең өҫкө өлөшөн һәр ваҡыт ҡорт ҡуныу, умарта ҡуйыр өсөн Биктимер исемле кеше киҫеп торған. Ваҡытында ул бик күп умарта тотҡан, бал һатыу кәсебе менән шөғөлләнгән. Ошо ерҙе “Умарта тирәге” лә, “Биктимер тирәге” лә тип йөрөтәләр.

**Ҡаҙанғол ауылындағы нәҫел аралары** (21; 34)

(Ҡаҙанғол музейынан, 1976 йыл)

1. ***Ҡуяндар*** - әрһеҙ, үрсемле, тәбиғәттең ниндәй ваҡытына ҡарамаҫтан яраҡлашҡан, етеҙ, бар эшкә лә өлгөр халыҡ. Улар кәрзин, һауыт-һаба, көнкүреш яраҡтарын бик оҫта үреп эшләгәндәр.

2. ***Ҡойҡалар*** – түҙемле, ныҡлы халыҡ. Улар тояҡтан бик оҫта итеп амулеттар эшләп, кәсеп иткәндәр. Тояҡтан эшләнгән амулет, бер ваҡытта ла туҙмаған, шуға ла ул ныҡлылыҡ, көслөлөк билгеһен йөрөткән. Ҡойҡалар үҙҙәре лә бит бер ваҡытта ла бирешмәй торған, әрһеҙ халыҡ. Был нәҫелдең бик күп оҫталары, ювелир биҙәү әйберҙәре эшләп, ошоларҙы һатып, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ яҡтарына барып, әйберҙәргә алыштырғандар.

3. ***Ҫәпрәләр*** - ҡыҙҙары бик уңған, сабыр холоҡло, элек-электән оҙон сәсле булған; тоғро нәҫел уларға ышанырға була. Һүҙсән булып, ғәйбәт тигән нимә ят булған ҫәпрәләргә. Уларҙың хәтерҙәре бик яҡшы, зирәк. Улар араһынан бик күп

сәсәндәр сыҡҡан. Тарихты бик яҡшы белеп, булған ваҡиғаларҙы һаҡлай белгәндәр. Балаҫ оҫталары.

4. ***Һарт-ҫарттар.*** "Ҫарт – эшләгән эше шарт" – тиҙәр улар хаҡында: маҡсат ҡуйып, шарт ҡуйып эшләгәндәр һәр эште. Уларҙы алдау бик ҡыйын, шарт ҡуйып, килешеү буйынса эш хаҡын алғандар. Улар – балта оҫталары, төрлө әйберҙәрҙе, ағастан һауыт-һабаларҙы оҫта эшләгәндәр.

5. ***Сәрмә*** - ултыраҡ тормош алып барыусы халыҡ. Атаһы өй һалһа, балаһы йыраҡ китмәгән (атай торған ауылдан йыраҡ китергә тейеш булмаған). Бәлиғ булып өйләнгәс, өй һалып, башҡа сығырға тейеш. Бер әйтем бар: "Сәрмә бәлиғ булғас, атай йортонда тормаҫ". Дәртле халыҡ – улар араһынан бик күп йыраусылар (йырсылар) сыҡҡан. Кирбесте бик оҫта һуҡҡандар.

6. ***Торна*** – изге ҡош, башҡорттарҙың тәңре ҡошо. Бәлиғ булып өйләнһә, торналар һөйгән йәрҙәренә тоғро булып ҡалған. Һөйгән йәре булһа, күҙ күрмәҫлек ерҙән бейектә осоп, торна ҡысҡырыр, ти, "тороҡ-тороҡ, торайыҡ, – тип. – Тоғро булам ғүмергә", – ти икән.

7. ***Көҙән*** – нәҫелдәре атаҡлы балыҡсылар, ниндәй күлдә ниндәй балыҡ, ҡай ваҡытта балыҡ ҡаба, шуларҙы бик яҡшы белгәндәр. Балыҡсылыҡ уларҙың төп кәсебе булған. Ау, нәрәтәне бик яҡшы үргәндәр, мурҙа, балыҡ тотоу әйберҙәрен яҡшы талдан үрә белгәндәр. Күл-йылға бүлеп шунда ау, мурҙа һалыр булғандар. Ҡатындары балыҡтан төрлө ризыҡтарҙы оҫта бешергән, балыҡты яҡшы итеп тоҙлай, киптерә, ыҫлай белгәндәр.

8. ***Сыуаш*** – йыуантаҡ, йыуан, тиҙәр. Ирҙәренә ҡыҙыу ҡанлылыҡ хас. Ҡатын-ҡыҙҙары бик дәртле, яҡшы йырсылар, оҫта бейеүселәр булған. Уҡыуға әүәҫ нәҫел.

Элекке ата-бабайҙар һөйләүе буйынса, һигеҙ нәҫелде берләштергән Ҡаҙанғол ауылының тамғаһы – өҙәңге. Мәғәнәһе: урталағы тура таяҡ – башҡорт булып тыуғанһың икән, үҙ халҡыңа бер ваҡытта хыянат итмәй, тура юлдан тайпылмай, алға барыу билгеһе. Юғарыға, мәғрифәтлеккә ынтылыу. Ике яғындағы ярым ай – һаҡлау билгеһе, ул нәҫелдәр араһында һатлыҡ йәндәр булырға тейеш түгел, бер уртаға (берлеккә) берләшергә тигән мәғәнәне аңлата. Быны быуын-быуын белергә тейеш. Был әйтем һүҙҙәрҙе мәҙрәсәлә уҡығанда Исхаҡ мулла әйткән. Яппар араларында ошо уҡ тамға – өҙәңге, мәғәнәһе бер үк. Тәңре ағастары – ҡайын ағасы, аҡлыҡ, сафлыҡ билгеһе.

Ҡаҙанғолдарҙың – 8 ырыуҙың – тәңре ағасы ҡайын булған, изге ағас; тәңре ҡошо – ҡарсыға, изге ҡош һаналған. Тел асҡысы төбө, йәғни, орандары – алаҫ [ут. – Редактор. Артабан: *ред.*].

**Ниңә “Шонтаҡ күле” тип атала?** (160)

Ғайсин Яхъя олатайҙың һөйләүе буйынса, Шонтаҡ күле Исмәғил ауылы янындағы иң ҙур күлдәрҙең береһе. Бик балыҡҡа бай, ваҡытында 5-6 урындан шишмә һыуҙары менән тулыланып тораған күл. Тирә-яғы ҙур тирәктәр менән уратылған булған. Һуңғараҡ шишмәләр ҡороған, ағастарын киҫкәндәр. Был хәл бигерәк тә тимер юлы үткәс, һәр бер ауылға күпмеҙер күләмдә хөкүмәткә күмер тапшырырға задание бирелгән заманда булған.

**Шонтаҡ күл бәйете**

Шонтаҡ күлкәйҙәре, эй, матур,
Тирә-яғы зифа ҡамышлы.
Зәңгәр һыуың һинең тулылана,
Һалҡын шишмәләрҙән көс алып.

Шонтаҡ күлкәйҙәре, эй, томбойоҡ
Тирә-ярҙарында тирбәлә.
Хистәрем дә моңһоуланып китһә,
Ярҙарына килеп хәл алам.

Шонтаҡ күлкәйҙәре һинең кеүек
Балыҡлы ла күлдәр бар микән?
Беҙ үҫкәнбеҙ шундай гүзәл ерҙә –
Ҡәҙерҙәрен белгән бар микән?

Күлдең исеменә килгәндә, былай тип һөйләйҙәр. Балыҡҡа бай булған күлдә ҡыш көндәрендә боҙ аҫтында балыҡтар күренеп торған, уларҙы таяҡ менән һуғып ала торған булғандар. Ә яҙ көнө, балыҡтар ыуылдырыҡ сәскәндә, ҙур-ҙур суртандар һыу өҫтөнә сығып йөҙгән, быларҙы таяҡ ҡаҙау менән алыуы бик еңел булған. Шуға ла шоң-шаңлап, таҡ-тоҡолдап һуҡҡандар. Шулай итеп, Шон-таҡ, шон-таҡ тигән тауышҡа оҡшатып, күлдең үҙен дә Шонтаҡ тип атағандар.

**Кәмәсапҡан, Йәнбәй-Янбай, Нөкәй / Мөкәй төбәктәре**
(74)

Кәмәсапҡан тигән урындар элек ҡалын урмандар менән ҡапланған булған. Шишмә аҡҡан урында, уң яғында, өй нигеҙҙәре, ватыҡ, янған көршәк ярсыҡтары бихисап. Ошо урында Йәнбәй исемле ҡарт йәшәгән. Унын сабынлыҡтары булған. Ҡаҙанғолдар был урынды Йәнбәй-Янбай төбәге тип йөрөтәләр.

Кәмәсапҡан – Йәнбәй-Янбай ҡарттың улдары кәмә эшләгән урын (исеме шунан килә). Сәйфетдинов Ғилметдин олатайҙың һөйләүе буйынса, шишмә башында Йәнбәй ҡарттың йорттары булған. Йәнбәй төйәген, ҡарттың элек бесән сапҡан урындарын Ҡаҙанғолда белмәгән кеше юҡ.

Йәнбәйҙең телһеҙ улы Нөкәй мал көткән төбәкте Нөкәй-Мөкәй төбәге тип йөрөтәләр.

**Нөкәй / Мөкәй төбәге бәйете** (286)

Йәмле генә Димкәй, ай, буйҙары
Һутлы ғына йәшел үҙәнле.
Шул ерҙәрҙә аттар көтә икән
Телһеҙ генә Нөкәй мөкәйләп.
Йәмле генә Димкәй, буйҙарында
Йәш имәндәр үҫкән теҙелеп.
Баш эйергә ҡушҡан яуыз дошман
Ғорур торған ғәзиз ҡәрҙәштәр.

**Йәнбәй / Янбай бәйете** (74)

Йәнбәй генә ҡарттың төйәге,
Оҫтаханаларға бай инең.
Етмеш кенә һөнәр эйәһе –
Етмешкә баҫҡан ир инең.
Һай! Етмеш йәшлек оҫта һин инең,
Йәнбәй генә ҡарттың, ай, улдарын
Тирә-яҡта хөрмәт иткәндәр,
Алтын ғына ҡуллы, ай, улдары
Халыҡҡа ла файҙа иткәндәр.
Йәнбәй генә ҡарттың төйәген күреп,
Күп кешеләр хайран ҡалғандар.
Эшләгәндә әйберҙәрен алып,
Ҡыуанғандар барса тирә-яҡ,
Шатланғандар ауыл ҡарттары.
Яуыз ғына дошман, ай, бер килеп,
Төйәгеңде һинең юҡ иткән.
Дөрләп кенә янған, ай, донъяңды күреп,
Йәнбәй ҡартта нисек түҙгәндер?
Яуыз ғына драгун нисек ҡулың барҙы

Ил ағаһын яза ҡылырға?
Бармаҡтарын ҡылыс менән сабып
Нәфрәт кенә беҙҙә уяттың.
Бәлиғ кенә булмаç, ай, улыңдың
Телкәйен дә тотоп киçкәндәр.
Дошмандарға башын эймәйсә,
Эй ҙә батыр заттан Йәнбәй ҡарт,
Ил ағаһы Йәнбәй, һин батыр.

Йәнбәй ҡарттың бик күп малы булған. Һуңынан теле киçелгән имгәнгән улы ҡалған малдарын көтөп көн күрә, Шәрип менән Ҡаҙанғол аçмаһында бер төбәк бар, малдарын һәр ваҡыт шунда көткән, теле булмағанлыҡтан аттарына “нукай” тигән ауаз ғына сығара алған. Уның хөрмәтенә был төбәкте Мөкәй тип йөрөтә башлағандар. Сирләп бер үҙе генә ҡалған Мөкәйҙе инәһе яҡлап бер туған апаһы Ябалаҡлы ауылына ала. Тыуған яғын һағынып, көн дә шишмә янына килеп, был ғәрип илар булған. Уның хөрмәтенә Ябалаҡлы ауылында шишмәгә Мөкәй тип уның исеме бирелә.

### **Фәриҙун ауылы ҡайҙан килеп сыҡҡан?** (160)

Фәриҙун ауылы 1917 йылда барлыҡҡа килгән тигән ҡайһы бер мәғлүмәттәргә мин ҡырҡа ҡаршы. Был – кемдеңдер уйлап сығарыуы.

1910 йылдарҙа Столыпин закондары сыҡҡан. Ошо ваҡытта Фәриҙун ауылы 4-5 йорттан торған ауыл ине. Уға нигеҙ һалыусы Фәрит оҙон. Ауылға Оҙон Фәрит, һонтор Фәрит исемле (ҡушаматлы) кеше нигеҙ һалған. “Фәрит оҙон” – шул һүҙҙән “Фәриҙун” ялғанып эшләнгән. Быны башҡорт осондағы кешеләр белергә тейеш.

Революциянан һуң, күсеп ултырған кешеләр иçәбенә, ауыл ҙурайҙы, был 30-сы йылдар тирәһе булғандыр. Бында фермалар төҙөй башланылар, иген келәттәре, бер контор кеүек нимәне шул 22-се йылдар тирәһендә һалғандарҙыр инде. Шул Фәрит тигән кешеләр революцияға тиклем һәр ваҡыт балыҡсылыҡ менән шөғөлләнделәр, кис мурҙа, нәрәтә һалып, иртән Дәүләкәнгә илтеп һатырҙар ине. Фәриҙун

күлдәре балыҡҡа бик бай булды, бында табан, ҡара балыҡ тоторға була ине. Дәүләкәндә ниместәр [немецтар] быны көтөп, һорап алалар ине. Исмәғилдән дә бик күптәр шул шөғөл менән былашты.

**Өйрәккүл** (160)

Был бик ҙур күл, Исмәғил башҡорттарының яратҡан балыҡлы күле булған. Бында яҙын, йәйен бик күп ҡоштар, ҡыр ҡаҙҙары, аҡҡоштар һәм бихисап күп өйрәктәр булған. Шуға "Өйрәк күле" тип атағандар. Ә ауылы 5-6 йорттан булған, күлдең исеме менән "Өйрәккүл ауылы" тип аталған. Һуңынан ер алынғандан һуң, халыҡтың ай-вайына ҡарамай, уларҙы кире Исмәғилгә ҡайтаралар. Хәҙерге көндә был нәҫелдән Минигәрәевтар йәшәй. 1812 йылда Исмәғил ҡарт француз яуында ҡатнаша. Ырымбур губернаторынан ерҙе мәңгеләштереү буйынса грамота алып ҡайта. Был ваҡытта уға 56 йәштәр самаһы була.

**Ярыштауҙа әүлиә ҡәбере** (6)

Был хәл һуғыш башланыр алдынан, 39-сы йылдарҙа булды, булһа кәрәк. Элек күлдәрҙә, Дим йылғаһының үҙендә лә, балыҡ бик шәп була ине. Мин һәр ваҡыт, күлде ситәнлек менән бүлеп, талдан үрелгән мурҙалар менән тота инем балыҡты. Йәй көндәрендә табан, ҡара балыҡ иң үтемле тауар ине. Уны әҙерәк ләмгә төрөп, һыу һалып мөгәрәпкә ҡуйһаң, ике-өс көн тере килеш һаҡларға була ине.

Аҙыраҡ йыйғас, иртәнге сәғәт 4-тәр тирәһендә тороп, уны Дәүләкәнгә илтеп һата инек. Дәүләкәндәр, көтөү ҡыуғанда әләкһәң, шундуҡ алып бөтәләр ине, баҙарға сығырға ла түгел. Бер барғанда иртән Ишдәүләтов Байбулат та осраны. Ул Йүкәлекүл яғына үҙенең нәрәтә, ауҙарын һала ине. "Нәрәтә, ау кәрәк булһа, минең Дәүләкәндә сыбыҡ осо нәҫелдәр бар, әйҙә шуларға керәйек, Сәхиулла ҡарт бәйләп һата нәрәтәләрҙе", – тине.

Керҙек. 80-гә етеп килгән аҡ һаҡаллы ҡарт Сәхиулла менән таныштырҙы. Бихисап ептән үрелеп бәйләнгән йылым, ау – нимә генә юҡ инде. Барыһын да күрһәтте.

Ҡарсығы Мәликә исемле, ул да ҡартына ау ҡорамалдарын үрергә ярҙам итә икән.

Сәй эсеп, донъя хәлдәрен һөйләшкәс, ошо ҡарсыҡ әйтте (Байбулаттың йыраҡ ҡына булһа ла инәһе яҡлап апай тейешле кешеһе икән): "Донъялар бик болғанырға тора. Байбулат, һеҙгә лә килеп етәр сират. Ярыштауға барып, доға уҡып, хәйер һал", – тине. Ҡайтҡас, беҙ йома көн иртүк Байбулат, тағы Фәхретдин ҡарт (ул ваҡытта йәш ине) өсәүләп шул Әүлиә ҡәберенә киттек. Теге әбей өйрәтеүенсә, тау итәгенән башлап 70 аҙым атлап барабыҙ ҙа (өҫкә табан тауға), тиҫбе тартып тәһлил әйтәбеҙ. Шулай тауға менеп еткәнсе 40 тапҡыр ултырып, тиҫбе тарттыҡ.

Был ҡәберлек билгеле урында, Ибрай менән Иҫке Көрмәнкәй яғында, урынлашҡан. Шунан ошо ҡәберлеккә килеп, Ҡөрьән сүрәләрен уҡып, хәйер һалдыҡ.

Теге әбейҙең әйтеүе буйынса, ул батыр үлһә лә, уның рухы йәшәй, шуға ышанып унан һораһаң, теләктәрең ҡабул булыр, ти.

Ул батыр беҙҙең иреклек, иркенлек өсөн көрәшкән, ҡыйырһытылған, етемдәрҙе яҡлап: "Миңә ышанып инанғандар ғүмерле булыр – беҙ юҡҡа көрәшмәнек", – тигән.

Шул тау башында башҡорт ғәскәрҙәре өс көн, өс төн ҡамауҙа булған. Үҙенең бер яҡын дуҫын төндә, нисек тә ошо тоҙаҡтан сығып: "Минең ҡылысым эйелде тип, беҙҙең егеттәр ошонда ятып ҡалды тип, иламаһындар ҙа, ҡайғырмаһындар ҙа, беҙҙең яҡта дөрөҫлөк булды – беҙҙең рухты дошман бер ваҡытта ла еңә алмаясаҡ тип халыҡҡа еткер", – тигән.

Теге дуçы бик нык тырышлык менән  ҡамауҙан ҡотолоп, яраланған килеш Ибрай ауылына килеп, батыр аманатын тапшырып үлгән.

Ошо хәйер-доғалар йөрөттө микән, контузия алып та, үлем аçтына кермәнем, иçән ҡайттым.

Теге ике кеше лә, Байбулат менән Фәхретдин ҡарт та, һуғыштан иçән-аман йөрөп, бик ҡартайып вафат булдылар. Мәликә ҡарсыҡ ул ваҡытта, 39-сы йылдарҙа, шул 80-гә еткән булдымы икән, Сәхиулла ҡарттан әҙерәк өлкәнерәк кеүек күренде. Батырҙың исемен Çөләймән тине, Çөләймән әүлиәгә барығыҙ, тине.

**Берҡаҙған күле** (279)

Ул күл Алғанан 1,5 саҡрым Мәкәш ауылына тиклем һуҙылған булған. Һуңғы быуатта һөрөнтө ерҙәрҙе күбәйтеү өсөн ерҙәрҙе ошо күл  ярына тиклем һөргәндәр. Шунан төбөнә ләм, унан һуң ҡамыштар үçеп, күл һаҙлыҡҡа әйләнә. Ата-бабаларыбыҙ һөйләүенсә, бында элек берҡаҙған ҡоштары – пеликандар килер булған. Балыҡ, бик күп баҡа уларҙы йәлеп иткән, күрәһең, бында һай булғанға уларҙы тотоуы бик еңел булғандыр. Һуңғы тапҡыр был ҡоштарҙы 1905 йылдарҙа күргәндәр, тип һөйләйҙәр ине.

**Әкеш тауы** (279)

Асылыкүл буйында элек кантун ваҡытында бер ихтилалда ҡатнашҡаны өсөн күп йылдар Әкеш (русса исеме – Апуш) исемле кешене эҙәрләгәндәр.

Ул үҙе тауҙарҙа землянка яһап, шунда йәшәгән, иптәштәре менән урыç ғәскәрҙәренә ҡапыл килеп сығып һөжүм иткән.

Быны Асылыкүл, Дим буйында белмәгән кеше булмаған. Уға бәйле Асылыкүл буйында 6-7 исем бар: Сөйәрғол Әкеше,

Мерәç Әкеше, Сурай Әкеше, Ҡотло Әкеше, Емерек Әкеше, Йүкә аçты Әкеше.

Ошо кеше иптәштәре менән бесән ваҡытында ошо һаналған кешеләргә ярҙам итеп йөрөгән. Шуға уның хөрмәтенә был сабынлыҡтарҙы шулай атап йөрөйбөҙ. Ә ул йәшәгән тау *Әкеш тауы* тип атала. Әкеш ул ҡасҡындарҙың етәксеһе булған.

### **Ҡоръятмаç ауылы*** (279)

Беҙ 1930 йылда Алға ауылына күстек. Беҙҙең атайҙар Дим буйында Ябалаҡлы ауылында йәшәгәндәр. Үҙебеҙ – төп Ябалаҡлы ауылы башҡорттары. Шунан бабайҙар çунарға килеп йөрөгәндәр. Ошо ауылдың Мәргән атыусы çунарсылары Мөхәмәҙи, Ҡара Яҡуптан Мөхәммәт, Яппар ауылының данлыҡлы çунарсыһы Фәйзулла булған. Ҡоръятмаç çыуының башына, ҡапҡан çауыт çалғаннар, солоҡ ҡуйғаннар.

Ҡапҡанына кейек эләгер,
Солоғона килеп ҡорт ҡуныр.
Бигерәк тә бай ҙа, матур яҡ икән,
Ҡоро ғына тоҙаҡ буш ятмаç, – тип йырлар булғандар.

### **Бөрйән ырыуы** (215)

---

* Рәшит Шәкүр ауылдың атамаһына ҡағылып, түбәндәгесә фараз ҡыла: "Хәҙерге Ҡоръятмаç өс яҡтан ҡалҡыулыҡтар менән уратып алынған уйһыу ерҙә ултыра. Урамдары әле лә аҙ ғына ямғыр яуғанда ла ҡоро ятмай. Ҡоро ятмау, һыулы, дымлы булыу ҙа исем ҡушыуға нигеҙ бирергә ихтимал".

Ул был ауылдар тирәһендә 100-ҙән артыҡ ер-һыу исемдәре яҙып алған. Һәр береһе тарихҡа ҡағылышлы.

Ҡыҙылағас күле, Төнҡамыш ҡойоçо (ҡойо тиҙәр шишмәне), Ябалаҡ ҡойоçо, Алабейә ҡойоçо, Иылалыкүл, Оçонҡонноуяҙ, Иүкәле сағылы, Сукерек, Айыу убаçы, Ҡарағас тауы, Сәнселмә, Ташҡурғы, Оло Үрҡар, Çикәлтәле Үрҡар, Бәләкәй Үрҡар, Ташлытау, Арҡылы бүләк (ҡыблаға арҡылы урманлыҡ), Ташлыҡ, Ҡушанай, Аҡтау, Ҡашҡатау, Тәрәнуй, Ташморон, Яман Өйҙөрөк, Ербаҡан. – Рәүеф Мөхәмәтғәлин. Артабан: Р.М.

(Дәүләкән ҡалаһының 3-сө һанлы мәктәп уҡыусылары йыйған материалдарҙан)

Дүртөйлө ауылы риүәйәтенән сығып фекер йөрөткәндә, бөрйәндәр бында 1755 йылғы күтәрелеш осоронда батша карателдәренең эҙәрләүҙәренән ҡасып килеп ултырған. Уларҙың элекке төйәк иткән урыны – Урал аръяғы Ирәндек итәктәре, дөрөҫөрәге данлыҡлы Ябыҡҡарағай урманы. Эҙәрләүҙәр яуыз түрә, бәдбәхет Брагиндан үс алыу ваҡиғаһына бәйле була. Халыҡ Брагинды генерал тип атай. Бына шунан һуң, генерал үлһә лә, закун үлмәҫ тип, "Дим буйы Аҡбуҙат" [Дим буйы бүртә ат?] йырын йырлап, ошо яҡҡа сығып киткәндәр. Дәүләкән, Әлшәй райондарында бөрйән ырыуының алты-ете ауылы бар: Көрмәнкәй (унда бөрйәндәргә тиклем аҫаба башҡорттары йәшәгән була), Этҡол, Ибрай, Ҡыпсаҡ-Аҫкар, Тәүәтәй.

**Ата-олатайҙарҙан ҡалған шәжәрәм** (298)

Аҡҡусҡар
↓
Байыш
↓
Йәрмөхәмәт
↓
Ғөбәйҙулла
↓
Вәлиулла
↓
Ғәлиарслан
↓
Вәсил
↓
Минзәлә

**Шәжәрәм** (289)

Ҡапай

↓

Нәҙерғол

↓

Һөйәрғол

↓

Латип

↓

Мөхәррәм

↓

Зиязетдин

↓

Хәҙисә

Элек беҙҙең ата-бабайҙар Дим буйының уң яҡ ярылап үткән юлды **Боронғо башҡорт юлы** тип атайҙар ине. Ул юл Ырымбур-Өфө ҡәлғәләрен тоташтырған булған (148)

Олатайым Мөхәмәтзариф 1912 йылда, 82 йәшендә, вафат була. Уның һөйләүе буйынса, Ҡәнзәфәр бейҙең улы Дәҫтән бей Ҡырҡөйлө мең башҡорттарының ханы булған, ҡырҡ ырыу нәҫелде берләштереп идара иткән. Уның түбәһе Бигеш ауылдары булған. Бигеш элек ике өлөштән – Үрге, Түбәнге өлөштән торған. Түбән Бигеш һуңғараҡ Салауат ихтилалында ҡатнашҡан Әлбәй Мырҙағолов старшина хөрмәтенә Әлбәй ауылы тип атала башлай. Был тарихи документтар менән раҫлана. Тәүге ревизия мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Бигеш,

Әлбәй, Үзрәкбаш ауылдары Дәҫтән түбәләре тип атала (5 ревизия, 1795 йыл)

Дәрхән [Тархан] күле Дәүләкән ҡалаһына яҡын ерҙә урынлашҡан. Был матур зәңгәр күлдең зифалығына һоҡланмаған кеше булмаған. Ошо ерҙә тирмә ҡороп Дәҫтән бей ял итәр булған.

Ҡәнзәфәр бей 4 улын саҡырып: “Һеҙ минең – уң ҡулым, – шунан ҡулын алға ҡулым алға һуҙып – баш бармағым – үҙем, ә ҡалған бармаҡтарым – һеҙ. Минең быуындарым нисек эшләй, һеҙ шулай булырға тейеш”, – тип, улдарына ер бүлеп биргән. Ҡырҡ нәҫелде берләштерегән Дәҫтән булған ул. Унда Яппар, Ҡаҙанғол, Шәрип, Бигеш, Ябалаҡлы, Мәкәш, Ҡоръятмаҫ, Көрмәнкәй, Дәүләкән кеүек ҙур ауылдар кергән (69).

**Минең ырыу ағасым** (291)

Ҡапай

↓

Һөйәрғол

↓

Йомағол

↓

Мөхәмәтйән

↓

Әхмәҙи (старшина)

↓

Хөсниямал

## ӘКИӘТТӘР

**Әтәсбай** (262)
(Әлисә Вәкил ҡыҙына өләсәһе Ғәниева Хәҙисә Мөхәммәтсаҙиҡ ҡыҙы һөйләгән)

Борон-борон тип башлайым
"Әтәсбай" әкиәтен.
Һеҙ ҙә уҡып белһен, тиеп
Был ҡоштоң әкәмәтен.
Шулай итеп, йәшәгән, ти,
Бер ауылда Әтәсбай.
Уның кеүек зирәктәрҙе
Эҙләп тә табып булмай.
Көндәр буйына был әтәс
Сүплегендә тибенгән.
Ниндәй ялтыр-йолтор таба
Илтеп кәртәгә элгән.
Төрлө-төрлө хазиналар
Тапҡан үҙ быуатында.
Көҙгө, тараҡ, ҡурғаштарҙы
Һаҡлаған һандығында.
Ә бер көндө, бына нимә,
Аҡ ҡашмау табып алған.
Шул табышы Әтәсбайға
Бигерәк оҡшап ҡалған.
Кәпәсен башына сөйөп,
Үтә ғорур йөрөгән.
Берәйһенең күҙе ҡыҙһа,
Кейеп торорға биргән.
Май башы. Күрше ауылдан
Әтәскә килгән бер ҡарт.
Ғәләметдин һүҙ әйтә алмай

Ҡатҡан ҡалпаҡҡа ҡарап.
Әйтеп үтергә кәрәктер:
Ҡашмау үтә лә матур.
Хатта битарафтар уға
Һоҡланып күҙен атыр.
Аптырап бер аҙ торғастын,
Ҡарт аҡылына килә.
Ни тип алдашырға белмәй,
Былай тип хәбәр теҙә.
“Эй, әтәс дуҫ, был аҙнала
Ҡыҙым кейәүгә сыға.
Биреп торсо ҡашмауыңды
Кейергә шул сараға”.
Әтәсбай һис ҡарун түгел,
Аҡыллы, йомарт була.
Яҡшы теләктәр еткереп,
Ҡартты оҙатып ҡала.
Бер аҙна ул бик тиҙ үткән,
Әтәсбай әле көткән.
Ағастарға һары төшкән,
Ғәләметдин юҡ икән.
Шунда әтәс аңлап ала
Ҡарттың мәкерле уйын.
Ҡайҙан улай уйлап тапҡан,
Ҡыҙын, ҡыҙының туйын?
Ҡояш сығыу менән иртән,
Юлға сығырға була.
Аҙ-маҙ ғына ҡапҡыларға
Тоҡҡа ашамлыҡ ала.
Таң нуры иркәләгәндә
Һанай-Шайтан тауҙарын.
Яҡшы юл теләп әтәсте
Оҙатҡандар дуҫтары.
Дәртле итеп шәп-шәп атлай,

Туғайҙар һуҡмағынан.
Туҡтап ҡалды, нурлы юлды
Ҙур даръя-диңгеҙ быуған.
Баҫма ла юҡ. Нисек кенә
Сыҡҡан икән тиһеҙме?
Уйлап-уйлап торған да ул
Тоҡҡа һалған диңгеҙҙе.
Иңенә ҡабаттан элә
Тылсым тулы муҡсаһын.
Йырлап, яңғырата үҙе
Көҙҙөң алтын баҡсаһын.
"Бөрләгән"де көйләп бара,
Йәйғор төҫлө урмандан.
"Туҡта!" – тигән тауыш уны
Арындырған уйынан.
Ҡараһа, алдында ғына
Күк бүре баҫып тора.
Әтәс уны күрмәгәндәй
Үҙ юлы менән бара.
"Туҡта, тиҙәр! Хәҙер бына
Тотам баҫтырып, шунан…"
Һүҙен әйттереп тә бөтмәй
Ҡош уны тоҡҡа һалған.
Ары бара. Бер саҡ арттан
Килә егет-баһадир.
Атҡа егелгән арбала
Елә генә аҫыл ир.
Ҡошто күргәс, туҡтаны ла:
"Ултыр! – ти – алып барам".
Вәт яҡшы кеше осраны
Әтәсбай ҙа шатлана.
Арбаға менеп ултыра
Юлда арып та ҡуйған.
Баралар, ти, хозурланып

Асылы буйҙарынан.
Тик егет кинәт әтәскә
Арҡан менән ташлана.
Иркен, хәтфәләй болонда
Ҡаты алыш башлана.
Беҙҙең Әтәсбай дуҫ – батыр!
Юлдан ары атланы.
Егетте, атты, арбаны
Ҡапсығына ташланы.
Ҡабаттан уның юлында
Ҡаршылыҡ осраманы
“Суҡ муйыл”ды йырлай-йырлай
Ул һуҡмаҡтан атланы.
Ауылға барып етәрәк
Ҡапҡылаған, ял иткән.
Ғәләметдин йортон тапҡас,
Туп-туры кереп киткән.
Ишек алды матур ғына,
Оло арбаҙы тора.
Әтәс: “Ғәләметдин ағай,
Сыҡ әле!” – тип ҡысҡыра.
Кем килгәнлеген белгәс, ҡарт
Әҙерәк ҡаушап ҡалды.
Ағарынды, ҡыҙарынды,
Тирә-яҡҡа ҡаранды.
– Мин ҡашмауымды алырға,
Килдем бит, Ғәләметдин!
– Бик мәслихәт, Әтәсбай дуҫ,
Унда торма, өйгә ин.
– Инеп торорға ваҡыт тар,
Оҙаҡҡа килмәнем мин.
Ҡашмауымды алайым да
Унан һуң ҡайтырмын, тим.
Ҡарт бик ҡурҡа, Әтәсбайҙы

Берәй кеше күрер тип.
Ҡошто арбаҙға яба ла
Өҫтөнән ҡуя ҙур бик.
Ғәләметдин уйлауынса,
Әтәсте үгеҙ һөҙөр.
Һөҙөп, тапап, үлтерер ҙә
Ҡарттың хәүефе бөтөр.
Тик беҙҙең әтәс аҡыллы,
Арбаҙға кереү булды.
Асып ебәрҙе лә тоғон,
Бүребайҙы сығарҙы.
Туйынғас башмаҡ итенән
Бүре тәҙрәнән сыҡты.
Кеше күҙенә салынмай
Ҡара урманға ҡасты.
Ғәләметдин тышҡа сыҡһа,
Күҙҙәре шарҙай була.
Ни тиһең, уның алдында
Әтәсбай баҫып тора.
– Бабаҡай, ҡайҙа ҡашмауым?
Минең ҡайтаһым да бар.
– Эй, дуҫҡайым, һиңә тигән
Иген келәттә бер лар.
Әтәсте шунда бикләй ҙә,
Хәйләкәр уйлап ҡуя:
“Был игенде ашап бөтһә
Үлерлек булып туя”.
Әйткәнемсә, беҙҙең дуҫтар
Һатып алмай аҡылды.
Келәт тыштан йоҙаҡланғас,
Әтәс тоғо асылды.
Егеттең ҡапсыҡтарына
Игенде тейәнеләр.
Ҡайтҡанда түгелмәһен, тип,

Ауыҙын бәйләнеләр.
Келәттән сыҡҡанда егет
Тағы бер рәхмәт әйтте.
Изгелектәр теләй-теләй
Атҡа ултырып китте.
Был саҡ бабай гәзит уҡып,
Өйҙә ултыра ине.
Әбейе, ҡото алынып:
“Ҡара тәҙрәгә!” – тине.
Һушы китә яҙҙы ҡарттың
Әтәсте күреү менән.
“Үгеҙемде лә ашаны,
Хәҙер ҡалдым игендән”.
Асыулы ҡарт – уттан яман –
Ҡошто эләктерә лә,
Ҡайнар эҫе мунсаһына
Бикләргә тип килтерә.
“Инде ҡотола алмаҫһың,
Башыңа эҫе ҡабыр!”
Эй, туҙынып кереп китә
Өйөнә. Әтәс сабыр.
Көлөп кенә ҡуя ҡарттың
Этлек тулы уйынан.
Ауыҙын асып ебәргәс,
Диңгеҙ аҡты тоғонан.
Вәт тамаша! Бөтә халыҡ
Йыйыла был тирәгә.
Ниндәй батыр килгәнлеген
Теләй улар күрергә.
“Кикирикүк!” әтәс тышта
Йырын һуҙып ебәрҙе.
“Ҡашмауҙың тарихы”н көйләп
Аптыратты күптәрҙе.
Ғәләметдин дә, әбей ҙә,

Оялып ҡасты баҙға.
Ғорур әтәс эре генә
Улар йортона уҙа.
Тәүҙә ултырып сәй эсә,
Бик арыған икән ул.
Тағын да хәл алыр ине
Ҡайтырға ла кәрәк шул.
Һандыҡ төбөнән ҡашмауҙы
Эләктереп ала ла,
“Иҫән-һау булығыҙ!” – тиеп,
Яйлап ҡайтырға сыға.
Бер ауылдан үткән саҡта,
Әтәскә осрай егет.
Ҡунаҡ итеп ебәрә ул,
Күстәнәс бирә төрөп.
Дим буйҙарына еткәнсе
Бүре оҙата бара.
Ҡашмауҙы күреп, һандуғас
Йырынан туҡтап ҡала.
Шулай ҡайтып етә әтәс
Тыуған ауылҡайына.
Үткән ике көн эсендә
Дуҫтарын бик һағына.
Ултырып доға ҡылалар,
Әтәсбай хәбәр һөйләй.
Бер ситтәрәк Тауыҡбикә
Себештәргә йыр көйләй.
Әгәр күрергә теләһәң
Әтәсбайҙың ҡашмауын.
Беҙҙең яҡтарға килеп сыҡ
Юлды бик тиҙ табырһың.
Уралтауҙың итәгенә
Һыйынған гүзәл ауыл.
Тирә яғы иҫ китерлек,

Ул урмандары, тауы!
Емеш-еләк, йәшелсәләр
Баҡсаларҙа туп-тулы.
Күктә яна йондоҙҙары,
Шишмәләре шифалы.
Ошо мөғжизә-төбәктә
Гөрләп йәшәп ятабыҙ.
Хәҙергә хуш! Әтәс менән
Һеҙҙе көтөп ҡалабыҙ!

## ЙЫРҘАР

### **Тубылғы ла ағас, ай, ҙур булмай** (211)

Тубылғы ла ағас, ай, ҙур булмай,
Туры ла юл – ураy юл булмай.
Кешеләрҙән кеше һис кәм булмай,
Тик яҙмыштар төрлө булғылай.

Тубылғы ла ағас, ай, сәскә атҡан
Оло ла ғына юлдың буйында.
Киләсәктә һәр саҡ һеҙҙең менән
Һеҙ булырһыҙ минең уйымда.

Тубылғы ла ағас, ай, ҙур булмай
Тубылғыҙан үтә лә юл булмай.
Ҡайҙа ғына барһаң да, бәхетең булһын,
Бәхетле лә кешеләр хур булмай.

### **Ҡарасай ҡыҙ** (211)*

Ҡарасай кейгән ҡар(а) итек,
Күтәрмәһе тар итек.
Ҡарасай сыҡҡан урамдарға
Юҡ йомошто бар итеп.

Ҡарасай ҡыҙы, ай, матур ҡыҙ,
Ағарта, ти, керҙәрҙе.
Ҡарасай кеүек матур ҡыҙҙар

---

* *Ошондай уҡ текст Дәүләкән районының Дүртөйлө ауылында Закуан Әхмәҙиевтан яҙып алынған//Нәҙершина Ф.А. Рухи хазиналар. – Өфө, 1992. 41-42-се бб. Был йыр Әлшәй районының Ҡыпсаҡ-Аскар ауылында ла киң билдәле.*

Һарғайта, ти, ирҙәрҙе.

Ҡарасай ҡыҙҙың ҡалпағы ла,
Яңы суҡланған сағы.
Ҡарасай ҡыҙҙы уятмағыҙ
Яңы йоҡлаған сағы.

Ҡарасай ҡыҙы бик матур,
Юрған ябынып ятыр.
Һыҙылып таңдар атҡан саҡта
Ҡыҫып-һурып уятыр.

### **Шарлы урман** (212)

Шарлы урманҡайҙарҙың уртаһында
Боролоп-боролоп үҫә бер уҫаҡ.
Шарлы урманҡайҙар ҙа китмәҫ ине
Йыйын Яйыҡҡыбы бер булһаҡ.

Шарлы урманҡайҙарҙың, ай, бейеге,
Һыҙғырһам да сыҡмай кейеге.
Шарлы урманҡайҙары ҡулдан киткәс
Үлмәйенсә китмәҫ көйөгө.

### **Зөләйха** (212)

Ай юғары, ай юғары,
Айға менәһем килә.
Айға менеп, түбән ҡарап,
Һине күрәһем килә.

Таңдан тороп һыуҙар һиптем
Баҡсалағы түтәлгә.
Күҙем төшһә, күңелем төшмәй

Һинән башҡа бүтәнгә.

Оҙон ҡара сәстәреңде
Таҫма кәрәк үрергә.
Өҙөлөп һөйгән йәрең килгән,
Сыҡсы, зинһар, күрергә.

Аҡлы-суҡлы ал таҫмаңды
Тағып ебәр тәңкәңә.
Шул егетте яратам, тип
Әйт, Зөләйха, әсәңә.

**Мәжлес йыры** (111)

Бейек кенә тауҙың баштарында
Юлаусынан ҡалған бер күмер.
Ашайыҡ та эсәйек баш һау саҡта,
Ике килмәй икән был ғүмер.
Сәхрәләрҙә алма серемәй, тиҙәр,
Бисмиллалар тиеп ташлаһам.
Өҫтәлдәрҙән ризыҡ кәмемәй, тиҙәр,
Ағай-эне менән бергә ашаһаң.

**Ҡыр ҡаҙҙары** (79)

Ҡаҙҙар оса оло юлға,
Елпеп пар ҡанаттарын.
Һағыныр инде ҡошҡайҙарым
Тыуып үҫкән яҡтарын.
Ҡул болғап оҙатып ҡалам:
Хушығыҙ, ҡошҡайҙарым!
Онотмағыҙ тыуған илдең
Тирәкле туғайҙарын.

Ҡаҙ ҡанаты ҡаурый-ҡаурый,
Нисәлер, һанаманым.
Ниҙәр яҙҙы улар күккә
Мин генә аңламаным.

Ҡул болғап оҙатып ҡалам:
Хушығыҙ, ҡошҡайҙарым!
Онотмағыҙ тыуған илдең
Тирәкле туғайҙарын.

Ҡаҙҙар оса алыҫтарға,
Ҡанаттарын талдырып.
Оса улар алыҫтарға,
Тыуған илен ҡалдырып.

Ҡул болғап оҙатып ҡалам:
Хушығыҙ, ҡошҡайҙарым!
Онотмағыҙ тыуған илдең
Тирәкле туғайҙарын.

Һикереп кенә төштөм, ай, төбәккә,
Ике генә бөртөк еләккә.
Береһе генә ҡалды, береһен ҡаптым
Ял булһын тип янған йөрәккә.

Ағиҙелкәй аға тулҡынланып,
Башҡа йылғаларҙан кәм түгел.
Кешеләрҙән кеше һис кәм түгел,
Тик бәхеткәйҙәре тиң түгел (109).

*   *   *

Уйна, дуҫым, гармуныңды
Һин матур уйнатаһың.

Уйнатаһың, йырлатаһың,
Күңелде йыуатаһың.

Уйна, дуçым, гармуныңды,
Беҙ йырлаған көйҙәргә.
Беҙ йырлаған, һеҙ уйнаған
Ҡалһын һағынып һөйләргә.

Гармунсы булһын йәрең,
Гармунсы булһын йәрең.
Гармунсының быу(ы)ны һайын
Мөхәббәт була уның (112).

**Юрмый буйы** (249)

Асылыҡай буйы – аçыл таш,
Юрмый буйҡайҙары – йәшел таш.
Юрмый буҡайында үçкән ирҙәр
Яçы яурын булыр, ҡара ҡаш.

Аҡ ҡарсыға менән күк ҡарсыға
Берен-бере ҡыуып талсыға.
Ашау-эсеү менән дандар сыҡмай,
Татыу йәшәү менән дан сыға.

Юрмый ғына буйы дөм ҡарағай,
Үтеп кенә булмай ҡарамай.
Ыласын кеүек кенә ир булһаң да,
Мәслихәтһеҙ эштәр ярамай.

Юрмый буйҡайҙары аҡ татыр,
Аҡ татырҡайҙарҙа мал ятыр.
Тыуған-үçкән ерҙе таяныс иткән
Ир-ат күңелендә хаҡ ятыр.

**Юрмый буйы** (67)

Юрмый ҡалҡыуында ем-ем итә
Юлаусынан ҡалған бер күмер.
Аҡрын ғына, беҙгә һиҙҙермәйсә,
Үтә лә китә икән был ғүмер.

Асылыҡай буйы, ай, аҫыл таш,
Юрмый буйҡайҙары – йәшел таш.
Юрмый буйҙарында үҫкән егет –
Яҫы ла ғына яурын, ҡара ҡаш.

Асылыҡай буйы, ай, аҫыл таш,
Юрмый буйҙарында яҫы таш.
Юрмый буйҙарында үҫкән ҡыҙҙар
Нәҙекәй генә билле, ҡыйғас ҡаш.

Юрмый буйҡайының туғайында
Ат аунарҙай тигеҙ ерҙәр бар.
Ирҙәр менән ирҙәр берҙәй түгел,
Берәүҙе бишкә торор ирҙәр бар.

Юрмый буйҙарынан йылҡылар ҡайта,
Алдан сабып килә күк юрға.
Ашап та ғына эсеп, уйнап-көләйек,
Хоҙай ғүмер бирһен күп йылға.

Юрмый буйҙарына бүреләр килгән, тиҙәр,
Һоро ла ғына микән, күк микән?
Уҙған ғүмерҙәрҙең билгеһе юҡ,
Ҡалған ғүмерҙәребеҙ күп микән?
Юрмый буйҡайының бүтәгәһе
Һәр бөртөкәйҙәре ҡыл кеүек.
Был ғүмеркәйҙәрҙең уҙыуҙары
Ҡиблаларҙан иҫкән ел кеүек.

**Юрмый буйы** (289)

Юрмый буйҡайҙары, ай, бүтәгә,
Ат тояҡҡайҙарын күтәрә.
Был йырҙарым минең тәсбих түгел,

Әҙрәк-мәҙрәк күңелде күтәрә.

Юрмый буйҡайҙары, ай, туйыра,
Япраҡтарын ярһа ҡуйыра.
Һандуғастар кеүек һайрашайыҡ,
Мәжлестәр шуны бойора.

**Сәрмәсән буйы*** (265; 280)

Сәрмәсән дә буйы киртләс, киртләс,
Киртләстәре китер, боҙ киткәс.
Ир балалар ҡайта хеҙмәт иткәс,
Ҡыҙ балалар ҡайтмай бер киткәс.
Ауырта ла башым, яна йөрәгем,
Һеҙ дуҫтарҙы көндә күрмәһәм.
Ғүмерем дә булһа онотмамын
Һеҙ дуҫҡайҙарымды, үлмәһәм.
Ҡара ла урман арттарында
Ҡыҙыл бөрлөгәндәр ҡан кеүек.
Сит илдәргә сыҡһа яңғыҙ егет
Йөрөй закладтағы мал кеүек.

**Ғәйшә** (194)

Ишеккәйем алды, һай, ҡуш тирәк,
Ҡуш тирәккәйем төбө ер еләк.
Еләктәре бешкән, һай, йыйған юҡ,
Был донъяҡайҙарҙан туйған юҡ.

Ишеккәйең алдын һепереп тот,
Алма тәгәрәтеп уйнарһың.

---

* Сәрмәсән йылғаһы Дәүләкән районының көнбайыш өлөшөндә аға.

Был йырҙарҙы, йәнем, иҫеңдә тот,
Мин үлгәс тә, һағынып йырларһың.

Өршәк кенә һыуы, һай, ҙур булмай,
Уның кеүек яҙын һыу булмай.
Ҡайҙа ғына барһаң бәхет кәрәк,
Бәхетле лә кеше хур булмай.

**Мәжлес йырҙары** (96)

Ҡаҙ бәпкәләре лә, ай, һары икән,
Теҙелеп-теҙелеп һыуға бара икән.
Йөрәк башларына ҡан һауҙырған
Үҙәк ярып сыҡҡан бала икән.
Дим буйыҡайҙары, ай, бүтәгә,
Ат аяҡтарын, ай, күтәрә.
Был йырҙарым минең тәсбих түгел,
Әҙерәк кенә күңел күтәрә.
Әҙерләгән дә, ай, өҫтәлдәре,
Йәйелеп кенә ятҡан күл кеүек.
Саҡырып та килгән, ай, ҡунаҡтары,
Сәскә генә атҡан гөл кеүек.
Яҡут ҡына тигән, ай, аҫыл таш,
Ята ла бит алда ялтырап.
Ҡайһы ғына илдәрҙән, ай, килдегеҙ,
Ҡояш та ғына кеүек ялтырап.

* * *

Ҡыҙылбаштың нәҫелдәре*

* Ҡыҙылбаш нәҫелдәре – ниндәйҙер ихтилалда ҡатнашып, баштарына гел ҡыҙыл таҫмалы сүк ҡуйғандар, гел уңышлыҡ, еңеү алып килгән ошо сүк. Шуға был абруйлы нәҫелде “ҡыҙылбаштар” тип атағандар. Был нәҫелдән күп юлбашсы булған.

Илгә батырҙар биргән.
Тыуған ергә афәт килһә
Ил менән бергә күргән (96).

**Ҡоҙағыйҙың өҫтәленә хөрмәт ҡылыу йыры** (149)

Гөлнәзирә көйөнә көйләп йырлана, ҡушымтаны йырлағанда бармаҡтар шартлатып йырлана.

Ҡоҙағыйым ҡунаҡ йыйған,
Килмәй ҡалыр хәлем юҡ.
Өҫтәленә нисек һыйған
Бының хәтлем ризыҡ.

Һай ли, ҡоҙағый,
Матур баҫа түгелме?
Матур баҫып, йылмайып,
Күңел аса түгелме?

Ҡоҙағыйҙың өҫтәленә
Гөбаҙыя ҡуйылған.
Хөрмәт иткән яҡындары
Был табынға йыйылған.

Һай ли, ҡоҙағый,
Матур йөрөй түгелме?
Матур йөрөй, матур йөрөй,
Беҙҙе һыйлай түгелме?

Ҡоҙағыйҙың самауыры
Ҡайнатырға ҡуйылған.
Һый-хөрмәтте күтәралмай
Өҫтәлкәйе һығылған.

Һай ли, ҡоҙағый,
Матур көлә түгелме?
Матур көлөп, йылмайып
Хөрмәт итә түгелме?

Ҡоҙағыйҙың күлдәктәре
Әберкәләп тегелгән.
Өҫтәлдәргә һауыттарға
Сәк-сәктәре һибелгән.
Һай ли, ҡоҙағый,
Матур йырлай түгелме?
Матур йырлап, беҙгә ҡарап,
Беҙҙе һыйлай түгелме?
Ҡоҙағыйҙың сәйкәйҙәре
Бигерәк тә тәмле икән.
Өҫтәлдәге һый-хөрмәте
Бигерәк тә йәмле икән.
Һай ли, ҡоҙағый,
Күлдәк бирә түгелме?
Күлдәк биреп, бүләк алып,
Яҡын итә түгелме?

**Олоғошҡай тауы** (34)
(йыр)

Олоғоштоң ҡалҡыу түбәләрен
Бөркөт ҡоштар бигерәк ярата.
Үҙән ере уңдырышлы ҡара,
Ашлыҡтары үҫә эркелеп.
Олоғоштоң түбән үҙәнлеге,
Ҡар ҡатламы ята бик ҡалын.
Шунда көҙөн арыш сәсеп ҡуйһаң,
Йәренгәгә тулыр келәтең.
Олоғоштоң иркен баҫыуында
Тигеҙ бара һуҡа-һабандар.
Шул ерҙәрҙә тирен түгеп эшләй
Башҡорттарҙың уңған улдары.

Был йырҙы “Ҡойҡа ырыуы йырҙары” ла тип йөрөтә торғайнылар. Мәжлес табындарында ла гел генә шуны йырлар булғандар (34).

**Дим йылғаһы һыуҙары** (146)

Дим йылғаһы һыуҙарынан
Аттар эсерһәң ине.
Был донъяла дуҫтар менән
Ғүмер кисерһәң ине.

Дим һыуында матур үҫкән
Аҡ томбойоҡтар йыйҙым.
Дуҫтар онотмаһын тиеп,
Иҫтәлек яҙып ҡуйҙым.

Дим йылғаһы һыуҙарын да
Алып эсеп туйманым.
Ауыр саҡтар килгәндә лә,
Дуҫтарымдан яҙманым.

**Дим буйы** (137)

Димдә тыуҙым, Димдә үҫтем.
Еләк йыйҙым туғайҙа.
Эй-й… йәмле Дим буйы,
Ҡоштар һайрай көн буйы.
Һағынмамын тигән инем,
Һағындыра шулай ҙа.
Эй-й… йәмле Дим буйы,
Ҡоштар һайрай көн буйы.
Димдә тыуҙым, Димдә үҫтем,
Дим һыуҙарын күп эстем.
Эй-й… йәмле Дим буйы,
Бик һағындым был юлы.
Дим һыуҙарын күп эскәнгә

Бәхетле булып үҫтем.
Эй-й… йәмле Дим буйы
Һағынамын һеҙҙе йыл буйы.

**Дим буйҙары** (271)

Дим һыуҙары, Дим һыуҙары,
Дим һыуҙары ағаҙыр.
Донъя ҡәҙерен белмәгәне
Бер туғанын ҡағаҙыр.
Дим буйҙары, Дим буйҙары,
Дим буйҙары тирәктер.
Ауыр саҡтар килә ҡалһа,
Бер туғаның кирәктер.
Дим яҡтары, Дим яҡтары,
Дим яҡтары бик йәмле.
Бер туғандар менән бергә
Эскән сәйҙәр ҙә тәмле.

**Дим буйҙары** (89)

Дим буйының һыуҙарынан
Атҡайымды эсерәм.
Әллә һеҙҙән айырылғанға,
Һағынып ғүмер кисерәм.
Дим буйҙарына төшөргә
Әллә ниңә ашҡынам.
Тағы ниҙәр күрер икән
Минең ғәзиз башҡынам?
Дим буйында емеш булһам,
Ҡыҙарып бешәр инем.
Алдарыңа алма кеүек,
Өҙөлөп төшәр инем.

**Дим буйҙары*** (34)

Дим буйҙары, Дим буйҙары
Дим буйҙарын буйланым.
Күңелемдән һис китмәнең,
Һине генә уйланым.
Әй, тирҙә-ритәйем
Тирҙә-риттә-ритәйем.
Дим һыуҙары, Дим һыуҙары,
Дим һыуҙарында йөҙҙөм.
Бер кемгә лә алыштырмай
Үҙ йәрҙәремде һөйҙөм.

Дим яғына, Дим яғына,
Төйәгем Дим яғында.
Һине генә күрергә тип
Быйыл ҡайттым тағын да.

Дим ярҙары, Дим ярҙары,
Дим ярҙары бик текә.
Ауырлыҡтарға бирешмәм
Минең һөйгәнем иркә.

Дим һыуҙары әрәмә,
Әрәмәлә ҡарама.
Һөйгән йәрең ташлап китер,
Ситләргә һис ҡарама.

**Дим буйыҡайҙары** (221)

Дим буйыҡайҙары, ай, бүтәгә,
Ат аяҡҡайҙарын күтәрә.
Был йырҙарым һеҙгә тәсбих түгел,
Әҙерәк кенә күңел күтәрә.

Ишек алҡайҙарым, әй, күк сәскә,
Күк сәскә лә түгел, кәрешкә.

* Был йырҙы әсәйем Мөслимәнән ишеттем – Р.М.

Сабырлыҡтар – солтан, нәфсе – шайтан,
Сабырлыҡтар кәрәк һәр эштә.

Селтәрле лә күперҙең, әй, таҡтаһы,
Дағалы ла аттар тапаһын.
Бер битең ай, береһе ҡояш
Яман күҙҙән Хоҙай һаҡлаһын.

Ағиҙелкәйҙәргә ауҙар һалдым,
Аҡ балыҡҡай менән çаҙанға.
Ҡайҙа ғына барһаң, матур йөрө –
Дандарың китһен Өфө өйәҙе менән Ҡаҙанға.

Кизеле лә шаршау, башы бурлат,
Бөккән еркәйҙәре бер түгел.
Кешеләрҙән кеше һис кәм түгел,
Тик бәхете генә бер түгел.

**Дим буйыкайҙары** (19)

Дим буйҡайҙарының, ай, балығы,
Көмөш кенә тәңкә ҡабығы.
Йөҙкәйҙәре көләс, үҙҙәре нурлы,
Дим буйҡайҙарының халығы.

Дим буйҡайҙары, әй, сипкәнәй*,
Елдәр ҡоя аның кипкәнен.
Донъя мәшәҡәте менән белмәйбеҙ бит
Был ғүмеркәйҙәрҙең, һай, үткәнен.

Çут-çут çайрай çандуғастар
Дим буйындағы ла таллыҡта.
Был донъяның бәрәкәте, дуçтар,
Байлыҡ түгел, булыр çаулыҡта.

**Димкәй** (261)

* Сипкәнәй – гөлйемештең бер төрө, башҡорт розаһы.

Дим çыуын кискəнем бар,
Çыуын да эскəнем бар.
Ғашиҡ хəле – бик ауыр хəл,
Башымнан кискəне бар.

Əйҙə, иркəм, оҙатайым,
Дим çыуына еткəнсе.
Дим çыуҙары аҡмай тороро,
Беҙ айырылып киткəнсе.

Димкəйемнең çыуҙарына
Əйҙə çыуҙар керергə.
Çандуғас кеүек талпынам,
Çеҙ дуçтарҙы күрергə.

**Дим буйыҡайҙары** (234)

Дим буйыҡайҙары бигерəк йəмле
Аҡ тирмəлəр ҡороп йəйлəргə.
Ҡайҙа ғына барма дуç-иш кəрəк
Ҡаршы сығып атың бəйлəргə.
Дим буйыҡайҙары бигерəк матур,
Ярҡайҙары зифа ҡамышта.
Бер-беренə терəк булыу кəрəк,
Ауырлыҡтар килгəн ваҡытта.
Дим һыуыҡайҙары бик шəп аға,
Ҡаҙ - өйрəктəр ҡаршы йөҙалмай.
Уҙған йəш ғүмерҙəр иçкə төшһə,
Бер йырламай йөрəк түҙалмай.
Аҡрын ғына йырым йырлаһам да,
Яңғыратып Димкəй буйҙарын.
Үҙкəйҙəрем бында йəшəһəм дə,
Əллə ҡайҙа минең уйҙарым.

Мəсет манаралары,
Манара аралары,
Беҙгə генə ҡалды инде

Ауыр заманалары.
Беҙ үҫкәндә күрҙек инде,
Замана михнәттәрен.
Балаларға күрһәтмәһен
Тормоштоң михнәттәрен (234).

**Яппарҙар** (151)

Арғы Яппар, Бирге Яппар,
Күперҙәре ҡабыҡтан.
Беҙҙең дуҫтарҙың бәлеше,
Бешкән икән ҡабаҡтан.

Арғы Яппар, Бирге Яппар,
Хәлдәремде белегеҙ.
Ауыр саҡтар килеп етһә,
Яндарымда булығыҙ.

Алпамыша тауҙарында
Ҡыл батырҙың ҡәберен.
Был донъяла йәшәгәндә,
Бел дуҫтарҙың ҡәҙерен.

Сабаталарымды үрҙем
Дим буйы йүкәһенән.
Апаһына күҙ һалғайным –
Хат алдым бикәһенән.

Сабатамдың бауҡайҙарын
Өс үремдән үргәнем.
Хоҙайларҙың яҙғанылыр
Йәшләй нужа күргәнем (31).

**Ҡара урман** (259)

Ҡара урмандарға керҙем,
Һыҙылып ҡына таңдар атҡанда.
Ҡара урман аша

Ҡоштар һайраша –
Хайран да тамаша.
Ҡура урман матур була
Ҡоштар ҡанат ҡаҡҡанда.

**Шаян йыр** (311)

(Боронғо ваҡыттарҙа йырлап күңел аса торған инек)

Самауырҙы, самауырҙы
Мин килмәйсә, шыжлатма.
Самауырҙы йырлатмағас,
Сәй эсеү буламы ни…
Өҫтәлеңдең өҫтәренә,
Балын, майын, сынаяғын,
Ҡуйырға ла онотма!
Баллап-майлап сәй эсмәгәс,
Сәй эсеү буламы ни?
Урындыҡтың баштарына,
Онотма ла ҡуйырға
Таҫтымалдың алһыуын.
Быны, дуҫҡай, һиңә әйтәм,
Бер кемгә лә һөйләй күрмә!
Тирләп-бешеп сәй эсмәгәс
Сәй эсеү буламы ни?

**Ярыштау*** (213)

Ярыштауҙың буйҙары ла,
Дүртөйлө ауылдары.
Бигерәк күркәм, бигерәк матур
Башҡортом йолалары.

---

* Ярыштау – Дәүләкән районында иң бейек тау.

Ярыштауға менгән саҡта,
Таянам ташларына.
Күңелдәрем һис ышанмай
Һөйгәнем ташларына.

Талир тәңкәләр ырғыттым
Ярыштау буйҙарына.
Һөйгән йәрем иҫкә төшә
Гел минең уйҙарыма.

Ярыштауҙың баштарынан
Осоп килә ыласын.
Һөйгәндәрен белеп торам:
Йәйеп тора ҡоласын.

**Зәлифәкәй** (183)

Элек, ата-инәнән етем ҡалған өйҙә, ағаһы Зәлифә исемле һеңлеһен бер байға аҡсаға һатып ебәрә.

Зәлифәкәй ҡайҙа, һыу буйында,
Һыу һибә лә Зәлифә баҡсаға.
Зәлифәкәй һылыу ни хәл итһен,
Үҙ ағаһы һатҡас аҡсаға.

Зәлифәкәй ҡайҙа, меҫкен яр буйында,
Толом-толом сәсен йыуаҙыр.
Зәлифәкәй һылыу ни хәл итһен,
Күҙҙәренән йәштәр ағаҙыр.

Зәлифәкәй ҡайҙа, тау башында
Сәскәләрҙән таҡыя үрәҙер.
Зәлифәкәй һылыу ни хәл итһен,
Тыуған төйәктәрен күрәҙер.

**Зәлифәкәй** (108; 110)

Элек Зәлифә исемле бик матур ҡыҙ булған. Ата-инәһе үлгәндән һуң, ағаһы ҡарамағында ҡала, ағаһы һеңлеһен артыҡ күреп бер байға аҡсаға һата.

Зәлифәкәй һылыу Дим буйында

Болондарҙа сәскә йыямы?
Бер туған да ағаһында тороп,
Нисек итеп кенә һыямы?
Зәлифәкәй ҡайҙа, Дим буйында,
Һыу алып та ҡайта баҡсаға.
Зәлифәкәй һылыу ни хәл итһен,
Үҙ ағаһы һатҡас аҡсаға.
Зәлифәкәй һылыу Дим буйында
Шым ғына ла тороп илайҙыр.
Аҡсаларға һатып, ай, ағаһы
Нисек кенә байға ярайҙыр?

**Ярыш ҡына тауҙың, ай, түбәһе** (138)

Ярыш ҡына тауҙың, ай, түбәһе
Мендем генә хәйер һалырға.
Батыр ғына рухын нурлап,
Изге доғаларҙы ҡылырға.

Ярыш ҡына тауҙың, ай, түбәһе
Тиҫбе төймәләрен һананым.
Ҡиблаларға ҡарап теләк әйттем,
Хоҙай ғына ҡабул итһен тип.

*Информатор Сафуанова Сибәрбикә Күсемхан ҡыҙының (1906 йылғы) иҫкәрмәһе*: атайым Күсемхан (1850 йылғы) гел ошо боронғо йырын йырлар ине.

**Бейеү таҡмағы** (129)

Ҡумыҙ тартҡан һылыу ҡыҙға
Урындыҡты бирегеҙ.
Бейей-бейей матур баҫып
Күңелдәрен күрегеҙ.

Ҡумыҙ тартҡан ваҡытында
Бейеп кенә алығыҙ.
Был ғүмерҙәр ике килмәй,

Күңел асып ҡалығыҙ.

Ҡумыҙ ҡулдарына алһа,
Ир-егеттән көй булыр.
Балта тотоп ағас юнһа,
Бына тигән өй булыр.

**Дәҫтән ханды* күргән булһам** (84)

Дәҫтән ханды күргән булһам,
Ҡулдарҙы бирер инем.
Ҡөрьән китаптарын алып,
Тәүбәләр итер инем.
Намаҙлыҡтар алға йәйеп,
Баштарым эйәр инем,
Суҡраҡлы ҡәрйә юлына
Гөлдәрен йыяр инем дә,
Алларын һибәр инем.

**Аҫылкүлдең буйҙары** (276)

Аҫылкүлдең буйҙары,
Буйҙарында уйнауы!
Аҫылкүлдең буйҙарында
Уйнап туйып булманы.
Аҫылкүл, Аҫылкүл,
Күл буйҙары аҫыл гөл.
Күл буйҙары дүңгәк-дүңгәк,
Күл һыуҙары күк-күмгәк.
Аҫылкүлдең буйҙарында
Кәрәк уйнамаҡ-көлмәк.
Аҫылкүл, Аҫылкүл,

* Ҡәнзәфәр хандың улы Дәҫтән элек, ҡарт ата-бабайҙар йәшәгән саҡта, Ҡырҡөйлө мең ырыуына ҡараған ауылдарҙың баш ҡәрйәһе Суҡраҡлы ауылы булған тип һөйләйҙәр ине.

Шунда асыла күңел.
Аçылкүлдең буйында
Ҡоштар һайрай муйылда.
Эштән ҡайтҡас, ҡояш батҡас,
Йәштәр сыға уйынға.
Аçылкүл, Аçылкүл,
Ҡарап торма: уйна, көл!

**Асылыкүл** (268, 269)
(Нәҙершина Фәнүзә Айытбай ҡыҙы яҙып алған)
Норатауға менһәм күренә ҡарағас,
Ҡарағаста һайрай һандуғас.
Эскенәйең бошоп, янһа йөрәгең,
Асылыкүлгә килеп күңел ас.
Асылыҡай тигән шифалы күл,
Әйләнә-тирәһе лә ҡамышлы.
Күрмәйенсә, гүрҙәргә кереп үк булмай,
Хаҡ тәғәлә яҙған да яҙмышты.
Асылыҡай күле – түңәрәк күл,
Тирә-яғы уның да еҫле гөл.
Минең әйтеүҙәрем тәсбих тә түгел,
Фәһемдәре булһа ла үҙең үк бел.

**Аслыкүлдең буйҙары** (269)
Аслыкүлдең буйҙары,
Йәмле икән ҡырҙары.
Бер күреүҙә ғашиҡ булдым –
Бигерәк матур ҡыҙҙары.

Аслы күлдең буйҙары,
Текә микән ярҙары?
Шул ерҙәрҙе төйәк итә
Бигерәк матур йәрҙәре.

**Аслыкүл** (120)
Аслыкүл түңәрәк,
Аслыкүлкәй түңәрәк.
Түңәрәктең уртаһында
Уйнай һары күбәләк.
Аслыкүлдең буйҙары
Йәшелләнә яҙ булғас.
Япраҡ ярған аҡ ҡайында
Маҡтап һайрай һандуғас.
Аслыкүлдең тәмле була
Ҡыҙыл бөрлөгәндәре.

Иçегеҙгә төшәр әле
Бергә йөрөгәндәре.
Аслыкүлдең буйҙарын
Ҡабат-ҡабат буйлайым.
Иркәм иçемә төшә,
Мин һағынып уйлайым.
Аслыкүлдең ярҙарында
Ҡыйылып оса ҡарлуғас.
Күңелдәрем тулып китә,
Һине өҙөлөп һағынғас.
Аслыкүлгә аҡҡош төшкән,
Йөҙөп килә күлдәрҙән.
Тауыштарың килер кеүек
Киске һалҡын елдәрҙән.

**Ҡыҙыл буйы*** (209)

Ҡыҙыл ғына буйының ҡыр төлкөһө
Ҡыҙарып кереп бара үрҙәргә.
Күрәсәккәйҙәрҙе күрмәйенсә,
Ахыры, кереп булмаç гүрҙәргә.
Ҡыҙыл ғына буйының, ай, ҡырҙары,
Ҡыҙарып ҡына бешкән еләге.
Хоҙай тәғәләгә генә барып етеп,
Ҡабул булһын ине теләге.
Ҡыҙыл ғына буйының, һай, ярҙарын,
Ҡырлап ҡына осар ҡарлуғас.
Фани донъяларҙан хушлашып,
Ҡайтып китһәм ине яҙ булғас.

**Ҡыр ҡаҙы** (155)

Ҡыр ҡаҙы ла оса, талпына
Тыуған еркәйенә ҡайтырға.
Ҡыр ҡаҙы ла кеүек һағынам
Тыуған илкәйемә ҡайтырға.

Ҡыр ҡаҙы ла күлдәрҙә уйнай,

* Ҡыҙыл – Дим йылғаһының һул ҡушылдығы, Әлшәй, Дәүләкән районддары аша аҡкан йылға.

Ялғыҙ ҙа башым гел һине уйлай.
Ҡыр ҡаҙы ла күлдәр ситендә,
Ялғыҙ йәшәү миңә ситен дә.
Ҡыр ҡаҙы ла күлдә ҡағына,
Күңелдәрем һине һағына.
Ҡыр ҡаҙы ла күлдә ҡысҡыра,
Йәшлек йылдар мине саҡыра.

**Йәнешем** (188)

Йәнешәйҙәрем китте, һай, һунарға,
Һыу буйҙарына ла шәшкегә.
Шәшкеләргә китеп вафат булғас,
Ғәзиз башым ҡалды йәш кенә.

Һунарға ла киткән , ай, сағында,
Теҙгененән тотоп оҙаттым.
Йәшләй генә һөйгән йәнешемде
Күҙ-ҡаш араһында юғалттым.

Иртәнсәкәй тороп тышҡа сыҡтым,
Аҡбуҙаты ҡайтҡан – үҙе юҡ.
Ай… аҡбуҙаты ҡайтҡан – үҙе юҡ.
Күҙгенәйен төбәп миңә ҡарай,
Һөйләр ине малҡай – теле юҡ.
Ай, һөйләр ине меҫкен – теле юҡ*.

(Һунарға китеп йәнеше (бергә торған һөйгән иптәше) һыуға батып үлә, аҡбуҙаты әйләнеп ҡайта).

**Сума ла өйрәк, сума ата ҡаҙ** (102)

(Шаян йыр)

Сума ла өйрәк, сума ата ҡаҙ… “Ҡыйғаҡ!”
Йәмле Дим буйҙарында.
Һый-хөрмәте бигерәк тәмле,
Ултырыуҙары күңелле
Был яҡтың туйҙарында.

Сума ла өйрәк, сума ата ҡаҙ… “Ҡыйғаҡ!”

---

* “Ашҡаҙар” йырының саҡ ҡына үҙгәртелгән варианты. – *Ред.*

Дим һыуҙарын болғата.
Яппарҙың бит егеттәре
Менә тигән ҡыҙҙар һайлай –
Барыбер бит ҡарата.

Сума ла өйрәк, сума ата ҡаҙ… "Ҡыйғаҡ!"
Дим буйы күлдәрендә.
Бер күреүҙә ғашиҡ итә
Яппарҙың бит егеттәре.
Уңған, матур ҡыҙҙар һайлай –
Барыбер бит ярата.

**Боронғо йыр** (181)

Алма япрағы ҡойола
Әкрен генә ел менән.
Белмәйһеҙ шул хәлдәремде,
Бер күрергә тилмерәм.

Бар хәсрәтем бөтәр ине,
Өршәк буйын буйлаһам.
Аяҡҡайҙарым да баҫа алмаҫ,
Уҙған ғүмерҙәрҙе уйлаһам.

**Зәйнәбем** (212)

Дим йылғаһы буйҙары,
Дәүләкән ҡалалары.
Дәүләкәндәргә килде,
Дәүләкәндәргә килде
Шатлыҡлы донъялары.
Ай, Зәйнәбем, Зәйнәбем,
Аллы-гөллө йәйләүем.
Беҙҙең илдәр – сәхрә ерҙәр,
Ал сәскә ата гөлдәр.
Дәүләкәндәргә килде,
Дәүләкәндәргә килде

Бик тә шатлыҡлы көндәр.
Ай, Зәйнәбем, Зәйнәбем,
Аллы-гөллө йәйләүем.

**Боронғо башҡорт йыры** (148)

Боронғо  ла башҡорт юлдары,
Эй, теҙелеп киткән ҡәлғәçе.
Батырҙарҙың ҡалған эҙҙәре
Шунда үткән данлы йылдары.
Боронғо ла башҡорт юлдары,
Эй, тоташтырған меңдең ҡәлғәçен.
Шул юлдарҙа йырлар саңы ҡалған
Ата-бабайҙарҙың торошо.

**Яппар көйө** (149)

Яппар көйө, Яппар йыры –
Ул бит моңло беҙҙең көй.
Ҡан-ҡәрҙәште ситкә типмә,
Бер туғандай яҡын һөй.

Яппар тауҙары башында
Һары-һары ҡылғанлыҡ.
Ҡан-ҡәрҙәште дошман күреп,
Яманлыҡтар ҡылмайыҡ.

Яппар көйө, Яппар көйө,
Яппар көйҙәре матур.
Бергә-бергә тотоношоп,
Ҡан-ҡәрҙәштәр йәшәйек.

Яппар яғы – йәмле яҡ,
Яппарларҙа ҡалайыҡ.
Ауыр саҡтар беҙгә килһә,

Бергә-бергә булайыҡ. (1976 йылда яҙып алынған.)

**Әй-ли, Миңниса** (140)

Аҡлы ситса күлмәгемде
Киймәйем тигән инем.
Шуларҙың нәҫелдәренән
Ҡыҙ алмаҫ тигән инем.
Әй-ли, Миңниса, ҡайҙа барҙың һин кисә?
Әй-ли, Гөлниса, һөйгәнең һинең нисә?
Аҡлы ситса күлмәгемде
Бер генә кейгән инем.
Былай булырҙарын белһәм,
Һис бер танышмаҫ инем.
Әй-ли, Миңниса, ниңә килмәнең кисә?
Әй-ли, Гөлниса, әллә килдең һин кисә.
Аҡлы ситса күлмәгемде
Елдәргә элмәҫ инем.
Шуларҙың нәҫелдәренә
Ҡыҙ бирмәм тигән инем.
Әй-ли, Миңниса, ниҙәр эшләнең кисә?
Әй-ли, Гөлниса, мине көттөңмө кисә?

**Өршәкәй ҙә буйы һары тал** (189, 310)

Өршәккәйҙең буйы, әй, һары тал,
Һандуғастар ҡунып һайрайҙыр.
Был донъялар беҙгә ике килмәй
Ҡәҙерҙәрен, дуҫтар, беләйек.

Бүҙәнәкәй тигән, һай, аҫыл ҡош,
Йөгөрөп бара оло юл менән.
Маңлайҙарға ла яҙған күрәсәкте
Һыпырып ташлап булмай ҡул менән.

**Дим буйы башҡорттары йыры** (310)
(Хәйретдинова Нәйлә Закуан ҡыҙы олатаһы Хәйретдинов Ғәләүетдин Хәйретдин улынан, 1889 йылғы, яҙып алған)

Дим һыуҡайы ҡаты аға ла,
Ҡом араларында таш ҡала.
Ризыҡ яҙған ерҙә бәндә йөрөй,
Туфраҡ яҙған ерҙә баш ҡала.

Дим һыуҡайы бормаланып аға,
Болон-болон ерҙәр ҡалдырып.
Тарих ҡына үҙе һөйләр әле,
Батыр егеттәрен яҙҙырып.

**Ауылыма йыр** (299)
Беҙҙең Ҡоръятмаҫ ауылы –
Иң олоһо районда.
Беҙҙә үҫкән ҡыҙ-егеттәр
Эшләй төрлө урында.

Урмандар бай йәнлектәргә,
Яландары – еләклек.
Әрәмәлә төрлө емеш,
Булһын йыйырға теләктәр.

Улаҡлы ла тау итәгендә
Шишмә аға ҡиблаға.
Серен белгән һәр бер кеше
Унын шифаһын таба.

Иҫәнсапҡан еләклеге,
Әрәмәһе андыҙлыҡ.
Донъяла бар әсе нәмә –
Үлем менән яңғыҙлыҡ.

Ауылыма һоҡланамын,
Урманына, ҡырына.

Күпме йырҙар яҙып була
Ҡоръятмаҫым турында.

Иҫәнсапҡан соҡорonoң
Һаҙлығында шишмә бар.
Аяҡ-ҡулдарың һыҙлаһа,
Ләме менән һыуын ал.

Сылтырап аҡҡан Өйҙөрәк
Ауылымдан башлана.
Тыуып үҫкән ергенәңде,
Балам, берүк ташлама.

Тыуған ауылым – Ҡоръятмаҫ,
Беҙҙә үҫкән егет-ҡыҙҙар
Бер кемдән дә һынатмаҫ,
Һис ҡайҙа ла һынатмаҫ!

**Илкәйем** (22)

(Ишдәүләтов Байбулат Ишдәүләт улы 81 йәшлек оләсәһе Миңлеһылыу исемле инәйҙән отоп алған йыр)

Эй, иҫке лә, иҫке, тиҙәр,
Иҫкергәнһең дә, тиҙәр.
Иҫкерһәм дә иҫләремдә
Минең Иҫке Яппарым
Әй-ли, гөлкәйем шул,
Минең тыуған илкәйем.

Күгиҙелкәй* ҫыулары ла
Ағиҙелгә ҡушыла.
Ҫөйөүләре ихлас булҫа,
Изге йәрҙәр ҡауыша.
Әй-ли, гөлкәйем шул,
Минең тыуған илкәйем.

* Күгиҙел– *Дим йылғаһының боронғо исеме.* – *Ред.*

**Һауынсылар тураһында шаян йыр** (124)

Һауынсылар эшкә бара
Күнәктәрен күтәреп.
Һауынсылар эштән ҡайта
Сумкаларын тултырып.
Һауынсылар фермаларҙа
Тырышып һыйыр һауа.
Беҙгә килгән баш түрәләр
Колхозыбыҙҙы һауа.

**Оло юлдың туҙаны** (95)

(Информанттан был йырҙы Хисмәтуллина Фәрзәнә Хәләф ҡыҙы яҙып алған)

Оло юлдың туҙанын да
Үҙем күрҙем туҙғанын.
Белмәй ҡалдым, һиҙмәй ҡалдым,
Был ғүмерҙең, ай, уҙғанын.

Оло юлдың туҙанында
Ҡалды минең эҙҙәрем.
Ҡайҙа икән йәшлегем? – тип,
Шул юлдарҙан эҙләнем.

Оло юлдың туҙанында
Юғалттым эҙҙәремде.
Их, ҡайтарып алыр инем
Уҙған ғүмерҙәремде.

**Бишек йыры** (105)

Әлли-бәлли, бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әсәһе.

Ҡайынлыҡҡа еләккә
Искәндәргә бүләккә.

Әлли-бәлли бәү итәм,
Йоҡлап кит, бәғеркәйем.
Минең ике күҙ нурым –
Бәләкәс бәпескәйем.

**Бишек йыры** (204)

(Ғәббәсова Гүзәл Муллағәли ҡыҙы яҙып алған)

Ә-ә-ә, әй итә,
Рәйсә йоҡоға китә.
Әсәһе эшкә китә,
Әлли-бәлли, бәү итә.
Әлли-бәлли итәр ул,
Йоҡоларға китәр ул.

Бәү-бәү итеп, күҙ йомоп,
Тирләп йоҡлап китәр ул.
Алма кеүек тәгәрәп,
Үҫеп буйға етәр ул.
Ағайҙары артынан
Армияға китәр ул.

Әлли-бәлли итәр ул
Бәлликигә китәр ул.
Бәлликийҙән ҡайтҡас ул,
Ил һаҡларға китәр ул.
Атаң кәсеп итәлер,
Мәкәрйәгә китәлер.
Атаңдың тапҡан малдары
Тәрбиәңә етәлер.

Әлли-бәлли, бәү, бәү!

**Бишек йыры** (248)

Әлли-бәлли, бәпкәһе,
Ҡайҙа киткән әнкәһе?
Ҡайынлыҡҡа еләккә
Бәпесенә бүләккә.

Әлли-бәлли, бәпкәйем,
Хәҙер йоҡлап китә ул.
Хәҙер йоҡлап китә лә,
Матур төштәр күрә ул.

**Бишек йыры** (300)

Аллаһыу, Аллаһыу,
Аллаҡайым һыу алла.
Бәпескәйем тәмле төштәр
Күреп йоҡоға китә.

Аллаһыу, Аллаһыу,
Хаҡ тәғәлә һыу ала.
Хәҙер генә бәпес ул,
Үҫкәс батыр ир була.
(Үҫкәс һылыу ҡыҙ була).

Аллаһыу, Аллаһыу,
Ҡолһоуалла, һыу алла.
Матур күҙҙәрен йомоп,
Тәмле йоҡоға тала.

**Терәкәйҙәр* йыры** (13)

* Ҡырҡөйлө мең ырыуы башҡорттарының бер нәҫеле. Ауырлыҡ килгәндә бер-береһенә терәк булып, ярҙам итеп йәшәр булғандар. Туғандар өсөн йән

Беҙ алай түгел инек тә,
Беҙ былай түгел инек.
Ваҡытында терәкәйҙәр
Гөл сәскәһендәй инек.

Беҙ үҫкәндә үҫтек инде
Тал сыбыҡтары кеүек.
Үҫеп еткәс таралыштыҡ
Ҡош балалары кеүек.

Сәскәләрҙе йыйырға тип,
Төштөм Дим буйҙарына.
Үҙемдең дә иҫем китә
Былай булыуҙарына.

Дим буйының туғайында
Бүҙәнә балалары.
Әл дә әле йәшәп килә
Терәкәй аралары.

**Яппар йырҙары** (77)

Тауға менгәс кенә беләм
Яппарлар икәндәрен.
Әҙ йөрөнөм, күп һынаным,
Кемдең кем икәндәрен.

Яппар менән Шөнгәк юлы
Бергә ҡушыла икән.
Араларҙың йыраҡлығы
Эсте бошора икән.

---

бирергә лә әҙер булғаны өсөн "Терәк, терәкәй" нәҫелдәре тип атағандар. – Ғәлиуллина Хәҙиә Харис ҡыҙы .

Яппарларҙың туғайында
Минең матур атҡайым.
Тағы ниҙәр күрер икән
Минең ғәзиз башҡайым?

Яппарҙың баҡсаларында
Йәшәргән һуғандарым.
Йәшәргән һуғандарымдай
Йәшәгеҙ туғандарым.

Яппар урамдары тигеҙ,
Теҙелеп үҫкән аҡ ҡайын.
Шул ҡайынға баҫып ҡарайым,
Һеҙҙе һағынған һайын.

Яппарымдың юлдарында
Гөлдәр тапталыр инде.
Ул минең йөрәккәйемдә
Мәңге һаҡланыр инде.

Яппарҙың туғайҙарында
Мин матур ҡошто тотам.
Моңайып һайраған ҡошто
Һин дуҫкайға оҡшатам.

Аҡлы ситса күлмәгем дә,
Кейергә иркен түгел.
Тағы бер күрәһем килә,
Күрергә мөмкин түгел.

Беребеҙ унда, беребеҙ бында,
Беребеҙ Бөгөлмәләрҙә.
Бер-беребеҙҙе күрә алмабыҙ
Эстәр өҙөлгәндә лә.

**Батырҙар тураһында**

(Мәктәп музейынан алынды, Усманова Көзифа исемле әбейҙән, 1904 й., яҙып алынған)

Оҙон ғына елән,ҡамсат бүрек –
Ир-егеттең кейгән кейеме.
Уҡ-һаҙағын аҫып, күкрәк кирһә,
Шул булаҙыр ирҙең аҫылы.
Яҡшы ғына атҡа, ай, атланып,
Дошмандарға сапһа ҡурҡмайса.
Батырҙарса үҙен, һай, күрһәтһә,
Шул булаҙыр ирҙең яҡшыһы.
Батыр ғына егет, һай, һыр бирмәҫ,
Ауырлыҡтар килгән сағында.
Баш эймәйсә үҙен тота белһә,
Шул булаҙыр ирҙең солтаны.

**Батыр ғына ирҙәр, ай, күп булһа** (74)

Элекке ваҡыттарҙа һәр бер ауыл янындағы бейек тауҙарға ҡәлғә төҙөлгән. Дошмандар ябырылһа илгә, шул ҡәлғәләргә төтөн уты һалғандар, шулай итеп тиҙ генә ғәскәр йыя торған булғандар.

Дим буйҡайҙарының, ай, тауҙары,
Ҡырлас-ҡырлас булып теҙелгән.
Бейек кенә һәр бер ҡалҡыулыҡта
Ҡәлғәләрҙә һаҡсы ҡуйылған.

Дим буйҡайҙарының, ай, ерҙәре,
Намыҫлы ла уның ирҙәре.
Батыр ғына ирҙәр күп булһа,
Имен генә булыр илдәре.

**Йыр** (77)

Башҡорт минең илкәйем дә,
Башҡорт минең еркәйем.
Ата-инәй бүләк иткән
Ғәзиз минең телкәйем.

Дәүләкәндең ҡәрйәләре*
Тау ҙа таш араһында.
Башларым аҙашыр инде
Маңҡорттар араһында.

Башҡорт телкәйҙәре матур,
Ҡыҙ-ҡырҡыны оялсан.
Ата-инәй биргән телде
Алыштырма һис ҡасан.

**Һалдатҡа хат** (77)

Һауаларҙа осҡан, һай, ҡарлуғас
Кереп юғалаҙыр болотҡа.
Мин һағынып хаттар яҙам,
Һин дә шулай мине онотма.

Ҡыҙарып та ҡояш шәүләһе,
Тирәктәрҙең төшә шәүләһе.
Үҙе генә унда, күңеле бында,
Нисек йөрөй икән кәүҙәһе?
Зәңгәр төндә, көндөң нурҙарында
Ҡара сәскәйҙәрең тарарһың.
Йырҙарымды бергә бүләк итәм
Һағынғанда уҡып ҡарарһың.

Алһыу нурҙар менән таң атҡанда,
Йомшаҡ елдәр әкрен иҫәләр.
Иҫәрҙәр ҙә, һине иркәләрҙәр,
Минән сәләм һүҙе һөйләрҙәр.

Хәтерләрмен һине һәр ваҡытта,
Алһыуланып таңдар атҡанда.
Хәтерләрмен һине һәр саҡта,
Үлем ҡосағында ятҡанда.

Бөҙрә лә генә, ай, сәсемде

* Ҡәрйә – ауыл. – *Ред.*

Йырлай-йырлай ғына тарайым.
Һинең генә яҡтан иҫкән елгә
Бер әйләнеп кенә ҡарайым.

Тот һин, дуҫҡай, биргән вәғҙәләрҙе,
Онотма һин һөйгән йәреңде.
Һөйгән йәрең өсөн һәр ваҡытта
Ҡыҙғанма һин ғәзиз йәнеңде.

### **Мәк сәскәһе** (77)

Мәк сәскәләре ҡойола,
Былбыл ҡағынған һайын.
Мәк сәскәләренә ҡарайым,
Һине һағынған һайын.

Беләм инде, күрҙем инде,
Ҡайғы тигәндәрен дә.
Ата-инәй бер ни белмәй
Бала күргәндәрен дә.

### **Был донъяның ҡәҙерен beләйек** (11)

Йылтыр ғына, йылтыр, әй, ут яна,
Юлаусынан ҡалған бер күмер.
Былай ғына беҙҙең, ай, ултырыуҙар
Үҙе генә булыр бер ғүмер.
    Селтер генә селтер, әй, шишмә аға,
    Һыуһағанда алып эсәйек.
    Был ғүмерҙәр беҙгә, ай, ике килмәй
    Ҡәҙерҙәрен генә беләйек.
Ем-ем генә, ем-ем, күктә йондоҙ,
Ҡош юлына юлдар һалаҙыр.
Был донъяла ғына, ай,  батыр ирҙәр
Тарихҡа ла яҙылып  ҡалаҙыр.

### **Аҡбуҙат** (210)

Аҡбуҙ ғына атты, әй, эйәрләп,
Сығып киттем яңғыҙ һунарға.

Ҡараңғы ла төндә бер яңғыҙым,
Тура ғына килде ҡунарға.

Бүртә аттар менеп һунар сығар
Башҡорттарҙың ғәзиз улҡайы.
Уҡ-һаҙағын алып яуға барыр
Милләтемдең батыр иркәйе.

Дим буйыҡайҙары туғай-туғай,
Туғайында берәү ҡул болғай.
Үҙе лә генә йырлай, үҙе илай,
Ник һарғайып үҫтем, ти, буғай.

**Зөлхәбирә** (81)

(60-сы йылдар аҙағында тарих уқытыусыһы *Лилиә Ғәфүр* ҡыҙы яҙып алған).

Элек Дим буйында бик хәлле, белемле Мостафа исемле мулла йәшәгән, бөтә нимәһе етеш булған. Берҙән-бер көндө уның яратҡан ҡатыны донъя ҡуйған. Уларҙың бик сибәр, һылыу Зөлхәбирә исемле уңған ҡыҙы булған. Зөлхәбирә һылыулығы менән генә түгел, уңғанлығы менән дә тирә-якта дан тотҡан. Нисектер бер ваҡыт уны урыҫ байы күреп ғашиҡ була һәм Мостафа мулланан ҡыҙын һорай. Мулла тәүҙә риза булмаһа ла, нисектер отолоп, бик күп малдар вәғәҙә иткән урыҫ байына ҡыҙын бирергә була. Ләкин ҡыҙы был ғәрлеккә түҙә алмай үҙенә хәнйәр ҡаҙай.

Зөлхәбирә һылыу кер сайҡай
Дим йылғаһы ғына һыуында.
Зөлхәбирә һылыу үкһеп илай
Дим буйҙарының да ярында.

Мостафа мулла туй йыйғандыр,

Ҡыҙын һатып урыҫ байына.
Зөлхәбирә һылыу түҙалмайса
Йәшенә лә бахыр ҡойона.

Зөлхәбирә һылыу толом сәсен
Ҡыҙыл таҫмаларҙан үргәндер.
Зөлхәбирә һылыу ғәрлегенән
Йәш көйөнә генә үлгәндер.

Баланың да күҙ йәштәрен күреп,
Хаҡ тәғәлә ни тип торғандыр.
Мостафа ла мулла түҙә алмай
Был донъянан китеп барғандыр.

## **Боронғо йыр** (151)

Ике лә генә ерән, парлар көрән,
Тау буйында аның төйәге.
Уттарҙа янмай, һыуҙа батмай,
Яҡшы ғына кеше һөйәге.
Һауаларҙа оса ике аҡкош
Береһе бәйле, береһе быға улы.
Үҙ генә атаҡайҙарың, ай, булмағас,
Кем балаһы кемгә аяулы?

## **Ҫөләймән батыр**[*] (131)

Ҫөләймән батыр менгән аты
Тура ҡондоҙ – ҡашҡаһы.
Башҡорттарға ирек даулап
Алып барған ҡашҡаһы[**].

---

[1] Сөләймән – Ҡыркөйлө ырыуы Бәһелеүән ҡарттың улы. Дим буйының батыры, ниндәйҙер ихтилалда ҡатнашҡан башҡорт яугирҙарының юлбашсыһы. Ҡарттарҙың һөйләүе буйынса, Ярыштауҙа ерләнгән.

[**] Ҡашҡаһы – бында: батыры тигән мәғәнәлә. – *Ред.*

Çөләймән батыр яуға сапҡан
Уҡ-һаҙаҡтарын алып.
Яугирҙарын алып барған,
Дошман сафтарын ҡырып.

Çөләймән батыр яу ҡырында
Ҡурҡыуҙарҙы белмәгән.
Батырҙарса һәләк булғас,
Ярыштауҙа ерләнгән.

**Ҡар(а) урман** (161)

Ҡар(а) урманға кергәнем юҡ
Керһәм сығармын кеүек.
Ҡара урмандар аша ла,
Ҡара урмандар аша.

Матур ҡоштар һайраша
Шуға баштар аҙаша.
Ниңә лә, ай, милкенә
Йөрәккәйем елкенә?

Хоҙай бирһен сабырлыҡ.
Ҡар(а) урманға барам әле
Эҙләргә эҙләремде лә…
Ҡара урмандар аша ла
Ҡара урмандар аша.

Хайран ҡалам тамаша
Шуға баштар аҙаша.
Ниңә лә, ай, милкенә,
Йөрәккәйем елкенә?

Хоҙай бирһен түҙемлек.

Ҡар(а) урмандың эстәренән
Эҙләрһең, табалмаҫһың.
Ҡара урмандар аша ла
Ҡара урмандар аша.

Һыуһап телем ҡамаша,
Шуға баштар аҙаша.
Ниңә лә, ай, милкенә
Йөрәккәйем елкенә?
Хоҙай бирһен ҡыйыулыҡ.

**Биләнтау*** (292)

Элек Асылыкүл буйында еләк йыйған осорҙа, бер егет еләк йыйып йөрөгән башҡорт ҡыҙҙарының береһенә ғашиҡ була. Әйтергә ҡыйыулығы етмәй, йыр сығара.

Билән генә тауҙың, ай, итәге,
Еләктәре ҡыҙарып бешкәндер.
Елән генә кейгән матур ҡыҙҙар,
Еләктәрен йыйып төшкәндер.

Билән генә тауға, ай, бер килһәң,
Сәскәләрен йыйып бирермен.
Һинең нурлы йөҙҙәреңде күрһәм,
Яҙ ҡояшындай ҙа ирермен.

**Шәфәҡ** (53)
(1977 йыл яҙып алынды)

Башҡорт ихтилалын баҫтырырға каратель отрядтары ебәрелә. Ҡаҙанғол ауылында Рәкәп исемле табипты ихтилалда ҡатнашҡаны өсөн язалап үлтерәләр, беренсе ҡатынын өйөнә бикләп, ут һалалар. Икенсе ҡатыны бик сибәр булған, уныһын ҡоллоҡҡа алып китәләр. Унан тыуған йәш

* Биләнтау –Ҡыҙыл тормош ауылы янындағы матур еләкле тау.

ҡыҙ бала мейес эсендәге юллыҡҡа (ағас киптерә торған урын) инеп йәшеренә. Өй яна, әммә мейес эсендәге Шәфәҡҡә бер нимә булмай.

Ауылда был бала бик сибәр һылыу булып үҫә, бик күп яусылар килеп, иң батыр егеткә тормошҡа бирәләр.

Әй, Шәфәк тә һылыу, ай, сибәр ҡыҙ,
Ефәк тә генә микән яулығы?
Нисәүләп тә аттар егеп килгән,
Күмәк тә генә икән яусыһы.

Әй, Шәфәк тә һылыу, ай, зифа ҡыҙ,
Көмөш тә генә микән ҡашмауы?
Батыр ғына егет ҡулын биргән,
Еңел булыр тормош башлауы.

**Урмандарға керһәң** (193)

Урмандарға керһәң,
Аҡланынан сәскә өҙөрһөң.
Сит ерҙәргә сығып
Ялғыҙ башың,
Нисек кенә итеп түҙерһең,
Нисек кенә итеп түҙерһең?

Урмандарға керһәң –
Сейә еләк.
Сейә еләк кенә, бөрлөгән.
Сейә еләк кенә, бөрлөгәндәй
Һеҙ генә бит минең бер генәм,
Һеҙ генә бит минең бер генәм.

**Бурыл ат** (103)

Бәләкәй генә буртай әкрен юрта,
Әкрен юртып күп ерҙәр үтә.
Ашағандар бөтә, кейгәндәр туҙа,
Татыу йәшәүҙәргә ни етә?

*Ҡушымта*: Ел елләмәй томан асылмай,
Бер йырламай әрнеүҙәр баҫылмай.

Юртып ҡына шулай бара ла торғас,
Юлғынайым китте бит һул менән.
Маңлайҙарға яҙған хаҡ яҙмышты,
Һыпырып ташлап булмай ҡул менән.

*Ҡушымта:*Әкрен юртам үрҙәрҙе менгәнсе,
Онота алмам гүрҙәргә кергәнсе.

**Үткән ғүмер** (38)

Ике лә генә ҡайын, ай, йәнәшә,
Япраҡ яра-яра һөйләшә.
Ике лә генә туған бергә ултырһа,
Һандуғастар кеүек гөрләшә.

Ике лә генә йылҡы, ай, һимерттем,
Ялан ерҙән килгән төлкө өсөн.
Йыр белгәндән генә йырламайым,
Мин йырлайым уйын-көлкө өсөн.

Мылҡып ҡына килгән малдарымдың,
Уртаһында үҫкән бит күк юрға.
Ашайыҡ та эсәйек, йырлап көләйек,
Хоҙайым ғүмерем бирһен күп йылға.

**Йәмле Өршәк буйҙары** (304)

(Үҙ ваҡытында Хузиев Мөлкәмән Хоҙайәхмәт улы яҙып алған)

Яппар урамдары матур,
Теҙелеп киткән йорттары.
Шундай инсафлы, сабыр
Беҙҙең яҡтың ҡарттары.
*Ҡушымта:* Эх! Йәмле, күңелле,

Беҙҙең Өршәк буйҙары

Баҡсаларға гөл ултыртам,
Матурын һайлап ҡына.
Яппарымды ныҡ яратам,
Гел торам уйлап ҡына.

Яппар тауҙары бейек тә,
Яландарында кейек.
Кеше йәрҙәрен һөйөү –
Беҙҙең яҡтарҙа яҙыҡ.

Әкрен иҫкән ел уята
Өршәктең ҡамыштарын.
Әйҙә, киттек һыу буйына,
Таралыр һағыштарың.

**Боронғо ла башҡорт юлдары** (312)

Боронғо ла башҡорт юлдары,
Шунда ҡалған тарих эҙҙәре.
Халҡым үткән тормош йылдары
Беҙгә васыят улар йырҙары.

Боронғо ла башҡорт юлдары,
Билге ҡуйған уның үрҙәре.
Шул тарафтың һәр бер төйәге –
Мең иленең булыр ерҙәре.

Боронғо ла башҡорт юлдары,
Батырҙарын йыйған тауҙары.
Тыуған илен, ғәзиз еркәйен,
Һаҡлап ҡалған башҡорт улдары.

**Туй мәжлесе йыры** (248)

Сабып килер атының

Ялын тарап үрәлер.
Хаҡ йәрәшкән кәләшен
Төндә төштә күрәлер.
Көрәгәсе йырлап тора,
Аяҡсы бал тарата.
Көрәгәсе йырлап торһа,
Мәжлес шуны ярата.

Ҡоҙаҡайым, ҡоҙағый,
Балыңды һин һуҙа ҡуй.
Һандуғас һайраған кеүек
Иҫтә ҡалһын беҙҙең туй.

Ай, бал микән, бал микән,
Балдың һарыһы икән.
Беҙҙең кеүек ултырғандар
Бүтән ерҙә бар микән?

**Ҡорос аттар** (87)

Тракторҙар – ҡорос аттар
Ҙур йөктәрҙе тарталар.
Беҙҙең Яппарҙың ҡыҙҙары
Бары ла эште яраталар.

Тракторҙар – ҡорос аттар
Ҡолас йәйеп эшләйҙәр.
Беҙҙең Яппарҙың халығы
Бары ҙа яҡшы йәшәйҙәр

**Сәриә** (179)

Өршәк буйҙарында бер кешенең бик матур Сәриә исемле ҡыҙы була. Уға ғашиҡ булмаған ир-егет булмаған. Ҡыҙ менән бер балыҡсы егет бер-береһен яраталар. Балыҡсы  ептән бик оҫта ау бәйләгән. Шул ҡыҙҙы Өршәктең түбән ағымындағы бер бай ҡатынлыҡҡа алып китә. Был егет менән ҡыҙ бер-береһен яратһалар ҙа, яҙмыш уларҙы айыра. Егет күҙ йәштәре менән ҡыҙҙы оҙатып ҡала.

Аҡ уҡанан ау бәйләнем, Сәриә,
Бер бөртөгө ҡалғансы, һандуғас балаһы.
Оҙата сыҡтым, ҡарап ҡалдым, Сәриә,
Күҙ керпегем талғансы, һандуғас балаһы.
Ағиҙелгә төплө төшмә, Сәриә,
Төшмә бер үҙең генә, һандуғас балаһы.
Эстәремде өҙөр өсөн, Сәриә,
Ҡалды бер һүҙең генә, һандуғас балаһы.

**Исмәғил ауылы йәштәре йыры** (166)

Эх-ха-ха тигән тауышҡа
Ҡаҙҙар ҡаса ҡамышҡа.
Йоҡлағандар уянһындар
Беҙ йырлаған тауышҡа.

Ҡаҙҙар ҡайта, ҡаҙҙар ҡайта,
Ҡаҙҙар ҡайта бойҙайҙан.
Кеше йәренә ҡыҙыҡма,
Үҙең һора хоҙайҙан.

Ҡаҙҙар оса, ҡаҙҙар соа,
Ҡаҙҙар оса көҙ еткәс.
Ҡыҙҙар китә үҫеп еткәс,
Атай йортларын ташлап.

Ҡаҙҙар ҡайта, ҡаҙҙар ҡайта,
Ҡаҙҙар ҡайта яҙ еткәс.
Ауыр булһа була инде,
Ҡыҙҙар ҡайтмай бер киткәс.

Ҡаҙҙар матур, ҡаҙҙар матур,
Ҡаҙҙар матур гәпләшһә.
Шундай ауыр, шундай ҡыйын,
Һөйгән йәрең көнләшһә.

**Бүртә атҡай** (34)

Бүртә атҡайҙарың яҡшы булһын,
Алыҫ ҡына юлға сыҡҡанда.
Дуҫ-ишкәйҙәрең яҡын ғына булһын,

Ауырлыҡтар килгән сағында.

Көмөш кенә уҡа, әй, йүгәне,
Бүртә атҡайҙарҙың башында.
Батыр ғына ирҙең, әй, йүнлеһе
Яҙылып ҡуяр тауҙың башында.

Был йырҙы һуғышҡа тиклем Ибрай ауылында бер бик ҡарт бабай мәжлестә йырлағайны. Элек был ауыл Дәүләкән районына кергән, хәҙер Әлшәй районына ҡарай.

**Егеттәр йыры** (229)
(Ишек төбө йырҙары)

Кис ҡыҙҙар янына барып, егеттәр йыр йырлар инек. Йырлаһаң, асырҙар, йырламаһаң – интектерерҙәр ине ишекте асмай.

Эй, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары,
Беҙҙең Шәрип ҡыҙҙары.
Таңға тиклем тыңлар инем,
Биг(е)рәк матур йырҙары.

Эй, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары,
Матур икән йөҙҙәре.
Өйҙө бикләп ҡуйғандар,
Харап икән үҙҙәре.

Эй, ҡыҙҙары, ҡыҙҙары ла,
Биг(е)рәк сибәр үҙҙәре.
Әйҙә тиеп әйтеүсе юҡ,
Биг(е)рәк яман һүҙҙәре.

**Күңел йыры** (237)
(боронғо йыр)

Ел елләйҙер ҙә бурайҙыр,
Бураҙнаға һалаҙыр.
Ҡарҙар иреп, яҙҙар килһә,
Күңел яманһыулайҙыр.

Ел елләйҙер ҙә уйнайҙыр,
Ҡылған башын тарайҙыр.
Ямғыр яуып, болот булһа,
Күңелдәр тулышаҙыр.

Ел елләйҙер ҙә өйөрөлөп,
Ҡойон күтәреләҙер.
Ҡәрҙәштәрем, бергә булһаҡ
Күңелем күтәреләҙер.

**Салауат** (48)

Салауат нисә йәшендә,
Йәшел ҡамсат бүрке башында?
Булғадир булған, ай, Салауат
Егерме лә ике йәшендә.

Яланда йөрөгән йылҡының
Алалары бар ҙа, буҙы юҡ.
Яуҙарҙы ҡырған, ай, Салауат,
Атҡынайы ҡайтты, үҙе юҡ.

Йүрүҙән һыуы туғайы,
Сырлап ҡына осор турғайы.
Салауат менән Юлайҙың
Сыңғырайҙыр тимер бығауы.

Салауат йөрөгән кир аттың
Ялғынаһын кемдәр тараған?
Салауаттың һиҙгер күҙҙәре
Алыҫтарға текләп ҡараған.

**Мәҙинәкәй** (54)

(Хәмәҙиева Зайҙа Хәбибулла ҡыҙы: “Инәйемдең яратып йырлаған йыры”, – тине.)

Ыласындар оса, ай, һауала,
Мәҙинәкәй, гөлкәйем,
Һандуғастар ҡуна талдарға.
Һандуғастай һайрар ҡыҙ баланы
Мәҙинәкәй, гөлкәйем,
Яҙмыш һата икән малдарға.

Йылға буйҡайҙары, ай, ҡамышлыҡ,
Мәҙинәкәй, гөлкәйем,
Аҡҡош балалары ҡағына.
Иртән генә тороп, тышҡа сыҡһам,
Мәҙинәкәй, гөлкәйем,
Тыуып үҫкән ерен һағына.

Сал бөркөткәй осор, ай, шыҡыйып,
Мәҙинәкәй, гөлкәйем,
Ябалаҡ та йоҡлар түш киреп.
Таңдар атҡан саҡта бер ҡыҙ илай,
Мәҙинәкәй, гөлкәйем,
Түшәгендә ауыр төш күреп.

**Өфө тураһында йыр** (115)

(Мәктәп музейы архивынан)

Өфө ҡайҙа, Өфө йыраҡ,
Өфө Урал тауында.
Ҡайғырмағыҙ, осрашырбыҙ
Йәйге һабан туйында.

Өфө тиеп бер йырлайыҡ,
Күңелдәр бушанғансы.
Ауырлыҡтар килә ҡалһа,
Бергә, дуҫтар, булайыҡ.

Өфөләргә барам әле,
Ал гөлөн алам әле.
Шул гөлдәрҙән бәйләм яһап
Дуҫтарға бирәм әле.

Өфөләр тип бер уйларһың,
Йәшлек йылдарың үткәс.
Һағынырһың, һарғайырһың,
Һөйгәнең ятҡа күскәс.
Өфө ҡалалары матур,
"Өф" тиеп торор инем.
Бер саҡырып хаттар яҙһа,
Янына барыр инем.

Өфө тиеп бер янырһың,
Йәшлегең иҫкә төшкәс.
Ултырып та бер иларһың,
Ғүмерҙәр үтеп киткәс.

**Кәләш кейәүләү** (248)

Сабып килер атының
Ялын тарап үрәлер.
Хаҡ йәрәшкән кәләшен
Төндә төштә күрәлер.

**Туй ҡаршылағандағы йыр** (293)

Ҡоҙаларым, килдегеҙ,
Килдегеҙ, күрендегеҙ.
Зөһрә йондоҙ кеүек кенә,

Нурлы һеҙҙең йөҙөгөҙ!

**Дәрхән[*] көйө** (97)

Дәрхән күлдәренә барып,
Күңелде асам әле.
Дәстән ерҙәренә ҡарап,
Бер йырлап алам әле.

Дәрхән күлдәре тирәләп,
Аҡ тирмәләр ҡоролған.
Дәстән түрәне тирәләп,
Аҡ һаҡалдар ултырған.

**Мәкәштәр йыры** (261)

Ап-аҡ итеп ҡарҙар яуған,
Яумаған үләндәргә.
Өндәшмәйҙәр, һөйләшмәйҙәр
Ни булған мәкәштәргә?

Өй артымда баланым,
Көн дә йыйып аламын.
Кеше хәлен кеше белмәй,
Көн дә илап аламын.

Өй артындағы миләште
Кемдәр әйтә "балан" тип.
Үҙ инәйем булмағас
Кемдәр әйтер "балам" тип?

---

[*] Дәрхән – Дәүләкән ҡалаһынан йыраҡ түгел, элекке Дәүләтхан ерҙәрендә урынлашҡан күл. Дәүләтхан – Дәүләкәнгә нигеҙ һалыусы. Дәрхән/дархан – *тархан* һүҙенән.

Ал алъяпҡыс быуғандарҙың
Билдәре нәҙек аның.
Һәр кемдең дә балалары
Үҙенә ғәзиз аның.

Ямғыр яуа ҡар ҡатыш,
Инде килеп етте ҡыш.
Урмандарҙа йәм ҡалманы,
Һис һайрамай осҡан ҡош.

Ап-аҡ микән, ҡар микән,
Яумаған ер бар микән.
Яныйым да минең кеүек,
Бер күрергә зар микән.

Һары һаплы, һары бәке
Булһа булыр Мәкәштә.
Беҙҙең эстә нимә ятмай,
Һеҙгә һөйләмәгәс тә.

Эсем бошһа, һүтә башлайым
Сәсемдең үргәндәрен.
Һис кенә лә һөйләй алмайым
Башымдың күргәндәрен.

**Дәүтән бейгә бағышланып сығарылған боронғо йыр**

(69)

Йәйрәп ятҡан Димдең буйҡайы –
Ҡырҡөйлө лә меңдең илкәйе.
Бигеш кенә тауҙа тирмәләр,
Дәүтән бейҙең булыр ҡәлғәһе.

Дим буйының изге еркәйе –
Ҡырҡөйлө лә меңдең илкәйе.
Дәрхән күлдең һутлы туғайы –
Дәстән бейҙең булыр йәйләүе.

**Ҡыр ҡыҙы йыры*** (74)

Ҡаҙанғол ауылында бер байҙа хеҙмәтсе ҡыҙ йәшәгән. Һәр ваҡыт уның ғүмере йәйләүҙә, ҡырҙа уҙған. Ул һыйыр, бейә һауып ҡымыҙ яһаған. Шуға күрә уны “Ҡыр ҡыҙы” тип атағандар, шул төбәкте, бейә бәйләү урынын “Ҡыр ҡыҙы төбәге” тип йөрөткәндәр. Ошоға бағышланған йыр.

Ҡыр ҡаҙҙары осҡан йылы яҡҡа
Тыуған ерҙәрен дә ҡалдырып.
Бер ҡыр ҡаҙы тороп ҡалған күлдә
Ғәрип ҡанатҡайын талдырып.

Ҡаңғылдап та ҡанат ҡаға меҫкен:
Яңғыҙ башым инде нишләр? – тип,
Кем уйлаған, минең яҙмышым да
Шул ҡаҙ яҙмышына оҡшар тип.

Ҡыр ҡыҙы ла һинең, эй, йәшлегең
Үтеп китәр микән ҡырҙарҙа?
Бейә һауып, тәмле ҡымыҙ яһап,
Үтәр микән ғүмерең ҡырҙарҙа?

**Ерәнсәкәй атым** (49)

Ерәнсәкәй аттың, ай, ялдарын
Ҡиблаларҙан иҫкән ел тарай

---

** Ошо уҡ йыр 1965 йылда Ҡаҙанғол ауылында йәшәүсе Сафина Сәрбиямал әбейҙән (1901 йылғы) яҙып алынған, әлеге ваҡытта Ҡаҙанғол мәктәп музейында һаҡлана.*

Эй бәхеткәйҙәрең бер булмағас,
Байға хеҙмәт итеп кем ярай?

Ерәнсәкәй аттың, ай, матурын
Көмөш теҙгендәр ҙә биҙәйҙер.
Батыр ғына ирҙең, ай, аҫылын
Көрәш майҙандары һынайҙыр.

Ерәнсәкәй аттың, ай, ялына
Ҡыҙыл таҫмалар ҙа элергә.
Хоҙай тәғәлә беҙгә шулай ҡушҡан
Күрше менән тыныс йәшәргә.

**Туғандарға мәҙхиә** (307)

Эй, туғандар, һеҙ генә лә
Минең бәғерләремдә.
Үлһәм дә һеҙҙе эҙләрмен,
Ятһам да ҡәберләрҙә.

Эй, туғандар, һеҙҙең менән
Шат минең күңелдәрем.
Гелән шулай һеҙҙең менән
Үтһен ине ғүмерҙәрем.

**Һәбиләгә** (80)

(мәктәп музейынан, 1960 й.)

Элек Яппарҙа бик хәлле бер бай булған. Уның берҙән-бер матур Һәбилә исемле ҡыҙына Бигеш ауылының бер көтөүсе егете ғашиҡ була. Был бай бик асыулана быға, сөнки ҡыҙын икенсе бер бай улына йәрәшкән була. Ағалары ҡыҙҙы һәр ваҡыт һаҡлап йөрөр булғандар. Меҫкен егет үҙенең яратҡанлығын Бигештең бейек тауына менеп ҡурай аша белдерә икән. Был тау ҡалҡыулыҡты Ҡурай тауы тип

йөрөтәләр. Хәҙер был ауыл юҡ инде. Ауылдар араһы бер-ике саҡрым ғына булған.

Яппар ҡыҙҙарының сибәрлеген
Йондоҙҙарға тиңләр инем мин.
Шул йондоҙҙар араһынан һайлап,
Һәбиләкәй һине алырмын.

Беҙҙең яҡтан һеҙгә елдәр иҫһә,
Ҡурайымды алам уйнарға.
Улар һиңә сәләм әйтер төҫлө,
Һинһеҙ миңә тормош юҡтыр тип.

Яппар менән Бигеш араларын
Һары ҡылған ғына баҫҡандыр.
Бейек тауға менеп йыр йырлайым,
Бәлки, ишетерһең иркәм тип.

Ике саҡрым ғына беҙҙең ара,
Йүгереп тә барыр ер генә.
Көтөү-көтөү малдар табыр инем,
Атаң риза булһа бирергә.

Бигеш менән Яппар араһында
Ерекле лә шишмә ағаҙыр.
Таш күперҙәр шунда һалыр инем,
Ағаларың риза булһасы.

Бигеш менән Яппар аралары,
Юлдары ла бигерәк бормалы.
Ҡырҙарына гөлдәр сәсер инем,
Инәң генә риза булһасы.

**Өйрәккүл** (160)

(Исмәғилдәр йыры)

Өйрәккүлдең көмөш һыуҙары,
Тирә-яғы зифа ҡамышлы.
Шул төбәктәр беҙгә бигерәк яҡын –

Башҡорттарҙың йәйләү урыны.
Өйрәккүлдең тоноҡ һыуҙарында
Аҡ аҡҡоштар ҡанат ҡағына.
Шул күлкәйгә тағын барырмын тип,
Күңелкәйем минең һағына.

Өйрәккүлдең тирә-яғын
Һары томбойоҡтар баҫканмы?
Әллә шулай беҙҙең кеүек улар
Һағыш уттарына төшкәнме?

Өйрәккүлдең итәктәрен биҙәй
Ҡырысталдың тауҙар теҙмәһе.
Шул тауҙарҙың ҡылған битләүендә
Өйөр-өйөр йылҡы йөрөйҙөр.

Ошо уҡ йыр "Өйрәк күле" тигән исем аҫтында Ҡаҙанғол мәктәбе музейында табылды, уҡыусылар Мәхүп исемле әбейҙән яҙып алғандар (1895 йылғы Исмәғил ауылында тыуған, Ҡаҙанғолға тормошҡа сыға).

Өйрәккүлдең йәмле, ай, буйҙары
Туғайында – билан муйылы.
Шул ерҙәрҙә элек бесән сапҡан
Ата-бабаларҙың улдары.
Өйрәккүлдең тымыҡ һыуҙарында
Ҡаҙ-өйрәктәр сума торғандар.
Элегерәк ошо изге ерҙә
Бабаларым төйәк ҡорғандыр.

Йырҙың икенсе бер вариантын, Ҡаҙанғол ауылында йәшәүсе Сәйфетдинов Ғилметдин бабай әйтеүенсә, Иҫке Ҡаҙанғолда – совхоз Ҡаҙанғолонан Әптрәхим исемле ҡарт, ҡарсығы Гөлсөм менән ҡунаҡ ваҡытында башҡарҙылар.

Өйрәккүлдең буйы бигерәк йәмле,
Шунда нигеҙ ҡорған башҡорттар.
Күлкәйенең һыуы бигерәк йомшаҡ,

Шишмәләре аға сылтырап.

Өйрәккүлкәй, һинең, ай, күлеңдә
Өйөр-өйөр өйрәк йөҙәлер.
Үҙәктәрем минең, ай, өҙөлә
Һыуҙарында нисек йөҙөргә.

**Ауылым кистәре** (101)
(мәктәп музейы сығанаҡтары)

Һары ла ғына алтын, ай, бигерәк,
Яппарымдың айлы кистәре.
Ҡурай моңдарына ҡушылып,
Ағыла йырым – күңелем хистәре.
Һандуғастар һайрай сут-сут тип,
Һары талдарға ла бер ҡунып.
Тәңреләргә тәсбих әйтәләрҙер,
Тыуған илем шундай матур тип.

**Кейәү ҡаршылағанда йырлай торған йыр** (257)

Ишек алдым гел сәскәле,
Ҡыҙҙар йыйып шатланһын.
Егете һеҙҙән, ҡыҙы беҙҙән,
Бергә йәшәп ҡартайһын.

Ишек алдында баланым
Балан түгел, миләштер.
Оло ҡыҙымды һиңә бирҙем, кейәү,
Ҡаҡмай-һуҡмай эйәләштер.

**Ауыл көйҙәре** (287)

Ҡоръятмаҫтың тауҙарында
Үҫкәндер умырзая.
Был донъяла ишеңде тап,
Үтмәҫен ғүмер зая.

Ҡоръятмаҫтың юл сатында
Үҫкәндер ялғыҙ ҡайын.
Шул ҡайынды ҡосаҡлайым
Һине һағынған һайын.

Беҙҙең Ҡоръятмаҫ ҡәрйәһе
Асылыкүл буйында.
Йәшләй һөйгән йәрең булҫа,
Шул ҡалаҙыр уйыңда.

**Әлшәй-Дәүләкән** (279)

Әлшәй – Дәүләкән,
Һөйгәнең сәләм әйткән.
Вәғәләйкүм-әссәләм,
Үҙенә лә әйт сәләм.

Әлшәй – Дәүләкән,
Һөйгәнеңде урлағандар.
Вәғәләйкүм-әссәләм,
Ҡоҙаларға ла әйт сәләм.

# ТАҠМАҠТАР

**Таҡмаҡтар** (108)

Ниңә бәреләләр икән
Болоттарға болоттар?
Ниңә тиҙ үтәләр икән
Бергә булған минуттар?

Оса ҡаҙҙар, оса ҡаҙҙар,
Оса ҡаҙҙар Донбассҡа.
Мин дә уйлап торам әле
Шул ҡаҙҙарҙан ҡалмаҫҡа.

Ҡыҙыл-ҡыҙыл бөрлөгәндәр
Юл буйына теҙелгән.
Булмаҫ инде минең кеүек
Һеҙҙең өсөн өҙөлгән.

Сәс үргесем, сәс үргесем,
Сәсемде үрер өсөн.
Таһир үлгән Зөһрә өсөн,
Мин үләм һинең өсөн.

*         *         *

Ишек алды аҡ балсыҡ
Бата күрмә, атлап сыҡ.
Һин дә минән артыҡ түгел,
Бер аҙ ғына маҡтансыҡ.

Йәйгә сыҡһаң йыярһың,
Ҡыҙыл бөрлөгәндәрҙе.
Нисек итеп онотайым

Бергә йөрөгәндәрҙе.

Беҙҙең кашауай бәләкәй,
Икәү һыярлыҡ түгел.
Беҙҙең күңел аҙған инде,
Кеше тыярлыҡ түгел (93).

Баланы беҙ үҫтерәбеҙ,
Аҡылын Алла бирә.
Әллә яҡшы, әллә яман,
Уны кем генә белә?

Ғүмер буйы йүгергәнгә
Һыҙлай аяҡ табаным.
Унынына әрнемәйем,
Зая үтте заманым.

Аламалыҡтар күргәндә
Өҙөлөп төшә йөрәгем.
Был хәсрәттәргә түҙә алмай
Мин, ахыры, үләрмен.

Ниндәй кәңәштәр бирһәм дә,
Мине уҫал, тинегеҙ.
Мин үләрмен, һеҙ ҡалырһыҙ,
Рәхәт ғүмер итегеҙ.

Сабырлығым – инәйемдән,
Аҡылды биргән атам.
Таҙалыҡты һәм зиһенде
Тартып алмаһын Аллам.

Һеҙҙән бер ни кәрәк түгел,
Бары бер генә теләк.
Иптәштәреңдән көнләшеп,
Донъя көтөргә кәрәк.

Балаларыма рәхмәт,

Биткә ҡара яҡмайҙар.
Көнө-төнө эшләйҙәр,
Иҫәңгерәп ятмайҙар.

Асылы тәрән икән,
Йөҙөүе уңай икән.
Минең эстәрем өҙөлә,
Һеҙҙең дә шулай микән?

Һыу инәм тип төшкән инем,
Асылы һыуы һалҡын.
Ҡысҡырып йырлап ебәрәм,
Эсем тулы ут-ялҡын.

Асылыла йөҙгәндә,
Кинәнеп ишкәк ишкәндә.
Ҡысҡырып йырлап ебәрәм,
Һеҙ иҫемә төшкәндә.

Мин ултыртҡан ағастарҙың
Тамырын ҡоротмағыҙ.
Әле онотмаған кеүек,
Үлгәс тә онотмағыҙ.

Тормош юлдары бик ауыр,
Түҙһәң еңергә була.
Бәхетте һәм мөхәббәтте
Беркетеп тора бала.

Һеҙҙән бер ни кәрәкмәй,
Хәл белһәгеҙ – шул етә.
Балаларым ҡайтыр, тиеп,
Йөрәк һаман да көтә.

Ишек алдым йәшел сирәм,
Аттарҙан кимертмәгеҙ.
Тороп ҡалдым яңғыҙ башым,
Хаттарһыҙ тилмертмәгеҙ.

Баҫма һалдым тар ергә,

Тал тамыры бар ергә.
Осоп барып ҡайтыр инем
Балаларым бар ергә.

Мин ағастар күп ултырттым,
Һандуғастар ҡунһын тип.
Мин булмаһам һеҙ ҡайтҡанда,
Һайрап ҡаршы алһын тип.

Алмағасым алмалана,
Сейәләр сейәләнә.
Үҙ бәхетең булһа ғына,
Сәстәр сәскә бәйләнә.

Һин үҫтерҙең улыңды,
Мин үҫтерҙем ҡыҙымды.
Ике ара татыу булһын
Бир, ҡоҙағый, ҡулыңды (299).

### **Иҫке Яппар таҡмаҡтары** (78)

Иҫке Яппар ауылында
Күтәрелде ел-дауыл.
Булма матур, бул бәхетле,
Бәхетһеҙлектәр ауыр.

Иҫке Яппар шуға матур,
Тау битләүендә генә.
Яндарыңа килер инем
Хаттар эсендә генә.

Иҫке Яппар, Яңы Яппар
Уртаһында фабрик.
Беҙҙән һеҙгә, һеҙҙән беҙгә
Булһын ҡотлау-тәбрик.

Беҙҙең Яппар баҫыуында

Йәшелләнә һуғандар.
Йәшелләнгән һуғандарҙай
Йәшәгеҙ һеҙ, туғандар.

**Таҡмаҡтар** (230)

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Миңлегөл.
Ауыр хәбәр ишетһәгеҙ,
Хәлдәремде килеп бел.

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Сәлихйән.
Ҡатыныңды айырып ебәр,
Телдәренән ялыҡһаң.

Шәрип ауыл урамында
Ағас күпер һалғандар.
Беҙ айырылдыҡ та һарғайҙыҡ,
Һарғаймаһын ҡалғандар.

Ярыштауҙың баштарында
Ике ҡайын бер төптә.
Икебеҙ ике яҡтарҙа,
Һағынмайбыҙ бөртөк тә.

**Таҡмаҡтар** (91)

Айҙар ғынайым да, вайҙар ғынайым,
Беҙ ултыртҡан кукуруздар
Сәскә ата, ғынайым.
Ал итә, итә, итә,
Гөл итә, итә, итә,
Янығыҙға килеп индек
Ял итә, итә, итә.

Алай итеп, былай итеп,

Үтә беҙҙең ғүмерҙәр.
Ҡысҡырып йырлап ебәрһәң,
Күтәрелә күңелдәр.

Ҡайыш быу билдәреңә,
Ҡайыш быу билдәреңә.
Сит илдәрҙә күп йөрөнөң,
Ҡайт тыуған илдәреңә.

Ҡайыш быуырһың әле,
Ҡайыш быуырһың әле.
Сит илдәрҙә күп йөрөһәң,
Ялғыҙ ҡалырһың әле.

Тыпыр баҫалаһыңмы,
Тыпыр баҫалаһыңмы?
Кисә баҫҡан эҙҙәреңә
Бөгөн баҫалаһыңмы?

Аяҡтары ялт итә,
Аяҡтары ялт итә.
Йәшлек аҡылдары менән
Ташламам, тип ант итә.

Алмалар бирәм алһаң,
Гөлдәрен бирәм алһаң.
Ҡәҙерҙәрең китәр әле,
Ят ҡулдарына ҡалһаң.

Ҡар урманда ҡараҡ бар,
Абзый, атың ҡарап бар.
Беҙ китәбеҙ сит яҡтарға,

Тыуған яҡты ҡарап ҡал.

Ҡараңғыларға ҡалдым,
Һин бит минең яҡын дуҫым,
Янған уттарға һалдың.

Иҫкән елдәр иҫә инде
Ҡалын шәл ябынһам да.
Мин барып күрә алмам инде,
Өҙөлөп һағынһам да.

Иҫә елдәр, етә көҙҙәр,
Иҫкән елдәр файҙаһыҙ.
Төндә күрәм төштәремдә,
Көндөҙ әллә ҡайҙаһыҙ.

Иҫеңдәме, иҫкән елдәр
Һындырҙы гөлдәремде.
Һынған гөлдәргә оҡшатам
Айырылған көндәремде.

Айырым үтә төндәрем,
Айырым үтә көндәрем.
Айырым үтһә лә ғүмерҙәр
Айырылмай күңелдәр.

Айырылдыҡ айғамы?
Айға түгел күпкәме?
Айға түгел, йылға түгел,
Әллә ғүмерлеккәме?

Бергә булдыҡ бер заман

Бергә йәшәүҙәр бер заман,
Айырым йәшәүҙәр яман.

Һары һандуғас тотайым,
Телен нисек отайым?
"Көт мине, ҡайтырмын" – тигән
Һүҙен нисек онотайым?

Һары һандуғас балаһы
Һыу буйында һыу тапмай.
Һыу тапмағас үлән ҡалмай,
Яңғыҙ баштар йәм тапмай.

Һандуғасым, гүзәлем,
Һындырма төн үҙәген.
Тик бер үҙем генә беләм,
Үҙәгем өҙөлгәнен.

Һандуғасты кем ҡурҡытҡан
Ҡунаҡлаған еренән?
Кемдең дә китәһе килмәй
Тыуып үҫкән иленән.

Һандуғасым, бәләкәйһең,
Ҡағынмайһыңдыр инде?
Һин сабырһың, дуҫыҡайым,
Һағынмайһыңдыр инде.

Һары һандыҡ ниңә кәрәк?
Һабын һалырға кәрәк.
Һағынһаң да, һарғайһаң да
Һабыр итергә кәрәк.

Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исемдәре Саралыр.
Һағыныуым, һарғайыуым
Хат эсендә баралыр.

Хаттар яҙҙым ултырып,
Ҡағыҙ бите тултырып.
Иҫән булһа ҡайтыр әле,
Машинаға ултырып.

Иркәм ярата ине,
Иркәм иркәләй ине.
Иркәм китте алыҫтарға
Кемдәр иркәләр мине?

Минең иркәм бар ине,
Үҙемә тиң, пар ине.
Ҡара ҡашлы, ҡара күҙле,
Бигерәк матур йәр ине (270).

**Шаян таҡмаҡтар** (270)
(Әминева Гәүһәр Мөхитдин ҡыҙы яҙып алған)

Кисә лә эшкә барманым,
Бөгөн дә эшкә барманым.
Башҡайым ауырта – тиеп,
Бригадирҙы алданым.

Бригадир эшкә әйтһә,
Бер ултырам, бер торам.
Аҙна һайын ете сотый
Төшөрөп кенә торам.

Бригадирҙың ҡалҡаны –
Ике генә арата.
Кем ашата, кем эсерә –
Шуны ғына ярата.

Бригадир сәй эсә,
Бал да май алдарында.
Ҡалаҡлап он бүлешәбеҙ
Ҡалдауай яндарында.

Фермала һарыҡ һуйғандар
Билдәмәһе Шакирға (председатель).
Түше, башы, эс-ҡарыны
Сәхибгәрәй һуҡырға.

Бейейек әле, йырлайыҡ әле,
Йыр күңелде аса ул.
Йыр күңелдәрҙе аса ул,
Ҡайғы-хәсрәт баҫа ул.

Ал бәйләйҙәр, гөл бәйләйҙәр
Алдан килгән аттарға.
Һағыныуҙарым, һағыштарым
Барыр микән хаттарҙа?

Ҡыңғыраулы талъян гармун
Кемдәр уйнатыр икән?
Һин булмағас, күңелемде
Кемдәр йыуатыр икән?

**Шаян таҡмаҡтар** (71)

Ал алъяпҡыс быуалар,
Бауын ҫалындыралар.
Майға ҫалһаң, эт ашамай,
Шулар ялындыралар.
Әрәмәлә эт йөрөй ҙә,
Әрәмәлә эт өрә.
Матурлығы бер ни түгел,
Атлауҙары үлтерә.

**Яппар таҡмаҡтары** (135)

Еҫле гөл еҫле була,
Еҫле гөл еҫле була.
Еҫле гөлдөң сәскәләре
Гел һинең төҫлө була.

Яратам мин ҡынаны,
Яратам мин ҡынаны.
Яратмаҫ инем ҡынаны,
Һиңә оҡшатам мин аны.

Дим буйында әрәмә лә,
Әрәмәлә ҡарама.
Әгәр  һинән көләр булһа,
Әйләнеп тә ҡарама.

Дәүләкәнгә барған яҡта
Үҫкән икән ваҡ ҡайын.
Тыуған яҡтарыңдан китһәң,
Була икән бик ҡыйын.

Яппар яҡтарына табан
Теҙелеп киткән ҡарағас.
Күңелдәрем тулып китте,
Матур итеп ҡарағас.

Тау буйҙары итәгендә
Үҫеп сыҡҡан бер сейә.
Һөйгән йәре ташлап киткән,
Шуға йәндәре көйә.

Баҡсаларым түр башында
Үҫкән матур алмағас.
Ваҡытыңды буш уҙғарма,
Ник йөрөйһөң алмағас?

Өй артымдағы баҡсамда
Ҡыҙарып бешкәндер миләш.

Яңғыҙ булыуҙары ҡыйын,
Ниңә алманың кәләш? (156)

*      *      *

Ялтыр-йолтор ут күренә
Әрем араларында.
Әллә үҙем ирем матур
Әҙәм араларында (86).

**Таҡмаҡтар** (83)

Аҡ алъяпҡыс быуалар,
Бауын һалындыралар.
Майға манһаң, эт яламай
Шулар ялындыралар.

Лавкаларға барып кергәс,
Алдым бер кило ҡалас.
Әллә ҡалас, әллә ағас –
Белмәйем йөрәк янғас.

Телеграмм бағанаһын
Шылтыратып ел ҡаға.
Авторитың төшөп ҡалған,
Сдавать ит сельпоға.

**Мәкәш таҡмаҡтары** (256, 261)

Исемдәре, исемдәре
Исемдәре Исырай.
Аҡ бирсәткә биргән инем,
Ҡараһын тағы һорай.

Исемдәре, исемдәре,

Исемдәре Исырай.
Ауылығыҙҙан йәр һөйһәгеҙ –
Сыҡҡан һайын осорай.

Иҫке Яппар, Яңы Яппар,
Уртаһында ҡарағай.
Ҡәһәр һуҡҡан анау егет
Әйләнеп тә ҡарамай.

Исемдәре, исемдәре,
Исемдәре Рәсилә.
Һөйгән йәрен һатып эскән
1 литр кәрәсингә.

Кәзә һауаһым да бар,
Һыйыр һауаһым да бар.
Өй артына егет килгән –
Анда сығаһым да бар.

Ике лимон, бер әфлисун,
Әфлисуны үҙемә.
Елдән тамған тамсы кеүек
Күренәһең күҙемә.

Алмалары, хөрмәләре,
Ҡыҙарып бешәр әле.
Әле иҫеңә төшмәһә,
Һуңынан төшәр әле.

Ҡараһаң да күренмәй ул,
Беҙҙең Мәкәш соҡорҙа.
Минең яҙған мөнәжәтем
Һеҙгә ҡалһын уҡырға.

Эй, ҡайын ул, ҡайын ул,
Ҡайын урман һайын ул.
Ҡайғы миндә генә түгел,
Ҡайғы кеше һайын ул.

Ике ҡайын, ҡуш ҡарама,
Иҙел утрауында.
Ҡысҡырамын да йырлайым,
Уйлап ултырамын да.
Үҙем йырлайым, үҙем илайым,
Үҙем бөрлөгән өҙәм.
Хәсрәт даръяһында йөҙәм,
Ауыр булһа ла түҙәм.

Ишек алдым аҡ ҡына,
Аҡ ҡына, ҡыуаҡ ҡына.
Ҡыҙ балаға һүҙ әйтмәгеҙ,
Ҡыҙ бала ҡунаҡ ҡына.

Иртән дә ҡаптым йөҙөм,
Кистән дә ҡаптым йөҙөм.
Йөҙөм сәскәләре кеүек
Яныйым, нурлы йөҙөң.

Баҡсаларҙа ике түтәл,
Береһен аны һин күтәр.
Илама күҙләрең бөтәр,
Йырлап күңелең күтәр.

Ашаһым килмәй минең,
Эсәһем килмәй минең.
Һыу юлында түңәрәк күл,
Төшәһем килмәй минең.

Ҡарурманды әрсегеҙ,
Әрсеп, сәйләр эсегеҙ.
Яныҡайым тыумаç борон
Бәйләнгәндер сәсебеҙ.

Әйҙә киттек ҡарурманға

Бөрлөгәнен ашарға.
Мин аҡылдан яҙмағанмын
Бер башлағас ташларға.

Самауыр ҡуйҙым ағартып,
Ҡиблаларға ҡаратып.
Өс көн түгел, өс ай түгел,
Өс йыл йөрөнөм яратып.

Кәкүк-кәкүк тип әйтәләр,
Кәкүк тә – ялан ҡошо.
Моңло-моңло тип әйтәләр,
Моңло – бәхетһеҙ кеше.

Скрипкамдың баштары
Һығыла-бөгөлә башланы.
Һағынмамын тигән инем,
Һарғайта ла башланы.

Һандуғастар ҙа һайрамай,
Һандуғастар ҙа сабыр.
Былай йөрәккәйем янһа,
Көл-күмерҙәргә ҡалыр.

Сын-сынаяҡ алған инем,
Сатнамаç тигән инем.
Үҙе һөйгәс һөйгән инем,
Ташламаç тигән инем.

Алмы һинең көйәнтәң,
Гөлмө һинең көйәнтәң.
Алмағастарға һөйәләм
Күренер микән һөйәркәм?

Аттың алаһы була,
Ем-ем ҡараһы була.
Хоҙай тәғәлә насип итһә,
Һөйгәс бараһы була.

Тәҙрә төбөм еçле гөл,

Арлы-бирле бөгөлһөн.
Һинең өсөн өҙөлә эсем,
Минең кеүек түгелһең.

Уйлай күңелем, уйлай күңелем,
Уйлай күңелем барһын да.
Уйлама күңелем барһын да
Әҙерәге ҡалһын да.

Аҡсаларың булған саҡта,
Байлар кеүек йәшәнең.
Инде хәҙер мөлкәт бөткәс,
Бармаҡ һурып йәшәйһең (228)

**Фәриҙун таҡмаҡтары** (302)

Беҙ Фәриҙун, беҙ Фәриҙун,
Беҙ Фәриҙун бит әле.
Çағынырçың, çарғайырçың,
Йыраҡларға кит әле.

Ҡулыңдағы йөҙөгөңдөң
Әйләндереп кей ҡашын.
Үҙем һөймәйятҡа бирмәм,
Әйләндерермен башын.

Вагондарҙың ишегенең
Тотҡаһы юҡ тотарға.
Йәшләй генә өҙөлөп çөйҙөм
Бирәçем юҡ яттарға.

**Белем тураһындағы таҡмаҡтар** (233)

Эй һабаҡташ, һабаҡташ,
Һин, по-нашему, иптәш.
Өфө вузларына керҙең –
Һай, молодец һин, яҡташ.

Киртләс-киртләс теҙелгән
Өфө тауҙары бейек.
Вузға кереп уҡыған
Беҙҙең ҡәрҙәштәр бөйөк.

Өфөләргә барайыҡ та
Вузларына керәйек.
Белемдәргә эйә булып,
Аҡмуллалай булайыҡ.

Элек Өфөгә уҡырға кергәндәрҙе бик хөрмәт итәләр ине, ҙур, абруйлы кеше итеп ҡарайҙар ине.

**Бейеүгә саҡырыу-таҡмаҡ** (176)

Шыуый-шыуый бейергә
Шыма иҙәндәр кәрәк.
Шыма иҙәндәр өҫтөндә
Быяла өҫтәлдәр кәрәк.

Быяла өҫтәл өҫтәрендә
Сын тәрилкәләр кәрәк.
Сын тәрилкә эстәрендә
Майлы ит булыу кәрәк.

Майлы итте бүлергә
Булат бысаҡтар кәрәк.
Булат бысаҡтар тоторға
Батыр егеттәр кәрәк.

Батыр егеттәр янына
Хур ҡыҙҙары ла кәрәк.
Хур ҡыҙҙары эргәһенә
Аҡ сымылдыҡтар кәрәк.

**Таҡмаҡтар** (291)

Таҡмаҡҡа ла мин оçта,
Шаҡмаҡҡа ла мин оçта.
Бригадир эшкә әйтһә
Мин – ауырыу, мин – ҡаçта.

Хөснияммал ерҙәр һөрә
Тракторға ултырып.
Һин киткәстин кемгә ҡарим
Күҙҙәремде тултырып.

Педаленә баçтыниһәң
Тракторҙар ҡуҙғала.
Эйел, башым, түгел, йәшем,
Һине кемдәр ҡыҙғана?

Хөснияммал һыуҙар һала
Радиаторҙарына.
Йырлап-йырлап, яманһыулап,
Сығып ҡарим тыштарға.

**Таҡмаҡтар** (91)

Алай итеп, былай итеп,
Үтә беҙҙең ғүмерҙәр.
Ҡысҡырып йырлап ебәрһәң,
Күтәрелә күңелдәр.

Алай ҙа бергә-бергә,
Былай ҙа бергә-бергә.
Беҙҙең менән бергә булғас,
Күгәрсен кеүек гөрлә.

Ҡайыш быу билдәреңә,
Ҡайыш быу билдәреңә.
Сит илдәрҙә күп йөрөнөң,
Ҡайт тыуған илдәреңә.

Тыпыр баçалаһыңмы?
Кисә баçкан эҙҙәреңә

Бөгөн баçалаһыңмы?

Аяҡтары ялт итә
Йәшлек аҡылдары менән
Ташламам, – тип ант итә.

Тыпырҙатып баçһын ул,
Егет булғас, шулай булһын
Күңелемде асһын ул.

**Ҡаҙанғол таҡмаҡтары** (43)

Эх, үҙебеҙҙең Ҡаҙанғол,
Ултыртҡан гөлдәр кеүек.
Күтәренке күңелдәрем,
Томанлы көндәр кеүек.

Беҙ Ҡаҙанғол, беҙ Ҡаҙанғол,
Беҙ Ҡаҙанғол бит әле.
Беҙҙең менән һөйләшергә
Права иметь ит әле.

Ҡыҙҙар кейгән алъяпҡысы
Сәскәле лә биҙәкле.
Ҡаҙанғолдоң ҡыҙҙары
Тәртипле лә әҙәпле.

Күк көмбәҙе, күк көмбәҙе,
Аяҙлы ла болотло.
Ҡаҙанғолдоң ҡыҙҙары
Үтә сабыр холоҡло.

Беҙ алай түгел инек,
Беҙ былай түгел инек.
Беҙ еткәндә егет булып
Тәмәке тартмай инек,
Араҡы эсмәй инек.

Шырпы ҡабы, шырпы ҡабы,

Шырпы ҡабы бушаған.
Эскесе, ахмаҡ кешеләр
Шүрәлегә оҡшаған.

## УЙЫНДАР

**“Зәкәриә, Кәримә” тигән ҡыҙҙар уйыны** (223)

Уйын башында ике уҙаман ҡапҡа булып баҫа. Сер итеп икеһенә берәр һүҙ әйтәләр (һуған, һарымһаҡ, башҡа ҡыҙҙар белергә тейеш түгел). Башҡа уйынсылар бер сафҡа теҙелеп, ҡыр ҡаҙҙары кеүек “ҡыйғаҡ-ҡыйғаҡ” тип, ҡулдарын урап-урап килеп, ошо ҡапҡа аша үтәләр, аҙаҡҡыһын алып ҡалып, шым ғына: “Һарымһаҡ кәрәкме, һуғанмы?” – тиҙәр. Был ҡыҙ береһен һайларға тейеш. Шунан һайлаған яҡҡа сыға. Ошо рәүешле бөтә ҡыҙҙар ҡапҡа аша сығып бөткәс, ике командаға бүленеп ултыралар, уҙамандар командир була. Уйынды улар башлай, береһе бер мөйөштән, икенсеһе икенсе мөйөштән ҡапма-ҡаршы таҡмаҡ әйтешеп бейеп, бер-береһенә киләләр.

1-се: Ай-ли, Зәкәриә, һин ҡайҙа? Бейеп килә лә туҡтап тора.

2-се: Ай-ли, Кәримә, һин ҡайҙа? – тип тыпырҙап ҡуя.

1-се: Ай-ли, Зәкәриә, мин бында – тип бейеп килә.

2-сеһе: Ай-ли, Кәримә, мин бында – тип бейеп ҡаршыһына килә.

Барыһы бергә:

Зәкәриә, Зәкәриә,

Зәкәриә, Кәримә.

Кәримә, Кәримә,

Кәримә, Зәкәриә – тигәндә, был икәү тотоношоп уртала өйөрөләләр.

Беренсе командалағы уҙаман икенсе команданың бер ҡыҙын бейергә саҡырып баҫа, ә шул командалағы ҡыҙҙар уҙаманды маҡтап йырлай:

Зәкәриә – уңған ҡыҙ, Зәкәриә – сибәр ҡыҙ,

Зәкәриә – аҫыл ҡыҙ, Зәкәриә – эшсән ҡыҙ,

Зәкәриә, Зәкәриә, Зәкәриә кем мая [моя]? –тигәндә, шул һайлап алынған ҡыҙ менән өйөрөлөп бейейҙәр.

Икенсе команданың Кәримәһе был ваҡытта, сәпкә итеп, урында тыпырҙап торған була. Былар бейеп бөткәс:

Кәримә бит – уңған ҡыҙ, Кәримә бит – һылыу ҡыҙ,

Кәримә бит – зифа ҡыҙ, Кәримәкәй, Кәримәкәй,

"Кәримәкәй, кем мая?" тигәндә, һайлап алынған ҡыҙ менән Кәримә әйләнә. Уҙамандар ултырғас, уртала ҡалған ҡыҙҙың береһе Зәкәриә, икенсеһе Кәримә була, шулай уйын бөткәнсе дауам итә.

**"Наза" уйыны** (294)

(Розалия Солтангәрәева тарафынан яҙып алынған)

Уйнаусылар парлашып, ҡулдары менән тотоноп, ҡапҡа яһап, аллы-артлы теҙеләләр. Иң арттағы берәү ҡулдары аҫтынан бара-бара ла, күңеленә яткан кешене алып китә. Ә был ваҡытта таҡмаҡ әйтәләр. Ҡушымтала барыһы ла урындарында тыпырҙап бейей.

Селтәр элдем ситәнгә,
Елебер-елбер итәргә.
Беҙ килмәнек тик китәргә
Килдек алып китәргә.

Ҡушымта:

Наза, Наза,
Наза – матур ҡыҙ бала.
Кеше йәрен тартып алып
Һөйә торған замана.

Ағиҙелгә томан төшкән,
Ҡараңғы төшкән кеүек.
Уф, яна йөрәккәйҙәрем,
Уттарға төшкән кеүек.

Ҡушымта:

Наза, Наза,
Наза – матур ҡыҙ бала.
Кеше йәрен тартып алып
Һөйә торған замана.

Ағиҙелдәрҙә күләгә

Ағиҙел ҡамыштары.
Беҙ тигәнсә булһа ине
Хоҙайҙың яҙмыштары.

Алдарын алға манам,
Гөлдәрен гөлгә манам.
Уҡы, иркәм, шоферлыҡҡа,
Һин шофер булһаң, барам.
Зәңгәрләтә, зәңгәрләтә,
Зәңгәр йөрөтә беҙҙе.
Зәңгәр болоттарҙа йөҙгән
Айҙан эҙләйем һеҙҙе.

### **“Йәшелсә” уйыны** (147)

Һуғыш йылдарында кәбеҫтә, һуған, ҡауын һ.б. булып уйнай инек. Берәү сығып таҡмаҡ әйтә:

Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе мин – ҡауын.
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,
Донъялар булыр уйын.

“Ҡауын” менән икенсе берәү әйләнә лә таҡмаҡ әйтә:

Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе – сөгөлдөр.
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,
Һөйгән ашың түгелдер.

“Сөгөлдөр” таҡмаҡ әйткәс, икенсегә баҫа:

Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе мин – һуған.
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,
Ашамаһаң ни булған?
Йәшелсәләр араһында
Иң тәмлеһе – кәбеҫтә.
Сәсеп үҫтер, сығарып һат,

Егәрлегә кем етә!

**“Айҙар” уйыны** (242)

Бар уйынсы ҡулға-ҡул тотоношоп, түңәрәк буйлап әйләнеп йөрөйҙәр, таҡмаҡ әйтәләр. Уртала әйләнеп, “һәли-һәли” тигәндә, парлашып тыпырлайҙар, таҡмаҡты күмәкләп әйтәләр.

Яландарҙа ҡуҙғалаҡ,
Бик бәхетле булһа ғына,
Тыуһын икән ҡыҙ бала.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Исемдәрен белмәйҙәр
Йөҙҙәремә ҡарамай ҙа
Ниңә һарғайҙың тиҙәр.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Ҡараны кейгәндәрем,
Үкенескә ҡалмаһын
Өҙөлөп һөйгәндәрем.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Исемдәрҙе беләһең.
Сәхрә былбылдары булып
Төштәремә керәһең.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Гөл-сирен һыу яратмай.
Дуҫтыҡайым, мөхәббәтең
Башҡаларға ҡаратмай.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Тар булды килешмәне,
Башҡайҙарым йәш булһа ла,
Ҡайғыға бирешмәне.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Ҡарғалы ҡалҡыуҙары,
Айырылыуға миҫал булды
Һул ҡашым тартыуҙары.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Исемдәре Гөлсөмкәй,

Бәндәләргә бәндә булып
Йөрөй бит, меçкенкәй.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!
Уфимский ҡәләмем,
Ай нурҙары, таң елдәре
Илтһен һиңә сәләмем.
Һәллилә-һәлилә, һәли-һәли-һәлиләү!

**“Көйһөҙ кейәү” уйыны** (242)

Был уйынды кис ултырып уйнағандар. Берәүҙе “кейәү” итәләр. Кейергә бишмәт, башына бүрек алып киләләр, ҡулына таяҡ биреп, таяҡҡа таяндыралар, ҡағыҙҙан “папирос”, шырпы әҙерләп ҡуялар. Маҡсаты – мыжыҡ кейәүҙе көлдөрөү, яйын табыу. Кейәү булған кеше һамаҡлай:

Тиҙ-тиҙ булһана,
Тиҙерәк булһана.
Ахун ашҡа саҡырған,
Мулла ашҡа саҡырған.
Анда бараһым да бар,
Бында бараһым да бар.
Түбән осҡа ҡунаҡ килгән,
Унда сығаһым да бар
Тиҙ-тиҙ булһана! –

тип, “кейәү” бер урында һикергеләп, ҡулдарын һелкетеп тора. Бер кейендереүсе була. Ул көйһөҙ кейәүҙе кейендерә башлай. Ә кейәү дауам итә:

Тәмәкемде ҡабып бир,
Бүректе кейҙереп бир,
Бишмәтемде кейҙереп бир,
Тунымды кейҙереп бир! –

тип, һаман тыпырҙап тора. Кейендереүсе кейәүгә тәмәке ҡабыҙа, мышнай-мышнай арый башлаған кейендереүсене кейәү:

– Мин мышыйҙан тыумаған, – ти ҙә, тәмәкене ата ла бәрә. Үҙе бер урында көйләп атлай. Яңынан һамағын ҡабатлай башлай:

Тәмәкене ҡабып бир,
Тунымды туры итеп бир!

Тунын кейендергән кеше көлөп ебәрһә, кейәү кейемен тағы сисеп ташлай:

– Мин көлкөнән тыумаған.

Тағы үҙ һамағын ҡабатлай, шулай хәлдән тайғансы дауам итә.

**“Өйҙәш” уйыны** (114)

Уйнаусылар парлашып тотоношоп теҙелеп баҫалар. Алда бер-бер артлы йәнәш рәттән шаҡмаҡлап һыҙыҡтар (өй) һыҙыла. Һәр парҙан бер кеше сығып, уйын алдынан сыбаға тотоша. Кем  осҡа сыға, шуның буйынса парҙар теҙелеп баҫа.

1-се пар шаҡмаҡ өйгә керә, таҡмаҡ әйтәләр ҙә өйөрөләләр шул шаҡмаҡ эсендә.

Исемдәре, исемдәре,
Исемдәре Әүхәҙи.
Һөйөүҙәрең йүри булһа,
Сразу минән ухади! – тип, ҡалған уйынсылар ҡушыла:

Әлләри-риллә, әллә-риллә, әллә-риллә лә-риллә – тиеп, йәнәш торған кешеләр менән  урында әйләнә. Ә беренсе пар үҙ пары менән шул өй эсендә өйөрөлә.

Бынан һуң был пар икенсе өйгә күсә, икенсе кеше таҡмаҡ әйтә:

Исемдәре, исемдәре,
Исемдәре Фатима.
Мине һөйәр булмаһаң,
Зинһар өсөн, алдама.

Барыһы бергә ҡушымта әйтә:

Әллә-риллә, әллә-риллә, әллә-риллә лә-риллә – тип, үҙ парҙары менән әйләнәләр.

Ә бынан артта килгән пар һәр өйгә кергән һайын таҡмаҡ әйтеп өйөрөлә, ҡалғандар, сәпәкәйләп, улар менән бергә өйөрөлөп тыпырҙай урында. Ошо шаҡмаҡлы өйҙәр бөтә парҙар йырлап сыҡҡансы уйын дауам итә.

**“Тауға сығыу” уйыны** (138)
(Р.Солтангәрәева тарафынан яҙып алынған)

Мәсет тауына егеттәр алыҫтан уҡ ҡулъяулыҡтар болғап, йырлашып киләләр. Ҡыҙҙар йырлап ҡаршы ала:

Йырҙар, көйҙәр ишетелә
Әрәмә араларында.
Ҡаршы килеп тә алмайһың
Әҙәм араларында.

<u>Ҡыҙҙар:</u>
Ҡулымдағы йөҙөгөмдөң
Исеме Муса ғына.
Уйындар күңелле була,
Һөйгәнең булһа ғына!

Ҡулъяулығың – ҡыҙыл суҡ,
Яҡаларың – йәшел суҡ.
Түңәрәктең уртаһына
Һөйгәнеңде әйтеп сыҡ.

Өфөләргә барам әле,
Өфө юлы асылһа.
Уф йөрәгем! – тимәм әле,
Әрнеүҙәре баҫылһа.

Өфө, тиһең дә ҡарайһың,

Өфө күренәме ни?
Күрмәй тороу менән генә
Күңел һүреләме ни?

Егеттәр:
Һеҙҙең лампа унлы икән,
Беҙҙеке бишле генә.
Беҙҙең һөйгән йәрҙәребеҙ
Үҙебеҙ ишле генә.

Һөйәм һине, һөйәм һине,
Һөйәм һине, алтыным.
Үлһәм, ҡәберемдән сығар
Һине һөйгән ялҡыным.

Һағынамын илкәйҙе,
Һағынамын илкәйҙе.
Илкәй менән бергә һағынам
Йәштән һөйгән йәркәйҙе.

Тәҙерәнән ҡарайһың да,
Ҡарап, кемде таныйһың.
Ҡарап күҙең талдырғансы,
Ниңә сығып алмайһың?

**“Әйләнмә” уйыны** (138)

(Р.Солтангәрәева тарафынан яҙып алынған)

Таҡмаҡ әйтеп, бер кеше икенсе кешене һайлап алып, түңәрәк эсендә өйрөләләр, ҡалғандар ҡушымта әйтеп сәпәкәй итәләр.

Исемдәре, исемдәре,
Исемдәре Клара.

Ике километр ғына
Түгел бит беҙҙең ара.
<u>Бөтәһе:</u> Әлләрилә-лəриләү! – тип тыпырҙап, сәпәкәйләп тора.
Алған кеше уртала таҡмаҡ әйтеп, икенсе кешене ала.

**“Сәриә” уйыны** (272)

Көйҙөң яртыһына берәү өйөрөлөп барып берәйһен һайлап ала, икенсе яртыһына тыпырлайҙар.
Килә илаһыларым,
Сәриә!
Килә илаһыларым,
Һандуғас балаһы!
Төштәремә лә кермәне,
Сәриә!
Былай булаһыларым,
Һандуғас балаһы!
Алдарыма килдеңме ни,
Сәриә?
Алтын бағанаҡайым,
Һандуғас балаһы!
Һеҙҙең менән үтә ине,
Сәриә!
Йәшлек заманаҡайым,
Һандуғас балаһы!
Күгәрсендәр байҡап оса,
Сәриә!
Ауылымдың урамын,
Һандуғас балаһы!
Һинең һағынғанды беләм,
Сәриә!
Төнөн йырлап уҙаһың,

Һандуғас балаһы!

**Ҡыҙҙар уйыны** (272; 276)

Элек егеттәр менән ҡыҙҙар ишек аша йә тәҙерә аша таҡмаҡ әйтешәләр ине. Бер ҡыҙ йырлай:

Керәм генә тиеп килгән бер малай
Тәҙрә төпкәйҙәрен тумҡалай.
Керәм тиеп килһәң, бер малай,
Йөҙ илле һум һалып кер, малай.

Ҡыҙҙар әйтеш башлайҙар:
Тәҙерәгә килгәндәр,
Киле ҡуйып менгәндәр.
Керер өсөн килмәгәндәр,
Күрер өсөн килгәндәр.

Тәҙерәнән ҡарама,
Бүрек тышың алама.
Бар баҙарға, еп алып ҡайт,
Бүрек тышын ямарға.

Тәҙерәгә килгәндәр,
Киле ҡуйып менгәндәр.
Аршын ярым ҡатҡан тунды
Күрһәтергә килгәндәр.

Тәҙерәлә терәү бар,
Терәү түгел, берәү бар.
Йәмле Өҫәйен ауылында
Йәр һөйгәнем берәү бар.
Аҙаҡ бергәләшеп таҡмаҡҡа бейейҙәр.

### **“Сыбыртҡы, бау һуғыу” уйыны** (108; 110)

Таяҡҡа бау тағыла, сыбыртҡы кеүек түңәрәк һыҙылып, бөтә уйнаусылар түңәрәкләп һыҙыҡ буйына берәр әйберен ҡуя, уртала уҙаман сыбыртҡы тотоп көйгә таҡмаҡ әйтә:

Әй бейейбеҙ, бейейбеҙ,

Беҙҙең башҡорт көйөбөҙ.

Тыпыр-тыпыр, тыпырҙашып

Матур итеп бейебеҙ.

Түңәрәк тирәләй бар уйынсы бейеп, күмәкләп уҙаманды таҡмаҡ әйтеп бейетәләр, үҙҙәре тыпыр-тыпыр түңәрәккә яҡын килә башлайҙар:

Ай-һай, уҙаман,

Матур баҫа түгелме.

Ай-һай, уҙаман,

Матур баҫып бейей-бейей

Күңел аса түгелме?

Шул ваҡытта уҙаман сыбыртҡыһын түңәрәк эсендә өйөрөлдөрөп тора, үҙе тыпыр-тыпыр бейеп тора.

Өлгөрөрәк уйнаусы сыбыртҡы күскәндә, йәһәт кенә үҙенең әйберен эләктерергә тейеш.

Беренсе әйберен алған кеше – батша, “тәхеткә” менеп, уйындың барышын күҙәтеп ултыра. Көй дауам итә, яңынан уҙаман йырлай, барыһы ла бейей, унан һуң сәпәкәйләп уҙаманды бейетәләр. Икенсе әйберен алған – ир-егет, өсөнсө – өлгөр, дүртенсеһе – дәүмәл түрә (аҡсалы), бишенсеһе – баш түрә, алтынсыһы – арғымаҡлы түрә, һигеҙенсеһе – һалдат, туғыҙынсы – тархан, унынсы – уҙаман һ.б.

### **“Ҡул күреш” ҡыҙҙар уйыны** (108; 110)

Түңәрәк тирәләп барыһы баҫа. Уртаға берәү сығып таҡмаҡ әйтеп үҙенең әхирәтенә ҡулын һуҙып бейеп килтереп баҫа:

Алларын алам әле,
Гөлләрен  йыям әле.
Бер гөлләмә сәскәне
Гөлсөмгә бирәм әле.

Бөтәһе бергә ҡушымта йырлайҙар:

Әлләрилләрәлилә, әлләрилләрәлилә!

Ике әхирәт ҡулға-ҡул бирешеп, тыпырҙап бейейҙәр, ҡалғандар һәр ике күрше бергә тотоноп әйләнәләр. Уртаға алынған әхирәт, таҡмаҡ әйтеп, үҙенә әхирәтен саҡыра:

Ҡаралы күлдәк, ҡаралы,
Туҙһа тағы бар әле.
Һағындырһа әхирәтем,
Карточкаһы бар әле.

*Ҡушымта*:

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Мөнирә.
Күңелдәремә оҡшайһың,
Сәстәрең бит бөҙөрә.

**Золотой-ритирам** (291)

Минең ҡустым бигерәк матур,
Көмөш ҡайыш билендә.
Уйнайбыҙ ҙа көләбеҙ беҙ,
Башҡортостан илемдә.
Золотой-рити-рити,
Золотой-ритирам.
Йырлайбыҙ ҙа, бейейбеҙ ҙә,
Йырлап күңел асабыҙ.
Ниңә бейемәҫкә икән,
Беҙ бит клуб асабыҙ.
Золотой-рити-рити,
Золотой-ритирам.

Таҡмаҡтар дауам итә, припевты йырлағанда парлашып бейейһең.

# МӨНӘЖӘТТӘР

**Мөнәжәт** (101)

Ахры заман бүсәнәләр булған,
Донъяға төрлө-төрлө бәлә тулған.
Ғалимнар золом булып зина ҡылған,
Андин артыҡ тәки ғазап динаруан.
Әй, донъя, туйҙым һиндән,
Һин дә туйҙыңмы миндән?
Анамнан тыуғаннан бирле
Ни рәхәт күрҙем һиннән?
Һандуғастың балалары
Әллеү ҙә лә бәллеү ҙә.
Ананмнан тыуғаны бирле
Йөрәккәйем әрнеүҙә.

**Ҡәҙер кисәһе** (207)
(көйлө мөнәжәт)

Килде ҡәҙер кисәһе –
Был мөбәрәк олуғ көн.
Хаҡ тәғәлә күкләрҙән,
Хәҙрәти Мөхәммәткә
Пәйғәмбәрлек вазифаһын,
Башҡарырға ҡушҡандыр.
Изге китап Ҡөрьәнгә
Тәүге аят сүрәләре
Яҙылып ҡуйылғандыр.
Был кисләрҙә йоҡламағыҙ:
Ғибәҙәт ҡылыу кәрәк.
Доға фатихалар уҡып,
Тәүбәләр итеү кәрәк.
Хаҡ тәғәлә һине күреп,
Сауаплы әмер бирер.
Тиҫбеләрен тартҡан саҡта
Гонаһларың юҡ булыр.
Теләк әйткән мосолмандар
Мораҙына ирешер.
Доға ҡылған ваҡытында
Фәрештәләр күрешер.

**Ғәриф иман* бәндә бул!** (88)

Тәхрир итәм ҡыяғаҙға
Хаҡ тәғәләмде ҙурлап.
Фани донъя ниғмәтенә
Әлхәмдиллә, тип нурлап.
Әҙәп-тәғлимнәрҙе** өйрән,
Был донъяға һиҙийәт ҡыл.
Фарыз ғәмәлдәрҙе үтәп,
Ғариф иман бәндә бул.

**Уҡыу йылдарына хәтирә** (259)
(көйләп уҡыла)

Илаһи имтихан көндәр
Буш  үтмәне был ҡыш көндәр.
Өйрәндек бик күп ғилемдәр,
Шуға шат беҙҙең күңелдәр.

**Тәртип иманы** (259)

– Бер тип, ниҙе беләһең?
– Бер Алламды беләмен.
– Ике тип, ниҙе беләһең?
– Ике иңем фәрештәмде беләмен.
– Өс тип, ниҙе беләһең?
– Өс фитыр вәжиб беләмен.
– Дүрт тип, ниҙе беләһең?
– Дүрт шәһәрнәрен беләмен.
– Биш тип, ниҙе беләһең?
– Биш ваҡыт намаҙ беләмен.
– Алты тип, ниҙе беләһең?

* Ғариф иман – белемле, иманлы.
** Әҙәп-тәғлим – тормош, йәшәү ҡағиҙәһе.

– Ата-инәй хаҡын беләмен.
– Ете тип, ниҙе беләһең?
– Ете тамуҡты  беләмен.
– Һигеҙ тип, ниҙе беләһең?
– Һигеҙ ожмахты беләмен.
– Туғыҙ тип, ниҙе беләһең?
– Туҡһан туғыҙ мең мәшәйәхне беләмен.
– Ун тип, ниҙе беләһең?
– Ун мең яратҡан ғәлим ғәләмне беләм.

**Көйлө мөнәжәт** (259)

Йәш ваҡыт, Сулпанай, ғөмөрөгөҙ аҙый
Бер килер, тиҙ китәр, беҙ ҙә үҫәрбеҙ.
Һәр наҙан хур булыр, шунда нишләрбеҙ?
Уҡыйыҡ, шәкерттәр, алға һәм алға.
Һин минән, мин һинән һис артҡа ҡалмайыҡ.
Уҡымаған намаҙ, белмәй кирәғәткә,
Теш күнмәй ул кешенән хур булыу.
Йәш ваҡыт, Сулпанай, туҙый туҙғандар,
Шуны уйлап күңелдәр тулды, миһманнар.

**Доға ҡыл саф күңелдән** (231)

(көйләп уҡыла)

Бисмиллаһир-рәхманир-рәхим!
Ата-бабаларҙан ҡалған
Был матур изге йола.
Хаҡ тәғәлә ризалығынан
Ҡул күтәреп ҡыл доға.
Өй йортонда фәрештәләр
Ҡыуаныр: “Амин!” – тийәр,
Дәүләт йортоң имен булыр,
Иман менән тулып торор.

Ғәйләң сәләмәт, шатлыкта,
Дәүмәлең артып торор.
Киткән яҡын әруахтарҙың
Ҡәберҙәре нурланыр.
Хаҡ тәғәлә быны күреп,
Һауапларын ҡайтарыр.

**Ата-инәңә хөрмәт ҡыл** (186)
(көйләп уҡылған мөнәжәт)

Эй, мөьмине мосолман
Ата-инәңә ҡыл хөрмәт.
Хаҡ тәғәлә – Алланан
Алырçың һин рәхмәт.
Тәрбиә ҡылған бәндәгә,
Бирер күркәм ҡөҙөрәт.
Хаҡ тәғәлә – Алланан
Бер хаж һауабы булыр.
Ата-инәңә ҡыл яҡшылыҡ,
Ҡайтыр изгелек менән.
Хоҙай тәғәлә çаҡлар
Йәһәннәм гүрҙәренән,
Урындарың булыр çинең
Йәнәттең түрҙәренән.
Ата-инәң, әруахларҙың
Зыяратын тәрбиә ҡыл.
Хаҡ тәғәлә – Аллаҡай
Бер хаж һауабын бирер.
Ата-инәң ҡәберенә
Нардуғандар ҡороп ҡуй.
Хаҡ тәғәлә рөхсәте менән
Ташына исемен ҡуй.

Ата-инәнең васыятына ҡолаҡ çалмағандарға

Хаҡ тәғәлә уға уҡыр бөтмәç ләғнәттәрҙе.
Ата-инәнең рухына тап төшөргән бәндәгә
Хаҡ тәғәлә уға бирер ризыҡларҙың тарлығын,
Тамуҡларҙың уттарын.

**Теләк** (227)

Бисмиллаһи рахман рахим –
Безгә Хоҙай шулай ҡушҡан.
Был донъяға сабый тыуғас
Бисмилла, тип, ҡабул итеп,
Собханналла һыу алла, тип,
Ғосол ҡойорға кәрәк.
Изге теләк уға әйтеп,
Аҡ биләмгә төрөү кәрәк –
Аҡ бәхеттәр был сабыйға
Юлдаш булыр.
Ғүмерҙәре булыр һәр саҡ
Таҙа-пөхтә.
Был донъяла яҡшы итеп
Тормош ҡороп.
Йәшәр һәр саҡ сәскә атып,
Милләт өсөн, халҡы өсөн.
Һинән килгән быуындарың
Яҡшы итеп дауам итһен.
Атай йортон, нигеҙҙәрен ташламаһын.
Һуңғы килгән сәғәтеңдә
Уң фәрештәләр һәр саҡ
Юлдаш булһын.
Фани донъянан киткәндә,
Ҡанат менән сылатырлыҡ
Булһын һинең яҡындарың.
Ясин сүрәләрен әйтеүселәр

Булһын һинең яндарыңда.
Ғосол ҡойоп, әхирәтлек күлдәктәрен
Өҫтәреңә кейҙереп оҙатһындар.
Яҡындарың һәр саҡ килеп,
Ҡәберҙәрең онотмайса,
Тәрбиәләп нардуғандар ҡорор булһын.
Баш осона исем-шәриф яҙып
Таш ҡуйһалар, яҡшы булыр.
Ҡөръән уҡып, һине ҙурлап
Хәйер бирһә туғандарың,
Шул сағында Хоҙайыбыҙ ҡабул итер.
Урындарың һинең булыр
Вә ожмахта вә йәннәттә.
Һөйәктәрең һинең һәр саҡ
Тыныс ятыр.
Рухтарың һинең күктә
Көләс булыр.

### **“Бисмиллаһ” мөнәжәте** (176)

Изге һүҙҙәрҙән башла
Һәр бер ҡылған эшеңде,
Аллаҡай ҡабул итәр.
Килгән бәлә-ҡазаларҙан
Ҡайғы-хәсрәттән һаҡлар.
“Бисмиллаһ” – тип әйтһә бәндә,
Ашлары тәмле булыр.
Хоҙай тәғәлә ҡушыуынса,
Ризыҡлары киң булыр.
Йоҡлар алдынан әйтерһең –
Төшләрең тәмле булыр.
Имен булыр, дәүләт ғаиләң
Бәлә-ҡаза, үлемдән.
Башында “бисмиллаһ” әйткән
Доға кире ҡағылмаç.
Аллаҡай тарафынан

Һис шикһеҙ ҡабул булыр.
“Бисмиллаһ” – тигән бәндәгә
Донъя әхирәтен, бар булған ниғмәттәре
Ҡулына килеп торор.
“Бисмиллаһ шәрифне” уҡыған
Дошман күңеле ут булыр.
Әйткән кеше именлектә
Һау-сәләмәт булыр.

**Мәктәп** (167)
(көйләп уҡыла)

Аҡ мәхәллә, аҡ мәктәптә,
Иман нуры биргән йорт.
Ғилемдәрҙе үҙләштергән
Һин бит беҙҙең изге йорт.
Аҡ ойоҡта, түбәтәйҙә
Теҙелешкән шәкерттәр.
Ғилем фәндәрен өйрәнеү
Был донъяла кәрәктер.
Мәктәп – милләттең йөҙө,
Булыр емештең көҙө.
Ғилемдәрҙе үҙләштергән
Булыр һөнәрле кеше.
Башҡортомдоң йөҙөк ҡашы –
Тиеп ҡарарҙар һиңә.
Һөнәрҙәргә эйә булһаң,
Булмаҫ һиңәргә тиңе.

**Именлек мөнәжәте** (164)
(көйләп уҡыла)

Әссәләмәғәләйкүм!
Ике ҡулың биреп күреш.
Вәғәләйкүмәссәләм!

Башҡорт күңеле даръя.
Хужа ҡунаҡсыл булыр,
Өйҙәренә үтеп ингәс,
Ҡул күтәреп доға ҡыл.
Иҫән булһын ғаиләһе,
Балҡып торһон йөҙҙәре.
Имен булһын йорттары,
Артып торһон малдары.
Хоҙай тәғәлә рәхмәтендә
Иман нурҙары балҡыһын.
Сәфәр сыҡҡан юлдарында,
Уң фәрештәләр булһын.
Доғалар ҡабул булып,
Ете быуын әруахтарҙың
Рухтары шатланһын.

**Көйлө мөнәжәт** (163)

Ай күрҙем аман менән,
Күңелем тулы иман менән.
Ҡөрьән китаптарын алып,
Намаҙлыҡтарға баҫам.
Нурлы йөҙҙәремде асып,
Ҡиблалрға мин бағам.
Хаҡ тәғәлә – Аллаҡай,
Яман, ялғыш ғәҙәттәрҙе,
Гонаһтарҙы ҡыуып тор.
Бәлә-ҡаза килмәһен,
Йорт-илем имен торһон.
Һау-сәләмәтлектә булып,
Ауырыуҙарҙан арбап тор.
Ике ҡулдарымды ҡуйып,
Фатиха доға ҡылам.
Теләгемде ҡабул ит,
Хаҡ тәғәлә – Аллаҡай.

**Аллаҡайҙы ҙурлау мөнәжәте** (170)

(көйләп уҡыла)

Ғәләмәти, ғәләмәти,
Был беҙҙең фани донъя.

Хаҡ тәғәлә һине маҡтап,
Саф күңелдән ҙурлайым.
Биргән ризыҡ-ниғмәтеңә
“Әлхәм” тип шөкөр ҡылам.
Һинән иман нуры алып,
Фатиха доға ҡылам.

**Мәүлит байрамы мөнәжәте** (115)

(көйләп уҡыла)

Бисмиллаһир-рәхманир-рәхим.
Тыуҙы изге Мәүлит айы,
Мөҡәтдәс ғиҙҙәтле ай.
Тыуҙы айҙың 12-һе
Мөхәммәти Мостафа.
Был көннө барса мосолман
Ҙурлап иҫкә аларҙыр.
Пәйғәмбәргә бағышлап,
Салауаттар әйтәҙер.
Мәүлит вәғәзен тыңларға
Мәсеттәргә бараҙыр.
Мәүлит аштарын бешереп,
Дуҫ-иштәрен йыяҙыр.
Пәйғәмбәргә бағышлап,
Ҡөръән Кәрим уҡыйҙыр.
“Амин!” – тип, барса мосолман
Доғаларын ҡылаҙыр.
Фәрештәләр ҡыуанышып,
Хаҡ тәғәләгә әйтер.
Иҫкә алған кешеләргә
Салауаттары булыр.

**Рамаҙан Шәриф** (119)

Мөбәрәк ай килде беҙгә –
Рамаҙан Шәриф.
Ураҙа тотҡан һәр бер бәндә
Бик күп һауаплы булыр.
Ҡылған гонаһтарҙан
Аллаҡай ғәфү итәр.
Ураҙаның көндәрендә
Ҡулдан төшмәһен Ҡөрьән.
Ғибәҙәтләреңде ҡылырға
Мәсет йортларына кил.
Зикер саҙаҡаһы биреп,
Ярлыларҙың күңелен күр.
Фани донъяларҙан китеп,
Әхирәтлектә булған,
Ҡан-ҡәрҙәш туғандарға
Саф күңелдән доға ҡыл!

**Сабырлыҡ мөнәжәте** (252)
(көйләп уҡыла)

Бер ҡәрҙәштең яҡыны
Гүр эйәһе булғандыр.
Бир, Хоҙайым, сабырлыҡтар,
Булһын ярҙам табырлыҡ.
Ҡайғы сүлмәктәре ташып,
Артаҙыр күҙ йәшкәйе.
Эй, Хоҙайым, бир түҙемлек,
Был бәндәгә күркәмлек.
Ҡөрьән сүрәләрен уҡып,
Керһен ине тыныслыҡ.
Ҡулға тиҫбеләр алып,
Әйтәйек илаһи һүҙ.
Әруахларҙы иҫкә алып
Хәйер доға ҡылайыҡ.

## **Мөнәжәт** (222)

(Юнысов Миңйән Имаметдин улы атаһы Имаметдин олатайҙан яҙып алған)

Мин үлгәс тә уҡығыҙ Ҡөръән –
Васыятым һеҙгә шул булыр.
Һеҙ, балалар, Ҡөръән уҡырһыҙ,
Ҡәбер эстәренә нур тулыр.
Бағышлағыҙ доға рухыма,
Ятҡырмағыҙ мине оятта.
Әруахтарҙы иҫкә алырһығыҙ,
Ярап ҡалыр хатта аят та.
Үтенеп ихлас әйтәм, балам,
Уҡытығыҙ ҡырҡым, етемде,
Бәндәләргә хәйер таратығыҙ
Йылытығыҙ һалҡын гүремде.
Тар ҡәберҙә ялғыҙ ятырмын,
Балаларҙан доға көтәрмен.
Иҫкә алып доға ҡылһалар,
Ҡара гүрҙә тыныс ятырмын.

## **Мөнәжәт** (299)

Атайығыҙға 1 йыл булды,
Барҙым хәлен белергә.
Йүгереп сығып алыр ине,
Тәҙрәһе юҡ күрергә.
Байтаҡ ҡына һөйәлеп торҙом
Янындағы ҡайынға.
“Ташлап киттем, яңғыҙ ҡалдың”,
Тиеп, зинһар, ҡайғырма.
Ҡәбереңянына килгәс,
Хәсрәттәрем яңырҙы.
Көнөн яңғыҙ, төнөн яңғыҙ,
Сәскәйҙәрем ағарҙы.
Тау битендә емерелеп,
Үҫкән ҡара бөрлөгән.
Айырылғанға күп тә түгел,

Һағындым бит, бергенәм.
Балаларыма рәхмәт,
Аталарын ҙурлайҙар.
Ваҡыттарын, көстәрен дә
Бер ҙә йәлләп тормайҙар.
Теләк теләйем балаларға
Аталарын ҙурлағанға.
Таҙалыҡ һәм оло бәхет
Бирһен Аллам уларға!

Ата-ана, әбей-бабай,
Барса әруахтар шат булһын,
Аш әҙерләгән бәндәләргә
Бик күп сауаптар булһын.
Ҡарайым ихлас йөҙөгөҙгә,
Ни теләктәр теләйем һеҙҙәргә.
Ҡабул булһын теләгәнегеҙ,
Шатлыҡ тулһын күңелегеҙгә.
Аш-һыуығыҙ бигерәк тәмле,
Ҡунаҡтарығыҙ икән  мәрхәмәтле.
Доғаларыбыҙ ҡабул булһын,
Ишетелһен Аллаһ рәсүлебеҙгә.
Беҙҙе ҡәҙер-хөрмәт итеп,
Үҙең дәүләт эсендә, эй, ҡалдың,
Йәннәттәрҙән өлөш алдың.
Мәжлесегеҙ күңелле булды,
Доғаларыбыҙ ҡабул булһын! –
Беҙҙән фатиха шул һеҙгә.
Йәндәрегеҙ тыныс булһын,
Ғүмерегеҙ оҙон булһын! –
Беҙҙән фатиха шул һеҙгә.
Яҡшы теләктәр теләйек,
Теләктәребеҙ ҡабул булһын.
Хаҡ тәғәлә барыбыҙҙы

Йәннәттәрҙә күрештерһен.
Был мәжлестә ултырғандар,
Һигеҙ ожмах насип булһын.
Ултырабыҙ бөгөн бергә,
Рәхмәт ҡылһын Хоҙай һеҙгә.
Ҡиәмәт шәһәренә,
Бергә барһаҡ ине бергә.
Амин! (302)

**Теләк** (274)

(Хузиев Мөлкәмән ишеткән һәм яҙып алған сығанаҡтарҙан)

Хаҡ тәғәлә Аллабыҙ,
Теләгемде ҡабул ит.
Төйәк иткән еремә
Дәүләт менән дәүмәл бир.
Беҙҙән килгән бәндәләргә
Тәүфиҡ менән тәүбә бир.
Ҡан-ҡәрҙәшле туғандарға
Илһам нурлы иман бир.
Ризығыбыҙ киң булып,
Ашыбыҙға бәрәкәт бир.
Хәйерле эштә булған һәр бәндәгә
Тәндәренә сихәт бир.
Ҡул күтәреп доға ҡылған һәр бәндәгә
Шатлыҡ менән бәхет бир.
Тиҫбе алып, тәсбих әйткән һәр бәндәгә
Фәҡирлектән сара биреп,
Сырхауларҙан дауа бир.
Изге Ҡөръән ҡулға алған һәр бәндәгә
Йәннәт менән ожмахтарҙан урын бир.
Эй, Хоҙайым – Хаҡ тәғәләм, Аллаҡайым,
Шөкөр ҡылам барлыҡҡа,
Төшөрмә беҙләрҙе тарлыҡҡа. Амин!

**Йөрәгемдең ҡағышы** (255)

Йөрәкте бәләкәй, тиҙәр –
Был һүҙ һис дөрөҫ түгел.
Бүлеп ҡара өлөштәргә,
Хайран ҡалмаҫлыҡ түгел.

Мөхәббәттең бер өлөшө,
Иң бөйөгө – Раббыма.
Мөхәббәттең бер өлөшө –
Пәйғәмбәрем хаҡына.

Мөхәббәттең бер өлөшө –
Атам, әсәм, ауылыма.
Мөхәббәттең бер өлөшө –
Ғорур башҡорт халҡыма.

Мөхәббәттең бер өлөшө –
Ҡан-ҡәрҙәштәр, дуҫтыма.
Тамырым булып һуҙылған
Бөтә йәше, ҡартына.

Йә, әйт инде, шулай булғас,
Бәләкәйме ул йөрәк.
Бәләкәй йөрәкле кеше
Кемдәргә һуң ул кәрәк?!

**Мөнәжәт** (258)
(көйләп әйтелә)

Уйлап торҙом юл сатында
Кереп китеп урманға.
Урмандар ҙа тып-тын икән,

Кешеләр ҙә бик моңһоу.
Барам-барам һуҡмаҡ буйлап,
Кемнәр ҙә бит өндәшмәй.
Ниңә улар һөйләшмәйҙәр,
Эшләре бик күп микән?
Фани донъя бөтөп китәр,
Эштәр ҙә кәрәк булмаç.
Имандарға ҡайтайыҡ, дуçтар,
Был яҡты донъяларҙа.
Ҡыçыр елдәр баçыр кемдәр,
Өндәшмәç хәлдәр булмаç.
Фәрештәләр ярҙам ҡылыр
Алла һыуҙың бәҙеуан.

**Көйлө мөнәжәт** (261)

Үтте ғүмерем, үтте инде,
Үтте ғүмерем әҙ ҡалған.
Әҙ ҡалған ғүмерҙәремде
Ҡайғылар сорнап алған.
Өйөңдәге сәғәтеңдең
Күтәреп ҡуй герҙәрен.
Үлһәм дә һеҙҙе эҙләрем,
Тар булмаһа гүрҙәрем.
Мин үләрмен, юғалырмын,
Ҡәберемә үлән үçәр.
Ҡәберем туфрағын туҙҙырып,
Анан ҡыу елләр иçәр.
Сөйөнән көҙгөм төштө –
Ватығын йыялманым.
Эй, дуçтарым, әйтер һүҙҙе
Һеҙгә бит әйталманым.
Ишек алдым аҡ ҡына,
Аҡ түгел, ҡыҙыл ғына.

Бәхилләшергә килегеҙ,
Һандуғас булып ҡына.
Йырлап мөнәжәт әйтәм,
Әйтһәм, илай башлайым.
Был бәхетһеҙ башҡайымды,
Ҡайҙа илтеп ташлайым?

**Ишан ҡарт мөнәжәте** (2)

(Бик белемле булған, 1906 йылда мәҙрәсәлә балалар уҡытҡан. Мөнәжәт көйләп уҡыла).

Аҡ ҡәғәҙгә алып сор ғәләм,
Бисмилланды әйтеп һин эш ҡыл.
Иманлы бул, мөьмин мосолман,
Тәүфиҡлы бул, ерҙә йәшәгәс.
Динебеҙҙе һис бер ташлама,
Кешеләрҙән үҙең көлдөрмә.
Ата-бабай ғөрөф-ғәҙәтен
Дауам итһен балаҡайҙарың.
Бишектәрҙә йырлап үҫтергән,
Әсә телкәйҙәрең саф булһын.
Бәхет керер һиңә шул саҡта,
Ер ҡәҙерен белеп ерекһәң.
Нигеҙ ҡорһаң тыуған ереңдә,
Башҡорт булып бергә тупланһаң.
Ике күҙҙәй ерен һаҡлаһаң,
Шул сағында булыр илкәйең.

**Мөьмин мулланың зыяратта әйткәне** (8)

(Фазлиәхмәтов Миңлегәрәй мулланан яҙып алынды)

Аҡрын иҫкән ел һелкетә
Тау башының ҡылғанын.
Инде Хоҙай ни күрһәтер
Яппарларҙың ҡалғанын.

**Көйлө иман** (19)

(Тимербикә абыстайҙың иҫендә ҡалғандарҙан өҙөк)

Килер бер көн,
Эй, туғандар,
Ҡәрҙәштәрем, дуҫтарым.
Донъяларҙан китәрбеҙ,
Ҡәберләрҙә ятырбыҙ.
Хаҡ тәғәлә алдында
Яуаптарың бирербеҙ.

**Тыуған ил иҫемдән китмәҫ** (253)
(көйлө мөнәжәт)

Тыуған ил иҫемдән китмәҫ,
Мөнәжәтем минең бөтмәҫ.
Ҡағыҙ менән ҡәләм етмәҫ,
Тыуған ил иҫемдән китмәҫ.
Сабыр бирһен ғәзиз Алла,
Мөнәжәтем яҙа-яҙа
Ҡәләм тотҡан ҡулым тала.
Күҙемдән ҡанлы йәштәр аға.
Йыраҡ булғанға аралар,
Ағастар япраҡ ярғанда,
Йәш ағас башы бөгөлә.
Күңелкәйем тулып еткәс,
Күңелдән йәштәр түгелә.
Туғандарым йыраҡ ҡалды.
Күршеләргә йыраҡ булдым,
Һеҙҙе күреп һөйләшергә
Аҡылдарҙан яҙа ҡалдым.
Тыуған яҡҡа күҙем төшһә,
Башымдан уйҙарым китә.
Йөрәк бәғрем яна башлап,
Түҙергә дарманым бөтә.
Эй, аҡҡошҡай, китәр булһаң,

Минең илгә етәр булһаң,
Туғандарҙы күреп ҡалһаң
Сәләм әйтсе һин беҙҙәрҙән.
Ятып та йоҡом килмәйҙер,
Ашаһам, ашым үтмәйҙер.
Һеҙ, туғандар, күҙ алдымда
Һис бер уйҙан китмәйҙер.

## БӘЙЕТТӘР

**Дәстән тархан** (57)

1968 йылда Шәңгәрәева Миңлебикә Туйымбәт ҡыҙынан яҙып алынған бәйет. Ул үҙ ваҡытында ҡайныһы Шәнгәрәев Мырҙагәрәйҙән отоп алған. Был олатай бик оҫта скрипкала уйнап, бәйет, мөнәжәттәр әйтер булған, уны йыш ҡына аҡһаҡалдар бәйгеләренә саҡырыр булғандар. 1939 йылдар тирәһендә 80 йәштәр самаһында вафат була. Хәтерҙә ҡалған ҡайһы бер өҙөктәре.

Ҡырҡ өйлә мең исемле
Дим башҡорто илендә.
Әүәл борон заманда
Был ерҙәргә хужа булған
Дәстән исемле тархан.

Ер биләмәһе уның
Икһеҙ киң булған:
Ярыштауы, Балҡантау,
Суҡраҡлының һырттары,
Мул һыулы матур Диме,
Аҫылы күлдең буйҙары.
Ҡупшы ярына* саҡлы
Өйҙөрәктең буйҙарының
Йәшел үҙәнлектәре.
Булғандыр уның ере,
Торғандыр уның һағы.
Дәстән үҙе бай булған,
Бик күп малдар ҙа тотҡан.
Торған нигеҙ тарафы

---

* Аҫылыкүл, Ҡупшы яр – хәҙерге Купояр ауылына саҡлы.

Булған Бигеш ҡәлғәһе.
Унда булған төйәге
Теҙелеп киткән йорттары, – тип, үҙе скрипкала уйнап, шул бәйетте ҡабат-ҡабат йырлар ине.

Беҙ егет саҡта Минимөхәмәт исемле бер сәсән ҡарт бар ине, ауылда шунан отоп алған **йыр-бәйет**:

Драгундарҙың яуыз ғәскәре
Ауылдарҙы һалды ҡайғыға.
Ябыҡҡарағайҙың урманы
Башҡорттарҙың булды ҡалғаны.

Брагин исемле полковник
Бигерәк яуыз икән.
Башҡорттарҙы юҡ итәм – тип,
Ауылдарҙы яндырҙы.

Ирәндек буйында элек ошондай Ябыҡҡарағай исемле урман тураһында һүҙ бара (215).

**Балыҡсы Тимербай бәйете** (192)

Ҡаҙырғол/Ҡәҙерғол ауылында йәшәгән Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Тимербай Шәңгәрәй улы Муллағәлиевтың фажиғәле вафатына бәйле ижад ителгән.

– Өршәк буйы тал-тирәк, йөрөүсе хәҙер һирәк,
Һыуҙың муллығын бөтөргәс, ул хәҙер кемгә кәрәк?
– Миңә кәрәк, халҡым өсөн, тыуған тупрағым өсөн,
Фашистарға ҡаршы тороп, һау ҡайттым, биреп көсөм.
Ана шулай уйланам да, һыу буйына юлланам,
Таҡыр ҙа һуң юлғынам!
Кем уйлаған, шул гүзәллек алғыр тиеп йәнгенәм.
Сеү! Ни булды? Ҡапыл ғына әйләнеп китте донъя,

Хатта Өршәк тә кирегә аҡкан һымаҡ тойола.
Ниҙер өтөп алды тәнде, туҡта, мин һыуҙамынмы?
Ғазраил ҡанлы ҡулдарын миңә тип һуҙманымы?
Әжәл хәтһеҙ яҡынлаша, туҡта, әжәл, ашыҡма!
Ҡурылды тән, һурылды йән, хәл бирһәңсе саҡ ҡына.
**Әжәл**:
Кешегә хәл бирер булһам, Әжәл тимәҫтәр ине,
Һәр саҡ ярҙамға килеүсе фәрештә булыр инем.
Һуңғы сәғәттәреҥ һуҡты, был һинеҥ һуңғы юлыҥ,
(Ҡуйынына ала әсәҥ иҥ ҡәҙерле бер улын).
Күп осраным юлдарыҥда, төрлө сүрәткә керҙем,
Түҙҙем, түҙҙем, сабыр иттем, ошо минутты көттөм.
Хәҙер ҡоломһоҥ һин минеҥ, буйһонмайса юҡ сараҥ,
Ҡотолорға әмәлеҥ юҡ, хатта булашма, ҡартлас.
**Бабай**:
Үтенәм, әжәл, ялбарам, ебәрсе мине, зинһар,
Иркенләп йән бирер инем, булһасы берәр мендәр.
Яр башына менһәм әллә, балаларым күрерҙәр,
Күрерҙәр ҙә, "атай" тиеп, йүгерешеп килерҙәр.
Түшәгемә ҡайтып ятһам, үкенмәмен дә, әжәл,
Аманатым әйтелмәгән, ашыҡтырмасы, әжәл.
Туғыҙ балам  туғыҙ яҡта, һуңғы тапҡыр йыяйым.
**Әжәл**:
Кешелектеҥ эше бөтмәҫ, мин дә ялҡау зат түгел,
Теләһәм, янъял сығарам, ҡала бары көл-күмер.
Ваҡытымды әрәм итмә,  һинеҥ кеүектәр күптәр,
Күршеҥ янына китәмен, мине көтә ул күптән.
Һин минеҥ тоҙаҡта хәҙер. Ә балалар йыйылыр.
Ҡасмаҡ булып тырнашаһыҥ, ул эҙҙәр ҙә юйылыр.
Тырышма ла, маташма ла, һинеҥ хәл минеҥ ҡулда,
Ә мин ҡулдарымды ҡыҫам… Бөттө, ҡартлас… мин осам.
**Бабай**:

Төнгө һыуҙар шыбыр-шыбыр нимә һөйләйҙәр икән?
Балаларға минең хаҡта хәбәр итмәйҙәр микән?
Тауыш ишетәм, юҡ сара "бындамын" тип әйтергә,
Кем уйлаған һыу эсендә тырнашып йән бирергә.
Аға һыуҙар шыбыр-шыбыр, һалҡын өтә үҙәкте,
Уйламаным мине алыр тип сихри Өршәкте.
Бәхил булығыҙ барығыҙ, асыуҙар онотолһон,
Рәнйетһәм, кисерегеҙсе, артта хәҙер барыһы.

**Бәйет** (192)

Кистән йоҡларға ятып, иртән уянмаған Усманов Рәмиз Фәһим улы бәйете.

Ҡалды инде, ҡалды инде
Мәңге етмәгән донъя.
Әсәйемә генә ауыр –
Хәсрәт уға киң даръя.
Ике бөртөк балам ҡалды,
Кем күҙенә ҡарарҙар?
Иҫкән йылы елдәр генә
Сәстәренән тарарҙар.
Ҡалды йәшел болондарҙа
Мин йөрөгән һуҡмаҡтар.
Ҡалды инде йырланып та
Бөтөлмәгән таҡмаҡтар.
Иҫкәрмәҫтән әжәл килде,
Быуҙы алды. Бөттө тын.
Бары сәғәт теле йөрөй,
Атай йортонда тып-тын.
Ҡысҡырырға хәл булманы,
Тауыш бөттө. Йән сыҡты.
Тиҙ үк һыуына башланы
Йәнһеҙ ҡалған йәп-йыш тән.

“Бәхетле үлем”, – тиерҙәр,
Вафатымды ишеткәс,
Йәнәһе, рәхәт үлгәнмен,
Йоҡлағанда йән биргәс.
Тар гүр йомшаҡ бәрхәт түгел,
Булмай ятып күмелеп.
Тонйорап батҡан ҡояшты
Ҡарап булмай үрелеп.
Ҡояш нуры үтмәй гүргә,
Килмәй усаҡ ялҡыны.
“Еребеҙ – әсәй”, – тиһәк тә,
Йылытмай ер һалҡыны.
Тыуған ауыл урамында
Мин атлаған эҙҙәр бар.
Яҙмыштарҙан уҙып булмай –
Тыуым булғас, үлем бар.
Әжәл ҡай саҡ яңылыша –
Ала үтә йәштәрҙе.
Ғүмер биргән күпме әсә
Түгә әсе йәштәрҙе.
**Әсә**:
Ғүмер бирҙем, һөйҙөм, тырыштырҙым,
Өйләндерҙем, булдым ейәнле.
Һиҙмәнем дә, төнөн, ишек асып,
Ғазраилдың килеп ингәнен.
Сәй ҡайнатып, булған һый-ниғмәтте
Өҫтәлдәргә теҙеп ултыртып,
Уятайым әле, тор, улым, тим,
Сәй эсәйек икәү ултырып.
Юҡ, яҙманы, ейер ризыҡтарың
Тамам булған, улым… Киткәнһең.
Киткәнһең дә ғәзиз әсәйеңдең

Йөҙкәйҙәрен һары иткәнһең.
Ҡәберҙәрең йомшаҡ булһын тиеп,
Теләйем дә кисен ятҡанда..,
Йоҡо алмай, гел күҙ алдымдаһың,
Эс өҙөлә таңдар атҡанда.
Башҡа ҡайтмам бер ҡасан да,
Тыумаҫ минең ишеләр.
Мәрхүмдәрҙе ерләйҙәр ҙә,
Иҫкә ала кешеләр.
Минең ғүмер тамамланды,
Ҡабат ҡайтмам кирегә.
Туғандарым онотмаһын
Йома хәйер бирергә.

Ҡәнзәфәр бей булғанда,
Мең ырыуға баш ине.
Дәҫтән хандар килгәс тә,
Ун бармаҡҡа бүлендек,
Ҡырҡөйлө мең ерҙәре
Ҡырҡ  ырыуҙан берләште.

Хәтерҙә ҡалғандары. Был бәйетте Тәүлийәрова Кинйәбикә әбей ҡәртинәһе Татлыбикә инәйҙән отоп алған (116).

Зарипова Мәрхәбә апай үҙ ваҡытында бик уҡымышлы, иҫкесә (ғәрәп, төркисә) уҡый-яҙа белгән. Унын ҡултамғаһы ҡуйылған, күсереп яҙылған бер бәйет ҡустыһы Әбелфазылда һаҡланған. Көйлө **бәйет** Яппар яҡтарында йырланған, латин хәрефтәре менән яҙылған.
Сәммәүәти, сәммәүәти,
Был фәрештә мөкәммәти.
Ҡара алам, хаттар яҙам,
Һағынмаһа ғәләмәтти.

Эй, хоҙайым, хаҡ тәғәлә,
Былай булыуҙары ла.
Бер ҡайғыларым ике булған,
Иртән тороуҙарыма.
Ҡан ҡәрҙәш, туғандары ла,
Булһын иҫән сәләмәти.
Биргән ниғмәтеңә Хоҙай
Булһын беҙҙән рәхмәти (74).

**Инәйемә бағышланған бәйет** (77)
(көйләп әйтелә)

Ҡара урман эстәрендә
Әсәйемдең ҡәбере.
Йәтем ҡалған ҡыҙ баланың
Илап кибә бәғере.
Йомшаҡ елдәр иҫкән саҡта
Гөл-сәскәләр ҡуҙғала.
Ҡыҙғанырға әсәйем юҡ,
Их, мин бәхетһеҙ бала.
Сәскәләр баштарын эйә,
Ҡырау тейгән көндәрҙә.
Ҡайғы-хәсрәт моңдарымды
Һөйләйем мин кемдәргә.
Мин бәхетһеҙ, башҡайыма
Бәхет ниңә кәрәк ул.
Был донъяла бәхет менән
Йәшәгәндәр һирәк ул.
Атай мине үҫтергән
Кеше иткән, рәхмәт.
Инде хәҙер ни эшләйем
Башым күрмәй рәхәт.
Мин ишеттем дөрөҫөн,
Һандуғас балаһынан.
Ул да шулай минең кеүек
Айрылған анаһынан.

**"Саҡ менән Суҡ бәйете"**нең риүәйәт-легенда
формаһында төҙөлгән варианты (120).

Элек бер инәйҙең ике улы булған, береһе – Саҡ икенсеһе – Суҡ. Был улдары аҙ ғына берәй нәмәгә үпкәләһәләр ҙә, бер туған булыуына ҡарамаҫтан, бик ҡаты асыуланып, бер-береһе менән һуғышып, талашыр булғандар, ти. Аптырағас быларҙың инәләре: "Күҙемә күренмәгеҙ, тамам мине ялҡыттығыҙ", – тип әйткәс, былар икеһе ике яҡка сығып киткәндәр, ти*. Бераҙ ваҡыт үткәс, былар бер-береһен бик һағынғандар, бер-береһен күрергә көн дә ашҡыналар, ти. Ә инә һүҙен тыңламаған өсөн Хоҙай тәғәлә быларҙы төндә генә, билгеле сәғәттә осраштырырмын, тигән. Был икәү көн дә алыҫ юлға сығып, бер-береһенә ҡаршы барып, күрешергә әйтеүҙәре була, таң ата ла ҡуя икән. Шулай итеп был татыу тормаған бер туғандар ғүмерҙәре буйына осраша алмай икән.

### **"Ҡара йәнлек" бәйете** (82; 98; 117)

Миңлегәрәй исемле сәсәндән "Ҡара йәнлек" исемле бәйет отоп алып ҡалғандар. Ул был бәйетте мәжлестәрҙә көйләп әйтер булған. Яҙып алынмағас, тулы варианты һаҡланмаған, иҫтә ҡалған өҙөктәре яҙып алынды.

Элек Иҫке Яппар эргәһендә бер ҙур ғына Бигеш исемле башҡорт ауылы булған (бер саҡрымдар тирәһе алыҫлыҡта Әлбәйгә табан). Ул Ҡырҡөйлө мең башҡорттары ырыуына ҡараған. 1960 йылдарҙа был ауылды перспективаһыҙ тип, бөтөрөлөү исемлегенә кертәләр. Ошо ауылда тирә-яҡта дан алған мәргән атыусы, бик оҫта һунарсы булған.

Әлбәй, Бигеш ҡәрйәләре,
Ҙур Яппарҙың ҡырҙарын.
Элек борон заманда
Ҡаплаған ҡара урман.
Дим буйында әрәмәләр

---

* Был текста бәйеттәге мифологик мотив – әсә ҡарғышы һөҙөмтәһендә балаларҙың ҡошҡа әүерелеү мотивы – төшөп ҡалған – *Ред.*

Үтеп сыҡҡыһыҙ булған.
Һәр ағаста ҡанат ҡағып,
Һайрар ҡоштары булған.
Ҡиммәтле тире биргән
Кейектәре күп булған.
Мул һыулы күлдәрендә
Ҡаҙ-өйрәктәр күп булған.
Бигерәк матур Дим буйы,
Бигештең ҡәрйәләре.
Әүәл-борон заманда,
Йәшәгән, ти, атаҡлы,
Тирә-яҡта дан тотҡан
Бик тә мәргән һунарсы
Исрафил тигән батыр.
Көн дә аулар булған ул,
Ҡиммәтле затлы йәнлек.
Бер ваҡыт һунарсыбыҙ,
Мәҙәк эшкә тарыған.
Шаянғол да, Мырҙағол
Исрафилдың аҡ бесәйен
Ҡоромға батырғандар.
Ҙур йәнлектең ҡойроғон
Беркеткәндәр бесәйгә.
Күк тирәклек янында
Исрафилдың юлында,
Ебәргәндәр, ти, быны.
Был һунарсы атынан
Саҡ төшмәгән, ти, ҡолап.
Быҙдай йәнлекте ул
Беренсе тапҡыр күргән.
Был йәнлектең артынан
Эте сапҡан ти, алдан.

Һыбай сапҡан Исрафил.
Уҡ-һаҙағын төҙләгән.
Был йәнлек бик шәп булған,
Етеҙ ҙә сапҡан булған.
Бер аҡландан, икенсеһе,
Әрәмәлек ҡалмаған.
Данлыҡлы һунарсыбыҙ
Тамам ғәжәпкә ҡалған.
Уҡ-һаҙағы теймәгән,
Тамам был аптыраған.
Бына килеп кергәндәр
Бигештең урамына.
Туп-тураға был йәнлек
Сапҡан Исрафил өйөнә.
Ишектәр асыҡ булған,
Йәнлегебеҙ һикергән
Мейес башына дөбөрҙәп.
Ҡарсығы Зәмзәбикә
Ҡурҡышынан ултырған.
Һунарсыбыҙ шатланған, ти,
Был йәнлекте тоттом, тип,
Ишектәрен япҡан, ти.
Исрафил килеп ҡараһа,
Ҡоромға  батҡан аҡ бесәй.
Ҙур ҡойроҡ тағылған
Аҡбикә лә бесәйе
Мыраулап ултыра, ти.

### **Ҡаҙаш тарханға арналған көйлө бәйет** (196)

Өршәк буйындағы ҡалҡан, ай,
Ҡаҙаштың ҡәрйәләре.
Ҡәнзәфәр бейгә килгән, ай,

Яҡшы хат хәбәрҙәре.
Өршәк әрәмәләре лә, әй,
Хәлдәремде һораша.
Дуҫ тип дошман килер, әй,
Һүҙҙәренә ҡарама.
Өршәк буйҙары йәмле, әй,
Эсер һыуҙары тәмле.
Ҡаҙаш кеүек тархан булһа,
Тарҡалмаҫ илкәйҙәре.

Камалова Мәрйәм (уҡытыусы) һөйләүе буйынса, ошо уҡ бәйетте Иҫке Мерәҫ ауылынан Камалов Хәйретдин исемле кеше яҡшы белгән.

### **Салауатҡа мәҙхиә*** (143)

Ай-һай, Салауат,
Илдең даны Салауат,
Халҡым тиеп яуға саптың
Беҙҙән һиңә салауат**.
Быҕауҙарҙы ырғытып,
Ирек тиеп дауланың.
Ҡулдарыңа ҡылыс алып
Дошмандарҙы яуланың.

Ай-һай, Салауат,
Булдың бит һин терәк.
Һинең кеүек уҙамандар
Донъяларҙа бик һирәк.
Тиҫбеләрҙе ҡулға алып,
Һиңә тәсбих әйтәбеҙ.

---

* Үҙ ваҡытында уның тарафынан Сыртланов Мөхөтдин (1892 йылғы), Сыртланов Хәйретдин (1888 йылғы) олатайҙарҙан яҙып алынған.

** Салауат – был осраҡта исем түгел, ә доға мәғәнәһендә. – *Ред.*

Ҡурайҙарҙы алға ҡуйып,
Һиңә көйҙәр көйләйбеҙ.

Ай-һай, Салауат,
Ил батыры Салауат.
Әйткән һүҙең хаҡ булды –
Беҙҙең өсөн аманат.
Мең башҡорто ҡолаҡ һалды
Һинең әйткән һүҙеңә.
Һуңғы һулышына тиклем
Дошман менән көрәштең.

Ай-һай, Салауат,
Милләттең йөҙөк ҡашы.
Бейек тауҙарҙың башы,
Тарихтар яҙған ташы.
Һиңә шиғыр яҙамын,
Һине данлап маҡтайым.
Һинең яҙған йырҙарыңды
Ҡәҙерләп мин һаҡлайым.

Ай-һай, Салауат,
Башҡортомдоң бөркөтө,
Толпар атка атланып,
Дошмандарҙы өркөттө.
Ерҙәремде һаҡлап ҡалып,
Милләтемде яҡланы.
Яугирҙәргә ҡанат биреп,
Урал буйын ҡалҡытты.

**Яҡшы ир – ил күрке** (301)

Иле булған ир көслө,

Дәүләте булғаны – бәхетле.
Нигеҙе булған ир нурлы,
Дәүмәле булған – ҡаҙналы.
Нәҫеле булған ир затлы,
Ҡатыны булған – ҡанатлы.

Батыр булған ир яҡшы,
Дуҫы булғаны – һанлы.
Көйө булған ир йырлы,
Дәрте булғаны – моңло.
Белемле булған ир башлы,
Фекере булғаны – аңлы.

Мәргән булған ир ашлы,
Ярҙамсыл булғаны – уңлы.
Ата булған ир аяҡлы,
Малы булғаны – барлы.
Тәртипле булған ир әҙәпле,
Ғилемле булғаны – ҡәҙерле.
Милләтте һаҡлаған ир ҫанлы,
Уҙаман булғаны – ҙурлы.

**Мөғәллимәләргә мәҙхиә** (85)

Дәүләкән ҡәрйәләре
Булды белем усағы.
Ике ҡатлы мәҙрәсәләр
Булды башҡорт ҡәғбәһе.
Мөҙәрисе танылған
Искәндәр ахун булды.
Үтә зирәк, белемле,
Булды башҡорт ғалимы.
Ғилемнәрҙе өйрәнергә
Тирә-яҡтан йыйналды
Башҡорттоң шәкерттәре.

Уҡыныхар балалар
Әл-тәүәрихте-иманды,
Жәғрәфиә [география], хисапты,
Ятланылар Ҡөрьәнде.
Башҡорт һылыуҙары өсөн
Милләтем йөҙөк ҡашы
Булғандыр Бибиғәйшә.
Был остазда уҡыған
Ҡыҙҙар белемле булды.

**Яппар ҡапҡаһы** (85)
(бәйет-рәнйеш)

Яппар башы ҡапҡаһы
Асыла ла ябыла.
Башҡортомдоң балаһы
Зиндандарға ябыла.
Яппарларҙың ҡапҡаһын
Кемдәр алған япмаһын?
Сталин да тик ятмаһын,
Сабатаһын ҡатлаһын.

**Шәмсиәбаныу ҡарсыҡ бәйете** (110)
(Шәмсиәбаныу әбейҙән ишеткән)

Солтанғәлина Йомабикә Мөхәмәҙғәли ҡыҙы (1900 йылғы) Яңы Яппар ауылына 18 йәшендә мөғәллимгә кейәүгә сыға. Ҡәйнәһе Шәмсиәбаныу исемле инәй өмә әйтеп өй-йорт ҡаралтыларын һылата (балсыҡтан). Бер-ике биҙрәләй балсыҡ етмәй ҡала. Йәш төпсөк килене Йомабикә ауырлы булыуына ҡарамаҫтан, Дим ярынан бер көйәнтә балсыҡ алып ҡайта ла, балсыҡ баҫып, был урынды, ҡәйнәһе ҡайтҡансы эш бөтһөн тип, һылап-шымартып ҡуя. Ҡәйнәһе өмә көн Хәжәткә ҡыҙҙарының хәлен белергә, ире бесән сабырға киткән була.

Шулай итеп ире, ҡәйнәһе ҡайтыуға өҙлөгөп аяҡтан йығыла һәм шул ятыуҙан тормайынса, бер-ике көндән һуң вафат була. Ҡәйнәһе ташлап киткән килененә бағышлап бәйет сығара.

Киленкәйем, ҡыҙҡайым,
Йәш инек, сабыйҡайым.
Ғүмерҙәрең булды ҡыҫҡа
Әй, бәләкәй бәбкәйем.
Эх, бәләкәй бәбкәйем.
Эш тип эшһеҙ торманың.
Үҙкәйеңде йәлләмәйсә,
Ниңә шулай эшләнең.
Эй, төпсөккәй киленем,
Эй, төпсөккәй киленем.
Йөгөрөп-йөгөрөп, күбәләктәй,
Уңған булдың – яраттым.
Ҡәйнәм тиеп өҙөлөп,
Хөрмәтләнең, рәхмәт.
Эй, балаҡай, күҙ нурым,
Эй, балаҡай, күҙ нурым.
Дим буйының балсығы,
Йөрәгемдә ярсығы.
Бәғеремдең янсығы ла,
Мин бәхетһеҙ ҡарсығы.
Эй, киленкәй, нишләнең,
Эй, киленкәй, нишләнең?
Ашын ашаған инем дә,
Йәшен йәшәгән инем.
Ҡарт көнөмдә әхирәтлек
Алып ҡуйған да инем.
Эй, киленкәй, киленем,
Эй, киленкәй, киленем.
Киленкәйем алға сыҡтың

Мин бараҫы юлдарға.
Һандыҡтарҙан алып бирҙем
Мин кейәҫе күлмәкне.
Эх, киленкәй, ни ҡылайым,
Эх, киленкәй, ни ҡылайым?
Күрәсәкте белгән булһам,
Сәфәрләр сыҡмаҫ инем.
Киләсәкте күргән булһам,
Күҙ йәштәр түкмәҫ инем.

**Аҡмулла тураһында** (121)

(Ҡаҙанғол мәктәбе музейы фондынан)

Эй, Аҡмулла, Аҡмулла –
Һин бит беҙҙең хаҡ мулла.
Башҡорттарым, уҡығыҙ тип,
Нәсихәттәр яҙғанһың.
Еребеҙ сәскә атһын тип,
Һин бит доға ҡылғанһың.
Мәғрифәтле булығыҙ тип,
Һин бит утта янғанһың.
Дим буйҙарын сәфәр ҡылып,
Һин бит һыуҙар кискәнһең.
Халҡыңдың аһ-зарын күреп,
Һин бит китап яҙғанһың.
Күңелдәрең саф булған бит,
Аҡ булған белемдәрең.
Эй, Аҡмулла, Аҡмулла –
Һин бит беҙҙең хаҡ мулла.
Һин бит беҙҙең аҡ мулла.

Был бәйетте Иҫке Яппарҙа “Мөьмин мулла бәйете” тип йөрөтәләр.

## 1812-1814 йылдарҙағы һуғыш турында сығарылған бәйет

(Розалия Солтангәрәева яҙып алған)

Мең һигеҙ йөҙ ун икелә
Уҡ-һаҙаҡтай ир инек.
Илем тиеп, Рәсәй тиеп,
Утҡа-һыуға кер инек.
Үҙең үлеп, даның ҡайтып,
Данлы башҡорт ғәскәре
Ил эсендә бер инең!
Рәсәй тигән батшалыҡ
Таянған ил беҙ инек,
Һай, ир инең!
Атҡан уҡтай төҙ инең,
Береҥ өсөн береҥ үлеп,
Бер һаҙаҡҡа теҙгән уҡтай
Торған уҡтай һин инең,
Һай, ир инең!

## Ҡотлояр мулла бәйете (223)

Ваҡытында бик әүәл
Мең дәүләте булғандыр.
Тулы һыулы Күгиҙел,
Сылтырап аҡҡан Өршәге.
Зәңгәр һыулы күлдәре,
Аҫлы, Ҡандра һыуҙары
Был ырыуға кергәндер.
Ҡалын ҡара урмандар,
Киртләс киткән тауҙары,
Иркен ялан-ҡырҙары,
Булған ырыу байлығы.
Әүәл-әүәл электән

Ошо ерҙе төйәк иткән
Беҙҙең башҡорт бабалар.
Булған уның аҡыллы
Батырҙары, бейҙәре,
Тирә-яҡта дан тотҡан
Ҡәнзәфәр бей булғандыр.
Барлыҡ ерҙе берләштереп,
Ул булғандыр ҙур түрә.
Уның нигеҙ таштары
Ҡалмаҡсура буйында.
Ологүлдең* буйҙары
Донъя көткән шул ерҙә.
Һис бер нужа күрмәгән,
Береһенән береһе матур
Өсәү булған ҡатыны.
Иң өлкәне уңғаны –
Шәрифәһе матуры.
Бүләк иткәндер уға
Биш уланды, батырҙы.
Биш бармаҡтай берҙәм булып
Батыр булып үҫкәндәр.
Буй-һындары етеү менән
Уҡ-һаҙағын алғандар.
Атаһының һүҙен йыҡмай,
Тоғро булып үҫкәндәр.
Аҡ батшаға ҡушылғас,
Дүрт уғланын йыйғандыр.
Васыяттарын әйтә һалып,
Ерҙәр бүлеп биргәндер.
Ҙур уғланы Ҡоҙайбах

---

* Ологүл – хәҙерге Шишмә районы Иҫке Ябалаҡлы ауылындағы күл.

Нигеҙ ҡора һалғандыр
Йәмле Өршәк буйына.
Дәстән тигән уғланы
Дәрхән күлен* үҙ итеп,
Шунда нигеҙ ҡорғандыр.
Ҡуҙайбахты батыры
Ҡыҙҙар тауы** итәгендә,
Димдең йәмле ярында,
Нигеҙ ҡора һалғандыр.
Ҡоҙаш тигән уғланы
Өршәк, Үҙән буйҙарында
Тормош көтә башлаған.
Иң кесеһе, Хәжәре,
Ҡалған бейҙең янында.
Булған бейҙең дустары
Иң яҡыны, уң ҡулы.
Сөфлө тигән ярҙамсы
Булған унең улдары.
Башҡорттарҙың батыры
Яйыҡ-Субы тигәне
Ҡыпсаҡ яғын* үҙ иткән.
Ҡәҙер Субы тигәне
Каршин яғын үҙ иткән.
Исел менән Минлеһе
Кармасандың яғында
Нигеҙ һалып, ер алған.
Ҡәнзәфәр бей үҙ итеп

* Дәрхән күле – – хәҙерге Дәүләкән ҡалаһы эргәһендәге күл.

** Ҡыҙҙар тауы – хәҙерге Шишмә районы Ҡараяҡуп ауылы эргәһендәге тау.

* Ҡыпсаҡ тауҙары – Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылы эргәһендәге теҙмә тауҙар, Әлшәй районына инә.

Яҡын ҡорҙаштарына –
Ураҙ менән Мәмбәткә
Яҡуп тигән муллаға
Бүләк иткән ерҙәрен.
Шулай итеп Мең ере
Туғыҙ олоҫтан торған.
Кәңәшләшеп, бергәләп,
Улар бергә эш иткән.
Ҡаратундың итәгенә
Йыйылғандар бергәләп.

**Тыуған яғым, тыуған ауылым** (257)
(йырлы бәйет)

Шаулай ҡайын, шаулай ҡайын елдәр иҫкәндә,
Һағындыра тыуған ауылым иҫкә төшкәндә.
Һағындыра ауылымдың соҡор-саҡыр урамдары,
Әллә шунда тыуып үҫкәнгә?
Шаулай ҡайын, шаулай ҡайын елдәр иҫкәндә,
Һағындыра тыуған ауылым иҫкә төшкәндә.
Һағындыра әсәйемдең мәтрүшкәле тәмле сәйе,
Әллә шуны эсеп үҫкәнгә?
Шаулай ҡайын, шаулай ҡайын, елдәр иҫкәндә,
Һағындыра тыуған ауылым, иҫкә төшкәндә.
Һағындыра әсәйемдең “бәхетле бул” тигәндәре,
Әллә шуны ишетеп үҫкәнгә?

**Йәйләү хәтирәһе бәйете**

(Венгриянан килгән экспедиция вәкилдәре Акбаров Ҡотлоәхмәттән (1891 й.) яҙып алған, көйләп уҡыла, нотаға һалынған)

Элгәре башҡорт бабайҙар
Йөрөгәндәр йәйләү күсеп.
Тирмәләр ҡороп, бейә бәйләп
Һауып, ҡымыҙ эсеп.

Береһе ҡалмай ҡырға күсеп
Киткән улар яҙ көнө.
Сәхрәлә тулып йөрөгән
Төрлө малдың төркөмө.

Сәхрәләр ятҡан йәшәреп,
Һис бер эш үрелмәгән.
Тулҡынып диңгеҙ кеүек киң
Ситтәре күренмәгән.

Йәшел үлән, төрлө сәскә,
Иҫ китерлек йәйге саҡ.
Сәхрәлә үҫкән тулып,
Зәңгәр, һары, ҡыҙыл, аҡ.

Түшәлеп ятҡан яланда
Ҡып-ҡыҙыл төрлө еләк.
Бер сәғәттә йыйып алғандыр
Уны силәк-силәк.

Тау башы шул ҡырҙарында
Теҙелеп үҫкән күп ағас.
Баштарында һайрағандыр,
Яңғыратып, ҡош һандуғас.

Биҙәнеп йөрөгән матур ҡыҙҙар
Яланда ялтырап.
Икенән-өстән үреп сәсен,
Баштарын майлап тарап.

Йәш егеттәр сәхрәләргә
Йөрөгән уйнап, шатланып.
Ҡулдарына алып ҡамсы,
Яҡшы аттарға атланып.

Ул заман физел биҙәннәр
Таҙа булған үҙҙәре.
Бик йыраҡтан күреп уҙған
Дәхи үткән күҙҙәре.

Саф һауа, сәскә ҡымыҙы
Булған уларға дауа.
Йәй көнө гел сәхрәлә
Еҫкәп йөрөйҙәр саф һауа.

Саф һауа һулап йөрөгәс,
Таҙа булған йөрәк-үпкәләре.
Булмаған ул саҡта сихутҡа
Һәм ялҡынлы уттары*.

Ул заман башҡорт араһында
Булған илтифат**.
Ҡылмаған бер-береһенә
Хыянат һәм нахаҡ.

Йөрөгән улар бер туған-ҡәрҙәш
Кеүек өлфәтләнеп.
Бергә ашап, бергә эсеп,
Бер тигеҙ рәхәтләнеп.

Бик йомарт булған фәҡиргә
Ул замандың байҙары.
Эсһә ҡымыҙ әҙер булған,
Ашаһа – икмәк-майҙары.

Йыйылып аҡ тирмәгә бай
Ярлыһы бергә ултырып.
Саф ҡымыҙ эскәндәр улар,
Көрәгәләр тултырып.

Һәр бер табын шауында
Тап сәхрәгә ҡырҙарын.
Көйләгәндәр моңло тауыш
Өйлө башҡорт йырҙарын.

Һөйләгәндәр ул заманда
Һыуһынып, ләззәтләнеп.
“Һай, ғүмерҙәр үтте” – тиеп,

* Ялҡынлы уттары – иҫерткес эсемлектәре.
** Илтифат (*ғәр.*) – иғтибар, диҡҡәт. – *Ред.*

Ҡарттарыбыҙ дәртләнеп.

Ваҡытында Дим буйы йыйындарында был аҡһаҡал-сәсән һәр ваҡытта сәсәндәр бәйгеһендә ҡатнашып килгән. 1916 йылда Ярыштауҙа уҙғарылған йыйында сәсәндәр араһында беренселекте ала. Ҡотлоәхмәт сәсән тураһында Ҡаҙанғол ауылындағы Сәйфетдинов Ғилмитдин бабайҙар хөрмәтләп телгә ала. Ул яҡшы сәсән ине, Бирге Яппарҙың Мөьмин сәсәнен генә уҙалмаҫ ине, ти.

**Буҙйегет бәйете**

(1964 йылда Ҡотлогилдина Гөлсөмдән венгр ғалимдары яҙып алған)

Илағаным белмәйҙер атам минең,
Зарланғанымды белмәйҙер инәм минең.
Ғәриплеккә төшөп тә яңғыҙ башым,
Һорарға һис кемем юҡ, хәлем минең.

Ағастың башын киҫһәң, төбө ҡала,
Икәүҙең бере үлһә, бере ҡала.
Яңғыҙҙың үҙе үлһә, кеме ҡала?
Менгән аты, кейгән туныятҡа ҡала.

Яҙҙым мин моңло күңелем асылһын тип,
Һәр ергә был йыр, һүҙем сәселһен тип.
Донъяла төрлө-төрлө әҙәм булыр,
Ҡайғылы әҙәм күңеле баҫылһын тип.

**Гөлбәҙәр** (231)

(бәйет)

Ҡотлояр мулланан ишеткән, ләкин яҙып алмау сәбәпле, был әбейҙә бәйеттең бер-нисә өҙөгө генә хәтерендә ҡалған.

Элек ниндәйҙер ихтилалды баҫтырыу өсөн Дим буйына батша хөкүмәте драгун – үс ала торған отряд ебәрә. Бик күп кешеләр ҡасып ҡотола. Ни сәбәп менәндер, бер-нисә ғаилә ауылда ҡала. Бер хәлле генә, бер аяҡлы һөнәрмән кешенең бик сибәр, тирә-яҡта һылыулығы менән дан алған бик ҡыйыу ҡыҙы була. Теге зәғиф һөнәрмәнде үлтереп, был атаһы янында ҡарап ҡалған Гөлбәҙәр исемле ҡыҙға драгундарҙың башлығы ғашиҡ булып, үлтерергә ҡушмай, үҙенә ҡоллоҡҡа ала һәм үҙенең янына ултыртып алып китә. Был ҡыҙҙың еләнендә йәшереп кенә йөрөткән хәнйәре була. Дәүләкәндең изге күпере янына килеп етәрәк, Гөлбәҙәр хәнйәрен тартып сығарып драгундарҙың башлығын үлтерә һәм үҙенең йөрөгенә ҡаҙай. Драгундарҙың һаҡсылары Гөлбәҙәрҙе үлгән урынында ырғытып ҡалдыралар. Бер аҙ тынғас, ауылдаштары Дим ярының ҡалҡыулығына Гөлбәҙәрҙе  ҡәҙерләп ерләйҙәр һәм бәйет сығаралар.

Ҡотлояр ҡарт бик оҫта яттан һөйләй ине, ул көйләгәндә лә халыҡ күҙ йәше менән тыңлап ултырыр ине. Минең хәтерҙә бер нисә өҙөгө генә иҫтә ҡалған.

Гөлбәҙәрҙең башҡайында
Аллы-гөллө булыр яулығы.
Ҡоллоҡҡа ла алып киткән
Драгундарҙың яуыз башлығы.
Гөлбәҙәрҙең еләнкәйҙәрендә
Булған икән булат хәнйәре.
Тартып ҡына алып бер һелтәгән,
Яуыз драгундарҙың башлығын.
Хуш булығыҙ, халҡым, ғына тиеп
Шәрип яҡтарына ҡараған.
Үҙ еркәйҙәремдә лә ҡалам тиеп,
Йөрәгенә хәнйәр ҡаҙаған.

Хәҙерге вакытта кәбере Дәүләкәндең иҫке күперенән уң яктағы калкыулыкта ергә һеңеп бөткән, таштан билге куйылған.

**Ике туған бәйете** (291)

Кайҙалыр шунда, ауыл ситендә
Ярлы ғаиләлә тыуҙым мин.
Абыйҙар менән, апалар менән
Туғыҙ йәштән эшкә тотондом.
Рәхәт ине йәйге көндәрҙә
Тейәлешеп, эшкә китеүе.
Абыйҙар менән, апалар менән
Бергәләшеп, ғүмер итеүе.
Рәхәт көндәрем күпкә барманы
Тиҙҙән канлы көрәш башланды.
Кырк йәшәрлек ғәзиз атабыҙ
Китеп, ут эсенә ташланды.
Оло абый китте кыҙылдар менән
Дошмандарҙан илде һакларға.
Бәләкәй абый үҙ ирке менән
Мылтык алып китте актарға.
Көндәрҙән бер көн кара урманда
Ишетелә мылтык тауышы.
Оло абый менән бәләкәй абый
Атышалар капма-карышы.
– Атма, туғаным, куй мылтығыңды,
Туған ағаң булам мин һинең!
– Юк инде, абый, бөгөнгө көндө
Туған энең түгел мин һинең! –
Тиеп әйтте лә, ул мылтығының
Затворын тартырға кыйманы.
Ул өлгөргәнсе бәләкәй абый
Илтеп күкрәгенә каҙаны.
Алһыу сәскәләр бөгөлөп төштөләр
Кояш кыҙыуында болонда.

Ҡарғалар менән ҡоҙғондар ғына
Ҡалды абыйымдың ҡырында.

**Алданған ҡыҙ бәйете** (291)

Ҡайҙалыр шунда, гөл баҡсаһында
Йәш ҡыҙ булып йөрөй инем мин.
Дуҫтарым менән күңел асҡанда
Әле донъя белмәй инем мин.
Килде бер егет, тотто ҡулымдан,
"Әйҙә, – тине, – бергә күңелле",
Шаярып этте бер яҡ ситкәрәк,
Дуҫтарымдан айырҙы мине.
"Һин матур, гүзәл, яратам һине,
Тыңла минең әйткән һүҙемде.
Ҡыҙғанам һине, яңғыҙ йәшәмә", –
Тип, һурып үпте минең үҙемде.
Егет бик матур, оҡшаны миңә,
Ҡыҙыҡтырҙы, мине, йәш баланы
Ултырҙыҡ бергә, ҡараңғы ергә –
Шулай ялғаныҡ ике араны.
Йөрөй ҙә торғас, яулап алды ла
Әрәм итте мине – йәш баланы.
Эштәр әйләнде бигерәк насарға
Йәш ҡыҙ булыу минән ҡалғанға.
Көндәрҙән бер көн күрҙем егетте
"Әйҙә, балам була", – тинем мин.
"Һөйләмә юҡты, һине белмәйем
Эҙлә хәҙер үҙең кеүекте".
Кинжалын алып миңә ынтылды,
Ярай әле ҡасып ҡотолдом.
Йәшлеге урланған бахыр ҡыҙ бала
Ҡайттым ата йортона хур булып.
Эй, ҡыҙ балалар, бик һаҡ булығыҙ,
Ҡабатламай минең хатамды.

Аҙғын егеттәр – ҡоторған эттәр,
Тормай беҙҙең өсөн ҡайғырып.

**Сөләймән тураһында йырлы-көйлө бәйет** (223)
(Үҙ ваҡытында Ҡотлояр мулланан ишеткән,
иҫтә ҡалғандарҙан бер нисә өҙөк)

Сөләймән дә тигән, ай, аҫыл ир
Башҡорттарҙың булған батыры.
Ерем генә тиеп ирек даулап,
Батырҙарҙы яуға күтәргән.

Сөләймән дә тигән, ай, уҙаман
Ғәскәрҙәрҙең булған башында.
Халыҡтың да һөйөүҙәрен яулап,
Тауларҙың да яҙылыр ташына.

**Балҡантау тураһында көйлө бәйет*** (292)

Эй, Балҡантау, Балҡантау,
Балҡып торған Балҡантау.
Һин бит беҙҙең бейек тау,
Һин бит беҙҙең нурлы тау.
Тирә-яҡтың күрке булған
Һин бит беҙҙең изге тау,
Шул тауҡайҙың башҡайы –
Булыр тамға ташҡайы;
Нардуғандар эсендә
Ҡылған үҫкән ерләрҙә
Тыныс йоҡоға талған
Заятүләк, Һыуһылыу.
Әй, Балҡантау, Балҡантау,
Һин бит беҙҙең йырлы тау.

* Был юлы “бәйет” һүҙе шиғыр мәғәнәһендә бирелә. – *Ред.*

Һин бит беҙҙең ғорур тау,
Һин бит беҙҙең мәғрур тау,
Заятүләк, Һыуһылыуға
Урын биргән күркәм тау.

**Минең сығышым** (138)

Мин йәшәгән еркәйем –
Булыр Башҡорт илкәйе.
Тамырҙарым – мең ере,
Ҡаҙанғол ҡәрйәләре.
Милләтем булыр башҡорт,
Нәҫелем минең – сәрмә.
Тәңре ҡоштарым – бөркөт,
Изге ағасым – артыш.
Был донъяға иман биргән
Динкәйем булыр ислам.

**Хәйерниса бәйете тарихы** (119)

Был бәйетте Усманова Мәфтуха инәй Ҡаҙанғол ауылы Исхаҡ мулланың ҡатыны Хәйербанат исемле абыстайҙан отоп алған. Хәйербанат абыстай 1930 йылдарҙа – репрессия ҡорбаны, оҙаҡ йылдар Ҡаҙанғол ауылында ҡыҙҙар уҡыта. Яңы Яппар ауылында бер әруахты кис һаҡлап ултырған ваҡытта Хәйерниса исемле бәйетте Хәйербанат абыстайҙың нәнәһе [өләсәһе –*ред.*] һөйләгән. Ирен француз яуына оҙатып, әгәр мин һуғыштан ҡайта алмаһам, йорт нигеҙҙе берүк ташлама ауыр булһа ла, балаларҙы аяҡҡа баҫтырырға тырыш, кеше араһында кәм-хур булып йөрөмәһендәр, тип һаубуллашып китеүенән ҡайта алмай.

Был Хәйерниса исемле әбейҙең өс ҡыҙы булып, береһе йәшләй генә гүр эйәһе була. Унан ҡалған Хәмдиәбаныу менән

Хәмдибанат исемле ҡыҙҙары буй етеп, Бирге Яппар ауылына тормошҡа сығалар.

Хәйерниса инәй 80-дең өҫтөнә сыҡкан булһа ла, ҡыҙҙары-кейәүҙәре күпме генә үҙҙәренә саҡырһалар ҙа, йорт нигеҙен ташламай. “Атайымдың нигеҙе, мал-тыуарын бөтөрә алмайым” – тип көтә бирә.

Бер ваҡыт бер ҡыҙы бик ҡаты ауырып, үлем түшәгенә ята. Арғы Яппар менән Бирге Яппар аралары өс саҡрым ғына булһа ла, яҙ көндәрендә Димдең ике ярында ултырған ауылдарҙа юл өҙөлөп, бәйләнеш бөтә, бер-ике айҙарға. Был инәй юл өҙөлгәнгә тиклем был ауылдар араһын күпме генә уҙғандыр, оло йәшенә ҡарамаҫтан. Юл өҙөлөр алдынан былай ти: “Ҡыҙымдың хәлен яҡшы беләм, һеҙгә өс яулыҡ ҡалдырам. Алпамыша тауына ҡолға ҡуйып, алмашлап элерһегеҙ. Аҡ яулыҡ элһәгеҙ, хәле бер көйө икәнен аңлармын, ҡыҙыл яулыҡҡа ҡарап, хәле ҡыл өҫтөндә икәнен белермен, баш осона ултырып үҙем ясин уҡырмын, әгәр ҡара яулыҡ элһәгеҙ, был донъянан ҡайтып киткәнен аңлармын. Берүк быны эшләгеҙ, нисек кенә ауыр булһа ла – мин аңлармын, үҙем һөйәктәренә инермен (йыуырмын тигәнде аңлата), – тип әйтә. – Әгәр быны эшләмәһәгеҙ, мәңге бәхиллегем юҡ!” – тип, күҙ йәштәрен тамыҙа-тамыҙа, ҡайтып китә.

Бер аҙна үтә, күреүенсә, ҡолғала аҡ яулыҡ эленгән була, аҙна үтеүгә ҡыҙыл яулыҡты эләләр, бик ауыр һанаулы сәғәттәре ҡалғанын белеп, шулай эшләргә ҡарар ҡабул итәләр. Был ваҡытта Дим бик ныҡ ташып, бөтә туғай-болонлоҡтарҙы баҫҡан була. Көнө лә ошо көндө ҡапыл боҙолоп, бейек-бейек тулҡындар уйнай башлай.

Был инәй ауылдың күп кешеләренә мөрәжәғәт итеп ҡараһа ла, береһе бирге ярға инәйҙе сығарып ҡуйырға ризалыҡ бирмәй, аҙыраҡ сабыр итергә ҡуша. Бер нигә ҡарамай бер ир шулай ҙа риза була, кәмәгә ике яғына бик ҙур

ғына бүрәнәләр бәйләп. Арғы Яппар Бирге Яппарға ҡарағанда үрҙәрәк урынлашҡан, шуға ышаныпмы икән, һыу ағышы менән килеп сығарбыҙ тип, былар кәмәгә ултыралар. Ике яҡ ярҙа ҡалған халыҡ быны күҙ ҙә алмай күҙәтеп тора. Бирге Яппарға бер ярты саҡырым ғына ҡалғас, көслө тулҡындар кәмәне ауҙара. Шул төшөп китеүҙән Хәйернисә инәй ҙә, ишкәксе ҡарт та һыу төбөнә төшөп китәләр, алған хәйер-саҙаҡалары ла талдарға уралып ҡала. Шулай ҙа ел тымғас, был инәйҙең үле кәүҙәһен түбән оста табалар, бер нисә сәғәттән һуң ҡыҙы ла был донъянан китә.

Икенсе көн был инәле-ҡыҙлы ике әруахты Бирге Яппарҙың зыяратына, бер ҡәберҙең ләхетенә күмәләр. Ошоға бағышлап Хәйербанат исемле инәй яҙған бәйет бар. Уның иҫкә ҡалған бер килкеһен яҙып ҡуйған инем үҙемә, шуны уҡыһаң, ҡатын-ҡыҙҙар һәр ваҡыт күҙ йәшенә эркелер ине. Көйләп уҡыла.

Арғы Яппар, Бирге Яппар
Юлдары ла бик таҡыр.
Өс саҡырым ғына микән
Әй һеҙҙең бит аралар.
Хәйернисә инәкәй,
Һин Яппар илкәйенең
Булдың бит аҡ сәскәһе.
Иң хөрмәтле бәндәләрҙән
Булдың бит һин, инәкәй.
Ҡөрьән китап, намаҙлыҡта
Булды һинең көндәрең.
Ололарға һәр ваҡыт та
Һин бит булдың изгелекле,
Ауылдың һәр кесеһенә
Һин бит күрһәттең үрнәк.
Аҡ батша әмерҙәре
Алды ирен һуғышҡа.

Француз тигән илдәрҙә
Ятып ҡалды юлдашҡайы.
Ауырлыҡтарҙы еңеп,
Үҫтерҙең бит балалар.
Тәрбиәләп һин үҫтерҙең
Ҡыҙҙарҙың барыһын да.
Бирге Яппар ауылына
Бирҙең бит икеһен дә,
Тормошларына ҡыуанып
Фатиха доға ҡылдың.
Ни ҡылһаң да әйтеп булмай,
Хоҙай тәҡдире микән?
Йәп-йәш кенә бер ҡыҙың
Ауырып киткән бер көндө.
Аҡ яулыҡ ҡолғаларҙа –
Күреп, ҡыуанғанһыңдыр.
Ҡыҙыл яулыҡ ҡолғаларҙа –
Күҙҙәр йәшен түккәнһең.
Ҡара яулыҡ ҡолғаларҙа
Элергә өлгөрмәгән.
Ҡыҙыңдың йән биререн
Ишеткәнһеңдер илап.
Иртән иртүк кәмәләргә
Кемдәр ултырткан икән?
Балам, тиеп күҙ йәштәрен
Түккәнһеңдер – беләбеҙ.
Бирге Яппарлдарға етмәй
Ғәйеп булғанһығыҙ бит.
Һары талдарға уралған
Һин алған саҙаҡалар.
Яулыҡтарың әләм булып,
Елберҙәгән ҡолғала.

Ҡыҙыҡайыңды күрәм тип,
Ашыҡтың бәхилләргә.
Бер ҡәберҙән урын алып,
Ләхеттәргә яттығыҙ.

Иҫке Яппар менән Яңы Яппар күперенән сыҡҡас та, һул яҡта, туплауға яҡыныраҡ бер күл бар. Һыу ҡайтҡас хәйергә тип алған һөлгө, баш яулыҡтарының һары талдарға уралып ҡалғанын күргәндәр.

Был күлде элек-электән "Хәйер-саҙаҡа күле" тип атарҙар ине, үткәндә оло кешеләр хәйергә тәңкә ырғытып доға ҡылырҙар ине. Шулай иткәндә Дим һыуы үҙенә алмаҫ, нәҫел-нәсәбең имен булыр тигән йола бар ине.

**Шәкертемә өндәмә** (8)

(Мөьмин мулла бәйете, 60-сы йылдарҙа Мәрхәбә исемле инәйҙән яҙып алынған)

Кил, шәкертем, мәктәбемә,
Саф күңелдән.
Фән тауҙары һине көтәр,
Ишек асып.
Ғилемдәрҙе үҙләштер һин,
Күңел биреп.
Һин булырһың шул сағында
Милләтемдең йөҙөк ҡашы.

**Яҙлыгөл бәйете** (148)

Яҙлыгөл абыстайға
Беҙ йырлайбыҙ мәдхиә.
Ул өйрәткән уҡыусылар
Үтә зирәк, белемле.
Яҙлыгөлкәй яҙ гөлөндәй
Сәскә аттың Яппарҙа.
Һинең кеүек мөғәллимәләр

Юҡтыр тирә-яҡтарҙа.

**Бәйет** (56)

(Мәктәп музейы сығанаҡтарынан)

Әй, саф күңелдәге  мөьмин,
Ҡан-ҡәрҙәш туғандарым.
Безгә иман килтергән
Ислам дине бөйөктөр.
Һәр ырыуҙы бер итеп,
Телебеҙҙе яҡланың.
Дин ҡәрҙәште бергә йыйнап,
Илебеҙҙе бер иттең.
Ауыр саҡта тиҫбе тартып,
Ҡайғыларҙан арындым.
Ҡөръән китаптарын уҡып,
Күңелдәрем йәшәрҙе.
Изге рамазан шәрифтә
Тән-йәндәрем сафланды.
Намаҙлыҡты алға алып,
Ураҙанан көс алдым.
Ҡулдарымды алға ҡуйып,
Ҡиблаларға боролдом.
Илаһи көс һинән алдым,
Хаҡ тәғәләм – Аллаҡай.
Һәр килер көн
Минең өсөн булды шатлыҡ.
Мин йәшәйем ғорур мосолман булып.

**Дәҫтән түрә** (162)

(Ғайсина Хәҙисә Мөхәмәтйән ҡыҙының өләсәһе
Шәмсиәбаныу исемле инәйҙән отоп ҡалғандары)

Дим буйҙары ҡырлас ярҙары,
Теҙелеп киткән анда ҡәлғәһе.
Суҡраҡлы ла Бигеш аралары
Дәҫтән хандың булыр төйәге.

Дим буйҙары һутлы туғайы,
Теҙелеп киткән ҡалын урманы.
Ҡырҡөйлө лә меңдең  ерҙәре

Дəçтəн хандың булыр илдəре.

Дим һыуҙары боролоп ағаҙыр,
Дəрхəн ханда унда хужаҙыр.
Икһеҙ-сикһеҙ уның ерҙəре,
Дəрхəнкүлдə булыр йəйлəүе.

**Çөлəймəн батыр бəйете** (226)

(Дим буйындағы батыр, драгундар тарафынан үлтерелə)

Ярыш ҡына тауҙың сал итəген
Һары ҡылған ғына баçҡандыр.
Çөлəймəн дə тигəн, ай, батыр ир
Яу ҡырында һəлəк булғандыр.

Дим буйҙарында үçкəн күк тирəк,
Бөгөлə микəн иçкəн елдəргə?
Çөлəймəн дə кеүек батыр ирҙəр
Баш бирмəйҙер дошман килгəндə.

**Бəйет** (126)

Миниямал Яхъя ҡыҙының инəһе Əçҡəпъямалға арнап сығарған бəйете. 35 йəшендə инəһе ҡапыл вафат булғандан һуң, 5 бала етем булып ҡала. Ул сағында Миниямалға 11 йəш була.

Ҡайынҡайҙарымды ҡосаҡлап
Ҡайғыларымды кемгə һөйлəйем?
Инəкəйем шулай йəшлəй генə
Яҡты донъяларҙан хушлашҡас.
Эй, Хоҙайым, бирсе түҙемлек!
Ҡайғы сүлмəктəрем тулғандыр,
Йəшлəр булып аға торғандыр.
Сəскə атҡан гөлдəр сағында

Инәкәйем беҙҙе ташланы.
Эй, Хоҙайым, бирсе бер кәңәш!
Ҡарлуғасҡай ҡайҙа осаһыңдыр,
Ҡанатҡайҙарыңды талдырып.
Инәкәйем, бигерәк ашыҡтың,
Биш балаңды шулай ҡалдырып.
Эй, Хоҙайым инде нишләйек?
Йәй уртаһы зәңгәр күлдәрҙә
Ҡамыштар ҙа ниңә һарғайған?
Инәкәйем, беҙҙе ташлап киткәс,
Ҡанаттар ҙа беҙҙең ҡайрылған
Эй, Хоҙайым инде нишләйем?
Ҡараңғы төн, күк тә болотло,
Тулған айҡай унда ҡалҡырмы?
Эй, Хоҙайҡай, беҙгә әйт әле:
Бәхеткәйҙәр беҙҙең булырмы?
Бәхеткәйҙәр беҙҙең булырмы?

**Шәфәҡ бәйете** (4)

1960 йылдарҙа мәктәп уҡыусылары тарафынан яҙып алынған (музейҙан).

Элгәре башҡорт ихтилалында ҡатнашҡан бер Ҡаҙанғол кешеһен драгундар язалап үлтерә, ә ҡатыны бик һылыу булған, уны ай-вайына ҡуймайынса, ҡоллоҡҡа алып китәләр. Уларҙан айырылып ҡалған Шәфәҡ исемле ҡыҙҙарын ауыл кешеләре үҙ тәрбиәһенә алып ҡарайҙар һәм тәрбиә ҡылалар.

Ҡараңғы ла төндә юл күрһәтеп,
Етегән йондоҙ балҡып янаҙыр.
Шул йондоҙға ҡарап ете төндә
Шәфәҡ һылыу илай торғандыр,
Эй, Шәфәҡ һылыу илай торғандыр.
Етегән генә йондоҙ емелдәп,

Кемгә генә бәхет юрайҙыр.
Етем генә ҡалған һылыуҙы
Етмеш кенә кеше ҡарайҙыр,
Эй, етмеш кенә кеше ҡарайҙыр.

**Йырлы бәйет** (115)
(Мәктәп музейынан алынған)

Уҙамандың менгән турат ялын
Ҡибланан да иҫкән ел тарай.
Беҙгә башҡа бейҙәр кәрәк түгел,
Дәҫтән бей ҙә булһа, шул ярай.

(Ваҡытында был информант – Тәүлийәрова Ғәрифә инәй – бик оҫта кейеҙ, быйма баҫыусы булған, уны тирә-яҡта белмәгән кеше булмаған, шулай уҡ оҫта балаҫ һуғыусы).

**Ҡотлояр мулла бәйете** (231)

Эй, бәндәләр, ни ҡылдығыҙ, аңламайым:
Динебеҙҙе ситкә ҡағыу дөрөҫмө һуң?
Ниләр ҡылмаҡ булдығыҙ һуң, һис белмәйем,
Милләтебеҙ бөтәр тиеп уйламайса.
Үрнәк булып донъя көткән бәндәләрҙе
Дошман, тиеп мөһөр һуғыу килешәме?
Ауылдарҙың күрке булған сәждәләрҙе
Бер көн килеп манараһын алып ташлау
Мосолмандарға дөрөҫ эшме?
Аҙ ғына уйланыҡмы, әйтегеҙсе,
Килер бер көн, ғөрөф-ғәҙәт беҙҙән китәр,
Уғры, динһеҙ бәндәләргә ҡалыр бит көн.
Иман-дарман беҙҙән китәр
Телебеҙҙе онотһалар, беҙҙән ҡалған бала-саға
Шул сағында булырмы һуң башҡорт, тиеп,
Саф йөрәктән ярҙам ҡулы һуҙыусылар?

## **Рәкән бәйете** (43)

(Ҡартинәһе Шәмсегөлдән отоп алған)

Һөйләүҙәре буйынса, Рәкән – ҙур ихтилалда ҡатнашҡан тарихи шәхес, күренекле табип.

Рәкән тигән ҡарт булған,
Бик тә белемле булған.
Тирә-яҡта дан тотоп,
Табиблыҡта ул булған.
Был табибты белмәгән
Тирә-йүндә булмаған.
Көнө-төнө килмәгән,
Уға ишек ҡаҡмаған
Һис бер ваҡыт булмаған.
Донъяһы гөрләп торған,
Ике ҡатыны булған.
Ҙур ҡатыны Заһира
Тома һуҡыр булһа ла,
Ҡөрьән Кәрим китабын
Белгән икән ул яттан.
Иң кесеһе, сибәре,
Гөлнәфисә исемле,
Булған яҡшы белемле.

Уның йорто ҡымыҙ өйө янында, шишмә башланған урындың уң яғында, ошонда уҡ ҡәбере урынлашҡан, тип һөйләй ине Шәмсегөл инәйем.

## **Гөлнәфисә бәйете** (37)

Драгундар Рәкәнде ихтилалда ҡатнашҡаны өсөн язалап үлтергәндән һуң, ауылдан алып китеп, Гөлнәфисәне ҡоллоҡҡа һаталар.

Гөлнәфисә килен сәскә йыя

Дим буйҙарында ла болонда.
Сәскә генә йыймай, дарыу йыя,
Рәкән тигән изге лә табибҡа.
Гөлнәфисә, һинең ҡашмауыңдың,
Тәңкәләре микән көмөштән.
Алтындан да ҡиммәт дарыу эшләй
Рәкән тигән изге бер табиб.
Илем тейеп, изге ерен һаҡлап,
Изге яуға сапҡан батырҙар.
Шифа-шәфҡәт кенә ҡулын һуҙып,
Бергә булған Рәкән табиб та.
Гөлнәфисә килен, ал яулығың ҡалған
Дим буйҙарындағы тирәктә.
Яуыз драгун ғына һәләк иткән
Рәкән тигән изге табибты.
Гөлнәфисә килен, һинең кеүек сибәр
Дим буйында булған бик һирәк.
Ай-вайына ҡуймай алып киткән
Яуыз драгундарҙың да башлығы.

Үлгәндән һуң Рәкән ҡарттың ҡәберенә килеп, ҡарттар тәңкә һалыр булғандар. Ауырыуҙарҙы алып килгәндәр. Ошондағы ҡыҙыл мәтене алып ҡайтып ауыртҡан урындарына ябыр булғандар. “Ул файҙа итә ине”, – тиҙәр.

**Яппар аралары бәйете** (148)

(Ниғмәтулла бабай уны Сафуан* шиғыры тип әйтә)

Арғы ла Яппар, һинең, ай, мәсетең
Семәрләп тә биҙәп эшләнгән.
Манараларына менеп моңло тауыш менән

* Сафуан – Сафуан Яҡшығолов (1871-1931), Өфө губернаһы Бәләбәй өйәҙенә ҡараған (хәҙерге Миәкә районы Илсеғол ауылында) тыуған шағир-мәғрифәтсе. Мәҙрәсәне тамамлағас Яппар ауылына мулла итеп тәғәйенләнә.

Аҙан әйтә мөьмин бер мәзин.
Ҡоштар һайрауынан туҡтап ҡала,
Күркәмләнеп китә бар донъя.
Хәтфәләрҙән инеп, Димгә ҡушыла
Илаһи ҙа изге был тауыш.
Бирге Яппар уға ҡушылып китә,
Аҡ мәсет тә бында йәнләнә.
Күгәрсендәр һауаларға осоп,
Аҙан тауыштарын тарата.
Аҙан тауышынан Яппар ере
Мөьмин мосолмандар йәнләнә.
Әйтерһең дә ямғыр яуып үткәс,
Сафланғандай була бар донъя.
Аҙан тауыштарын тын да алмай,
Тәсбих әйтеп тыңлай мосолман.
Шул сағында матурланып китә
Яппарҙарҙың тирә-яҡтары.

**Алпамыша ҡәбере** (148)

Был ҡәбер Иҫке Яппарҙан Ҡаҙанғолға бара торған юлдағы бейек ҡалҡыулыҡта урынлашҡан.

Бөркөт тә генә ҡоштоң, ай, ояһы
Булаҙыр ҙа бейек ҡаяла.
Иле өсөн һәләк булһа батыр,
Ҡәберҙәре була бейектә.

Алпамыша батыр, ай, ҡәбере
Бейек ҡалҡыулыҡтың башында.
Ҡиблаларға ҡарап доға ҡыла
Үткән саҡта һәр бер юлаусы.

Алпамыша изге кеше була, ҫур ихтилалда ҡатнашҡан тарихи шәхес*. Драгундар тарафынан тотоп алынып, язалана. Ҡәбере бейек ҡалҡыулыҡта, элегерәк ҡәберендә ташы ла бар ине. Шунда һәр бер үткән кеше йәшерен рәүештә хәйер һалып, доға уҡыр булған, сөнки ул ихтилалда етәксе ролен уйнай, шуға ла бында урыҫ хөкүмәте тарафынан шымсылар ҡуйылған була. Һатлыҡтар урындарға еткерер булған. Бында хәйер һалған кешеләргә штрафтар һалынған. Уның исемен дәү, көслө булғанға шулай тигәндәр. Ә ысын исеме Аллағол, булһа кәрәк. Шулай тип һөйләйҙәр ине. Яппар ҡарттың беренсе ҡатынан тыуған. Элек Яппар өс тарафтан торған. Хәҙерге Иҫке йорт тип аталған урын, Яппар ҡарттың төп нигеҙе – Түбән Яппар тип атала, Алпамыша ҡалҡыулығынан һуң үҙәнлектә – Үр Яппары, ә Ҡараярҙа тары ере тип аталған Арғы Яппар – Ар Яппары тип атағандар.

Ҫур ихтилалда ҡатнашҡаны өсөн Түбән Яппарҙы драгундар ут төртөп яндыралар. Был сығанаҡтар тарих менән дәлилләнә. 1978 йылда Яппар ауылына БДУ-нан Обыденов етәкселегендә студенттар килгәйне (археологтар). Урындарын ҡарап, ысынлап та был урындарҙа ауыл булғанын раҫланылар.

**Алпамыша бәйете** (69)

---

* Урын атамаһының килеп сығышын аңлатҡанда, бында фольклорҙа осрай торған анахронизм күренеше сағыла, Алпамышалар, Алпамыша ҡәберҙәре (таштары...) хаҡындағы борондан килгән легендаларҙы ҡарағыҙ: Башҡорт халыҡ ижады. II том: Риүәйәттәр–легендалар. – Өфө, 1997; Нәҙершина Ф.А. Халыҡ хәтере. – Өфө, 1986. 115-117-се бб. Атама дәү кәүҙәле батырҙың ҡушаматынан ғына алынһа, ваҡыт арауығының тар булыуы ла ихтимал. Зарипов Әбелфазылдан (№69) яҙып алынған текстағы "Алпамыша кеүек батыр ирҙәр" тигән фраза шундай уйға ла юлыҡтырып ҡуя. – *Ред.*

Иҫке Яппар ауылында үҙ ваҡытында уҡымышлы, ғәрәп, төрки телдәрен яҡшы белгән, һуңғараҡ ауылда мулла, мәҙрәсәлә балаларға белем биргән Ғилманов Мөьмин исемле (1876 йылда тыуған) кеше йәшәгән, Унын ҡатыны Шәмсиямал абыстай революцияға тиклем ҡыҙҙарҙы белем биргән. Уларҙы Ҡөрьәнгә өйрәткән.

Уларҙың бик бай тарихи мәғлүмәттәре булған китаптары, ауыл шәжәрәһе, хатта үҙе сығарып яҙған бәйеттәре лә була. Ҡарт көндәрендә (бабайға 90-дан өҫтә, әбейгә 80-дән өҫтә) Фатиха исемле берҙән-бер ҡыҙҙары, үҙ янына ҡарарға алып китә.

Мөьмин мулланың ҡайһы бер бәйеттәре Иҫке Яппар ауылы кешеләрендә һаҡланған. Ҡайһы бер сығанаҡтар Яңы Яппар ауылында ла табылды. Бына шуларҙың береһе:

Яппар ауылында элек бер батыр йәшәгән. Унын исеме Аллағол булһа ла, бик ғәйрәтле, көслө, мыҡты кәүҙәле, ҡурҡыу белмәҫ батыр булғаны өсөн Алпамыша ҡушаматы менән йөрөткәндәр. Унын ҡәбере Ҡаҙанғолға барғанда беренсе ҡалҡыулыҡта урынлашҡан. Элегерәк ҡәбере өҫтөндә ҡыҙыл ташҡа яҙылған яҙыу-тамғаһы ла бар ине. Юл күтәргәнсе был таш бар ине әле, ергә һеңеп бөтһә лә, ҡәберлектең тирә-яғы селек тубылғыһы менән ҡапланған. Элек һәр бер үткенсе, йә булмаһа ауыл ҡарттары, хатта сит тарафтарҙан килеп, был ҡәбергә хәйер һала торғандар. Был эш урыҫ хөкүмәте тарафынан ҡәтғи тыйылған, хатта шымсылар ҙа, күҙәтеп тороусы кешеләр ҙә ҡуйылған булған тип һөйләйҙәр ине. Ләкин халыҡ ни генә булһа ла үткәндә тәңкә ырғытып, өйгә ҡайтып булһа ла доғаһын уҡыр булған. Ҡурҡмағандары шунда ла ултырып уҡыған инде.

Был батыр тураһында минең олатайым Мөхәмәтзәри, ауыл муллаһы Мөьмин ҡарт та былай тип һөйләйҙәр ине.

Башҡорт ихтилалында был Алпамыша тигән кеше етәксе булған, Дим буйы башҡорттарын туплап, яуға күтәргән. Һуңынан бик ҡаты алышта һәләк була. Түбән Яппарҙы драгундар яндыра, был ауылдан бер нимә лә ҡалмай, бик күп кеше ҡырыла был яуҙа. Хәҙерге мастерской янында элекке ҡәберлектәр бар, күп ғаиләләрҙе шунда бергә ҡуйғандар. Ә Алпамышаны, бар тирә-яҡты күреп ятһын тип, шул ҡалҡыулыҡҡа ерләйҙәр.

Алпамыша кеүек батыр ирҙәр
Дошмандарҙан беҙҙе яҡланы.
Теҙләнеп тә доғаларҙы ҡылам,
Һинең ятҡан изге урында.
Алпамыша кеүек батыр юҡтыр,
Азатлыҡҡа беҙҙе өндәне.
Ҡулдарыма алып тиҫбе тартам,
Теләктәрем ҡабул булыр тип.
Алпамыша ауыр ваҡыттарҙа
Дошмандарға саптың һин алда.
Барса халыҡ бергә берҙәм булды,
Хыянат та итмәй рухына.

**Исмәғилдәргә васыятнамә** (160)

(Информант олатаһынан яҙып алған)

Ай, Исмәғилдәр, Исмәғил,
Был әйтемде онотма!
Аҡһаҡалдар васыятына
Һәр ваҡытта тоғро бул.
Һүҙ йөрөтөп, остан булып,
Дошмандар ишетмәһен.
Илһеҙ, ерһеҙ ҡалырһың,
Унан нимә эшләрһең?
Ай, Исмәғилдәр, Исмәғил,

Был һүҙҙәргә ҡолаҡ һал!
Атай-инәй бүләк иткән
Телкәйеңде онотма.
Сит ерҙәргә сығып китһәң,
Илкәйеңде хәтерлә.
Ҡурай моңо һуғарған
Йырҙарыңды онотма.
Ай, Исмәғилдәр, Исмәғил,
Был мәҡәлде яттан бел.
Атай-инәй ҡәберен
Бер ваҡытта онотма.
Әрүахтарға Ҡөръән сыҡ,
Ҡәберҙәрен күркәм тот,
Таштар ҡуйып яҙа һал.
Был донъяла юғалмаһын
Беҙҙән киткән ҡәрҙәштәр.

*         *         *

Ай, Исмәғилдәр, Исмәғил,
Серҙәреңде эстә тот.
Ҡара көстәр килә ҡалһа,
Дошманыңа һатылма,
Ауырлыҡтар илгә килһә,
Баштарыңды һин эймә.
Ай, Исмәғилдәр, Исмәғил,
Был бәйетте иҫтә тот.
Килмешәктәр килә ҡалһа,
Ерҙәреңде өләшмә.
Алпауыттар үтеп инһә,
Малдарыңды өләшмә!

**Ҡәҙериә бәйете** (51)

Ҡиәмәтлеҡ ҡыҙы Ҡәҙериәгә бағышлап яҙылған бәйет. Зарипова Ҡәҙериә Абелфазыл ҡыҙы Дәүләкән педучилищеһын яҡшы билдәләренә тамамлап, Ҡаҙанғол мәктәбенә уҡытыусы булып килә. 30 йылдан ашыу ғүмерен ул балаларҙы уҡытыуға һәм тәрбиәләүгә бағышлай. 48 йәшендә ҡапыл ауырып, яҡты донъя менән хушлаша.

Эй ҡәҙерле беҙҙең Ҡәҙериә,
Балаларға белем тарата.
Шуға күрә бөгөн ауыл халҡы
Өҙөлөп тә һине ярата.
Ҡыҙ балалар һин буламын тиеп,
Ҡурсаҡтарын өйҙә уҡыта.
Ир балалар һинең йырҙарыңды отоп,
Көйгә һалып, эй, бер өҙҙөрә.
Һин тырыштың һәр бер бала өсөн
Киләсәге яҡты булһын тип.
Зәңгәр күге аяҙ булһын тиеп,
Сабыйҙарға хәреф өйрәттең.
Һин уйланың һәр бер яҙмыш өсөн
Тәрбиәсе булдың ауылда.
Һин үҫтерҙең илгә алмашсылар,
Тыуған илкәй сәскә атһын тип.
Эй,  ҡәҙерле ҡыҙым, Ҡәҙериә
Бигерәк тә булдың инсафлы,
Күңелдәрең һинең аҡ сәскәләр кеүек,
Хуш еҫтәрен бөрктө һәр ваҡыт.
Ғүмерҙәрең һинең бигерәк ҡыҫҡа булды,
Яҙын сыҡкан умырзая кеүек
Бер ҡалҡтың да алһыу бер таңда,
Таң ҡалдырып барса халыҡты,
Ә кистәрен ни эшләп һулының?
Дим буйҙарына ла, ай, бер төштөм
Ҡаҙ ҡауырыйҙарын йыйып алам тип,

Һағынып та һине иҫкә алам,
Ҡәҙерле лә ҡыҙым Ҡәҙериә.
Йомаларҙа барып доға ҡылам
Һинең ятҡан изге урынға.
Ҡәберҙәрең өҫтәрендә һинең һәр саҡ
Аллы-гөллө гөлдәр бәйләме.
Йәш нараттар ерҙә тибрәлә,
Һинең сәләмеңде әйткәндәй.
Эй, ҡәҙерле ҡыҙым, Ҡәҙериә,
Күңелдәрем тулып йәш килә.
Ҡәберҙәрең бөхтә, бигерәк таҙа,
Ҡәҙерләп тә иҫкә алалар.
Шуларҙы ла күреп мин шатланам,
Ҡыуаныстан сүрә көйләйем.
Ҡайтҡанымда изге бәндәләргә кереп,
Хәйер доғаларҙы өләшәм.
Эй, ҡәҙерле ҡыҙым, Ҡәҙериә,
Тыныс йоҡла, тиеп өндәшәм.
Һин бит беҙҙең өсөн үле түгел,
Изгелегең йәшәй ерҙә тип.
Эй, ҡәҙерле ҡыҙым Ҡәҙериә,
Бер ваҡытта беҙҙе ҡалдырманың.
Аш-һыуҙарың булды бик тәмле.
Өҫтәлеңдең һәр саҡ түрҙәрендә
Беҙ ултырҙыҡ һәр саҡ шатланып.
Именлектәр таҙалыҡтар теләп,
Беҙ бит тотток изге фатиха.
Эй, ҡәҙерлем ҡыҙым, Ҡәҙериә,
Ауыр тупраҡтарың еңел булып.
Урындарың булһын ожмахта.
Теләктәрем минең ҡабул булыр.
Саф күңелдән әйтәм иншалла,
Рухтарың ғүмер буйы йәшәр,
Ҡәҙерле лә беҙҙең Ҡәҙериә.

**Яппар бәйете**

(Мәктәп музейынан алынды, Усманова Көзифа исемле әбейҙән, 1904 й., яҙып алынған)

Иҫке генә тиҙәр Яппарымды,

Ай, иçкергəн тиҙəр бəғзелəр.
Ауылыма шундай мөһөр һуҡкан
Ҡара эсле беҙгə бəндəлəр.
Яппарларҙа йəшəр уңған халыҡ,
Ерен игеп, илен һөйгəндəр.
Һағынып та бер иларҙар əле
Ташлап киткəн бəғзе бəндəлəр.

**Шəһиҙə бəйете** (76)

(Үҙ ваҡытында Наҙлыгөл исемле ҡартинəһенəн отоп алған)

Шəһиҙə əбейҙең улдары һуғышҡа китеп ғəйеп була. Ҙур Түбəн Яппар күскəндəн һуң, ауыл кешелəре күбеһе уларға эйəреп, хəҙерге Иçке Яппар урынына күсəлəр. Шəһиҙə əбей ауылда бер үҙе һуңғы көнөнə тиклем ҡала.

Шəһиҙə инəй һыуҙан ҡайта,
Мөлдөрəмə лə итеп силəгеn.
Ҡара күҙкəйҙəре эскə батҡан,
Ҡайғыларҙан йəшкə мансылған.
Шəһиҙə лə инəй, сал сəсеңде
Наҙлап ҡына елдəр тарайҙыр.
Батыр ғына һинең биш улыңды
Хоҙай үҙе генə биргəндер.
Шəһиҙə лə инəй оҙатып ҡалған
Яу ҡырына киткəн улдарын.
Билгелəргə баçып көн-төн көткəн
Ҡайтыр микəн, тиеп улдары.
Шəһиҙə лə инəй, ай, бер үҙең,
Ауылыңда тороп ҡалғанһың,
Нигеҙеңде ташламайым тиеп,
Көслө лə, ай, рухлы булғанһың.
Шəһиҙə лə инəй, ай, ҡəбереӊ
Үрге ауыл ғына янында.

Һинең генә кеүек изге заттың
Йәндәре лә булыр ожмахта.
Ҡалҡыулыҡтарҙа ла ятып
Шәһиҙә лә инәй, ай, бер ҡарайһыңдыр
Яппарҙарым әле нишләй? – тип.

Үлгәндән һуң уны шул үҙ зыяраттарының иң ҡалҡыу урынына ерләгәндәр.

Был урындар элек йәшел сирәм ине беҙ белгәндә, яҙ көндәрендә, шул туры юл ыҫмаһына ҡар һыуы йыйылып, ҙур күл булып ята ине. Һыуы бик таҙа, тау башында ятҡанға май айҙарында уҡ бик йылы була торғайны. Шуға ауыл бала-сағалары шул күлгә һыу керергә йөрөрҙәр ине. Ҡайҙа барҙың тиһәң, Шәһиҙә күленә һыу керергә тип әйтер ине. Хәҙер был урындарҙа ер һөрөлөп, сәсеүлектәргә әйләнеп бөткән. Тау буйлап ҡына ҡайһы бер урындарҙа боронғо йорттарҙың нигеҙе һаҡланып ҡалған.

**Яппар нәҫелдәре** (69)
(бәйет)

Яппар ҡарттың беренсе ҡатынынан Аллағол, икенсе ҡатынынан Көҙәнғол, тарихта Күҙемғол тип күрһәтелгән, өсөнсө ҡатынынан Әҙеркәй менән Балғажы булған. Өс улы өс тарафта идара итә. Был ауылдар айырым йөрөтөлмәгән, Яппар тип күрһәтелә. Ваҡытында, 60-сы йылдарҙа, ауылда бик белемле Мөьмин исемле мулла йәшәгән. Шул бик күп тарихи мәғлүмәттәр яҙып ҡалдырған.

Башҡорт булып йәшә ерҙә,
Манҡорт булма һис ҡайсан,
Ата-баба рухын һаҡлап,
Ете быуыныңды бел.
Дуҫ менән дошман араһын
Күҙҙәренән ҡарап бел,

Беҙҙең үткән бик боронғо
Мең ырыуы икәненде,
Быуын-быуынға тарат,
Ҡәбиләбеҙ – ҡырҡөйлө мең –
Ҡырҡ өйҙөң ҡырҡ ырыуы.
Яппар ара нәҫелдәре
Иң ҙурҙан һаналған.
Берҙәм булған,
Бер-береһен ауыр саҡта яҡлаған,
Быны белеү һиңә мотлаҡ,
Ҡолағыңа киртеп ҡуй!
Балғажы нәҫелдәренең
Теле бик тәмле булған,
Ауыр саҡта һәр кемгә лә
Аҡыллы кәңәш биргән;
Ҡындырҙар ғәйрәтле булған,
Ҡурҡыуҙы һис белмәгән
Батырҙары күп булған,
Улар өсөн һатылыу –
Үлем менән бер булған;
Әжекәйҙәр йыр-моңло,
Ҡурайҙа уйнағандар,
Улар менән күңелле,
Дәртлеләре күп булған,
Байраҡайҙар һүҙгә бай,
Бик ышаныслы халыҡ,
Тоғро дуҫтар уларҙа,
Бик ғәйрәтле булғандар;
Деүәрәндәр – бай халыҡ,
Тырышып эшләп мал тапҡан,
Матур кейенә белгән;
Ҡамаҡтар – сабыр халыҡ,

Уйсан, уйлап һөйләгән,
Ғәйбәт тигән нәмәне,
Яҡын да ебәрмәгән;
Сурабайҙар егәрле,
Оҫталарға бай булған,
Балаҫтары, кейеҙҙәре,
Тирә-яҡта дан алған;
Ҡатау тигән нәҫелдәр
Иҫәп-хисап эштәрен
Бик тә оҫта башҡарған.
Барыһын бергә берләштереп
Нәҫелдәр араларын,
Шул ерҙәрҙә донъя көткән
Яппар тигән уҙаман.

**Йәнбәй генә** (60)

Йәнбәй генә ҡарттың, һай, төйәген
Оҫтаханалары ла биҙәйҙер.
Дүрт уланы иртән иртүк тороп,
Балта тотоп шунда эшләйҙер.
Алтын ғына ҡуллы был уландар
Ағас юнып файҙа эшләйҙәр.
Кәмәләре икән ҡайындан,
Һауыт-һабалары икән йүкәнән.
Арбалары еңел уҫаҡтан,
Тәгәрмәсе ҡаты имәндән,
Көйәнтәһе икән еректән.
Йәнбәй генә ҡарттың әйберҙәре,
Тирә-яҡтың күңелен эреткән.

**Эскән кешегә бәддоға** (160)

(Информант ҡартинәһе Көнһылыуҙан ишеткән)

Раббыбыҙ Ғәлиәссәләм мосолманға әйткәндер:
Тәүбә тәүфикларын биреп иман сәсеп йәшәгеҙ.
Тыйылғандан тыйылып харамнәрҙан һакланың,
Эскелектән йыраҡ тороп – араҡыны ҡапмағыҙ.
Араҡы ул – бәдбәхет, туры юлдан яҙҙырыр,
Эскән кеше ҡайғы-хәсрәт ҡаҙанында ултырыр.
Әгәр тәүбә ҡылмаһа - әхирәттә хур булыр,
Урыны булыр тамуҡта.
Эскән кеше бөткән булыр – унның йөҙҙәре һүнәр,
Сәләм бирмәç мосолмандар, уны урап үтәрҙәр,
Яҡындары тора-бара яйлап ҡына биҙәрҙәр.

**Бәлхиә, ник булманың Мәдхиә[*]?**

(Мәктәп музейы архивынан, Булатова Сәйҙә исемле
әбейҙән яҙып алғандар)

Ил гиҙеп, Дим буйы башҡорт ауылдары буйлап, элегерәк Бәлхиә исемле аҡылға еңелерәк булған әбей йөрөгән.

Эх, Бәлхиә, Бәлхиә,
Ник булманың Мәдхиә?
Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарындай,
Булманың ниңә шулай?
Ауылдарҙы гиҙҙең һин,
Дәрүиштәрҙән уҙҙырып,
Һине һәр бер кеше белә,
Сәфәрләрен ҡылғанда.
Баҙар сумка бер ҡулыңда,
Икенсеһендә таяҡ,
Ҡат-ҡат кейгән күлмәгең,
Һинең шулдыр мөлкәтең,
Белмәгәнең юҡ һинең,

[*] Мәҙхиә/мәдхиә –1) маҡтау, данлау шиғыры; 2) ҡатын-ҡыҙ исеме. – *Ред.*

Аҡылың камил һинең,
Башҡайым эшләмәй тейеп,
Үҙ-үҙеңде хурлайһың.
Ҡайсан, ҡайҙа, кемдәр тыуған,
Һин бит яттан беләһең,
Һәр бер ауылда ла һине,
Һыйлап хөрмәт итәләр,
Мунсаларын яғалар,
Керҙәреңде йыуалар,
Өс көн һине ҡарағас,
Бәлеш тотоп ҡапҡанан оҙаталар.
Шул сағында доға ҡылып,
Алырға ла бит кәрәк,
Һин әрләйһең, таш бәрәһең,
Ер йыртып аҡыраһың,
Эх, Бәлхиә, Бәлхиә,
Булманың шул Мәдхиә.
Һинең кеүек яңғыҙ ҡалған
Ҡарсыҡтар донъя көтә,
Бәрәңгеһен ултыртып,
Ҡыярын да сәсәләр,
Һин йөрөйһең дәрүиш кеүек,
Нисек талмай аяғың?
Колхоз һиңә төйәк ит тип,
Өй ҙә алып бирҙеләр,
Ауылдаштар ашаһын тип,
Онон, итен бирҙеләр.
Һин бит риза булмайынса,
Хеҙмәтселәр һораның,
Депутатка барам тиеп,
Мәскәү менән янаның,
Эх, Бәлхиә, Бәлхиә,

Булманың шул Мәдхиә.
Хөрмәт иткән кешеләрҙән
Салауатын алманың.
Донъяларҙы тултырып,
Әшәкелектә булдың,
Иҫерек, йүнһеҙ ирҙәр кеүек
Ҡәбәхәтең ҡалманы.
Яҡындарың ғына түгел,
Бар Яппар һинән биҙҙе.
Эх, бер ҙә уйламайса,
Ниңә шулай ҡылдың?
Аҡылдарың тулы булып,
Һин бит алдан йөрөнөң,
ФЗУ-ға китмәҫ өсөн,
Башҡынайым һыҙлай тиеп,
Ал яулыҡтар бәйләнең.
Һиңә әгәр ҡаршы әйтһәң,
Йәшен кеүек йәшнәнең,
Сельсоветты һанға һуҡмай,
Ялғанлап яла яҡтың,
Эх, Бәлхиә, Бәлхиә,
Ник булманың Мәдхиә?
Был йүләрҙәр аңламай тип,
Эстән генә һин көлдөң,
Йәш ваҡытың үтеп китә,
Гел шулай сәфәр ҡылып,
Ҡартлыҡ килгәс, беҙгә ҡайттың,
Яҡшылыҡтың ҡәҙерен белмәй,
Һин шулай мыҫҡыл иттең.
Ҡартлығыңда һәр өйҙә, һинең өсөң
Ҡапҡалар бикләнделәр.
Ферма өйҙәренә килеп,

Һин шунда урын таптың.
Күпме тырышһалар ҙа,
Ҡарттар йортона тиеп,
Һин таяҡтар менән һүктең,
Үҙ еремдә үләм тип.
Ауылдаштар ташламаны,
Һауаптары булыр тип,
Ашамлыҡтар килтерҙеләр,
Баштарың ауыртмаһын тип,
Дарыуҙарын бирҙеләр,
Һуңғы сәғәттәрең еткәс,
Ясин сығып оҙаттыҡ.
Эй, Бәлхиә, Бәлхиә,
Булманың ник Мәдхиә?
Һуңғы сәғәттәреңдә лә һин
Беҙҙе уйлағанһыңдыр,
Тыуған ерем ғәзиз тиеп,
Күңелдәрең тулдымы?

**Иманлыҡта булығыҙ** (162)

Эй, Раббы – Аллабыҙ,
Донъялыҡта беҙ тарлыҡта,
Насип әйлән беҙгә йәннәт.
Һәр һүҙҙәрең фәһемле,
Салауатлы фатиха,
Һине ҙурлап баш эйәм,
Бир тәүбәңне нәсиха,
Һин әйткәнде иҫтә тотоп,
Тыйғандарҙа тыйылдым,
Һинең әмереңде үтәп,
Хәрәмнәрҙән һаҡландым,
Йәнем тәслим булған саҡта,

Иманлыҡта булырмын,
Һуңғы минуттарымда ла
Лә иләһи, тиермен,
Шуны әйтеп бөтөү менән
Был донъянан китермен.

**Бер бәғзегә** (145)

(Яңы Яппар мәктәп музейынан алынған)

Бәндәләрҙе ҡайғы баҫкан, әй, бер өйҙә
Бер мәйетте оҙаталар һуңғы юлға ҡәҙерләп,
Ашын ашап, йәшен йәшәһә лә,
Ғүмерҙәре уның булды иманлыҡта, вә исламлыҡта.
Хушлашырға килгән шуға ауылдағы йәше, ҡарты –
Һәммә халыҡ.
Ҡарттар тиҫбе алып әйтә тәһлилдәрен,
Ҡәрҙәштәре саф күңелдән хәйер һалып, доға ҡыла,
Һәммәһе лә кейенгәндәр мосолманса.
Бер көтөүҙе бысратҡан насар һыйырҙай
Килеп керҙе шунда ҡапыл әрпеш ҡатын,
Хоҙайҙан да, мәйеттән дә ҡурҡмайҙыр был мәғәнәһеҙ,
Өҫтө башы ҡаралмаған – күлдәктәре таушаланған,
Бишмәтен дә ҡаптырмаған -
Әллә юҡтыр төймәләре бисараның,
Сәсе-башы йүнле итеп таралмаған,
Яулыҡ япһа тағы бер хәл, оялмаған,
Сираҡтары сиған кеүек асыҡ-шәрә,
Ойоҡ кейһә, был бәндәгә ни булған?
Ниңә шулай ҡаралмаған, оялмайса килеп керҙе,
Баҫып тора шүрәлеләй, һис килешмәй мосолманға.
Хәйер көтөп өмөт итә, эй, меҫкенкәй,
Ҡайғы барын өйҙә шулай һис уйламай.
Башҡайына таяҡ менән биреү кәрәк,
Кермәгәнгә кермәй инде, нишләмәк кәрәк?
Бер күреп тә әйтер инем шул ҡатынға,
Юлдарымда осраһа аулаҡ саҡта.

Йөҙҙәренә әйтер инем бәреп-йыртып,
Күңелдәрем бушар ине шул сағында.
Осратам да, тағы китәм өндәшмәйсә,
Яҡ-яғыма төкөрәмен өсәр тапҡыр,
Юлдарымда осрама зәхмәт, тиеп,
Ете быуын нәçелемә яҡын килә күрмәһен, тиеп,
Ике ҡулым күтәрәм дә ҡиблаларға
Бер ҡарайым нурланып.
Доға ҡылам “Аллам мине һаҡла”, – тиеп,
Ошондай бер мәхлүктәрҙән.

Яңы Яппар ауылындағы Сыртланов Шәрәфетдин (1895 й.), ошо ауылда тыуған, мулла булып хеҙмәт ҡыла. Үҙ ваҡытына күрә бик белемле, мәҙрәсәләрҙе бөткән, бик күп бәйеттәр яҙған, ҡайһы берҙәрен ауылда яттан да белгән кешеләр бар.

**Йәштәргә васыятнамә** (149)

Сор ҡәләмем, ап-аҡ ҡыяғыҙға,
Ҡыл фатиха – доғалар ҡабул булыр,
Йәштәр өсөн әйтәм фәһем,
Һүҙҙәремде тыңлар тип.
Һеҙ милләттең киләсәге, илемдең һеҙ булмышы,
Харам эштән йыраҡ булып, хәмерләрҙән һаҡланың,
Өйләнешкәс, туй-һыйҙарҙа, бәғзе-берәү йүнһеҙҙәр,
Эй, ҡыçтарҙар, ауыҙ ит тип, шараптарҙы һонорҙар,
Сәскә атҡан көнөгөҙҙө башламағыҙ харамдан,
Һуңы нимә менән бөтөр? – тиеп һеҙ уйланығыҙ,
Хәмер эсеп, гонаһ ҡылып көнөгөҙ башланмаһын,
Ғүмер буйы үкенерһегеҙ, үкереп бер иларһыҙ,
Һеҙҙән тыуған бала булыр йә ғәрип вә йә зәғиф,
Йә аҡылға тулы булмаç. Шул турала уйланып,
Көндәрегеҙ һеҙҙең үтәр духтырҙар юлдарында,
Төндәрегеҙ һеҙҙең үтәр йоҡоһоҙ вә тынғыһыҙ,
Гонаһтарҙан һаҡланһағыҙ – Хоҙай һаҡлар шул саҡта,
Тәҙрә төбө ҡына гөлгә шул хәмерҙе һалһағыҙ,

Бер тәүлектән күрерһегеҙ меҫкен гөлдөң үлгәнен.
Ниҙәр генә ҡылһағыҙ ҙа, шишмә һыуын һипһәгеҙ ҙә,
Был гөл ҡабат терелмәҫ.
Бәғзе йүләр-ахмаҡтарҙан һеҙ үрнәкте алмағыҙ,
Дуҫ, тиеп, юхаланып – дошман килер һөйөнөп,
Ишектәрҙән үткәрмәгеҙ, хур була һеҙ күрмәгеҙ,
Керетмәгеҙ өйөгөҙгә ҡара йылан дошманды,
Өйрәтмәгеҙ балағыҙға был мәлғүнде эсергә,
Ете быуын һинән ҡалған, нәҫелдәр зәғиф булыр,
Йөҙөгөҙҙөң йәме бөтөр, китер ҡулдан форсат эш,
Тормоштарың алға бармаҫ – эй, бәндәләр, уйланың.

**Еңеү тураһында бәйет** (100)

Баҫ, Ҡыҙыл Армия! – Еңелде Германия.
Арыҫландай көрәште
Беҙҙең Яппар улдары.
Беҙҙең Яппар егеттәре
Ҡурҡыуҙарҙы белмәне.
Йөҙ егерме егет китеп,
Бөркөт кеүек һуғышты.
Баҫ, Ҡыҙыл Армия! –
Еңелде Германия.
Туҡһан һигеҙ егет юғалттыҡ
Беҙ һуғыштың түрендә.
Баҫ, Ҡыҙыл Армия! –
Долой бул Германия.
Күп афәттәр килтерҙең,
Ҡара ҡағыҙ тараттың.
Беҙҙең Яппар ҡыҙҙары
Үҙен тылда күрһәтте.
Бер норманы үҙ итмәйсә
Биш норманы үтәне.

Беҙҙең Яппар ҡыҙҙары
Ирҙәр эшен башҡарҙы.
Ас-яланғас булһа ла,
Пландарҙы үтәне.
Баҫ, Ҡыҙыл Армия,
Суҡынһын Германия.
Илгә афәт килмәһен,
Имен булһын еребеҙ.
Баҫ, Ҡыҙыл Армия! –
Еңелде Германия.
Егерме ике егет ҡайтты,
Орден-медален тағып.
Баҫ, Ҡыҙыл Армия! –
Дөмөктө Германия.
Фашистарҙы турап һалды
Илдең батыр улдары.

**Иман керһен һәммәгеҙгә** (160)

Ислам белгән
Иман кергән
Бәндәләр нурлы булыр.
Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанын үтәп,
Биш ваҡыт намаҙ ҡылыр,
Ураҙаһын ҡалдырмаҫ,
Ҡулынан тәсбих төшөрмәҫ,
Фани донъянан киткәс,
Урыны булыр ожмахта,
Рухы булыр йәннәттә.

**Ҡош аҫрау бәйете** (264)

Ҡаҙ аҫраһаң, өйөң булһын Дим буйында,
Ашарына булһын бойҙай, һоло һәм тарың да.

Күберәк бирһәң ҡаҙҙарыңа һолоно,
Мул алырһың ҡаҙ мамығын, йөнөн.
Әгәр-мәгәр ҡыҙғанмаһаң тарыны,
Май менән тулы булыр ҡаҙ ҡарыны.
Бойҙайҙы бирһәң әгәр күберәк,
Ҡаҙ тәнендә ите булыр күберәк.

**Бәхетле бала** (28)

(Ҡаҙанғол мәктәбе сығанаҡтары)

Бала тыуар бәхет менән,
Бисмилла, тип.
Ғөсөл ҡойоп ҡабул итһә,
Яҡын кеше кендек нәнәй.
Собханалла, тиеп әйтеп,
Аҡ биләмгә төрөп ҡуйһа.
Ата-әсәле, бергә булып,
Никах менән тыуһа бала,
Фәрештәләр һәр саҡ уға
Теләк теләр.
Был балаға һәр саҡ
Бәхет юлдаш булыр.

**Фәрхиямалға бәйет** (162)

Исмәғил ауылынан Мөхәмәҙйәров фамилиялы бер туған 4 кешене 1936 йылдарҙа “халыҡ дошманы” тип, Себергә һөргөнгә ебәрәләр.

Иң ҙур ағалары, 1870 йылғы, Рафиҡ исемле була, унан һуң 1886 йылғы Мөхәрләм, унан һуң 1890 йылғы Сафа, иң бәләкәйҙәре, Шәймәрҙан исемлеһе, 1896 йылғы. Улар ауылда береһенән-береһе яҡшы йорттар һалған була, бик хәлле, бик күп мал тотҡан булалар. 1936 йылда халыҡ дошмандары, тип яла яғалар һәм райондан төнлә килеп алып та китәләр.

80-дән уҙған Фәрхиямал исемле инәләре [әсәләре] генә ҡала, 4 туғандың ҡатындары, балалары шулай уҡ Себергә

оҙатыла. Ауылда һуңынан ошо инәйгә арнап, бәйет сығаралар.

Инә ҡаҙҡай бәпкәләрен, эй, юғалтҡас,
Эй, ҡаңғылдап ҡанат ҡағып ҡаңғылдайҙыр.
Фәрхиямал  инәйгә лә түҙем бирһен –
Хоҙайға ла ҡул күтәреп доға ҡылың.
Ҡарт көнөндә, әй, бер килеп хәлең бөткәс,
Ҡара болот өйөрөлөп ҡаплағандыр.
Фәрхиямал инәкәйем яңғыҙ ҡалған,
Дүрт балаһы бер көн килеп ғәйеп булған.

**Ғәйниә бәйете** (36)

Ғәйниә исемле ҡатындың ирен рус-француз һуғышына алалар. Биш бала менән ҡалған ҡатын нисек итеп донъя көтөүе тураһындағы бәйет.

Болондарҙан ҡайтып килә берәү,
Биштәрләп тә биленә йөктәрен.
Ғәйниә лә кеүек меҫкен күрә [нужа],
Яңығыҙ ғына ҡалғас иренән.
Итәк тулы бала менән ҡалдыҡ,
Ирем киткәс француз яуына.
Бик алыҫта ятып ҡалған башы,
Илкәйенә кире ҡайтмайса.
Бер-бер артлы бигерәк йәшләй ҡалған
Бәлиғ кенә булмаҫ балалар.
Донъяларҙы алып барам, тиеп,
Көн-төн тирен түкте Ғәйниәм.
Әрәмәлә гелән усаҡ яғып,
Ҡаршыланың шәфәҡ нурҙарын.
Мал-тыуарҙы әрәм итмәйем, тип,
Бесән саптың көндәр буйына.
Һалға һалып тағы уны тарттың
Дим буйының бирге яғына.
Нисек түҙгәнһеңдер, Ғәйниәкәй,

Йүкә арҡан һис тә түҙмәгән.
Һалғынайҙан ғына ҡолап төшөп,
Һалҡын һыуға керҙең, Ғәйниәм,
Бер-бер артлы тыуған биш бала
Ике ярҙа ҡалған илашып.
Тиҫбеләрен тартып өйҙә илай
Оло йәштә булған ҡарт ҡәйнәң.
Биш көн буйы ғәйеп булып,
Биш-ҡарларҙа ҡалҡтың, Ғәйниәм.

Ғәйниә хөрмәтенә сабынлыҡты "Ғәйниә төбәге" тип йөрөтәләр.

## ҠОБАЙЫРҘАР

### **Яман кеше ни булыр?** (90)

(Латифа исемле оләсәһенән отоп алған ҡобайыр)

Бер тигәс тә нимә яман?
Берәҙәк булыу шул яман;
Ике тигәс тә нимә яман?
Ирекһеҙ булыу шул яман;
Өс тигәс тә нимә яман?
Өйһөҙ булыу шул яман;
Дүрт тигәс тә нимә яман?
Дәүләтһеҙ булыу шул яман;
Биш тигәс тә нимә яман?
Бығаулы булыу шул яман;
Алты тигәс тә нимә яман?
Аҡылһыҙ булыу шул яман;
Ете тигәс тә нимә яман?
Ерһеҙ булыу шул яман;
Һигеҙ тигәс тә нимә яман?
Һтлыҡ булыу шул яман;
Туғыҙ тигәс тә нимә яман?
Тғанһыҙ булыу шул яман;
Ун тигәс тә нимә яман?
Уһыҙ булыу шул яман.

### **Әйтер һүҙем халҡыма** (45)

Башҡорттарым, бал ҡорттарым,
Туған еремдең күсе.
Ете ырыу, ете күс,
Етеһендә ете көс.
Тыуған илемдең биҙәге –
Ырыуҙарым үҙәне.

Ете ырыу, ете төҫ,
Етеһендә ете көс.
Берҙәмлектә беҙҙең көс.
Һәр милләттең уңыштары,
Өлөштәре беҙҙә тос.
Ете ырыу, ете күс,
Етеһендә ете көс.
Берҙәмлектә беҙҙең күс.
Һәр милләттең үҙ ере бар,
Үҙ илем бар, Аллаһтан.
Тамырыбыҙ беҙҙең был ил
Яратылған Аллаһтан.

Әй илкәйем, илкәйем,
Әлдә ныҡ билкәйең.
Теҙләндереүселәр бик күп,
Тик бирмәнең билкәйең.
Эй, илкәйем, илкәйем,
Бигерәк матур телкәйең.
Телгеләйҙәр, бүлгеләйҙәр
Раббым, ни хәл итәйем.
Көлкө сире – көслө сир ул
Иманһыҙ, динһеҙ өсөн.
Иманлының иманына
Шифа сере бит ул.
Ғалим тигәндәре – залим,
Мулла тигәне – бер мул.
Нисек итеп алға китһен,
Бындай кешеләрҙән ил?
Эстәрем дә ап-аҡ булһын,
Кейемкәйҙәрем таҙа.
Ни әйтһәгеҙ ҙә түҙәрмен,

Булһа ла ул буш яла.
Тау буйҙары әсе ҡылған,
Ҡаҙалдымы – әрнетә.
Һаҡһыҙ әйткән һүҙҙәре
Бигерәк йөрәк әрнетә.
Раббым, минең юлдарыма
Көнсөлдәрҙе сығарма.
Ғүмерем ҡыҫҡа, юлым алыҫ,
Көс бир миңә еңергә (269).

**Берғаҙан** (298)

Мәкәш, Ҡоръятмаҫ ауылдары эргәһенән башланып Асылыкүлгә тиклем элек бик күп ҡоштар төйәк иткән бер күл бар ине. Ул күлгә шулай уҡ берғаҙандар (пеликандар) килер булған, шунлыҡтан күлде Берғаҙан күле тип йөрөткәндәр.

Элек был ерҙәр
Бай булған кейек-ҡошҡа.
Аусылар, һунарсылар
Килгәндәр Ҡоръятмаҫҡа.
Ҡоръятмаҫ буйын иңләп,
Ятҡан шырлыҡ, әрәмә.
Ошо хаҡта мәғлүм булған
Бөтә яҡын-тирәгә.
Һунар ҡомары менән
Ашҡынғандар аусылар.
Урмандар, ҡырҙар үтеп
Туҡтаған юлаусылар.
Маһир һунарсы йәйеп,
Атып алған, ти, бер ҡош.
Итен бешерергә һалғас,

Ҡаҙан тулған, ти, тотош.
Берҡаҙан тип ҡошто ла,
Урынды ла атаған.
Был тирәлә гел генә
Һунар итә башлаған.
Бик бай булған Берғаҙан,
Ҡош тауышы тынмаған.
Иртәнән кискә тиклем
Улар йырҙар йырлаған.
Төлкөләре йылҡылдап
Йүгерешкән туғайҙа.
Балалары тәкмәс атҡан
Йүгереп барған ыңғайға.
Ҡылый күҙле ҡуянға
Төйәк булған был ерҙәр.
Тарбаҡ мөгөҙ мышыһы
Ирәүәнләп йөрөгән.
Һыуҙарында ҡондоҙо,
Шәшкеләре уйнаған.
Йылғаһында балығы
Һикереп тә туймаған.
Торналар ҡайтҡан күмәк,
Өсмөйөшкә теҙелеп.
Һаҙлыҡтарын һағынып,
Тыуған ерҙәрен эҙләп.
Аҡҡоштар ҙа парлашып,
Йөрөгәндәр йәйҙәрен.
Ғорур ҡоштар яҙ һайын,
Ҡайтыр булған әйләнеп.
Берғаҙандар күмәкләп
Йәшәгәндәр дуҫ, татыу.
Пырылдашып осҡандар
Гөрләп торған ҙур  ятыу.
Әрәмәлә суҡ муйыл,
Ултырған шау сәскәлә.
Тос уңыштан ботаҡтар

Эйелгәндәр ергәсә.
Баландары йәмләнгән,
Ҡыҙыл асы емештән.
Ҡояшҡа үрелгәндәр
Андыҙҙар, гөлйемештәр.
Ҡышҡаса туй кейемен
Һалмаған һылыу миләш.
Бөҙрә талдар, еректәр,
Ҡайындар торған йәнәш.
Ҡайындар йәш булғандар,
Билдәр торған өҙөлөп.
Еректәр йылға биҙәп,
Ярға баҫҡан теҙелеп.
Талдары, әрһеҙләшеп,
Ҡаплап алған болондо.
Ҡомалаҡтар бау һуҙған
Шырлыҡ яһап урманды.
Гөрләп торған Берғаҙан,
Һиҙелмәй ғүмер үткән.
Был гүзәл ерҙәр хәҙер,
Ниндәй хәлдәрҙә икән?

* * *

Айҙар үтте ашығып,
Йылғыр йылдар уҙҙылар.
Самолеттар күктәрҙә
Юлдар һалып ҡуйҙылар.
Тракторҙар, машиналар,
Күбәйҙеләр ауылда.
Урман ҡырҡып алынды,
Таштан юлдар һалынды.
Киптерергә булдылар
Канау ҡаҙып һаҙлыҡты.
Алдаштырыу юлы менән
Күндерҙеләр халыҡты.

Имеш, ошо урында,
Буласаҡ баҫыу, ҡырҙар.
Уңасаҡ унда иген,
Башаҡтар баш ҡоҫарҙар.
Кукуруз, көнбағыштар
Кеше буйы булырҙар.
Бойҙай, арыштар менән
Ҙур келәттәр тулырҙар.
Ағастарҙы юҡ итеп,
Ялан итеп ҡуйҙылар.
Кәбән ҡойор бесәнлекте
Малдар тапап уҙҙылар.
Күреп туймаҫ гүзәллек
Ташландыҡҡа әйләнде.
Халыҡ үҙе лә һиҙмәне
Килеп еткән бәләне.
Күлһеҙ ҡалған аҡҡоштар,
Иңрәп, осоп киттеләр.
Моңһоу илап, йөрәккә
Юшҡын һалып үттеләр.
Айыуҙары йәшенер
Урындары ҡалманы.
Аяуһыҙ балта теле
Урмандарҙы ялманы.
Айыуһыҙ "Айыу баҫыуы"
Берғаҙанһыҙ Берғаҙан.
Быңдай вәхшилекте бүтән
Табып булмаҫ бер ҡайҙан.
Тәбиғәттең зарҙарын
Ишетмәй үткәрәбеҙ.
Ҡул менән эшләгәнде
Иң менән күтәрәбеҙ.

*   *   *

Берғаҙанды тергеҙергә
Бирелде яңы фарман.
Тик тәбиғәт үпкәһен
Онотормо бер заман?
Яңынан ҡайтырмы һуң
Онотолған Берғаҙан?
Юғалған тереклекте
Табырбыҙ икән ҡайҙан?
Турғайҙы ҡырып бөткәс,
Оран һалғайны Ҡытай.
Берғаҙанды ҡайҙарҙан
Алырбыҙ икән һорап?
Һорауҙар күп, яуапты
Кемдәр икән бирәсәк?
Килә күрмәһен бер үк
Киләсәкһеҙ киләсәк.

"Заятүләк менән Һыуһылыу" ҡобайырынан өҙөк, көйләп уҡыла (281).

Алып килгән тауығыҙ –
Балҡантауым* был түгел.
Бүлә-бүлә йөрөгән
Бүреһе күп Балҡантау,
Алпан-толпан атлаған
Айыуы күп Балҡантау.
Майлап ҡуйған ҡайыштай
Йыланы күп Балҡантау.

---

* Балҡантау – Аслыкүлдән 25 саҡрым Мәкәш ауылы янындағы тау, ошо тауҙың башында Заятүләк менән Һыуһылыу ҡәберҙәре бар, тиҙәр.

Ҡыҙ балалай биҙәнгән
Төлкөһө күп Балҡантау.
Тауҙы тауға оҡшатып,
Алып бында килһәләр ҙә
Балҡантауым был түгел.

**Һандар әйтеме – башҡорттарға** (239)

Бер тигәс тә – Башҡорт булып, милләтеңде онотма,
Ике тигәс тә – Илкәйеңдән һин китмә,
Өс тигәс тә – оя ҡорған нигеҙҙәрҙе ташлама,
Дүрт тигәс тә – донъяларҙа çанлы булып һин йәшә,
Биш тигәс тә – быуын-быуын шәжәрәңде онотма,
Алты тигәс тә – ауыҙаҡай дошмандарға һатылма,
Ете тигәс тә – еркәйеңде ҡулдарыңдан ебәрмә.
Һигеҙ тигәс тә – һөйгәнеңде һис бер ваҡыт әрләмә,
Туғыҙ тигәс тә – туғандарға татыу булып, һис бер ваҡыт ташлама,
Ун тигәс тә – уйлап һөйлә, уйнап-көлөп һин йәшә.

Был әйтемде информант ҡартинәһе Шәкәрбаныу исемле инәйҙән отоп алған.

## ХӘТИРӘЛӘР

Абдрахманов Солтан олатайҙың һөйләүе буйынса, 1909 йылда Сапай, Ҡыҙрас, Буранғол, Ҡаңлы-Төркәй ауылдарына Мәжит Ғафури килә. Уның хөрмәтенә Баттал бей исемле Сапай байы Асылыкүлдең ярында Аҡ тирмә ҡора, тирә-яҡтан бай ҡатлам кешеләре саҡырыла. Солтан олатайға ул ваҡытта 18 йәш була.

Баттал бей оҫта ҡурайҙа уйнап, башҡорт йырҙарын башҡара. Ошо мәжлестә ҡулдан яҙылған "Ҡуҙыйкүрпәс менән Һыуһылыу" (дөрөҫө: "Заятүләк менән Һыуһылыу" – *ред.*) исемле эпосты Мәжит Ғафуриға тапшыра. XIX быуат аҙағында урыҫ яҙыусыһы В.И.Даль килә, башҡорт сәсәндәрен йыйып ошо эпос тураһында уларҙан ишеткәндәрен яҙып ала*. Баттал бей ошо мәжлестә була, был хаҡта М.Ғафуриға һөйләй.

Солтан олатайҙың һөйләүе буйынса, әүәл был ерҙәргә Сынғыҙхандың ейәне Сәмәрхан исемле хан хужа булған. Ҡыҙылъяр буйындағы ерҙәрҙе Сыңғыҙхан йәйләү ерҙәре тип тә йөрөткәндәр. Элек был урындарҙа бик күп башҡорт ауылдары булған. Баш күтәреп, болала ҡатнашҡандары өсөн башҡорттарҙың күп ауылдары юҡ ителә, ерҙәре хөкүмәт тарафынан тартып алына.

Һуңғы ҙур болала был яҡтарҙа Ҡыҙрас исемле старшина, бик ҡыйыу батыр юлбашсы етәкселегендә Салауат менән берлектә көрәшкә күтәрелә, ләкин, көстәр нисбәте бер булмағанлыҡтан, көрәш туҡтатыла.

---

* В.И.Даль (1801-1872) Ырымбурҙа 1833-1841 йылдарҙа йәшәй. Ошо дәүер эсендә Ырымбур губернаһындағы ауылдарҙа тел, халыҡ ижады материалдарын йыя. Асылыкүл, Дим төбәгендә лә булып, ер-һыу атамалары, "Заятүләк менән Һыуһылыу" эпосы хаҡында мәғлүмәт туплай. Эпос нигеҙендә "Башкирская русалка" тигән яҙмаһын 1843 йылда "Москвитянин" журналында баҫтырып сығара. – *Ред.*

Шул сәбәпле ошо яҡтағы башҡорт ауылдарын, ерҙәрен һаҡлап ҡала ала, уларҙы хөкүмәт тартып ала алмай. Ҡыҙрас үҙе Келәтаяғы тигән боронғо ауылдан була. Ошо ерҙәрҙе һаҡлап ҡала алғас, был ауылды старшина хөрмәтенә Ҡыҙрас старшина ауылы тип атайҙар. Элегерәк Асылыкүл ауылдары яғында уны данлаған Ҡыҙрас бей тигән йыр ҙа бар ине.

Ҡыҙрас бейҙең ерҙәре –
Асылыкүл буйҙары.
Ҡырлас-ҡырлас тауҙарында
Тора икән һаҡтары (һаҡсыһы)

Ҡыҙрас старшинаның
Көмөш микән ҡайышы?
Был ерҙәрҙе һаҡлап ҡалған
Һиңә халыҡ алҡышы.

Ҡыҙрас старшина ваҡытында Ҡыҙрас (Келәтаяғы) Сапай, Ҡаранай, Ҡаңлы-Төркәй, Буранғол ауылдары Салауат яуында ҡатнашһалар ҙа, старшина булышлығында ауылдар иҫән ҡала. Тармалы, Иҫке Ыҙма ауылдары юҡ ителә. Ошо турала Баттал бей Асылыкүл янында йыйылған мәжлестә Мәжит Ғафуриға һөйләй. Ул ваҡытта бей 76 йәштә була. Әгәр 1909 йылда булһа был осрашыу, тимәк Баттал бей 1833 йылда тыуған була.

Был ауылдар Ҡаңлы-Табын ырыуына керәләр, был ерҙәрҙә ҡан менән үҙ ерҙәрен һаҡлап ҡалған башҡорттар йәшәй. Сапай ауылында ҡарағалпаҡ, ил ҡаймағы, ҡыпсаҡ, иҫәнғол, киже аралары бар. Изге ҡоштары булып, торна һанала. Был ҡош, илгә афәт килһә: "Тороғоҙ-тороғоҙ, уянығыҙ, – тип оран һалыр, – ерегеҙҙе һаҡлағыҙ, һаҡлағыҙ, ошо ерҙә торайыҡ-торайыҡ", – тип ҡысҡырыр, ти.

Миләш ағасы – изге ағас, уның емешен алып афәт килгәндә лә, бындай ваҡытта төрлө билгеләр ҡуйыр булғандар. Шулай уҡ ҡарағас ағасы ла ҡаңлы табыны ырыуының изге ағасы иҫәпләнгән. 1843 йылғы ревизияла Сапай ауылында 231 башҡорт йәшәгән (267, 312).

**Яңғыҙкайын тирәһендәге ҡәберлектәр (23)**

“Элек был ерҙәрҙә ҡуйы урманлыҡ булған. 1880 йыларҙың аҙаҡтарында Дәүләкән аша тимер юлы үткәндән һуң, күп урмандарҙы ҡырҡып, яндырып, күмер яһағандар. 30-сы йылдарҙың нисәһе булғандыр инде, ошо баҫыуҙы һөргәндә Яңғыҙкайындан Ҡабаҡкайынға табан ерҙә биш-алты йорттоң нигеҙе табылды. Ошонан хатта Лоҡман-Хәким сарташ та (үткерләй торған) алып ҡайтты. Бик боронғо инде, хәҙер андый нәмәләр юҡ. Һуғыш йылынан һуң ҡайынды киҫтермәнек. Ошо ерҙән, ағасҡа турап, ҡарағас посадкаһы ултырттыҡ. Бер ваҡыт ер һөргәндә, ошо яңғыҙ ҡайын эргәһендә (был ерҙе һәр ваҡыт таштары булғас ҡыялап үтә инек), нисектер турылайбыҙ тип, ташын алып һөрөп үткәйнек, ҡәберлеккә тап булдыҡ. Кеше генә түгел, ат башы, һөйәктәре сыҡты… Бының барыһын алып, ошо ҡарағас посадкаһына ерләнек.

Был ағас тирәһендә тағы ла ошондай ҡәберлектәр бар. Ул турала тарих уҡытыусыһы Хәмзә Муса улы ла яҙып алғайны”.

**Төбәктәге ауылдар тураһында** (160)

Элек башҡорт ерендә бик күп ихтилалдар булған. Улар хаҡында бик күптәр хәҙер белеп бөтмәй. Шул ихтилалдар ваҡытында бик күп башҡорт ауылдары яндырылған. Сөләймән (Һөләймән, ҡушаматы Бәҫелеүән) тигән батырҙың ауылын урыҫ карателдәре яндыра. Хәҙерге Соколовка урынында ултырған ауыл. Сөләймән үҙе сығышы менән

Шәрип ауылыныҡы. Сөләймән ғәскәр башлығы була. Шәрип муллаһы Бәҫелеүән тигән бәйетте яттан белә ине. Һижри йылдың 1774 йыл март айҙары була. Сөләймәндең ғәскәре өс көн - өс төн Ярыштау итәгендә картелдәр отряды менән көрәшә. Ләкин был тигеҙ булмаған көрәштә башҡорттар еңелә. Ул ваҡытта ҡарҙан тау асылмаған була – шуға тау ҡан менән ҡыҙыл төҫкә инә. Ике яҡтан да бик күп яугирҙәр һәләк була. Башҡорттар һуңғы алышҡа саҡлы көрәшәләр. Һуңынан Сөләймән батырҙы тирә-яҡ ауыл кешеләре тауҙың итәгенә ерләйҙәр, таш ҡуялар. Был ҡәберҙе Әүлиә ҡәбере тиҙәр. Башҡорттар элек-электән батыр кешеләрҙе Әүлиә, изге кеше, алпамыша, ил батыры тип атағандар.

Ошо уҡ хәл Яппар ауылында була. Хәҙерге Иҫке йортто яндыралар. Яппарҙар күбеһе ошонда ҡырыла, иҫәндәре хәҙерге Иҫке Яппар урындарына күсәләр. Быны бик яҡшы тарихи мәғлүмәттәре булған Ғилманов Мөьмин исемле мулла белә ине. Ҡатыны Шәмсиямал ҡыҙ балаларҙы өйөндә лә, мәҙрәсәлә лә уҡытты. Яппарҙар был кешеләрҙе белергә тейеш.

Аллағол исемле батыр, шул уҡ Алпамыша батыр тигән әүлиә – тирә-яҡтың даны. Ҡәбере Ҡаҙанғолға табан ҡалҡыулыҡта, һәр ваҡыт элек тәңкә һалыр ине кеше. Был ҡәберҙәр хөкүмәт тарафынан эҙәрләнде, хәйер һалырға килгән кешеләрҙе яуапҡа тарттырыр булғандар.

**Яңы Яппар.** Бында берҙәм халыҡ, Исмәғил кеүек, бер төрлө нәҫелдәр, ситтән килгән кешеләр юҡ. Элек башҡорт араларынан тыш, башҡа халыҡты индермәйҙәр ине ауылға, сөнки хөкүмәт тарафынан ҡушылған шымсылар, һатлыҡтар күп ине.

Ҡаҙанғол волость үҙәге булғас, унда әтәмбайҙар күп ине, шуға бик тыныс ауыл булманы: кеше юғалыу, алып китеү – бында ғәҙәти күренеш ине. Ошондай уҡ хәл Ташлытамаҡ, Ташлы ауылдарында ла булды.

**Ер эшкәртеү ҡоралдары, иген үҫтереү** (45; 166)

Солтанғәлина Мөслимә Ғайса ҡыҙының һөйләгәндәренән: Минең иҫләүемсә, колхоздар ойошторолғанға тиклем, Ҡаҙанғол ауылында 4 кешелә молотилка бар ине, бер 15-ләп кешелә курәшимкә һабаны, ябай һабан байтаҡ ҡына ине. Унан колхозлаштырғас, барыһын да йыйып алдылар. Ерҙе һөргәндән һуң тырматалар. Беҙҙә ағастан (имәндән) эшләнгән, тештәре тимер тырма бар ине. Шуны атҡа тағып бер нисә үтһәң, ер тигеҙләнеп матурланып ҡала. Ошо эҙ буйынса орлоҡто һибеп күмдерәһең. ҡоштар ашамаһын өсөн, тырма эсенә һалыр инек. Быны күпселек өмә менән күмәкләп башҡара инек. Йәй буйына бер унлап ғаилә берләшеп, сиратлап иген баҫыуын ҡарай инек. Рәхмәт асыһында йоморо тирмәгә оҡшатып тирмә үрелгәйне һыу үтмәһен өсөн. Йәйге селләлә, ямғырҙа бик яҡшы ине. Керергә урын булғас, төтөн сөрөк һалһаң, бер ниндәй ҙә бөжәк ҡалмаҫ ине.

Иген урғанда күпселек ураҡ менән урылды, былай эшләгәндә башаҡтар ҡойолмай. Көлтәгә бәйләп сүмәләгә һалына 15-ләп көлтә, бер сүмәлә башаҡтары менән өҫкә ҡуйыла. Ә иң һуңғыһы, өҫтәгеһе, һыу, дым үтмәһен өсөн, башаҡтары менән аҫҡа ҡуйыла.

Ураҡ эшендә өйҙә барлыҡ кеше лә ҡатнаша ине, ҡарттар ғына ауылда ҡалыр ине. Беҙ Гөлбаҙыян исемле әбейҙе һәр ваҡыт ҡалдыра торғайныҡ, күрше сапрыш өйҙә торалар ине. Улар игенде бик аҙ ултырттылар. Беҙҙең аяҡ осонда Хайбулла исемле улы, килене Мәликә исемле, беҙгә ҡул алмаш йөрөнөләр. Улы рус-япон һуғышына китеп үлде, 1905 йылдар тирәһендә шикелле. Баҙыян әбей 60-65-тән уҙып үлде, Мәликә бер үҙе ҡалғайны. Дәүләкәнгә тормошҡа сыҡты. Ул ваҡытта 30 йәштәр самаһы булғандыр, Баҙыян ҡарсыҡтың үҙе сығарған сеңләүе бар ине, ҡайһы бер иҫтә ҡалғандарҙан.

Бер үҙемкәй ҡалдым яңғыҙ өйҙә,
Кәкүк кеүек булды яҙмышым.
Инде хәҙер, дуҫтар, нишләйем,
Эй-эй, яңғыҙ ҡалды минең башҡайым.
Ҡәҙерләп тә ҡарап торған балам
Һуғыштарға китеп юҡ булды.
Яуыз япон алды башҡайын.
Эй-эй, харап ҡына булды улҡайым, – тип сеңләп илай ине.

Һәр өйҙә ырҙын табағы эшләгәйнеләр, бының өсөн тәүҙә ергә яҫы таштар түшәп, шунан ҡалын итеп мәте һалаһың, был ер таш кеүек ҡата. Туһан, үлән үҫмәй ҡатҡас. Ошо урынға көлтәләрҙе һалып сыбағас менән һуғыла. Был эш ҡоралы оҙон таяҡтан һәм бәләкәй тәпәстән бау менән беркетелә. Ошоноң менән һуғып башағы ҡойола. Унан һуң елгәреп, киптереп ағастан эшләнгән көбө, һандыҡтарға һалына. Килелә, ҡул тирмәнендә лә тартып он яһайҙар ине. Иләктән үткәреп яҡшыра торғайны. Иҫке Яппарҙа тирмән бар ине, шунда күбеһе йөрөй ине.

**Ҡаҙанғол ауылында малсылыҡ** (15; 166)

Ауылда дөйә тотҡан кешеләр ҙә бар ине. Байсит тигән кешеләрҙең 4 дөйәһе булды, шуны һауып, ҡымыҙ яһанылар. Бер нисә кеше ишәк тә тотто, ҡапсыҡ һалып әйбер ташынылар, бәләкәй арбала егеп йөрөйҙәр ине. Күп кешеләр ҡымыҙсылыҡ менән шөғөлләнделәр. Был бик үтемле, доходлы эш булды, йәй көндәрендә төрлө яҡтарҙан килеп ял итә торғайнылар. Беҙ 15-ләп бейә тоттоҡ, өс бүлмәле йорт һалдыҡ, ауылда бик күркәм йорттарҙан һаналды. Дәүләкән урамындағы кеүек таштан юл һалдыҡ. Таштан һалынған аҡ келәттә ҡымыҙ эшләнек. Йәйге миҙгелдә 5-6-ға тиклем ғаиләне ҡараныҡ. Беренсе йылда уҡ килгән килемгә “Зингер” тегеү машинаһы алдыҡ. Йорт йыһаздары, ҡунаҡтар килгәндә

ҡулланыр өсөн Ҡытайҙа эшләнгән посудалар алдыҡ хәләл аҡсаға.

Ауылда иң күп йылҡы аҫырап, ҡымыҙ менән шөғөлләнгән кеше Йәғәфәр ине. Ул бик бай булды. Уның ике ҡатынына 40-тан ашыу ғына һауым бейәһе бар ине. Гел күренекле бай кешеләр уларға төштө. Революцияға тиклем яҙыусы Мәжит Ғафури булып киткән, тағы мишәр, татар яҙыусылары булдылар тип һөйләйҙәр.

Ҡаҙанғолға һәр йыл һайын Сембер губернаһындағы Сукно фабрикаларының хужалары Аксурин тигән кешеләр килер булды. Улар һәр ваҡыт Йәғәфәр байға төшәләр ине. Йәғәфәр бай бик күп һарыҡ та тотто, ауылдан уларға барып йөн тапшыралар ине. Ябалаҡлы аулында Ҡормой бай, Ҡыҙраста Сәфәрғәли бай, Буранғолда Йомағол ҡарт бай – ошо өйҙәргә килеп йөн йыйғандар (Был Әмирхан Еникиҙың “Һуңғы китап” тигән әҫәрендә лә күрһәтелә, 15-16-сы биттәр).

Ҡаҙанғолда Муллабай менән Маһира 10-15-ләп бейә тотто. Уларҙың бик матур өйҙәре ауылға йәм өҫтәп торҙо. Ихаталары бик ҙур (Бибиян ҡарсыҡтың ихаталары ла керә ине), бик яҡшы һалынған һарайҙары… Келәт ҡыҙыл таштан һалынған. Йоморо соҡор һалып, шунда силос тапаттылар. Йәйгә тиклем малдары ризыҡтан өҙөлмәне. 5-6 һауын һыйыр тоттолар. Май, ҡаймаҡ яһап, 2-3 көн һайын баҙарға илтеп һатырҙар ине. Бик тырыш булдылар. Ҡымыҙҙың бер биҙрәһе – 1 тәңкә, 20-25 һум бер кешенән бер айға алынды аҡса.

Вәлиәхмәттәрҙең 8-ләп һауым бейәһе, Исхаҡ мулланың 10-лап, Мөхәммәтситдыҡтың 15-ләп бейәһе булды. Хәҙерге Аҡмалыҡ ярында йоморо соҡорҙар һалып, үләндән силос тапаттылар. Элек ауыл  тирәһендә бер ниндәй ҙә ҡый үләне юҡ, кесерткән кеүек үләндәрҙе Оҙонғол буйынан барып алдылар, малға яҡшы тип, киптерә торған инеләр.

Байситтарҙың дөйәләре бар тигән инем, уларҙың өйө (мәктәп-интернат) беҙгә ҡаршы ерҙә, һәр ваҡыт аш-һыуҙан бер-беребеҙҙе ҡалдырманыҡ. Ул домбрала уйнай белә ине, ҡатыны һамаҡлап, дөйә кеүек бейеп, таҡмаҡ әйтер ине.

Дөбөр-дөбөр-дөбөрҙәтеп,
Дөйәләрем ҡайтҡандыр.
Дөбөр-дөбөр, дөп-дөп,
Дөйәләремде һауам,
Һауып ҡымыҙ яһайым.
Дөбөр-дөбөр, дөп-дөп,
Гөбөләрем дөбөрҙәй,
Тәңкәләрем елберҙәй.
Дөбөр-дөбөр, дөп-дөп,
Ҡымыҙымды эсеп ҡара.
Тәнгә сихәттәре бар, –

тип, ҡымыҙ һалып бирерҙәр ине.

Элек гел шундай йор күңелле кешеләр ине, һәр кемдең үҙ йыры була торғайны, үҙҙәре сығарып йырлайҙар ине. Рәкән шишмәһенең Яппар юлында (ул ваҡыт, 1905 йылға тиклем булдымы икән, шишмә аға ине, шул башланған ерен мал тапамаһын, тип, кәртә менән уратып ҡуйғайнылар) беренсе йорт Кинйәғол ҡарттыҡы ине. Уны Кинйә, Кинйәкәй ҙә тип йөрөттөләр, ҡарсығы Тәңкәбикә исемле ине. Ҡыҙҙары Шәфәҡ Бигеш тигән ауылда кейәүҙә ине. Улар бик күп мал тотманылар. Ваҡыттары ла булманы микән? Мин белгәндә, 5-6-лап мамыҡ кәзәһе тоттолар. Ҡарсығы бик оҫта шәл бәйләне, аҫалы балаҫтар һуға ине һатырға.

Ҡышын, йәйен Кинйәкәй менән быйма баҫтылар, тиренән күн дә иләйҙәр ине, итек-сарыҡ тектеләр. Өйҙәре ҙур балмаһа ла, ыҡсым ғына, ҡабыҡ менән ябылғайны. Һыу үтмәҫкә, ҡабыҡ эсенән тирене иләп, күн беркеткәйнеләр. Өй эстәрендә ҙур

һике (ҡунаҡ килһә, шунда ашъяулыҡ йәйеп табын ҡорола), бәләкәй өҫтәл, ике һандыҡ, матур итеп семәрләп эшләнгән шкаф, эскәмйә-урындыҡтар бар ине. Стенаға бәләкәй көҙгө эленеп ҡуйылғайны.

Беҙ был бабай-әбей менән гел аралашып йәшәнек бер йылды. Бер саҡ былар ҡышлау быҙау алып һуйҙылар, беҙ ҙә өмәлә булдыҡ, Бигеш ауылынан кейәү менән ҡыҙҙары ла килгәйне. Һуғым һуйыр алдынан бик матур табын әҙерләгәйнеләр. Балан бәлеше, кәзә итенә бәрәңге ҡушып, бәлеш ҡуйҙылар. 1900 йылдар булдымы икән инде? Ошонда беренсе тапҡыр кәзә ҡаймағынан ауыҙ иттем. Кис һалма һалып, аш бешерҙеләр. Иҫемдә ҡалған Тәңкә ҡарсыҡтың беҙгә әйткәне: "Ҡатын-ҡыҙҙың күрке – ашта. Һурпа тоноҡ, тәрилкәгә һалғас, төбө күренеп торорға тейеш. Әгәр күренмәһә, был ҡатын-ҡыҙҙың әрпешлеген күрһәтә", – тигәне иҫтә ҡалған. Кинйә ҡарттың бик оҫта ҡурайҙа уйнап, Тәңкә ҡарсыҡтың һамаҡлап таҡмаҡ әйтеп бейегәне иҫтә ҡалған.

"Үрҙәк бейеүе"

Баҡ-баҡ баҡылдығы – мин баҫамын ваҡ-ваҡ,

Бына шулай йөҙөп киләм һөйгәнемдең янына.

Әннә-гиҙер геннәйем, әннә-гиҙер геннәйем, – тип бармаҡтарын шартлатып, тыпырҙаны.

Баҡ-баҡ, һөйгәнем, һин ҡарайһың яҡ-яҡ,

Кинйәкәйем ашарға тап, һин бит йорттоң хужаһы

Әннә-гиҙер геннәйем, әннә-гиҙер геннәйем!

Баҡ-баҡ, баҡылдап, бергә йәшәү күңелле,

Йорт хужаһы иҫән булып, ата үрҙәк булғанда,

Әннә-гиҙер геннәйем, әннә-гиҙер геннәйем,

Баҡ-баҡ, баҡылдап, ҡанаттарымды ҡағам,

Бер аҙ күрмәй, әҙерәк торһам, һөйгәнемде һағынам.

Революцияға тиклем халыҡ малды бик күп тотто. Дим буйы бесәнлеккә бай булды. Ер һатыу ҡәтғи рәүештә тыйылды, бесән сабып, баҙарға ғына илтеп һатырҙар ине. Болондо бик ныҡ һаҡланылар. Малай-егеттәр ат менән һәр саҡ сиратлап ҡарап ҡайтырҙар ине. 1912 йылдар тирәһендә булды микән, бер ваҡыт Кәлинкә көтөүсеһе эсеп йығылған, көтөүҙәре Һарытал буйына үтеп кергән. Ҡараусылар ҡайтып әйтеп, 15-20-ләп егет атҡа атланып, сыбыртҡылар менән кәлинкәләрҙең һыйырҙарын арығансы туҡмап, ауылдарына кереткәндәр, бер нисә һыйыр быҙау һалған, һарыҡтары зыян күргән, тип тә һөйләнеләр. Улай түләтеү-фәлән булманы. Теге көтөүсе ҡайһы яҡтан булғандыр инде, икенсе көндө ауылдан ҡыуғандар. Балыҡсыларҙы ла болонлоҡтан ҡыуа торғайнылар. Бигерәк тә Яппар аралары ныҡ торҙо. Хатта ҡыш көндәрендә күл тынсыһа, ситтән килгән халыҡты керетмәйҙәр ине, башҡорттарҙан башҡаларын.

**Купец (һатыусылар)** (45; 166)

1905 йылға тиклем Ҡаҙанғолда Минеүәли исемле ҡарт менән Сафура исемле ҡортҡа йәшәнеләр. Уларҙың өйҙәре Рәкән шишмәһенең башланған еренән саҡ ҡына аҫтараҡ ине. Уларҙың бер аты ҡолоно менән булды, башҡа малдары юҡ ине. Улар һәр ваҡыт һатыу менән шөғөлләнделәр, ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре, алҡа, беләҙек, йөҙөк, һабын кеүек әйберҙәр, туҡыма, яулыҡтар һ.б. Арбаларында ике һандыҡ, ямғыр яуһа, сатыр ҡуйылғайны. Күршеләренә йорт-ҡураларын ҡалдрып, ҡараған өсөн әйбер-фәлән бирә икән, тиҙәр ине. Күршеләре бик һәйбәт кешеләр ине. Дуғаһына ҡыңғырау тағып улар килгәнен әллә ҡайҙан ишетергә була ине. Уларҙың ике ҡыҙҙары иҫән ине. Мин белгән береһе Көрмәнкәй яғында, икенсеһе Өршәк буйында Ҡаҙырғол яғында ине. Аҡсаһы булмаған кешеләргә бурыс ҡала, әйберләтә, ашамлыҡҡа ла

алышырға була ине. Шуныһы иçтә ҡалған: Сафура ҡарсыҡ бик матур кейенеп, өçтөндә камзул, ситеккә үзбәк галошы кейҙерелгән, сәсбауында тәңкәләр, алдына ҡайһы саҡта түшелдерек тә кейеп, бик ыçпай-таҙа кейенеп йөрөй ине. Кейеме күп булдымы микән, бер көндө кейгән кейемен икенсегә алыштырып кейер ине. Ҡайһы саҡта ҡатын-ҡыҙҙар әйбер алмаһалар ҙа, Сафураның кейемен ҡарарға сығалар ине. Әйберҙе ҡайҙан ҡайтара торған булғандар, уныһы билгеһеҙ, халыҡтың һорауы буйынса ла алып ҡайтырҙар ине. Ҡарты камзул, түбәтәйен ҡалдырмаç ине. Бик ипле, матур кейенеп йөрөр булды. Йыл һайын булмаһа ла, ике-өс йылға бер тапҡыр ат алыштырыр булғандар. Эскеселек тигән нимә улар өсөн ят булды, шуға ла аҡсалары булғандыр. Ҡыш көндәрендә бик һирәк йөрөрҙәр ине, күберәк ауыл халҡы өйҙәренән килеп алыр ине. Ҡарт көндәрендә хәлдәре мөшкөлләнгәс, Бибиямал исемле ҡыҙҙары алып китте. Шуларға бәйле бер ҡыҙыҡ хәл иçтә ҡалған. Өршәк буйында һатып йөрөгәндә, ике егет килеп шаярып әйттеләр микән. Бабай әйберҙәреңде бөгөн ҡалдырып ҡайтырға тура килер инде, тип. Был Минәш ҡарт арбаһынан мылтығын сығарып, быларҙы ҡурҡытмаһынмы! Тегеләр табандарын ғына ялтыратҡандар.

**Ҡаҙанғолда уҡытыу, мәктәп тураһында** (43)

Һәр бер яҡын тирәлә мәҙрәсә булды. Ҡаҙанғолда мәсет юғарыла булһа, мәҙрәсә ауылдың түбән өлөшөндә булды. Ике синыф: бәләкәй кластар – иптидай (башланғыс синыф), юғары ҙурҙар уҡығаны – рөшти (урта синыфтар өсөн). Ҡаҙанғолдан Дәүләкәнгә лә барып уҡыған уҡыусылар булған. Ауылдан айырмалы бында жәграфия [география], иҡтисад фәндәре өйрәнелгән. Унда Искәндәр ахун исемле башҡорт муллаһы уҡыта. Иçке Шәриптә үҙ ваҡытына күрә бик белемле, бик

матур тауышлы, йырға оҫта, бик күп бәйеттәрҙе белгән Ҡотлояр исемле кеше бар ине (Ошо уҡ һүҙҙе Шәрип ауылынан Миниярова Ғәйшә әбейҙән ишеттем. – Р.М.). Ул ултырған ерҙә бәйет, мөнәжәт уйлап сығарыр булған.

Иҫке Яппарҙа Мөьмин исемле сәсән мулла йәшәне. Ҡатыны Шәмсиямал аҙыраҡ ҡолаҡҡа ҡатыраҡ булған, Яппарҙа ҡыҙҙар уҡытҡан, шуға абыстай тип йөрөткәндәр. Мөьмин ҡарт бик белемле булған, ырыу араларын яҡшы белгән. Уларҙың бик ҡыҙыҡ, йылдан йыл алып барған, тәбиғәт календары булған. “Бына иртәгә сыйырсыҡтар килергә тейеш”, – тип әйтһә, сыйырсыҡтар килгән, ямғыр яуа иртәгеһен тиһә, ямғыр яуа ине, – тип һөйләйҙәр ине яппарҙар. Тәбиғәттең күренештәренә ҡарап, һауа торошон әйтер булған. Бер табында Ҡаҙанғол ауылында был аслыҡ йылы булырын алдан әйткән. “Алдағы йыл бик насар килер, ҡәрҙәштәр, аҙыҡ-ризыҡтарын бик һаҡ тотоноғоҙ”, – тигән. 1921 йылда шығырҙап торған Ҡаҙанғол ауылының 1/3 өлөшө астан үлгән (Исхаҡ ҡарттың мәғлүмәттәре буйынса, 170-ләп өй булған. 1917 перепись буйынса 151 йорт һанала). Аслыҡ ваҡытында ҡайһы берәүҙәр ғаиләләре менән киттеләр (һәләк булдылар астан). 1941 йылғы һуғыш булырын Мөьмин ҡарт ике йылдан алдан әйткән, тип һөйләй Ризуанов Миңлеғәли бабай.

Ҡаҙанғолдан Дәүләкән Искәндәр ахунда (рөшти синыфына) Солтанғәлин Биктимер, Садыков Ғүмәр, Астраханов Зәкәриәләр уҡыны. Көндә иртән атҡа атланып китерҙәр ине. Һалҡын, яҙ көндәрендә ятып та уҡынылар. Көҙ етеү менән ат ҡуйып ашатырға, берәр йөк бесән илтерҙәр ине. Күпселеге аттарын Арыҫлан тигән башҡорт байына ҡуйып йөрөнөләр (таныштарға). Был мәктәптә жәғрафия, тәүарих фәндәре өйрәтелә (45).

**Исхаҡ мулла тураһында** (36; 43)

Бик хәлле был мулланың матур итеп һалынған ҙур булмаған йорто, самандан һалынған келәте, аҙбарҙары ситән менән уратылып алынған төҙөк кенә ихатаһы бар ине. Ҡатыны бик уңған булғандыр инде, өй тирәһендә гөл ултыртыр булды. Мал керә торған урын икенсе ҡапҡанан, ә өйгә керә торған урында бәләкәй ҡапҡалары бар ине. Ишек алды бик йәмле ине. Ғүмер буйы ауылды изгелек, әҙәплелеккә өйрәтте мулла. Бик дини, эсеү, тәмәке тартыу тигән нимәнән йыраҡ булды, балалар уҡытты. Ҡаҙанғолдарҙың күбеһе уға бурыслы, тик колхоз ойошторған ваҡытта, кемдеңдер ҡотортоуы буйынса, быларҙы раскулачивать иттеләр. Киткән көндө, ул аслыҡ ваҡытта ярҙам итеп алып ҡалған кешеләр урамда уның әйберҙәрен бүлештеләр. Ошоларҙы күреп, Исхаҡ мулла: “Алығыҙ, берегеҙ ҙә бәхет күрмәйәсәкһегеҙ. Килер бер көн, был Хоҙай Тәғәләнең бүләге булыр, – тигән. – Күреріһегеҙ, ошо кешеләр хәйер һорашып, кешелектән сығасаҡтар”, – тип доға ҡылған ҡиблаға ҡарап. Әллә ысынлап та, был ҡарғыш дөрөҫ булып ҡабул булған, быны күп ҡаҙанғолдар белә. Шуларҙан берәүһенең бер йылдан һыйыры зыянлап, әсәһен паралич һуҡҡан, алған бер малы зыянлап, баш ауыртыуына сыҙай алмай, Хәжәт яғына ғаиләһе менән сығып китә (Шишмә районы). Был кеше аҙаҡтан Ҡаҙанғолға килеп, ялланып көтөү ҙә көтөп йөрөгән, ҡатынының ризалығынан башҡа.

Икенсе бер кешенең, нисәмә йылдан һуң, бер-бер артлы улдары үҙ-үҙенә ҡул һалып үлә. Унан һуң был кеше ҡарт көнөндә үҙ-үҙенә ҡул һала, ә ҡарсығы аҙаҡтан ҡалып, этләнеп, ҡарт көнөндә хыялланып үлә. Исхаҡ мулла хөрмәтенә Мулла төбәге (Мәзин төбәге эргәһендә), Мулла, Исхаҡ сабынлығы

тигән ер ҙә бар, күперҙән сығыу менән ҡоро Байрамыштан – ҡом кисеү, кисмәлектән сыҡҡан урындар.

**Күрәҙәселек** (43)

Элек Ҡаҙанғолда таштар менән һалып күрәҙәлек менән шөғөлләнгән кешеләр булды. Мөкминова Сәлиха, 1928 йылғы, ул кәрт асып күрәҙә ҡыла ине, уның инәһе Шәмсиямал ҡулдан, күҙҙән ҡарап, таштар менән дә, алдағы киләсәкте әйтте. Берәй әйбер юғалһа, уға барырҙар ине. Уның инәһе Шәмсиҡәмәр, ире Мөьмин элек бик ныҡ белгәндәр, сирҙән нисек ҡотолорға, ауырыуҙы нисек дауаларға – барыһын да әйтеп биргән. Ниндәй үләндәр ҡулланып, таштар менән кеше яҙмышын әйтер ине, тип һөйләйҙәр тирә-яҡтан килгәндәр.

**Театр килде** (58)

(архивтан)

Ул 1924 йылдар тирәһе булды микән? "Ҡаҙанғолға театр килә", – тигәс, ун көн ауылдың ике яғында ла көтөү иртә, сәғәт 5-тәрҙә, ҡайтҡандыр. Артистар килгән көн кешеләр кейенеп-яһанып, кемдә ниндәй яҡшы, затлыраҡ кейем бар шуны кейеп, ҡатын-ҡыҙҙар ҡашмау, түшелдерек, беләҙек, матур алҡалар тағып (күбеһе камзул-еләндә ине), эспиктәкел ҡарарға барҙы. Бала-сағаның да өҫ-башы ҡаралғайны.

Тау башында, мәсеттән саҡ ҡына ҡырҙараҡ, арбалар теҙеп, өҫтәренә таҡталар, шаршауҙар ҡороп, сәхнә эшләнеләр. Өйҙән урындыҡтар алып, артист килгән, тип, алдан урын алып ҡуйҙылар. Артистарға тип Хәсбиямал Ғәзизоваға, Шәмсиямал Мөкминоваға аш бешерергә ҡуштылар. Шунда "Ғәлиәбаныу" тигән спектакль ҡуйҙылар. Халыҡ тын да алмай, илашып тигәндәй ҡарап ултырҙылар. Бик ҡыҙыҡ булды, аҙаҡтан уйын кеүек төрлө уйындар ойоштorҙолар. Ул көн бик йәмле, ҡыҙыҡ булды Ҡаҙанғолда.

**Солоҡсолоҡ** (45)

Был эш менән күп кенә башҡорт кешеләре шөғөлләнгән. 1900 йылдарға тиклем Ҡаҙанғолда иң күп умарта тотҡан. Мөхәмәҙи исемле ҡарт, Фәхретдин исемле улы, килене Сафура, 20-нән артыҡ умарта тотҡан. Күбеһе умарталарҙы ул ваҡытта соҡоп түмәргә эшләйҙәр ине. Ҡабаҡҡайын яғына күсереп тә йөрөтөр булдылар.

Муллабай ҡарттарҙың умартаһы ундан артыҡ булғандыр. Беҙҙең (Мөслимә менән Мөхәмәтғәли – Р.М.) 15-ләп баш дүмәр умарта бар ине. Файҙаһы бик күп. Кәрәҙле бал бер ваҡытта ла боҙолмай, һаҡлауы еңел: ағас тәпәнгә (батманға) һалып ҡуйһаң, яңы килеш һаҡлана, һәр ваҡыт күстәнәскә бирҙек. Йәй көнөндә Өфө, Ҡазан яҡтарынан, Сембер яҡтарынан киләләр ине. Һатып та ебәрә торған инек. Иләккә һалып һыҡҡан балды яратып алырҙар ине. Тағы ла Йәғәфәр, Исмәғил, Ишдәүләт ҡарттарҙа бик күп кенә умарта бар ине.

Иҫке Яппарҙа бик күп кешеләр умарта тотто. Уларҙың күбеһе ҡорттарын йәй күсереп йөрөрҙәр ине. Бер нисә кеше бергә берләшеп, ҡыуыш аласыҡ яһап, күберәген Ерекле шишмә буйында йәйләйҙәр ине. Һарытау (Саратов) яҡтарынан элек бал йыйып та йөрөрҙәр ине.

Исмәғилдә йәшәгән Яхъя бабайҙың һөйләгәне: “Бал алыу өсөн йүкә ағастан батман эшләйҙәр ине, уның ҡапҡасын яһап, шунда бал һалыр инек. Былай эшләгәндә ҡараңғы, һалҡын ергә ҡуйһаң, бал оҙаҡ һаҡлана, тәмен, сифатын үҙгәртмәй. Ошолай итһәң, йыйып алыусылар ала торғайны. Ауылдарҙа йыйып йөрөнөләр. Һәр кешенең элек ҡорт ҡунарға ҡуйылған билгеһе, билгеле ағасы булды. Мин күпме ошондай урындарға тубыл ҡуя инем, тейгән кеше булманы. Шулай бал ҡорттарын үрсетә инек. Бал ҡорто айырһа, йыйып та ала инек”.

Умартасылыҡ менән иң күп шөғөлләнгән ауылдар: Ҡоръятмаç, Иçке Яппар, Исмәғил, 4-се урында Ҡаҙанғол торған.

**Арба (кырандас) эшләү кәсебе** (45)

Башҡорттарҙа үҙ ваҡытында башҡа төр кәсептәр менән бер рәттән арба һәм кырандас етештереү ҙә таралыш тапҡан. XX быуат башында Дәүләкән районында был эш менән 30-ға яҡын кеше шөғөлләнә. Асылда бында һөнәр эйәләре күп була, бәләкәй яңғыҙ һөнәрселәр (башҡорт ауылында улар бик күп була) был иçәпкә кермәй.

Кырандас үреү буйынса Иçке Яппар ауылында Солтановтар ғаиләһе бик әүҙем була. Атаһының кәсебен Солтанов Сәмиғулла бабай яҡшы үҙләштерә. Уның һүҙе буйынса, кырандастың күкрәген һәм тәгәрмәстәрен айырыуса ентекләп эшләргә кәрәк. Кырандастың оҙонлоғо 2 м 500 см., һығылмалы һигеҙ урҙа алына, ҡайын ағасы бик яҡшы. Артҡы күсәре ағастан һырлап тимер планкалар менән беркетелеп ҡуйыла. Кырандас үреү өсөн муйыл ағасы яҡшы, оҙаҡ һаҡлана. Дим буйында тал ҡулланыла, был оҙаҡҡа сыҙамай. Иң яҡшыһы – муйыл ағасы. Ошо кырандастар бер аҙна эсендә эшләнеп бөтә ине, унан ҡара төçкә буятыла. Революцияға тиклем бер кырандасты яҡынса 30-35 һумға һата торғайнылар. Элек, атайҙар һөйләүе буйынса, 20-30 тәңкә булған инде.

Исмәғил ауылында арба яһау оçтаһы, ҡыш сана ла эшләгән инде, Ғәлиәхмәт исемле ҡарт булған. Яңы Яппарҙа Минәхмәт тигән бер оçта булған. Ул ағастан, талдан кәрзин, һауыт-һабалар эшләгән. Улы Шәйәхмәт башҡорт кавалерияһында һуғышҡан. Беҙҙең кеүек 10-сы йылғылар микән инде? Һуғыштан ҡайтманы ул.

Иçке Ҙур Шәриптә Вәлиәхмәт исемле, тирә-яҡта дан тотҡан оçта булған. Уға заказ биреп эшләткәндәр. Арба,

көйәнтә, ат кәрәк-яраҡтары, сбруй, эйәр-фәләнде бик оҫта эшләгән, тип һөйләй ине атайым. Ул был һөнәр менән XIX быуат аҙағы – XX быуаттың 1905 йылдарына тиклем шөғөлләнә. Аҙаҡтан Сунан исемле улдары уның эшен дауам иткән. Ҡарсығы Мәхүп ғүмер буйы талдан төрлө кәрзин, һауыт-һаба, ҡаҙ, тауыҡ оялары, иген һала торған һауыттар үрә ине. Ғүмер буйы мурҙа, балыҡ тота торған ҡорамалдарын Дәүләкәнгә тиклем барып һатыр ине.

**Кәмә яһау кәсебе** (45)

Элек бүрәнәләрҙе ярып, эсен соҡоп йомро кәмә эшләй инек. Бының өсөн иң яҡшы материал – күк тирәк алына. Ул Дим буйында бик тиҙ үҫә, үҙе ныҡ. Был шөғөл менән күберәк Яппар аралары, Әлбәй, Ябалаҡлы, Исмәғил ауылдарында шөғөлләнә инеләр. Ҡаҙанғолда бер-ике кеше генә булаша ине. Шуға бында тирәктәр бик ныҡ бейек булып үҫкән. Төндә кәмә ағасына тип Дим буйына бара инек. Кеше күрмәгәндә уны киҫеп, Дим буйлап ағыҙып алып ҡайта инек, шунан инде кәмә яһайҙар ине.

Кәмә-ҡайыпты бик оҫта эшләгән кешеләрҙән: Бирге Яппарҙа Мостафа ҡарт, уның улдары Шафиҡ, Әғзәм (һуғыштан ҡайтманылар). Улар бик оҫта булғандар. Шул ҡайыпты яһап, ағыҙып алып китеп, Өфө яҡтарына барып һатыр булғандар. Яңы Яппарҙа кәмә-ҡайып һатыусы Шәйгәрҙән тигән бик яҡшы оҫта булған. Исмәғилдә – Муллабай Миниғолов.

Эш арбаһы, көлтә арбаһы (*фурман* – ябай телдә) элек бик үтемле тауар – һәр кешегә кәрәк. Тәгәрмәс яһау оҫтаһы Зариф ҡарт. Уның бик күп – унға яҡын – улы бар ине, бер генә ҡыҙы Ҡорбанбикә исемле. Аҙаҡтан туғандарын бик ныҡ ҡарап, инәй урынына йөрөй ине. Улдары Нуриәхмәт, Фазлыйәхмәт, Абелфазыл, Зайнулла. Абелфазыл дауам итте атаһының

эшен. Аҙаҡтан, колхоз ойошторған мәлдә, ауылдарҙа килеп заказ бирәләр ине. Бик күп станок эш ҡоралдары бар ине.

Өй һалып, баҙ соҡоғанда, бер иҫке ҡәберлеккә юлығалар. Ҡәберлек эсендә кеше һөйәге һәм уның баш осонда көршәк һауыттары табыла. Ауыл ҡарттары, Ҡөръән уҡып, был әрүахты зыяратҡа ҡуялар. Аҫҡараҡ, мөгәрәп соҡоғанда, ат һөйәге һәм уның янында бер кеше һөлдәһе табыла (162).

**Әүлиә Йәғәфәр ишан** (201)

Сәйҙи Йәғәфәр ишан булған. Инәһе – Рәжәпбикә, атаһы – Ғабдулла. Сәйҙи Йәғәфәр япон һуғышында ҡатнашҡан. Шунда мөғжизәләр күрһәткән. Уны кафырҙар эҙләгәндә ул юҡ була ла ҡуя икән. Һыуҙың әле бер яғында, әле икенсе яғында була икән. Уға уҡ та теймәгән. Иннәфәтә әхна сүрәһен уҡып, таяғын һыуға һалһа, шул юл булған уға.

Тәүҙә ул Иҫке Мерәҫтә йәшәргә килгән, ләкин уға аҫаба башҡорттары ер бирмәгән. Шул ваҡыт ул: “Был Мерәҫкә оло бәлә килмәһен, кесе бәлә китмәһен”, – тигән һәм Тимәшкә ауылына күскән. Ул ултырған ерҙә шишмә булған. Төрлө ауырыуҙарҙан ыҙаланған кешеләр шунан дауа алған. Үҙе киткәс шишмәләр ҙә ҡороған. Мин ауырығас, ошо Ишан бабай ҡәберенә барҙым. Беҙ тәүҙә әйләнеп 3 рәт тәҡбир әйттек. Ике рәт намаҙ уҡыныҡ. Зыяратта бик ҙур ҡарағай ағас бар. Шуны ҡосаҡлап-ҡосаҡлап илап әйләндек. Уның бөрөһө бар, һандуғастар сут-сут һайрай ине. Бабайҙар тубырсығын йыймағыҙ, тип, алдан әйткәйне. Туп итеп алдығыҙға төшһә, шуныһын ғына алырһығыҙ, тинеләр. Ҡәбер башында эскәмйә кеүек ике төрлө таш тора. Таштар икеһе лә ҡөҙрәт менән эшләнгән кеүек соҡорло. Береһенә ҡатындар, икенсеһенә ирҙәр хәйер һала. Хәйер һалғас: “Бабай, беҙ һине күрергә килдек,  шәфҡәтеңде насип ит! Балаларыбыҙҙың балаларына

ярҙамың тейһен! Яҡындарыбыҙға, илгә, үҙебеҙгә әхирәттә лә, донъялыҡта ла бәхилле бул" – тип, теләк теләнек. Мин ишанды төшөмдә күргәйнем. Ул әйтте: "Балам, исемемде телеңдән төшөрмәйһең, беҙҙең йортто килеп күрергә кәрәк", – тине. Шунан барҙым. Аллаға шөкөр. Захар тирмәненең ҡаршыһында ғына ул зыярат. Мин уның өйөн күрҙем. Ҡәберҙең һул яғынан башлап уң яғына ҡиблаға табан сәғәт әйләнеүенә ҡаршы Аллаһы әкбәр, лә илләһи иллалаһ, әлхәмде әйтеп, өс әйләнәһең. Шул саҡ бөтә тәнгә еңеллек килгән һымаҡ булып китә лә, әйләнгән һайын әйләнге килеп тора. Тик күп ярамай.

Ҡәбер баҡсаһын асып кереп, баш осонда ултырып доға уҡығанда, мин Аман Рәсүле сүрәһен, Хәҙрәт Ғәлене, хәҙрәт Хәсәнде уҡыным. Йәнгә шундай рәхәт булды.

### **Тр-тр трахтор, һуҡа бабай, йыраҡ тор** (23)

Хәбиәхмәт бабайҙың һөйләгәне: "Ҡаҙанғол ауылына трактор ҡайтҡас, миңә бирҙеләр. Икенсе көндө Ғилмитдин тигән абзый килеп тә еткән: "Мә, һиңә тракторыңа ҡушып бер таҡмаҡ яҙҙым, ҡабул ит", – тигән булды. Ул бик оҫта сәсән ине, хәҙер генә уйлап бер мәрәкә сығара ла ҡуя ине. "Рәхмәт" – тип ҡабул итергә тура килде, кеше күрмәһен тип кеҫәгә һалып ҡуйҙым, сөнки был бабайҙан төрлө нәмә көтөргә була ине.

Тр-тр трахтор, һуҡа бабай, йыраҡ тор,
Тр-тр трахтор, трахторҡай, эшләп тор.
Май ашатам тәмлеһен – трахторҡай, йырлап тор,
Таҙа сәләркә бирәм – трахторҡай, йөгөрөп тор.
Өҫ-башыңды ҡарармын – трахторҡай, гөрләп тор.
Һабанҡайҙы тағырмын, еркәйҙәрҙе һөрөп тор,
Сәскестәрҙе тағырмын, игендәрҙе сәсеп тор.
Сапҡыстарҙы тағырмын, ашлыҡтарҙы сабып тор,
Йыйғыстарҙы тағырмын да, ашлыҡтарҙы йыйып тор.

Арҡандарҙы тағырмын, сүмәләрҙе тартып тор,
Йүнле иргә эләгеп, һәр ваҡытта эшләп тор!

Латин хәрефтәре менән яҙылған ошо яҙыуҙы бик оҙаҡ һаҡлап йөрөнөм, хәҙер ҡайҙа ҡуйылғандыр инде".

Элек мәҙрәсәлә уҡыған саҡтарҙа ятлаған бер шиғырҙы Сафуан мулла Яҡшығолдоҡо, тиҙәр ине:

Эй, балам, һин ғәзизкәйем,
Һәр ваҡыт бәхет һиңә юлдаш булһын.
Тәртипле бул һәр урында,
Барса бала һиңә ҡарап үрнәк алһын.
Мәктәбеңдә тырышып уҡы һабағыңды,
Һәр кеше һиңә ҡарап таң ҡалһын.
Ғилемдәрҙе үҙләштереп һөнәрҙәргә эйә бул.
Туғандарың һине һәр саҡ хөрмәт итәр.
Ата-әсә кешегә шунан да ҙур бәхет булмаç,
Ҡан-ҡәрҙәштәр араһында оят булмаç (82).

**Яҡшығолов шиғырҙары** (144)

Сафуан мулла Яҡшығоловты бик яҡшы беләм. Уның тырышлығында 1907 йылдар тирәһендә Яңы Яппарҙа ҙур мәҙрәсә асыла (элек алты ҡыш уҡығандар), яңы типтағы мәктәп тә асыла. Бик күп шиғыры бар ине был мөғәллимдең. 30-нсәнсе йылдарҙа вафат булды. Яппар турында бик күп шиғырҙары бар ине. Шуларҙың береһе:

Яппар, Яппар, Яппарым,
Яппарым – пар ҡанатым.
Минең изге төйәгем,
Һиндә минең йөрәгем.
Бында таптым бәхетем,
Булды минең һөйгәнем.
Эй, Яппарым, Яппарым,

Һиндә үтте ғүмерҙәр,
Булды минең нигеҙем,
Һиндә булды дуҫтарым,
Ғәзиз дә ҡәрҙәштәрем,
Һуңғы көндәремдә лә,
Һиндә булыр ҡәберем.

5-се синыфта уҡығанда ятлаған шиғыр. Сафуан мулланыҡы:

Эй, ҡыҙыҡ та бигерәк фани донъя,
Мәктәпләрҙә ҫабаҡ алырҫың уҡып.
Тырышып ҡына ғилемнәрҙе эйә ҡылҫаң,
Ҫин белерҫең бу донъяла
Ниндәй ҡитға, мәмләкәттәр барлығын,
Шунда йәшәп ятыр ҫары тәнле япон, ҡытай,
Бире яҡта булыр аҡ тәнле урыҫ, башҡорт.
Йылы яҡта мәңгелектә йәй булғанда,
Йәшәп ятыр ҡара тәнле африканнар.
Ҡыҙыл төҫтә була икән әмиркән индуҫлары –
Китапларҙы яратып ҫин уҡыҫаң,
Сәфәр сыҡмай булырҫың сәйәхәттә.
(иҫтә ҡалғандарҙан, ҡыҙығып уҡып ятлаталар ине ошо шиғырҙы).

Дим буйының күренекле яҙыусыһы, Яңы Яппар ауылының сәсәне, уҡытыусы Сафуан мулла Яҡшығолов (1871-1931) **“Йәшлек дәүере” исемле шиғри** юлдары менән башҡорттарға мөрәжәғәт итә:

Йәшлек ваҡыты берадлар, бик ҡәҙерле,
Әҙәп-тәғлим[1] ал, булам тиһәң һөнәрле.

[1] Әҙәп-тәғлим – әҙәп белем.

Яҡут[1] кеүек муәҡҡәтең[2] ҡәҙерен белмәй,
Үткәрмәгеҙ йәшлек ваҡытын арлы-бирле.

Йәш ваҡытында үҙ-үҙеңде улғыл ғариф[3],
Мәктәпкә кер! Һәр фәнненән ал мәғәриф.
Нык тотоп нәфсе-әмарә[4] теҙгенеңде,
Буйламаҫтан элгәрерәк уйғыл сарыф[5].

Йәш ваҡытты бик тырышып ҡылығыҙ һиммәт,
Иҡтизай заманса[6] итеп ғәйрәт.
Инсаниәт шәжәрәһенән йыйып әҫәр,[7]
Милләткә мөкәммәлә[8] күрһәт хеҙмәт (144).

**Сафуан Яҡшығоловтың шиғыры**

Етер йоҡоң, уян инде, күтәреп баш,
Файҙа бирмәҫ көнө-төнө йоҡлау тоташ,
Һине лә заяһынан мәхрүм ҡуймаҫ.
Башҡаларҙы нурландырған нурлы ҡояш,
Һин йоҡлайһың, күтәрелгән ҡояш ҡыҙған,
Күтәрел, тор! Кереш эшкә, еңең һыҙған,
Һинең хәлеңде күреп һуң кем ҡыҙғанһын,

---

[1] Яҡут – яҡут ташы, алмаз.

[2] Муәҡҡәт – сикләнмәгән ваҡыт.

[3] Ғариф – белеүсе, уҡымышлы.

[4] Нәфсе әмарә – нәфсе ғәләмәте.

[5] Улғыл сарыф – ҡуллан, файҙалан.

[6] Иҡтизай заман – заман талабы.

[7] Инсаниәт шәжәрәһенән алып әҫәр – кешелек донъяһы тарихынан тәъсир алып

[8] Мөкәммәлә – тулыһынса.

Һин үҙеңде үҙең йәллә, үҙең ҡыҙған! (144).

Хөснөтдинова Мәғүҙә Мөхәмәтғәли ҡыҙында (1900 йылғы) Сафуан Яҡшығоловтың ҡайһы бер шиғырҙар йыйынтығы бар, уларҙы яттан белә.

**Йәштәргә васыятнамә**

Эй, балалар, йәшлек ваҡыты –
Бер ваҡыттыр, һәммәбеҙгә ҡәҙерлелер.
Ваҡытыңды үткәрмә һин әрәм-шәрәм.
Әҙәп-тәғлим ал, булам тиһәң һөнәрле.
Яҡут кеүек муәккәтең ҡәҙерен белмәй,
Үткәрмәгеҙ йәшлек ваҡытын арлы-бирле (166).

**Остазыма** (85)

(Матургөл инәй Сафуан Яҡшығолдоң ҡайһы бер шиғырҙарын яттан белә. Унан ошо шиғыр яҙып алынды)

Онотмам һине, остазым,
Ғүмерҙә ташламам, бер ҙә.
Һинең ҡәҙереңде мин беләм –
Онотмам тар ҡәберҙә лә.
Сабый саҡта дин-ғилемде
Өйрәттең һәм таныттың.
Мин тәғлимдә нисә көндәр
Кисерҙең һин, әй, остазым.
Ҡулыңдағы кәсәңдән татлы
Һыуҙар эсерҙең һин.
Иман, әхлаҡ өйрәттең.
Ҡалдырманың мине наҙан.
Һинең арҡаңда, әй, остазым,
Уҡыйым мин китаптарҙы.
Быны күрер дуҫ-иштәрем,
Хәҙер ниндәй бәхетле мин.
Ҡулға алып ятлайым Ҡөръәнемде,
Яҙам инде хәҙер әшғар

Ни хәтле мин бәхетлемен!

**Балҡантауҙағы ҡәберлек** (246; 247)

Балҡантауҙың итәгендә ҡәберлек булыуы тураһында элек-әүәлдән һөйләйҙәр. Йәштәр никахҡа ингәндән һуң, ошо тауға килеп, ҡәбер алдына баш эйеп, вәғәҙә бирешеп, ғүмерҙәренең һуңғы сәғәттәренә тиклем бергә булырға, тип доға ҡылып, ҡәбергә тәңкә һалыр булғандар. Шулай эшләгәндәр бәхетле тормош итерҙәр, мөхәббәтле булырҙар, тигән ырым-йола йәшәгән.

Ошо тауға менгән яңғыҙ кеше Балҡантау түбәһенә менеп: "Заятүләк, Һыуһылыу, һеҙ бер-берегеҙҙе яратҡан кеүек минең һөйгән йәремде күрмәнегеҙме?" – тип, ҡулды маңлай, күҙ янына ҡуйып, тирә-яҡты урында торған килеш байҡап-ҡарап сыҡҡандан һуң, уң ҡулды йөрәк тураһына ҡуйып: "Күрһәгеҙ, һөйгән йәремде минең янға ебәрегеҙ", – тип әйтер булғандар.

**Яппар ауылдары** (8)

Беҙҙең Яппар халҡы бигерәк әрһеҙ булған инде, элек өс Яппар булған: Түбәнге, Үрге, Төп Яппар. Уларҙы бөтөргәндәр. Хәҙер Арғы, Бирге Яппар, Йәнбәк Яппары барлыҡҡа килгән. Ошо ҡылған үләне кеүек башын өҙөп торғандар – барыбер үҫкән, брыбер көҙөн уғын сығарып торған.

Беҙгә тиклем дә күпме кеше килеп киткән. Беҙҙең Бирге Яппарҙа ғына 20-гә яҡын  кешенең ихатаһынан, баҙ ҡаҙығанда, нигеҙ һалғанда, элекке ҡәберлектәр килеп сыҡты. Шуныһы мәҙәк, әруахтарҙың баш осона көршәк ҡуйып күмгәндәр. Сафуан Ҡотлояровтың нигеҙен һалғанда, әруахтың янына ат ҡуйып, бик күп көршәктәр һалынған ҡәберлек асылды. Быларҙы барыһын да, Ҡөръән сығып, зыяратҡа ерләнек (60-сы йылдарҙа бер уҡыусы Шәйгәрҙәнова Һылыубикә инәйҙән (1884 йылғы)  яҙып алып, мәктәп музейына тапшырған).

**Һөнәрмәндәр** (105)

Элек-электән ғаиләбеҙҙә талдан кәрәкле һауыт-һаба, трандас, кошофка кеүек әйберҙәрҙе, бай ҡатлам, түрәләргә заказ буйынса эшләй инек.

Дәүләкәндән килеп немецтар сиреккә, быяла һауыт-һабаларҙы семәрләп үрҙерерҙәр ине. Үрелгән һандыҡтар иң үтемле тауарҙарҙың береһе ине. Бынан тыш, ҡаҙ, тауыҡ, өйрәк ояларын өйгә килеп алырҙар ине.

Был эште ауылда элек-электән һөнәрмәндәр бүлеп эшләр ине: береһе һауыт-һаба эшләһә, икенселәре балыҡ тотоу, мискә эшләү, ат кәрәк-яраҡтары эшләр ине.

Ҡаҙанғол ауылында талдан ҙур-ҙур “сунандар” үрерҙәр ине (иген һалыр өсөн талдан бик ҙур һауыт үреләә, ныҡ ҡыҙыл мәтенән эсен һылап, унан һуң шымартып, эс яҡтан таяҡҡа сепрәк урап, ыҫмалаға манаһың, ут төртөп, ошо ут ялҡынында шунан эсен, балсыҡты ҡыҙҙыраһың. Бик ҡаты масса була, шунда ашлыҡ һалһаң, оҙаҡ йылдар һаҡларға була. Был һауытты баҙ соҡоп, тирә-яғына дегәнәк баштарын ҡырлап һалып балсыҡ менән күмһәң, бер ниндәй ҡомаҡ фәлән дә килмәҫ ине. Игенде шулай һаҡлап була.

Ит-малға килгәндә, күбеһендә элек-электән һыуытҡыстар булған. Быныңө өсөн тирәнерәк баҙ ҡаҙып, ҡырын аҡташ менән бурайһың, өҫтөн ҡыйыҡлап та эшләргә була. Һыу ғына үтергә тейеш ошо мөгәрәпкә ҡыш буйына. Бер килке ҡар һалып, һыу һалып туңдыраһың, Ошолай ҡат-ҡат эшләнеп, өҫтөнә күрән һалына, аның өҫтөнә йоморо бамбук ҡамыштан беркетелеп, алынмалы иҙән эшләнә. Шулай эшләһәң, итең-майың бик күп ваҡытлап боҙолмай һаҡлана.

**Ырыу аралары** (287)

Ҡорьятмаҫка нигеҙ һалыусы – Мең ырыуы башҡорттары ябалаҡ нәҫеле, яппар аралары нәҫелдәре була.

Һуңыраҡ үҫәргән ырыуы башҡорттары килеп төпләнә, данлыҡлы аҡтүбәтәйҙәр, улар араһында бик күп сәсән, мулла, мөғәллимдәр сыҡҡан.

Мәҙейәр нәҫелдәре – бик боронғо нәҫелдәр, ата-бабалары – боронғо венгр ҡәбиләләренең бер сыбыҡ осо, тиҙәр.

**Искәндәр ахун** (85)

Дәүләкәндә башҡорт балаларын бик белемле Искәндәр исемле башҡорт ахун уҡыта. Хәйриә аҡсаһына ике ҡатлы мәктәп төҙөтә, таштан бихисап һарайҙар һалдыра. Мәктәп Дәүләкәндә төҙөк ҡаралтыларҙың береһе була, тирә-яҡ башҡорт ауылдарынан имтихан тотоп, шәкерттәр ҡабул итә. Улар өсөн ятаҡ һалдыра, ҡыҙҙар өсөн мәҙрәсәлә Искәндәр ахундың ҡыҙы Ғәйшә (Бибғәйшә) исемле мөғәллимә уҡытты.

**Дәүләкән** (306)

Дәүләкән – ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙә Дәүләтхан, Ҡырҡөйлө мең волосындағы башҡорт ауылы, 1730 йылдарҙа нигеҙ һалына. Исеме шул Дәүләкән/Дәүләтханға бәйле. Ул 1735-1740 йылдарҙағы ихтилалдағы башҡорт яугирҙәренең юлбашсыһы.

Дәүләкән ҡарттың улы Сонтай Дәүләкәнов 1753-1820 йй. йәшәгән, Салауат яуында ҡатнашҡан. Яугирҙың ике ҡатыны булып, улдары Ҡунаҡбай 1779 йылғы, Ҡотлобай 1799 йылғы, уның улы Мырҙагәрәй 1824 йылғы һәм Дауыт 1831 йылғы.

Дәүләкән ҡарттың икенсе улы – Сәфәр, уның улы Дәүләтсура, уға 72 йәш була. 1812 йылғы һуғышта ҡатнашҡан. Ул бик белемле сәсән, башҡорттарҙы яҡлаусы, халыҡ araһында абруйлы шәхес була. Рәсәй закондарын яҡшы белгән, хәрби кадет корпусын тамамлаған. (Хузеев Мәлкәмән, тарихсы яҙып алыуы буйынса).

Был яҡтарҙа, Дәүләкән, Әлшәй тирәләрендә, электән ҡалған әйтем йәшәп килә. “Донъя, Рәсәй ҡанундарын белмәһәң, Дәүләтсура һиңә юрар” – тип әйтер булғандар.

Тарихи документтарға ҡарағанда, 1795 йылда Дәүләкәндә 33 йорт иҫәпләнеп, 92 ир-ат һәм ҡатын күрһәтелә.

Дәүләкәндән ярты саҡрым алыҫлыҡта Итҡул-Этҡол ауылы урынлашҡан булған. Бында бөрйән яғынан килгән башҡорттар, меңле башҡорттары рөхсәте менән 1797 йылда

килеп ултыралар. Улар сығыштары менән Төрөкмән ауылы, хәҙерге Баймаҡ районынан була. Етәкселәре бай Итҡул Боҫҡонов була. Был тарихи документтар менән дәлилләнә. Уның улдары Собханғол (уның улы Имелбай), Изгебай, Мөхәмәҙи, Әхмәҙи, икенсе ҡатынынан Таулыҡай исемле улы була. 1816 йылда Итҡулда 74 ир-ат иҫәпләнә.

1905 йылда – 418 йорт иҫәпләнә. Шул ваҡыттан Дәүләкән менән бергә ҡушыла. Ошо уҡ хәл Яңы Көрмәнкәй менән дә башлана. Дәүләкәндең үҙендә электән сәрмә, ҡойҡа, çәпрә, юлбарыç, ҡуян, аçылҡай аралары күп булған. Былар барыһы ла мең башҡорттары, Ҡырҡөйлө мең ырыуына ҡарағандар.

Итҡолдоң күбеһен бөрйән ырыуы тәшкил итә.

Дәүләкән ҡарттың тамғаһы ике тура мөйөштән торған. Тәңре ҡоштары – ҡарсыға/ыласын. Олатайҙарҙың һөйләүе буйынса, Дәүләкән ҡарт бик оçта һунарсы булған, ыласын ҡоштары менән һунар иткән, мәргән уҡсы. Был турала Исмәғил ауылы Яхъя мулла бик күп легендалар һөйләүе менән таң ҡалдырҙы. Изге ағастары – ҡайын ағасы. Урманға инеп, бер нисә ваҡытҡа туҡтап, ҡайын ағасынан бер аҙым алыçлыҡта баçып, тәнегеҙҙе таҙартырһығыҙ, тип, үҙенең яугирҙарына өйрәтер булған (306).

1937 йылда Иçке Яппар ауылында Ғәлим исемле мөғәллимде ҡулға алалар: балаларға бәйет, иçке риүәйәт яҙып килтерегеҙ, тип, өйгә эш бирә. Иçкелек менән булаша тип, 7 йыллыҡ мәктәпте ябып, мөғәллимде ҡулға алалар.

Икенсе көн Ғәлимдең атаһы – ғүмер буйы мәҙрәсәлә уҡытыусы булып эшләгән Тимербулат ҡарт, фамилиялары Әкәмбәтов, иртән Яппарҙың кәнсәләренә килеп, йыйылған халыҡҡа ҡумыҙ уйнап, былай һамаҡлай икән:

Ҡара-ҡара ҡорама
Аҡ аттарға килешмәй.

Саф күңелле кешеләргә
Ҡара ялыу (яғыу) берекмәй.
Бәлә килде, бәлә килде,
Бәлә килер ҙә китәр,

Кеше башынан йөрөр – тип йырлаған да, халыҡты илатып ҡайтып киткән.

Элек башҡорттар батша хөкүмәтенә буйһоноп бөтмәгәндәр, шуға һәр бер башҡорт ауылында килмешәктәрҙе, төрлө милләт кешеләрен көсләп ултыртҡандар. Был ауылда нимә эшләйҙәр, ниндәй хәбәр бар – шуларҙы өйәҙ башлыҡтарына еткереп тороу маҡсатында эшләнгән. Беҙҙең яҡтарҙа, Яңы Яппар ауылында, төп аҫаба башҡорт ырыуынан ҡалған нәҫелдәр. Шул Сафуан Яҡшығолов исемле мулла ғына ситтән килгән кеше булғандыр, ҡалғандары – төп аҫаба башҡорттары. Күпме генә тырышмаһындар, сит кешеләрҙе ауылға ултырта алмағандар. Ауыл халҡы берҙәм булған, бер ниндәй әтәмбәйҙәрҙе ауылға индермәгәндәр. Сит ауылдан, сит ырыуҙан килен алғанда ла, ауыл аҡһаҡалдары кәңәше менән эшләнгән. Килен булған ергә шымсы керер, шымсы кергән ерҙә милләт бөтәр, – тигәндәр элек.

Беҙҙең ауылда балғажы, әжекәй, деүәрән, ҡындыр, байраҡай нәҫелдәре төп ырыуҙарҙан һанала. Сит-ятҡа элек ҡыҙ биреү бик уйланып эшләнә ине.

Иҫке Яппар, Ҡаҙанғол ауылдарында ситтән килгән килмешәк, әтәмбәйҙәр күп. Яңы Яппар ауылы берҙәм булды. Элек ҙур болала етәксе булған Аллағол ҡарт ошо беҙҙең яҡтан булған. Алпамыша алпауыт ҡушаматлы (дәү булғаны өсөн) Яппар ҡалҡыуында ҡәбере бар. Элек йома һайын ҡартлар хәйер һалырға барыр ине шунда (82).

Элек дүрт ауылдың кешеләре (Иҫке Яппар, Яңы Яппар, Иҫке Ябалаҡлы, Яңы Ябалаҡлы) бик берҙәм йәшәгән. Аҡһаҡалдары бергә ҡорға йыйылыр булғандар. Бергәләп әле бер, әле икенсе ауылда йыйындар үткәргәндәр. Был ауылдың байҙары Аслыкүлдең Ҡупшы ярында аҡ тирмәләр ҡороп, ат бәйгеләре, ҡымыҙ оҫталары ярыштары үткәргәндәр. Һөйләшеү буйынса, Ябалаҡлы байҙарының көтөүлектәре Өйҙөрәк йылғаһының башынан тамағына тиклем һул яҡ яр буйы ерҙәре, Яппарҙарҙың уң яҡ ерҙәре булған. Элек ошондай йыр ҙа булған:

Бөркөттөң уң ҡанаты
Булыр беҙҙең Яппар.
Бөркөттөң һул ҡанаты
Булыр беҙҙең Ябалаҡ (309; 310) .

**“Беҙ, Дим буйы башҡорттары, күпме?”** (22)

Байбулат исемле бабайҙарҙа бик ҡыҙыҡлы бер мәғлүмәт һаҡланған. Ул: “Беҙ, Дим буйы башҡорттары, күпме?” – тип атала. Был исемлек һан 1917 йылғы халыҡ һанын алыу мәғлүмәттәре менән тап килә. Иҫке төрки телендә яҙылып 1919 йыл ҡуйылған. Был яҙыу таушалып бөтһә лә яртыһын яҙып алырға мөмкинлек булды [Р.М.].

1. Иҫке Ҡаҙанғол ауылында 152 йорт иҫәпкә ингән.
2. Иҫке Яппар – 133 йорт
3. Яңы Яппар – 134
4. Бигеш – 52
5. Әлбәй – 48
6. Исмәғил – 74
7. Иҫке Шәрип – 4
8. Яңы Шәрип – 12
9. Иҫке Көрмәнкәй – 103
10. Яңы Көрмәнкәй – 60

11. Эткол (Иткол) – 170 (һуңынан Дәүләкәнгә ҡушылалар)
12. Мәкәш – 210
13. Ҡоръятмаç – 285
14. Ибрай – 153
15. Дүртөйлө – 96
16. Бәләкәй Аҡколай – 24
17. Яңы Аҡколай – 74
18. Иçке Аҡколай – 73
19. Çуҡраҡлы – 57
20. Сурай – 120
21. Ҡармыш – 148
22. Ҡыпсаҡ ҙуры – 160
23. Яңы Сәпәш – 73
24. Иçке Сәпәш – 81
25. Ҡараяҡуп –190
26. Үрге Хәжәт – 29
27. Түбәнге Хәжәт – 72
28. Урта Хәжәт – 40
29. Ябалаҡлы (ҙуры) – 165
30. Бәләкәй Ябалаҡлы – 26
31. Биҡкол – 23
32. Күсем – 60
33. Усман – 60
34. Иçке Усман – 34
35. Илсеғол – 75
36. Нарыçтау – 68
37. Яңы Ҡунҡаç – 157
38. Күл Ҡунҡаç – 48
39. Иçке Ҡунҡаç – 45
40. Себенле – 168
41. Сураҡай – 130

42. Иҙрис – 131
43. Әүрез – 48
44. Ҙур Әүрез – 350
45. Дәүләкән (башҡорт өлөшө ике яҡтан тора) – 200
46. Әлшәй башҡорт яғы – 206
47. Шишмә (бер өлөшө) – 38
48. Өйҙөрәк – 500 (22).

**Яппар ауылы тураһында бер нисә һүҙ** (11)

Революциянан һуң Иҫке, Яңы Яппар ауылдары Абрай волосының Өфө өйәҙенә ҡарай ине. Иҫке Яппарҙа 1921 йылғы аслыҡ йылына тиклем, мин хисапсы булып эшләгән йылдарҙа, 135 хужалыҡ ине, 1927 йылда 95 йорт ҡалды.

Тарихи ревизия үткәргән мәғлүмәттәр буйынса, 1920 йылда Иҫке Яппарҙа 126 йорт иҫәпкә алынһа, 303 ир-ат, 326 ҡатын-ҡыҙ, 1926 йылда 96 йорт ҡала.

Яңы Яппарҙа 1920 йылда – 119 йорт иҫәпләнеп, 277 ир-ат, 313 ҡатын-ҡыҙ иҫәпкә алынған. 1926 йылды 92 йорт ҡала.

Ике ауылда ла ете йыллыҡ мәктәп, мәсеттәре булған – иманлы ауыл ине.

Иҫке Яппар ауылында бик белемле, Өфө мәҙрәсәләрен тамамлаған Ғилманов Мөьмин исемле мулла, сәсән, оҙаҡ йылдар эшләне. Уның бик күп дини китаптарынан тыш, тарихи, ҡулдан яҙма китаптары бар ине. Ҡартайған көнөндә, 90-ын уҙғайны, ҡыҙы Фәтиха алып китте үҙе янына. Ошо мулла һәр ваҡыт әйтер ине:

Хаҡ тәғәлә исламда
Булығыҙ, ҡан-ҡәрҙәштәрем,
Ислам бөтһә – иман китер,
Иман китһә – милләт бөтөр.
Мәсет-мәхәлләрҙе күҙ нурындай һаҡлағыҙ,
Ата-бабаларҙан ҡалған ерегеҙҙе һатмағыҙ!

**Йомағолдоң ҡулға алынғаны** (64)

Бер көндө Яңы Яппар ауылынан Сәйфетдинов Йомағол тигән кеше (1879 йылғы) Дәүләкән баҙарына барып, үҙ йомошон йомошлап, һатырын һатып, алырын алғас, хәл-әхүәл һоршып, байрам алдынан баҙарҙа төрлө хәбәрҙәр ишетеп, кис ауғас ҡына ауылына ҡайтҡан. Икенсе көнөн был, иртән иртүк тора һалып, кәнсәләр янына халыҡ йыйылған ергә килә.

Был үҙе күргән хәл-ваҡиғаларҙы һөйләп, Иҫке Көрмәнкәй сәсәненән ишеткән шиғырын халыҡ алдында яттан һөйләй:

“Бөгөн байрам, бар урында

Ҡыҙыл әләм елберҙәй.

Алға, алға, алға, тиеп,

Бар ғәләмде ул әйҙәй.

Дәүләкән байрам алдынан матурланған, ҡыҙыл әләмдәр матур итеп елберҙәй. Шуныһы аптыраш, йәмәғәт, беҙҙең Яңы Яппарҙа ҡыҙыл әләмде элеүен элделәр, әллә урыны килешмәне, бер көн генә елберҙәп алды ла, саҡ ҡына булһа ла һелкенеп тә ҡарамай. Иҫке Яппарҙа элгәндәр – уларҙыҡы елберҙәп ултыра, был бигерәк ғәжәйеп әле”, – тигән. Иртәгеһен иртүк был кешене конвой менән арбаға егелгән атҡа ултыртып алып та китәләр.

Арбаға ултырғас, ҡыҙыл флаг яғына ҡарап, былай тип һамаҡлай икән был:

Елбер, елбер ел иҫмәй

Беҙҙең Яңы Яппарҙа.

Саҡ ҡына ла ҡуҙғалһа,

Төшмәҫ инем был хәлгә.

Йомағолдо алып киткәндең икенсе көнөндә флагты ҙур бейек ҡолғаға элеп ҡуялар.

Документтар буйынса, Сәйфетдинов Йомағол Сәйфетдин улы, 1879 йылғы, башҡорт, башланғыс белемле. "Яңы таң" колхозы, көтөүсе. 1937 йылдың 26 декабрендә ҡулға алынған һәм 58.10 статья буйынса хөкөм ителгән.

**Муллалар тураһында бер нисә һүҙ** (121)

Яппар ауылында беҙҙең Ғилманов Мөьмин исемле бик уҡымышлы мулла булды. Ул Өфө мәҙрәсәһендә уҡып ҡайтҡан, атаһы Ишан ҡарт уға тиклем мулла вазифаһын башҡарған. Был Мөьмин мулланың бик күп тарихи яҙмалары, элек-электән килгән башҡорт шәжәрәләре, көндәлек дәфтәре, бынан тыш, дини китаптары бихисап ине.

80-гә еткән ҡарт, ҡарсығы менән икәү ҡалып, донъя көттөләр. Көндәрҙең бер көнөндә, 60-сы йылдар булғандыр, был ҡарт ҡарсығы менән ауыл буйынса йөрөп, дуç-иштәренә хәйер-саҙаҡа таратып, бәхилләшеп йөрөнөләр. Миңә лә кереп: "Һин бик уҡымышлыһың, беҙгә оҙаҡ ҡалмаған, бәхилләшергә килдем, хәйеремде ҡабул ит. Үлеп-фәлән китһәм, һөйәктәремде йыйыштырырға берүк кил, мосолманса был донъянан киткем килә, – тине. – Иртәгеһен көтөү ҡыуғас, зыяратҡа кил, шунда көтәм", – тип ҡайтып китте. Иртәгәһен, ул әйтеүенсә, сәғәт 7 -ләрҙә көтөү ҡыуғас зыяратҡа барһам, был ҡарт ҡарсығы менән намаҙлыҡтар алып, тиçбе тартып ултыралар. "Бына ошонан урын күрһәтәм, ҡарсығым да йыраҡ китмәһен, ҡәбер ҡаҙыусыларға ошо тирәнән күрһәтерһең, – тине. – Нәҙерем бар, бик боронғо яҙмаларым, бар китап-яҙмаларымды биреп ҡалдырырға кешем юҡ, һин ышаныслы кеше, алырһың", – тигән булды, мәрхүм.

Фатиха исемле ҡыҙы уҡытыусы булып эшләй ине, оҙаҡ та үтмәне үҙ яғына алып китте быларҙы. Шул яҙмаларын алдылармы икән, билгеһеҙ.

Ҡаҙанғол ауылында Исхаҡ мулланың бик күп яҙмалары бар ине. “Тарихнамә” тигән яҙма китабы булған.

30-сы йылдарҙа уны һөргөнгә алып киттеләр. Китабын, яҙыуҙарын халыҡ алдында яндырҙылар.

Ҡоръятмаҫтан Ғәҙелмәлик исемле мулланы, Ҡаҙырғолдан – Нуриәхмәт исемле мулланы, Яңы Йәнбәктән – ҙур мулла Йәнгир ишанды, Имай-Ҡарамалынан Ғәбделәхәт мулланы алып китәләр.

**Ҡаҙаш тархан тураһында** (196)

Элек әүәл Дим, Өршәк, Аҫылыкүл, Ҡандракүл буйындағы башҡорттар мең иле ҡәбиләһенә ҡараған, уның бейе булып Ҡәнзәфәр бей торған. Ул үҙе хәҙерге Шишмә районы Хәжәт, Ябалаҡлы ауылынан булған. Ҡартайғас, идара итеү ауырлашҡан, үҙенең ышаныслы дуҫтары менән кәңәшләшеп, Мең башҡорто ерҙәрен 11 аймаҡҡа бүлгәндәр, шуларҙың 4-һендә Ҡәнзәфәр бейҙең улдары идара иткән.

Беҙҙең Өршәк буйындағы ауылдарҙа – Иҫке Мерәҫ, Яңы Мерәҫ, Иҫке Йәнбәк, Яңы Йәнбәк, Ҡәҙерғол, Иҫке Өҫәйен, Яңы Өҫәйен, Ҡаҙморон (Усман Ауырғазы районында) Ҡаҙаш исемле тархан идара иткән. Баш ҡәрйәһе – түбәһе Иҫке Мерәҫтә булған, унан Усман старшина булған саҡта бер аҙҙан түбә Ҡаҙморонға күсә.

Иҫке Мерәҫ – бик боронғо ауыл. Юлымбәт исемле бай Ҡаҙаш тархан нәҫеленән булған. Юғарыла әйтелгән бөтә ауылдар ҙа Ҡаҙаш нәҫеленән, уларҙы Ҡаҙаш тархан башҡорттары тип һанайҙар. Юлымбәт байҙың улы Мерәҫ Өршәк буйындағы күренекле старшина булған, ул идара иткән осорҙа ауылдарҙа мәҙрәсә, мәхәлләләр һалынған, бик башлы аҡыл эйәһе булған. Уның улы Ибраһим Мерәҫов Салауат яуында ҡатнашҡан, күренекле старшина. Уның улы Усман, 7-се башҡорт кантоны старшинаһы, Ҡаҙморонға күсә.

Шул ваҡыттан алып был ауыл Усман старшина ауылы, тип атала. Уның улы Олоҡман – күренекле сәсән, кантон башлығы, уның улы Заһиҙулла – көрәш батыры, көслө старшина булған.

Мәкәш ауылы – Ҡырҡөйлө мең ырыуына ҡарай. Тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 1755 йылдарҙа был ауылға мең башҡорттары эргәһенә табын башҡорттары ла килеп төпләнә. Уларҙың күбеһе хәҙерге Архангель районы Ҡысында ауылы, Ҡысынды үҙәнендә йәшәгән күрпәс табын волосына ҡараған башҡорттарға килеп һыйына. Был тарихи документтар менән иҫбатлана (ЦГИА РБ: ф. 1, оп. 1, Д. 2083). Шулай уҡ 1795 йылдың 29 февралендә Бөгөлмә өйәҙе Ырымбур губернаһы Әлмәтулла ауылынан башҡорт типтәрҙәренең бер нисә ғаиләһе килеп ултыра. Тарихи документтар раҫлауынса, күсеп килгәндәр араһында 37 йәшлек Үҫәк, уның улдары Уйылдан, Рөстәм, Төхвәтулла, Хисмәтулла күрһәтелә. Шаҡтамаҡ ауылынан Ибраһим Ишкинин менән улы Фәхретдиндең килеп ултырыуҙары күрһәтелә.

1795 йылда – 1187 башҡорт, 1820 йылда – 220 йорт 1103 башҡорт иҫәпләнә. Мәктәбе, мәсете, ел тирмәндәре булған ҙур башҡорт ауылдарының береһе.

1843 йылғы ревизия күрһәтеүенә ҡарағанда, был ауылда 248 башҡорт (ир-егет) 720 бот иген сәсеп үҫтерә.

1917 йылда 643 десятин ерҙәре иҫәпләнә. 122 кешегә 4-әр десятина, 32 кеше – 10-ар, бай ҡатлам вәкилдәренә ҡараған 5 ғаилә – 15-әр, 6 ғаилә 15-20 десятина ер эшкәртеү менән шөғөлләнәләр.

Сафа олатайҙың һөйләүе буйынса, тирә-яҡ, урман элек ҡош-ҡортҡа бик бай булған. Ахун ауылынан Алға ауылына тиклем Берғаҙған ҡамышы үҙәне, элек мул һыулы, бик балыҡҡа бай урын булған, был урындарҙа яҙҙан көҙгә хәтлем берғаҙған (пеликан) ҡоштары булған, һуңғы тапҡыр 1914

йылдарҙа һунарсыларҙың вәхшиҙәрсә аулауы арҡаһында был ҡош юғала, унан һуң бер ваҡытта ла күренмәй. Был ҡоштар тураһында орнитолог П.П.Сумкин “Птицы Уфимской губернии” тигән китабында 1901 йылда яҙып үтә.

Мәкәш ауылында хәҙерге ваҡытта урман, әптелмән ҡаҙан, типтәр нәҫелдәре ауылдың төп өлөшөн тәшкил итә. Был нәҫел ырыуҙың тамғаһы булып һәнәк булған: Y, O.

Ахун ауылы ҡанлы ырыуы йөрәктау араларына ҡарай (250).

**Ҡоръятмаҫ ауылы** (279)

Ҡоръятмаҫ ауылы – тарихи мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 1795 йылғы ревизияла 15 йорттан тороп, был ауылда 50 ир-ат, 26 ҡатын-ҡыҙ күрһәтелә. Был ауылда мең, үҫәргән ҡәбиләләре йәшәй.

Мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 1775 йылда мең башҡорттары Ҡырйылға волосы Сарҙыҡ ауылынан 3 башҡорт ғаиләһенә, Ҡурған ауылы Ҡанлы волосындағы ғаиләләргә, ултырырға ауылда урын бирәләр (рөхсәт буйынса).

Үҫәргән волосы Ырымбур өлкәһенән бик күп башҡорттар был ауылда урын табалар. Улар араһында Шәмсетдин Биҡколов, Тәзитдин Итҡолов, Әлмөхәмәт Ишдәүләтов ғаиләләре күрһәтелә.

1920 йылда был ауылда 290 йорт иҫәпләнеп, 1526 башҡорт йәшәгәне күрһәтелә.

1843 йылғы ревизия буйынса, 187 кеше (ир-ат) 720 бот иген ултыртып, уңыш ала.

1845-1921 йылдарҙа күренекле шағир Сәфиулла Рәхмәтуллин исемле сәсән йәшәгән. Башҡорт халыҡтарын берләшергә, иҙеүгә ҡаршы көрәшкә саҡырған:

Берләшәйек бөтөн халыҡ,
Бергә булһын еребеҙ.

Барыбыҙ бер ҡулдан булһаҡ,
Сәскә атыр илебеҙ.
Алдынғы милләттәр хәҙер
Ирек юлына баҫты.
Башҡорттарым, ҡуҙғалайыҡ,
Салауатым юл асты.

**Ҡоръятмаҫ тарихынан** (312)

(Хузиев Мөлкәмән Хоҙайәхмәт улының Зыяйетдин бабайҙан алған яҙмаларынан)

Элек был ерҙәрҙә аҫаба башҡорттар менән мәҙейәрҙәр татыу көнкүреш иткәндәр. Хәҙерге ваҡытта ла Ҡоръятмаҫ ауылында 70-кә яҡын мәҙейәр ҡәбиләләренә ҡараған башҡорттар йәшәй. Легендалар буйынса, был яҡтарға 400 йылдар тирәһендә үҫәргән башҡорттары башында торған Сәғәҙәткирәй исемле батыр килеп ултырған. Улы Сәйетғәли менән был ауылға тәүгеләрҙән булып нигеҙ һалғандар. Был ауылда шулай уҡ тирә-яҡта данлыҡлы, сығышы менән Дим буйынан (атаһы Ябалаҡлы, инәһе Яппар ауылынан), Мөхәмәтвәли исемле һунарсы ошо яҡтарға килеп ҡош-ҡорт аулаған. Ҡорҙоң шул хәтле күп булыуына ҡарап, хайран ҡалған, ләкин был ҡошҡа атам ғына тигәндә, ҡоштар осоп китер булған. Шуға был урынды ҡор ҡошо ятмаҫ, Ҡоръятмаҫ тип атағандар.

Ҡайһы бер легендаларға ҡарағанда, шулай уҡ олатайҙарҙың һөйләүе буйынса, был ауылға тәүгеләрҙән булып нигеҙ һалыусы Мөхәмәтвәли ҙә тип күрһәтелә. Унең 4 улы булып, берҙән-бер ҡыҙы Йәнбикәне Сәғәҙәткирәйҙең берҙән-бер улы Сәйетғәлигә биреүе тураһында һөйләнә. Үҫәргән һәм меңбашҡорттарының берләшеүен белдереп, аталары аҡ тирмәләр ҡороп, бик ҙур туй яһағандар, тирә-яҡ ауылдарҙан түрәләр, сәсән-аҡһаҡалдар саҡырылған.

1930 йылдар тирәһендә Ҙур Ҡоръятмаҫ ауылынан бер нисә ғаилә бүленеп сығып, хәҙерге Алға ауылына нигеҙ һалалар. Тәүҙәрәк был ауылды Яңы Ҡоръятмаҫ ауылы тип атай инек, ти, Зыяйетдин олатай, унан һуң нисектер рәсми яҙыуҙарҙа, кем ҡушыуы буйынса эшләнгәндер инде, Алға тип атай башланылар. Дәүләкән районында ике Алға исемле ауыл бар. Береһе “Мишәр Алғаһы” тип йөрөтөлә, беҙҙе “Башҡорт Алғаһы” тип атайҙар.

1970 йылда был бабай В.И.Лениндың юбилей миҙалы менән бүләкләнә. Алға менән Мәкәш араларында элек бик бейек ҡуйы, кеше үтмәҫлек ҡамышлыҡтар үҫкән булған. Был урынды Төпҡамыш ҡойоҫо тип атайҙар. Был урында яуҙа башҡорттар гел еңер булған, сөнки ошондағы йәшәгән халыҡ ҡына юлды яҡшы белер булған, дошмандарҙы ошонда алып кереп ҡыйратыр булғандар. Элек Аслыкүлде ата-бабайҙар Аҫылкүл тип атағандар, оло кешеләрҙә ошоға бәйле бик күп йырҙар һаҡланған. Мәкәштән Ҡоръятмаҫҡа тауҙан тауға төшөп йөрөй торған урынды элек-электән Сығыш ҡулы тип атайҙар. Электән был ауылдар бер-береһенә килен төшөрөп, бер ауылдан икенсе ауылға ҡунаҡҡа барыр булған юл ул. Йырыбаҡкан урын – Аҫылкүлдең һыуы, бер күбәйеп, бер кәмеп  нисә йылдарға бер ҡабатланыр булған, ошо тулған ваҡытта һыу ағып сығып Өйҙөрәк йылғаһы буйлап аҡкан. Аслыкүлдең буйында  Ҡарағас тауы, Ҡашҡатау, Нура, Ташлытау, Аҡтау тауҙары һуҙылған.

Ҡоръятмаҫ Алға ауылындағы аҫаба башҡорттары мең ырыуына ҡараған нәҫелдәрҙән тора. Был ауылдың тәңре ҡошо булып  ҡарағош алынған, сөнки  ҡышҡы һалҡындарға бирешмәҫ, сыҙамлы ҡош һаналған. Изге ағастары – ҡарағас, ораны – салауат, тамғалары – тәҙрә.

Был бик борон булған инде. Үзбәк тигән ханлыҡ ваҡытында, беҙҙең башҡорттар ислам динен ҡабул иткәндәр.

Төрлө тарафтарҙан килгән уҡымышлы дин әһелдәре ауылдарҙа мәсет, мәхәлләләр асырға ярҙам иткән. Элек беҙҙең Ҡоръятмаҫ ауылында тау башында, тирә-яҡҡа йәм биреп ултырған, әллә ҡайҙарҙан күренеп торған, семәрләп эшләнгән манаралы мәсет бар ине.

Ауыл исеменә ҡағылышлы халыҡта тағы бер риүәйәт йәшәй. Элек ата-бабайҙар Ҡоръятмаҫ йылғаһының башына ҡапҡан ҡуйған, солоҡ элгәндәр. Йәнлектәр күп булғанлыҡтан, ҡапҡанына һәр ваҡытта ла эләгеп кенә торғандар, ә солоҡтарына һәр ваҡытта ла бал ҡорттары ҡунып, бал йыйыр булған. Шуға ла был бай урынды ата-бабайҙар ҡоро ятмаҫ, буш ятмаҫ ер, тигәндәр. Ошо бай, гүзәл урынға килеп ултырып, ауылдың исемен Ҡороятмаҫ, йәнле телдә – Ҡоръятмаҫ ауылы тип атайҙар. Боронғо ваҡытта йырлаған ҡарт атайымдарҙан отоп алған бер йыр иҫтә ҡалған:

Ҡоръятмаҫтың урманына
Керһәң, аҙаша күрмә.
Был ерҙәрҙән ҡолаҡ ҡағып,
Ҡәрҙәш, һаташа күрмә.

Ҡоръятмаҫҡа дуҫтар килһә,
Булыр башҡорт туйҙары.
Был ерҙәргә дошман керһә,
Булыр башҡорт яуҙары (312).

* * *

Ҡоръятмаҫ ауылының төп нигеҙен аҫаба башҡорт нәҫелдәре тәшкил итә. Мең башҡорттары, үҫәргән ырыуҙары, мәҙийәрҙар, морат, мерәҫ, сөйәрғол, аҡтүбәтәй нәҫелдәре күп (292).

**Ҡоръятмаҫ ауылы** (297)
(Хузиев Мөлкәмән яҙып алған)

Ата-бабайҙарҙың һөйләүе буйынса, беҙҙең Ҡоръятмаç ауылына нигеҙ һалыусы булып Дим буйының мең ырыуы аçаба башҡорттары тора.

Ҡара Яҡуп тигән ауылдан Мөхәмәҙи, Иçке Ябалаҡлы ауылынан Мөхөммәтүәли, Ҙур Яппарҙан Фәйзулла менән Мөхәммәт исемле мәргән һунарсылар булған. Улар Дим буйында дан тотҡан һунарсылар булған. Был дуçтар һәр саҡ бергә һөйләшеп, атын эйәрләп, ҡорал алып, бергә һунар итер булғандар.

Элек-әүәл һәр бер ауылға, тархан-бейҙәргә, аҡ батшаға яçаҡ түләргә, башҡорттарға йөкләмә биргәндәр. Ауыл халҡы, һанына ҡарап, күпмеҙер ҡиммәтле йәнлек тиреһе, ағас батмандарға һалып, күпмеҙер бал бирер булған. “Батман-батман бал бирҙем, затлы тиреләр бирҙем – аҡ батшалар туйманы, тағын һорай башланы” – тигән әйтем дә булған.

Ҡоръятмаç яғындағы ерҙәр, Аслыкүл буйҙарында элек-электән, йырып үтмәçлек шар урмандар менән ҡапланған булған. Бында ҡош-ҡорт, йәнлектең иçәбе-һаны булмаған. Шуға ла һунарсылар буш ҡул менән ҡайтмаған. Һалған ау-тоҙаҡтары ҡоро ятмаç, ҡорлары тик ятмаç, кеше күреү менән осоп китер булған. Бына ошо һунарсылар тәүҙә һунар йорттары төҙөп, унан һуң буранан өй күтәреп, ғаиләләрен алып килеп, Ҡоръятмаçҡа нигеҙ һалғандар.

Был ауылда нәçелдәрҙең күп өлөшөн мең ырыуҙары тәшкил итә, ара-тирә ситтән килгән, аçаба хоҡуғын алып ултырған нәçелдәр бар.

Элек Ҡоръятмаç ауылында мәхәллә, мәҙрәсәләр булған, бәләкәй генә поташ эшкәртеү заводы, һәр бер башҡорт ауылындағы кеүек, йәшерен, урман-тау араларында тимерлектәре булған. Был тимерлектәрҙе бер кеше лә белергә тейеш булмаған, ауыл старшина-түрәләре һәм ышаныслы кешеләре генә белгән. Сөнки аҡ батша тимерлектәрҙе асҡан

башҡорт ауылдарына күп һалым һалған һәм хөкүмәт күҙәтеүе аҫтында ғына эшләргә рөхсәт ителгән. Элек Ҡоръятмаҫ яғында Шәрифйән исемле оҫта тимерсе булған, уның үҙенең сабынлыҡтары, мал көтөү урындары булған.

Тимерлектә көнкүреш яраҡтарынан башҡа, һуғыш ҡоралдары, ҡылыс, хәнйәр, ҡалҡан, уҡ баштары, һөңгө, өҙәңге кеүек әйберҙәр эшләнгән. Был ҡоралдар йәшереп тотолоп, кәрәк ваҡытта халыҡҡа таратып бирелер булған.

Ошо яҡтағы Ильяс атлы кеше ошондай һөнәр оҫтаһы булған:

Һинең белгән һөнәрҙе

Сит-ят кеше күрмәһен.

Араларға дошман кереп,

Тел асҡысын асмаһын, – тип киҫәтер булғандар.

Беҙҙең Ҡоръятмаҫ ауылының тәңре ҡошо булып, ҡарағош һаналған, сөнки ул ҡош үтә сыҙам, ҡурҡыу белмәгән, әрһеҙ, ҡыйынлыҡтарҙы еңел кисергән. Кешенең йәне сыҡҡас, был ҡош ғәҙел, батыр, үҙ еренә мөкиббән булған, халҡын яратҡан кешенең генә йәнен ҡурсалар, ти, насар, һатлыҡ, ҡурҡаҡ йәндәрҙең йәнен, суҡышлап, өҙгөләп ташлар, ти.

Изге ағастары – ҡарағас, сыҙам ағас. Һәр бер энәһенең һаны кеүек, нәҫел-ырыу ырыҫлы булырға тейеш,  йәшәреп, йәмләнеп, береһе үлһә, энәләр кеүек, ике-өсө уны алыштырырға тейеш – шундай мәғәнә һалынған был ағасты ырыу ағасы итеп алғанда. Орандары – салауат. Мәғәнәһе: беҙҙән тыуған һәр бала быуын-быуынға, бер сиктән икенсе сиккә хәтлем, быуындар ауазын белеп, хөрмәт итеп үҫергә тейеш (салауат – йәйғор күпере). Тамғалары тәҙрә булған. Беҙҙән ҡалған тарих, күренмәле тәҙрәнән ҡараған кеүек, был тамға менән ырыуҙың сиктәрен, рәсми ҡағыҙ-яҙыуҙарын, ырыуҙаш-яуҙаштар ситтә ятып ҡалһа ошондай тамға менән билдәләр булғандар.

### **“Ғәли пысағы”** (196)

Элек башҡорт ауылдарында хөкүмәт тарафынан тимерлектәр (кузница) асырға рөхсәт ителмәй. Һәр бер ауылдың үҙенең йәшерен тимерлектәре урман, һаҙлыҡлы урындарҙа урынлашҡан булған. Ошо Өршәк яҡтарында, олатайым Ғәйнулла һөйләүе буйынса, Ғәлимулла исемле бик оҫта тимерсе булған. Ул көнкүреш әйберҙәре, бысаҡ, хәнйәр, ҡылыс, ураҡ кеүек әйберҙәр, тәгәрмәс, арба тирәсәләре яһалған.

Бик үткер, яҡшы булғаны өсөн хәҙер ҙә ошо яҡтарҙа “Бысағың, йә салғың үтәме?” – тип һораһалар, “Ғәли пысағы” – тип яуап бирәләр (бысаҡ, салғыһы үткер булғанда). Ул яһаған был көнкүреш әйберҙәрен тиҙ алыр булғандар.

Минең ҡартинәм Иҫке Яппар ауылыныҡы, Хәйерниса исемле ине. Бәләкәй саҡта шул ауылға бер нисә тапҡыр атҡа ултырып барырға тура килде. Ерекле тигән йылға (шишмә) буйынан үтә инек. Ҡартинәйемдең һөйләүе буйынса, элек ошонда Яппарҙарҙың тимерлектәре булған. Ҡотлобулат исемле ерҙә ошо кешенең тимерлеге булған. Башҡорттарҙың ҡорал яһап баш күтәреүенән ҡурҡып, батша хөкүмәте башҡорт ауылдарында тимерлектәрҙе асырға рөхсәт итмәгән. Тимерлектә эшләгән тимерсе ауылда бик һирәк күренгән. Эшләгән әйберҙәрҙең күберәген кәсеп итеүсе (һатыусы) кешеләре аша таратҡан.

### **Колхозлашыу заманы ваҡиғаларынан** (312)

Иҫке Көрмәнкәй ауылынан Садиҡов Әхмәтйән Садиҡ улы (1894 йылғы), Садиҡов Ниғмәтйән Садиҡ улы (1907 йылғы) беренселәрҙән булып колхозға инәләр. Иртән иртүк таң атыу менән йылым тартып балыҡ тоталар ҙа, Дәүләкәндә билгеле кешеләргә кәмә менән сығып, балыҡтарын һаталар. Иртән

ашап, халыҡ кантора янына йыйылған була. Ошо ваҡытта, өйҙәренә ҡайтып тормайынса, был балыҡсылар тура бында киләләр. Былар бер нисә минутҡа һуңға ҡалған була. ”Спекулянттар”, тип, Әхмәтйәнде 1932 йылдың 14 июлендә, Ниғмәтйәнде 1932 йылдың 15 июлендә ҡулға алалар. Шул китеүҙән икеһе лә ғәйеп була.

Иҫке Көрмәнкәйҙән Мостафин Ғилметдин Мостафа улының (1907 йылғы, мәҙрәсәлә бер аҙ уҡыған) яҙмышы ла аяныслы. Бер көн уны кәнсәләргә саҡырып: “Ниңә ҡолхозға инмәйһең?” – тип һорау алғандар. Был ултырыусы колхоз активистарына былай тигән: “Беҙҙең башҡорт ғүмер буйына ата-бабайҙар төйәк иткән ергә хужа булған, ошо ер өсөн күпме көрәшкәндәр, нисек итеп мин, аҫаба башҡорто, ерһеҙ ҡалырға тейеш? Аллаҡайым һаҡланы, Салауатым яҡланы, мин ерҙе бирә алмайым", – тип яуап биргән. Шулай итеп, Ғилметдин исемле кешене халыҡ дошманы тип, 1929 йылдың 26 октябрендә ҡулға алып китәләр. Тарихи документтарға ҡарағанда, ул РСФСР-ҙың 58.8, 58.10 статьялары буйынса ғәйепләнеп, 1930 йылдың 11 ғинуарында атыла.

Был 22 йәшлек Ғилметдин, ауыл ҡарттары һөйләүе буйынса, Иҫке Көрмәнкәйҙә генә түгел, тирә-яҡтарҙа һабантуй, йыйындарҙа көрәш батыры, ҡурҡыу белмәгән, көслө кеше булған.

Тура һүҙле, үҙ эшен еренә еткереп эшләр ине, тип иҫкә алалар уны. Атын, һабанын тартып алғас, ат урынына үҙем егелермен инде, тик ата-бабам ғүмер буйына мираҫ итеп ҡалдырған еремде бирә алмайым, тигән.

### **Ҡоръятмаҫҡа Чапаев әрмистәре килгәне** (295)

1919 йылдың 25 майҙарында В.И.Чапаев үҙ ғәскәре менән Ҡоръятмаҫ ауылын азат итә һәм ике көн ошо ауылда ял итә.

Шәмсинур инәй әйтеүенсә, Чапаев уларҙың өйҙәрендә туҡтай. Кис көнө усаҡ алдында ауылдың йәше-ҡарты йыйылып, уйын ойоштора, шатлыҡтан. Иҫтә ҡалған таҡмаҡтарҙан бер-нисә өҙөк:

Ҡыҙыл әрмисләр килгәс,
Ҡоръятмаҫҡа нур керҙе.
Чапай уҙаманды күргәс,
Дошмандар башын эйҙе.

Ҡыҙыл әрмистең бүреге,
Башында ҡыҙыл йондоҙ.
Әрмеләргә китәм мин дә,
Иҫән бул әле, балдыҙ! – тип бейеп күңел астылар.

**Сауҙагәрҙәр юлы** (312)

Элек Дим буйҙары буйлап Ырымбурҙан Өфөгә саҡлы боронғо юл үткән. Был юл хәҙерге Миәкә районы, Ҡаран-Ҡунҡаҫ, Нарыҫтау, Илсеғол, Әлшәй районы – Сурай, Ҡыпсаҡ Асҡар, Ҡайып, Ибрай, Дәүләкән районы – Көрмәнкәй, Ҡаҙанғол, Иҫке Яппар, Шишмә районы – Иҫке Шәрип, Әлбәй, Суҡраҡлы, Ябалаҡлы, Биҡкол, Абдулла, Ҡара Яҡуп ауылдары аша үткән.

Был юлды “Сауҙагәрҙәр юлы” ла тип атағандар.

**Әлбәй батыр тураһында мәғлүмәт** (121)

Элек Дәҫтән тархандың баш ҡәрйәһе булып Суҡраҡлы ауылы һаналған. Ул Ҡырҡөйлө мең башҡорттарының баш түбәһе. Үрге, Түбәнге, Бигеш Суҡраҡлы ауылдары бар, Әлбәй исемле старшина булғас, ошо Үрге Суҡраҡлыны Әлбәй старшина ауылы (Әлбәй ауылы) тип, Түбәнгеһен – Суҡраҡлы тип кенә йөрөтә башлайҙар. Унын ҡарамағына 107 йорт инә, тамғаһы J – кеҫәүағас. Әлбәйҙең бер туған Хәлил исемле ағаһы

була, унан туғаны Сөйәрғол (1779-1862) йәшәй. Әлбәйҙең Хөрәмәй исемле улы (1760-1812) һәм Хәлит исемле улдары (1759-1812) Француз яуында үлеп ҡалалар. Икенсе ҡатынынан Килдеғол улы 1760 йылда тыуған, һуңынан ул 7-се башҡорт кантоны старшинаһы итеп ҡуйыла. Әлбәй старшина Кинйә менән берлектә Ырымбурҙы ҡамауҙа башҡорт һыбайлыларының башлығы, полковник чинлы командир була (Салауат Таймасов. Восстание 1773-74 в Башкортостане). Ихтилалдан һуң тирә-яҡтағы башҡорт ауылдары яндырылып бөткән, ә Әлбәй старшина ауылдары төҙөк ҡалған. Уның улдары ла баш менән уйлап бик оҫта идара иткән һәм халыҡ араһында хөрмәткә лайыҡ булғандар. Уның тураһында ошолай тип йырлайҙар ине тип иҫкә алды олатайыбыҙ:

Әлбәй генә тигән, ай, түрәнең
Уң ҡулында булыр ҡылысы.
Ерем генә тиеп яуға сапҡан,
Ғүмерҙәрен Хоҙай бирһәңсе.

Әлбәй генә тигән, әй, түрәкәй
Изге эштәр генә атҡарҙы.
Илем генә тиеп ирек даулап
Башҡорттарҙы яуға саҡырҙы.

**Мәскәүгә декадаға барыу** (48)

1955 йылда Мәскәүҙә Башҡорт декадаһында ҡатнаштыҡ. Ошо ҡыҙҙар менән “Ете ҡыҙ” бейеүен башҡарып, коллективыбыҙ диплом алып ҡайтты.

1. Әмирханова Флүрә, 1936 йылғы
2. Ғәззова Хөмәйрә, 1937 йылғы
3. Кәримова Менәүәрә, 1932 йылғы
4. Вәлиәхмәтова Фәүзиә, 1934 йылғы
5. Әстрханова Флүрә, 1932 йылғы

6. Арыҫланова Фәрзәнә, 1930 йылғы

7. Сәйфетдинова Бәһиә, 1938 йылғы

Күмәкләп “Салауат” исемендәге башҡорт халыҡ йырын башҡарҙыҡ (48).

**Ҡайып старшина**

(Розалия Солтангәрәева яҙмаларынан)

Старшина Ҡайып Баянов, 1812 йылғы Ватан һуғышындағы 2-се Башҡорт полкы подпоручигы, 4-се дәрәжәләге Изге Анна ордены кавалеры. Был орден уға 1819 йылдың йәйендә генә тапшырыла. Бүләкләү тураһында документ ебәрелә. Шатлыҡтан Ҡайып Баянов ырыу ҡорон аҡ тирмәгә йыя.

Ҡайып ауылына уның дуҫтары йыйыла.

1. Аралбай Күсәрбай улы Аҡсулпанов, 2-се Башҡорт полкы командиры, Стәрлетамаҡ районы Күсәрбай ауылы.

2. Абдулла Булатов

3. Дәүләтбай Исламшин – Мораҡтан

4. Дәүләткилде Йомағужин

5. Ғүмәр Юлдашев

6. Алсынбай Ҡасҡынов – Аллағыуат ауылынан

7. Ильяс Юлдашев – Әлшәй ауылынан

8. Күҙәмеш Яҡшығолов – Сураҡайҙан

9. Рәхмәтулла Хәмзә – Ҡаҙанғолдан килә

10. Теләүкәй Килмөхәмәтов – Ҡыпсаҡ Асҡар ауылынан

11. Яхъя Килдеғолов – Ҡыпсаҡ Асҡар ауылынан

12. Боҫҡон Ишҡолов – Көпәй-Ҡобау ауылынан

**Боронғо календарь** (160)

Элек-электән башҡорттар ғәрәп календары буйынса йәшәнеләр. Ислам дине башҡорт ерҙәрендә Үзбәк тигән хан ваҡытында ныҡлап урынлаштырыла. Шуға ҡайһы бер башҡорттарға Үзбәк тигән исем ҡушҡандар, уның хөрмәтенә.

Яңы йыл Мөхәррәм айынан башлана. Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Мәккәгә күскән көнө 622 йылдан башлана.

1-се ай – Мөхәррәм, 30 көндән килә

2 – Сәфәр, 29 көн

3 – Рәбиғел-әүүәл, 30 көн

4 – Рәбиғи-ахыр, 29 көн

5 – Йомаҙи-әүүәл, 30 көн

6 – Йомаҙиахыр, 29 көн

7 – Рәжәп, 30 көн

8 – Шәғбан, 29 көн

9 – Рамазан, 30 көн

10 – Шәүүәл, 29 көн

11 – Зөлҡәғиҙә, 30 көн

12 – Зөлхизә, 29/30 көн

Рамаҙан – изге ай, ураҙа тотоу айы.

Һәр ай яңы ай тыуған көндән башлана. Зөлхизә – хаж ҡылыу, изге ай. Хажға Мәккәгә барыу айы.

Бер-бер артлы килә торған 12 йылдың һәр береһенә исем биргәндәр:

1. Тауыҡ йылы
2. Эт йылы
3. Сусҡа йылы
4. Сысҡан йылы
5. Үгеҙ йылы
6. Юлбарыҫ йылы
7. Ҡуян йылы
8. Аждаһа йылы
9. Йылан йылы
10. Йылҡы йылы
11. Һарыҡ йылы
12. Маймыл йылы

Науруз – Нәүерез яңы йыл башланған көн, байрам. Яҙ айы – ерҙең йәнләнеүе, тәбиғәттең йоҡонан уянған көнөнән башлана, ул 21-22 мартҡа тура килә.

**Иҫке Яппар ауылы тураһында** (121)

Революциянан һуң Иҫке Яппар, Яңы Яппар ауылдары Өфө өйәҙе Абрай волосына ҡараны. Ауыл советы барлыҡҡа килгәс, Суҡраҡлы ауыл советына ҡараныҡ.

Аслыҡ башланыр алдынан Иҫке Яппар ауылында 145 хужалыҡ ине. Аслыҡ йылында бик күп кеше вафат булды. 30-сы йылдарҙа ауылда ни бары 95 йорт ҡалды. Бар ғаиләһе менән ерләнгән ҡәберлектәр – бының дәлиле.

**Башҡорттарҙың үлсәм берәмектәре** (34)

Башҡорт халҡы борон-борондан йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән, шуға оҙонлоҡто үлсәү өсөн арҡан ҡулланғандар. 1 арҡандың оҙонлоғо 25 аршинға тура килә, 1 аршин – 71 см. 71х25=17,25

1 арҡандың оҙонлоғо 17 м. 25 см. Арҡанды элек йүкәнән үргәндәр. Шуға баҙарҙан һатып алғанда һатыусы:”Нисә арҡан кәрәк?” – тип әйтер ине. Метрлап һатыу юҡ – арҡанды берәмләп һатыу бар ине.

1 саҡрым яҡынса 50 арҡан тәшкил иткән. Ҡаҙанғол-Иҫке Яппар аралары – 5 саҡрым, йә иҫкесә 250 арҡан оҙонлоғонда тип тә әйтер булғандар.

Бесән бүлгәндә сажин ҡулланыу уңайлы. Ике таяҡҡа арҡылы таяҡ ҡағып эшләнә, араһы – 2 м. 13 см. тигеҙ. Күпме сажин, күпме таяҡ? – тип тә һөйләрҙәр ине.

Бәләкәй үлсәмдәрҙә – бер иле тигән берәмек – бер бармаҡ киңлеге 1,5 см.

Бер ая – 4 бармаҡ киңлеге.

Ауырлыҡ үлсәгәндә ошондай берәмектәр күберәк ҡулланыла ине.

1 әсмуха – 50 г.

1 сирек – 100 г.

1 ҡаҙаҡ – 408 гр., ярты килоға етмәй.

1 бот – был он үлсәгәндә ҡулланыла, ул 40 ҡаҙаҡ тәшкил итә, 16 кг 40 гр.

Ерҙе үлсәгәндә дисәтинә тигән исем дә ҡулланыла. 1 дисәтинә яҡынса 1 га тиң.

Ҡолас тигән дә үлсәм берәмеге бар ине, ике ҡулды йәйеп бармаҡ остарына тигеҙ булған ара. Мәҫәлән, бесән алып ҡайтҡайным санаға тейәп, киңлеге ике ҡолас, оҙонлоғо өс ҡолас булды. Бесән өйгәйнем, эҫкертемдең киңлеге 4 ҡолас, оҙонлоғо 6 ҡолас булды, – тип тә әйтерҙәр ине.

## ДИНИ МӘҒЛҮМӘТТӘР

**“Уҡыуға ингәндә тел асҡыстары бирһен” тигән доғалыҡ** (242)

Хаҡ Тәғәлә, Аллаҡайым,
Нурлы йөҙҙәремде асып,
Ҡиблаларға мин бағам.
Ҡул күтәреп һиңә ҡарап,
Иншалла, доға ҡылам.
Мөьмин мөслимә (ҡыҙҙың йә улдың исеме әйтелә)
Һинең әмерең буйынса,
Бир сабырлыҡ, сәләмәтлек,
Уң яҡтағы фәрештәләр,
Ғилем ҡапҡаларын асып,
Тел асҡыстары бирһен.
Хоҙай Тәғәлә, һинең ярҙамыңа,
Һинең ризалығыңа өмөт итеп саф күңелдән доға ҡылам. Амин!

Рамаҙан айы – мосолмандар өсөн бик мөбәрәк ай. Пәйғәмбәребеҙ Ғәлийәссәләм был айҙың башы рәхмәт, уртаһы мәғрифәт, ахырыһы йәһәннәм ғазабынан, гонаһтарҙан ҡотола алыуҙыр, ти.

Ураҙа сәхәрҙән башлап, аҡшам аҙағына ҡәҙәр дауам итә.

Ниәт ҡылғас, ифтар доғаһы уҡыла:

“Алләһүммә леке сүмтү үә әмәтү үә гәләйке тәүәккәлтү үә гәлә ризҡиһе әфтәрү. Фәғфирли йә ғәффәрү ма кәддүмтү үә мә әххартү” (“Аллаһы тәғәлә ураҙаны Һинең өсөн генә тоттом. Һиңә генә иман килтерҙем һәм Һиңә тәүәккәл ҡылдым. Эй, гонаһтарымды ғәфү итеүсе Аллам, инде лә минең әүәлге

гонаһтарымды ла, һуңғы гонаһтарымды ла ғәфү әйлә", – тип уҡыла) (119).

**Тылсым һүҙе** (226)

Бисмилланды әйтеп башла
Намаҙлыҡ алған саҡта.
Ҡөръән сүрәләрен уҡып,
Тәсбих әйткән ваҡытта.
Бисмилла тип фатиха ҡыл
Изге ҡәрҙәштәр өсөн.
Милләт тип йәнен биргән
Батырҙар хөрмәтенә.
Бисмилла тип хәйерҙәр һал
Изгеләр ҡәберенә.
Илем тиеп янып-көйгән
Шәхестәр исеменә.
Бисмилла тип сәфәр сыҡһаң,
Юлың һәр саҡ уң булыр.
Уны әйткән һәр бәндәгә
Хоҙай салауат бирер.

Әлхәмдүлиләһи тип әйтеп,
Уҙған һайын шатлыҡ көндәрең.
Хоҙайҙарҙан һора түҙемлек –
Шөкөр булыр ҡылған эштәрең, –
тип элек өйрәтә торғайны ауыл ҡарттары (9).

**"Йәннәт ашы"** (39)

(Информант оләсәһе Мәрхәбә әбейҙән яҙып алған)

Дини байрамдарҙа бешерелә торған аш, күберәк Дим буйы башҡорттарында таралған. Һәр дини байрамға "Йәннәт бәлеш"е бешереп өҫтәлгә ҡуйырға кәрәк, Хаҡ Тәғәләнең

ризалығы буйынса, бисмилланы әйтеп ауыҙ итергә кәрәк. Бешергәндә дөгөнө бер аҙ тоҙло һыуҙа ҡабарҡас, һалҡын һыу менән йыуып, иләктән үткәрергә. Ҡамырҙы – аҡ он алып, һөткә эретелгән аҡ май, бер аҙ шәкәр ҡомо, йомортҡа ҡушып болғатырға һәм тигеҙ итеп уҡлау менән йәйергә. Табаны үҫемлек майы менән һөртөп, төбөнә ҡамыр йәйелә, эслек: дөгөгә ҡушылған йөҙөм, ҡураға, ҡара емеш (тосо алынып) турала, әстерхан сәтләүеге менән арахис ҡатнашмаһы бергә бутап һалына.

Тышлыҡ ябып, ҡырҙарын матур итеп биҙәйһең. Урта өлөшөндә бер аҙ тишек ҡалдырыла. Бешеп сыҡҡас, бер ике-өс аш ҡалағы менән шыйығайтылған бал һалына. Тышлыҡты йомортҡа һарыһына эретелгән аҡ май һалып, еңелсә генә ҡанат менән һөртөп сыҡҡас, бәлеш матурланып китә.

Мәкте бәлеш өҫтөнә һибергә, йә ҡамырға ҡушып баҫырға була.

Ҡәҙер кисәһе – был төндә теләктәр теләп, тиҫбе тартып, Ҡөрьән сүрәләрен уҡығанда Хоҙай Тәғәлә барлыҡ гонаһтарҙы бөтөрөр, сауаплы булырһың (207).

## ТӨРЛӨҺӨНӘН

### Мәҙхиә, нәсихәт, васыятнамә

**Ҡан-ҡәрҙәштәргә теләктәр** (302)

(көйләп уҡыла)

Хоҙайым рәхмәте булһын,
Был өй нур менән тулһын.
Әҙерләгән табындары
Йәннәт ниғмәттәре булһын!
Дәхи алдығыҙҙа булһын
Барса ҡәрҙәштәр менән.
Һигеҙ йәннәт насип булһын,
Баҡый иман насип булһын!
Дәүләт менән , әй, ҡәрҙәштәр,
Яҡты ғүмерегеҙ үтһен
Хоҙай рәхмәте менән!
Барыбыҙҙы беҙҙәрҙе ҙурлағаны өсөн
Хоҙай Тәғәлә ҙурлаһын үҙҙәрен.

**Хат башына яҙған һүҙҙәр** (259)

Сәмәүәти, Сәмәүәти,
Һеҙгә яҙам сәләм хатын.
Фәрештәләр мәрхәмәте –
Һағынам бит ғәләмәти.

**Ҡаҙанғолға мәҙхиә** (17)

Ҡаҙанғолом – тыуған ауылым,
Һиндә булдым мин һәр саҡ.
Уйнаһам да, илаһам да,
Һиндә үтте бала саҡ.
Әрәмәлә һандуғастар
Төрлө телдә һайрайҙар.
Ә кис ҡорон һылыу ҡыҙҙар

Төрлө телдә йырлайҙар.
Ай нурында  ел тибрәлтә
Димдең көмөш тулҡынын.
Ярҙарында тыңлап торһаң,
Ишетерһең ҡурай моңон.
Ауылымдың уртаһында
Ҡыҙҙар тауы урынлашҡан.
Яуға киткән саҡта халҡым,
Тауға менеп хушлашҡан.
Яҙҙар килде ауылыма
Ҡыр ҡаҙҙары ҡайттылар.
Ҡыҙҙар тауын уранылар,
Дим һыуын һуланылар.
Яу сигенән һалдаттар ҙа
Берәм-берәм ҡайтҡандар.
Ҡыҙҙар тауын күреү менән
Шунда менеп баҫҡандар.
Ҡыҙҙар тауы булғанғамы
Ҡуйғандар унда һәйкәл ташы.
Күҙ йәштәрен һөртә-һөртә
Сыҡҡан һымаҡ әсә ҡаршы.
Изге шишмәнән һыу эсәмен,
Ер аҫтының һыуы тип.
Аҡ теләктәр теләйем мин,
Изгелеккә булһын тип.
Урмандарға кергән саҡта
Аҡ ҡайындар шаулаша.
Төрлө сәскәләр нурынан
Минең күҙҙәр ҡамаша.
Күк йөҙөндә моңло тауыш
Әллә ҡайҙан ишетелә.
Көҙ еткәнен белдерепме –

Аҡҡоштар күтәреләә.
Ҡыр ҡаҙҙары киткәнгәме –
Шик тыуҙы күңелемә.
Бөрсөк-бөрсөк тамсы булып,
Йәш тулды күҙҙәремә.
Үҙәк өҙгөс ҡош моңдары
Оҙон микән юлдары.
Биргән Хоҙай шундай яҙмыш –
Үтә ғүмер йылдары.
Киләм әле оло юлдан,
Һоҡланамын туғайға.
Бәхетлемен тим үҙемде
Ҡаҙанғолда тыуғанға.
Дәүләкәнгә барған саҡта,
Ҡаҙанғол артта ҡала.
Был яҡтарҙа халҡым йәшәй,
Бәхетлеҙер һәр бала.
Ҡаҙанғолға ҡайтҡан саҡта,
Ваҡ ҡайынлыҡты үтәм.
Ауылымды һағынып ҡайтам
Күрмәгән кеүек күптән.
Үҙ яғыма күп ҡалманы –
Айғыр ял тауын күрәм.
Гөлғәйшә тауҙарын ураһам,
Урамдарынан үтәм.
Ҡаҙанғолға кергән саҡта,
Исәнләшеп керегеҙ.
Яҡшы кешеләр йәшәй –
Шуныһын да белегеҙ.
Яҡты йөҙлө уҡытыусым
Һөнәренә көс һалды.
Тәжрибәле булғанғамы –

Үҙ “Әлифба”һын баҫты.
Башҡорттарым күп уҡыған,
“Әлифба”нан башлаған.
Ул китаптан белем алған
Наҙанлыҡтан арынған.
Күргәнең юҡтыр Ҡаҙанғолдо,
Бәлки, килеп күрерһең.
Яҙмышыңды осратырһың,
Таҡыялар үрерһең.
Әкиәттәге кеүек бында
Бәхетеңде табырһың.
Һабантуйҙа көс һынарһың,
Бәйгеләрҙә сабырһың.
Әй, дуҫҡайым, кил әле,
Ваҡытыңды бүл әле.
Ҡымыҙ эсеп ял итерһең,
Ҡаҙанғолдо күр әле.

**Башҡорт атлы бәндәләргә өндәмә, васыятнамә!** (125)

Берҙәм булыу, берҙәм булыу –
Берҙәмлеккә ни етә?
Тарҡау булған – таралырҙар,
Шул бит баштарға етә.
Аҡһаҡалдар һүҙҙәре лә –
Булғандыр бит аманат.
Дошмандарҙың күҙҙәре лә –
Шул бит булыр яманат.
Батыр булыр,  батыр данлар,
Батыр – илдең терәге.
Дәүләт ерҙе алып ҡалыр –
Шул бит беҙгә кәрәге.

Аҡһаҡалдар һүҙҙәре лә –
Булғандыр бит аманат.
Дошмандарҙың күҙҙәре лә –
Шул бит булыр яманат.

**Батырҙарға мәҙхиә** (229)

Бөркөт ояларын çаҡлай
Тауҙа, бейек ҡаяла.
Башҡортомдоң илен çаҡлай
Батырҙары ҡая ла.
Һауаларҙа бейектә лә
Бөркөт ҡанатын йәйә.
Башҡортомдоң илкәйе лә
Күп батырҙарға эйә.

**Хат башынан өҙөк, теләктәр*(11)**

Яткан окоптарым бигерәк һалҡын,
Күңелкәйемдә ут-ялҡын.
Хаттарымды алып уҡығас,
Сәләмемде ҡабул ит, апай.
Һәммәгеҙгә минән бер теләк:
Хоҙайларҙан булһын салауат.
Исәнлектәр, һаулыҡ теләйем,
Имен-аман булһын көнөгөҙ.
Һәр тыуар көн һеҙгә йәшәү дәрте бирһен,
Сәләмәтлек, бәхет китерһен.

**Яңы йыл алдынан яҙған ҡотлау хатында**

Көмөш кенә йөҙөк, алтын балдаҡ,
Затлы әйберҙәргә ҡыҙмағыҙ.

* 1941 йылдың 25 декабрендә яҙылған.

Имен-аман көндәр насип итһен Хоҙай,
Тыуған еркәйләрҙе һатмағыҙ!
Аҡ ҡыяғаҙ алып сәләм яҙам һеҙгә,
Яңы йылдың яңы таңында.
Яҙған хаттарымды уҡып сыҡҡас,
Биктимер тип иҫкә алығыҙ.

Һуғыш башланыр алдынан яратып йөрөгән ҡыҙы Хәмдиямал менән никахҡа инеп, бер нисә ай ғына йәшәп ҡалалар. Ҡатыны Дәүләкәндә мөғәллимә булып эшләй. Бер шиғыр юлдары менән яҙылған хатында ҡатынына сәләм әйтергә ҡуша:

Сәскә атып емеш бирәлмәне,
Мөхәббәткәйемдең гөлдәре.
Ҡош телендәй генә сәләм еткерегеҙ,
Хәмдиямал тигән һылыуға.

*Иҫкәрмә*: Информант был материалдарҙы Исмәғил ауылында йәшәүсе Мәғүзә апаһында һаҡланған хаттар буйынса килтерә. Хаттар латин хәрефтәре менән яҙылған.

**Асылыкүлгә мәҙхиә** (298)

Асылыҡай буйы ҡамышлыҡ,
Төйәк иткән уны күп ҡоштар.
Тулҡындары уйнап ярға ҡаға,
Ағастары тора алҡышлап.
Аяҙ төндә алтын тараҡ һымаҡ,
Ай йылтырай тын күл өҫтөндә.
Таң атҡанда ҡояш йым-йым килә
Аллы-гөллө йәйғор төҫөндә.
Матур тәбиғәте – бер мөғжизә,
Һауаһы саф – иркен һулышым.
Яр буйында шишмә сиртеп сыға

Күҙ йәшеләй булып тулышып.
Шундай гүзәл ерҙә баҫып торам,
Хәтер-хыялдарҙан уйылып.
Асылыкүлдән етәкләшеп икәү
Алдарыма килеп сығыр кеүек
Заятүләк менән Һыуһылыу.

**Ауылыма мәҙхиә** (260)

Тыуған ерен, тыуған ауылын маҡтап,
Кемдәр генә шиғыр яҙмаған?
Өҙөлөп һағынғанда шиғырҙарын
Кемдәр генә йырға һалмаған?
Минең дә бер изге төйәгем,
Уға маҡтау йырлау теләгем.
Мәкәш тиҙәр минең ауылымды.
Имеш, борон-борон саҡтарҙа
Мәкәш атлы егет нигеҙ һалған,
Беренсе лә булып ошо яҡтарҙа.
Оҡшатҡандыр, бәлки, тәбиғәтен,
Бейек таулы шишмә-йылғаһын.
Емеш-еләк тулы туғайҙарын,
Урмандарын, күген, һауаһын.
Һәм шул көндән ауылым Мәкәш булып
Тороп ҡалған халыҡ телендә.
Изге төйәк булып ҡала килә
Бик күптәргә ауылым бөгөн дә.
Тәбиғәте матур ауылымдың
Урмандары емеш-еләкле.
Яландары иркен, һауаһы саф,
Туғайҙары йәмле, тирәкле.
Ауылым ҡунаҡтары бер күреүҙә
Оҡшаталар үҙен, маҡтайҙар.

Һау күңелле, асыҡ йөҙлө халыҡ,
Йәшәй минең тыуған яҡтарҙа.
Эшкә батыр, төҫкә матур улар,
Хеҙмәт менән биҙәй һәр көндө.
Матур итеп ял да итә белә,
Байрамдары үтә күңелле.
Матурлана ауыл, үҫә бара,
Ҡалҡып сыға яңы урамдар.
Ситтә бәхет эҙләп йөрөмәйҙәр
Минең ауылымда тыуғандар.
Тыуған ерҙәрендә тамыр йәйеп,
Ғаилә ҡора, гөрләп йәшәйҙәр.
Киләсәккә яҡты өмөт менән
Изге ниәт менән атлайҙар.
Мәкәш, тиҙәр минең ауылымды –
Минең өсөн мәңге изге ер.
Ауылымдың бәпкә үләненән,
Шишмә һыуы, шифа һауаһынан
Башлана ул миңә Тыуған ил.

**Теләк теләү** (289)

Эй, Хоҙайым, бир, Хоҙай,
Донъя-әхирәт.
Мәхсүҙемде бир, Хоҙай.
Йә илаһи иллалаһи,
Йөрө йөрөгән ереңдә.
Йә иллаһи иллалаһи,
Нур булыр ул гүреңдә.
Йә иллаһи иллаһи,
Һигеҙ ожмах асҡысы.
Йә иллаһи иллаһи,
Тамуҡ утын баҫҡысы!

**Туғандарға бер һүҙ** (305)
(Информант өләсәһе Сәфәрбаныу
исемле әбейҙән отоп алған)

Эй, туғандар, туғандар,
Таралышып бөтмәгеҙ.
Бер туғанды үҙ итмәйсә,
Төрткөләшеп бөтмәгеҙ.

Эй, туғандар, туғандар,
Татыу ғүмер итегеҙ.
Тар күңелле тартай кеүек
Тарткылашып ятмағыҙ.

Эй, туғандар, туғандар,
Тапҡаның бер итегеҙ.
Булғанына шөкөр ҡылып,
Үрнәк донъя көтөгөҙ.

Эй, туғандар, туғандар,
Тәсбих әйтеп йөрөгөҙ.
Ҡыуаныслы хәбәр килһә,
Шатланышып көлөгөҙ.

**Әсә нәсихәте** (265)
(1975 йылда Венгр экспедицияһы яҙып алған)

Балам, һиңә өмөт ҙур,
Тороғоҙ, балам, инде тор.
Ғалим булһаң – булырһың
Нур өҫтөнә яҡты нур.
Оҙон ғүмер һорайым,
Бирһен шуны Хоҙайым.

Һәр кешегә булһа ине
Асыҡ йөҙлө малайым.

Һәр кешегә сәләм бир,
Яҡшы икән балам, тир.
Зирәк бала, бик тырыш
Юкһа артҡа ҡалам тир.

Балам, булма бысраҡ,
Бысраҡтан бул йыраҡ.
Өҫкә кейгән кейемдәрең
Ҡарҙар кеүек булһын аҡ.

## ИНФОРМАНТТАР ИСЕМЛЕГЕ
## ҠАҘАНҒОЛ АУЫЛЫ

1. Абдрахманова Ғәйнамал Ҡунаҡкол ҡыҙы, 1906 йылғы
2. Абдрахманова Зөһрә Ҡотлобулат ҡыҙы, 1904 йылғы
3. Абдрахманов Ғәбдрәхим Абдрахман улы, 1897 йылғы
4. Абдрахманова Мәхүпъямал Сәғәҙәткирәй ҡыҙы, 1884 йылғы, торна нәҫеле
5. Аҙнағолов Зиннур Минеғәли улы, 1938 йылғы, ҡуян нәҫеле
6. Аҙнағолов Миниғәли Аҙнағол улы, 1909, ҡуян нәҫеле
7. Аҙнағолова Мәғүзә Ғәлиулла ҡыҙы, 1910 йылғы
8. Атнабаева Лилиә Ғәфүр ҡыҙы, 1950 йылғы, ҡойҡа нәҫеле
9. Баймырҙина Ғилемзаза Хәмиҙулла ҡыҙы, 1918 йылғы, байраҡай нәҫеле
10. Бәшәрова Миннемәрйәм Мәсәлим ҡыҙы, 1924 йылғы
11. Ғәлин Биктимер Мөхәмәтғәли улы, 1909 йылғы
12. Ғәлин Тимербай Мөхәмәтғәли улы, 1911 йылғы. Һуғыш йылдарына тиклем Ҡаҙанғол ауылында ете йыллыҡ мәктәптә география фәнен уҡыта, тыуған яҡты өйрәнеү буйынса күп эш башҡарған
13. Ғәлина Маһира Мәүлийәр ҡыҙы, 1883 йылғы
14. Ғәлиуллина Һәҙиә Харис ҡыҙы, 1932 йылғы, терәккәй нәҫеле
15. Ғәлиуллина Байбикә Ғиндалиф ҡыҙы, 1925 йылғы
16. Заһиҙуллин Вәлиулла Хәмиҙулла улы, 1918 йылғы
17. Заһиҙуллин Миҙхәт Тимерйәр улы, 1967 йылғы, ҫарт нәҫеле
18. Заһиҙуллин Хәмиҙулла Заһиҙулла улы, 1894 йылғы, ҫарт нәҫеле
19. Заһиҙуллина Тимербикә Камалетдин ҡыҙы, 1934 йылғы
20. Исмәғилева Мәғрифә Шәйәхмәт ҡыҙы, 1914 йылғы
21. Исмәғилев Сафа Исмәғил улы, 1906 йылғы

22. Ишдәүләтов Байбулат Солтан улы, 1911 йылғы
23. Ишмөхәмәтов Хәбиәхмәт Баймөхәмәт улы, 1907 йылғы
24. Йәғәфәров Абдулла Абдрахман улы, 1917 йылғы
25. Йәғәфәрова Кинйәбикә Таип ҡыҙы, 1898 йылғы
26. Камалова Мәрйәм Хәйретдин ҡыҙы, 1924 йылғы
27. Киллейәров Сәрүәр Аллаяр улы, 1937 йылғы, ҡуян нәҫеле
28. Киллейәрова Нәғимә Ғәйнулла ҡыҙы, 1901 йылғы
29. Ҡотлогилдина Йәүһәр Ғайса ҡыҙы, 1901 йылғы, ҡойҡа нәҫеленән
30. Минибаева Гөлниса Минихан ҡыҙы, 1912 йылғы, сәрмә нәҫеле
31. Миниғәлиева Сәлиха Ғиниәт ҡыҙы, 1928 йылғы
32. Миниғәлина Гөлсөм Әхмәҙулла ҡыҙы, 1903 йылғы
33. Мөкминова Шәмсиямал Минияр ҡыҙы, 1901 йылғы
34. Мөхәмәтғәлин Ғәфурбай Мөхәмәтғәли улы, 1918 йылғы, ҡойҡа нәҫеле
35. Мөхәмәҙиева Сафура Шәйғәрҙән ҡыҙы, 1912 йылғы
36. Мөхтәруллина Йөҙлөбикә Мәсәлим ҡыҙы, 1903 йылғы
37. Мөхтәруллина Сибәргөл Ҡотлояр ҡыҙы, 1906 йылғы, сәрмә нәҫеленән
38. Рәжәпова (Әйүпова) Рәлиә Рәмил ҡыҙы, 1955 йылғы
39. Рәхимова Илида Ғәфурбай ҡыҙы, 1965 йылғы
40. Рәхимова Минибикә Таһир ҡыҙы, 1904 йылғы, ҫарт нәҫеле
41. Садыҡова Ҡорбанбикә Ишмөхәмәт ҡыҙы, 1908 йылғы
42. Сафина Сәрбиямал Мөхәмәтсадиҡ ҡыҙы, 1891 йылғы
43. Солтанғәлина Гөлшәйҙә Ислам ҡыҙы, 1908 йылғы, ҡойҡа нәҫеленән
44. Солтанғәлина Мәймүнә Хисамитдин ҡыҙы, 1886 йылғы
45. Солтанғәлина Мөслимә Ғайса ҡыҙы, 1878 йылғы
46. Солтанғәлина Нәҡиә Ҡотлоәхмәт ҡыҙы, 1910 йылғы
47. Сәйфетдинов Ғилметдин Сәйфетдин улы, 1900 йылғы

48. Сәйфетдинова Бәһиә Ғәйнетдин ҡыҙы, 1938 йылғы, сәрмә нәҫеле

49. Сәйфетдинова Зәйнәп Миңлегәрәй ҡыҙы, 1917 йылғы

50. Сәйфетдинова Мәүлетбикә Сәйфетдин ҡыҙы, 1917 йылғы

51. Сәлимйәнова Минзифа Имаметдин ҡыҙы, 1915 йылғы

52. Таипова Факиһа Сәйфетдин ҡыҙы, 1907 йылғы, бөрйән- әтәмбәй нәҫеле

53. Хәмәҙиев Кәшәф Хәмәҙи улы, 1921 йылғы

54. Хәмәҙиева Зайҙа Хәбибулла ҡыҙы, 1916 йылғы

55. Хоҙайәхмәтов Нуриәхмәт Хоҙайәхмәт улы, 1896 йылғы

56. Хоҙайәхмәтова Рәҡиә Сәйфетдин ҡыҙы, 1906 йылғы

57. Шәңгәрәйева Миңлебикә Туйымбәт ҡыҙы, 1909 йылғы

58. Шәмсетдинова Минибикә Шәүәли ҡыҙы, 1908 йылғы, торна нәҫеле

59. Әбделғәлимов Тимербулат Сәһәриәр улы, 1940 йылғы

60. Әбделғәлимова Камал Аҙнағол ҡыҙы, 1901 йылғы, ҡуян нәҫеленән

61. Әхмәтова ХәҙисәАбдрахман ҡыҙы, 1906 йылғы

62. Юлмөхәмәтова Хәмдиә Әсфәндийәр ҡыҙы, 1896 йылғы, ҫарт нәҫеленән

## ИҪКЕ ЯППАР АУЫЛЫ

63. Аллаярова Розалия Мәхмүт ҡыҙы, 1971 йылғы

64. Биктимеров Нәғимйән Биктимер улы, 1906 йылғы

65. Булатова Сәйҙә Сабирйән ҡыҙы, 1907 йылғы

66. Гарипова Факия Мырҙахан ҡыҙы, 1930 йылғы, әжекәй нәҫеле. Тирә-яҡта оҫта ҡуллы мейес сығарыусы, уны белмәгән кеше юҡ.

67. Ғабдрахманова Миңлеямал Рамазан ҡыҙы, 1896 йылғы

68. Ғилманов Мөьмин Ишан улы, 1894 йылғы. Сәсән, 1914 йылда Иҫке Яппар ауылында яңы типтағы мәктәп асыусы мулла.

69. Зарипов Әбелфазыл Зариф улы, 1902 йылғы, ҡалмаҡ нәҫеле

70. Зарипов Миҙхәт Шәйәхмәт улы, 1927 йылғы, ҡалмаҡ нәҫеле

71. Зарипова Зияза Вәли ҡыҙы, 1930 йылғы

72. Зарипова Камал Билал ҡыҙы, 1924 йылғы, ҡалмаҡ нәҫеле

73. Зарипова Мәрйәм Уҫман ҡыҙы, 1918 йылғы

74. Зарипова Мәрхәбә Мостафа ҡыҙы, 1896 йылғы

75. Зарипова Миниямал Вәли ҡыҙы, 1896 йылғы

76. Йомағолова (Әхмәрова) Минниса Әбделғәзиз ҡыҙы, 1906 йылғы

77. Йәрембәтова(Шәүәлиева) Хәҙисә Ҡотлобулат ҡыҙы, 1924 йылғы, бөрйән-әтәмбәй нәҫеле

78. Кинйәғолова Ләйлә Сәмиғулла ҡыҙы, 1939 йылғы, бөрйән әтәмбәй нәҫеле

79. Кинйәбулатова Фәнзилә Мәсәлим ҡыҙы, 1936 йылғы, ҡауҙы нәҫеле

80. Ҡадырова Ғәйниямал Ғиндалиф ҡыҙы, 1900 йылғы

81. Ҡотлояров Сафуан Уйылдан улы, 1908 йылғы

82. Минибаева Фатима Ишмөхәмәт ҡыҙы, 1921 йылғы.

83. Минийәров Сәйетғәли Ғариф улы, 1910 йылғы, ҡалмаҡ нәҫеле

84. Минийәрова Көзифа Ғариф ҡыҙы, 1912 йылғы. Ҡалмаҡ нәҫеле, Ҡырҡөйлө мең ырыуы.

85. Минийәрова Матургөл Миңлеғол ҡыҙы, 1898 йылғы

86. Минийәрова Сания Ямалетдин ҡыҙы, 1908 йылғы, дүәрән (дворян) нәҫеле

87. Миранов Низаметдин Ямалетдин улы, 1910 йылғы, дүәрән (дворян) нәҫеле

88. Мостафина Ғәтифә Муллакилде ҡыҙы, 1896 йылғы, дүәрән (дворян) нәҫеле

89. Мостафина Миләүшә Әхнәф ҡыҙы, 1959 йылғы

90. Мөхәмәтғәлина Тәслимә Ғүмәр ҡыҙы, 1953 йылғы

91. Мөхәррәмова Гөлмәҙинә Хәйбулла ҡыҙы, 1930 йылғы

92. Муллағәлина Ғәйниямал Мөхәмәтрәхим ҡыҙы, 1898 йылғы

93. Мәхмүтова Гөлйемеш Хәниф ҡыҙы, 1978 йылғы, дөйә нәҫеле

94. Насыров Сәләх Әбделғәзиз улы, 1906 йылғы

95. Насырова Минебикә Миниәхмәт ҡыҙы, 1908 йылғы. Ҡырҡөйлө мең ырыуы, ябалаҡ нәҫеле

96. Ноғоманова Срур Искәндәр ҡыҙы, 1929 йылҡы, ҡыҙылбаш нәҫеле

97. Ноғоманова Ғәзизә Солтангәрәй ҡыҙы, 1928 йылғы, ябалаҡ нәҫеле

98. Рафикова Асия Хәбиәхмәт ҡыҙы, 1921 йылғы

99. Ризуанов Миңлеғәле Ризуан улы, 1901 йылғы

100. Ризуанова Ғәйниә Ғөбәйҙулла ҡыҙы, 1910 йылғы

101. Рәхимова Сәкинә Миниәхмәт ҡыҙы, 1901 йылғы

102. Рәжәпов Фларит Рәмил улы, 1949 йылғы

103. Рәжәпова Әклимә Миңлегәрәй ҡыҙы, 1928 йылғы

104. Рәжәпова Әсҡәпъямал Миниғәлим ҡыҙы, 1902 йылғы, ҡауҙы нәҫеле

105. Сафина Айһылыу Хәниф ҡыҙы, 1980 йылғы, дөйә нәҫеле

106. Солтанов Сәмиғулла Солтанғәли улы, 1908 йылғы, бөрйән-әтәмбәй нәҫеле. Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, 112 башҡорт кавалерия яугиры, Башкомвуз бөткән.

107. Солтанов Тәлғәт Ҡорбанғәли улы, 1936 йылғы, бөрйән-әтәмбәй нәҫеле.

108. Солтанов Ҡорбанғәле Солтан улы, 1905 йылғы

109. Солтанова Минъямал Әбделғәлим ҡыҙы, 1946 йылғы, бөрйән-әтәмбәй нәҫеле

110. Солтанова Мәғүзә Ғабдрахман ҡыҙы, 1907 йылғы, зыяҡай нәҫеле

111. Солтанова Рәмилә Тәлғәт ҡыҙы, 1963 йылғы, бөрйән-әтәмбәй нәҫеле

112. Солтанова Суфия Сәмиғулла ҡыҙы, 1946 йылғы, бөрйән-әтәмбәй нәҫеле

113. Сөләймәнова Алмаҡай Ғабдрахман ҡыҙы, 1909 йылғы

114. Төйөмбәтова Миниғаян Ҡотлобулат ҡыҙы, 1934 йылғы

115. Тәүлийәрова Ғәрифә Мөхәмәтрәхим ҡыҙы, 1902 йылғы. Иҫкесә уҡый-яҙа белә. Тирә-яҡта данлыҡлы быйма, кейеҙ итек, балаҫ һуғыу оҫтаһы.

116. Тәүлийәрова Кинйәбикә Ҡолмөхәмәт ҡыҙы, 1911 йылғы

117. Усманова Вәсилә Биктимер ҡыҙы, 1928 йылғы

118. Усманова Ҡорбанбикә Сәитғәли ҡыҙы, 1889 йылғы

119. Усманова Мәфтуха Ҡәнәфей ҡыҙы, 1909 йылғы, ҫәпрә нәҫеле

120. Фәттәхова Хәлимә Сәрүәр ҡыҙы, 1933 йылғы. Ахун ауылында тыуған, Әбделмән нәҫеле Ҡырҡөйлө меҢ ырыуынан

121. Фәзлиәхмәтов Миңлегәрәй Фазлиәхмәт улы, 1894 йылғы. Иҫкесә, төрки, ғәрәп яҙмаларын яҡшы уҡый, Ҡөрьән китабы сүрәләренең күбеһен яттан белә.

122. Фәзлиәхмәтова Фатима Миниғол ҡыҙы, 1893 йылғы

123. Фәзлиәхмәтова Сәлимә Хәсән ҡыҙы, 1940 йылғы, шырау нәҫеле

124. Хисмәтуллина Фәрзәнә Хәләф ҡыҙы, 1966 йылғы

## ЯҢЫ ЯППАР АУЫЛЫ

125. Аллағолов Миниғәли Мөхәмәтдин улы, 1915 йылғы

126. Ғайсина Миниямал Яхъя ҡыҙы, 1923 йылғы, аҫылҡай

127. Ҡорманаев Сәғит Ғәлиәхмәт улы, 1952 йылғы

128. Ҡужина Флүрә Миңлебай ҡыҙы, 1932 йылғы

129. Миниғузина Мәрғүбә Минеғәли ҡыҙы, 1907 йылғы. Яңы Мерәҫ ауылынан Яңы Яппарға килен булып төшкән.

130. Минниәхмәтов Хәбиәхмәт Ғәлиәхмәт улы, 1946 йылғы

131. Миниәхмәтова Ҡунаҡбикә Минийәр ҡыҙы, 1902 йылғы

132. Миңлеәхмәтова Рәйсә Миңлебулат ҡыҙы, 1948 йылғы

133. Мирсаева А.

134. Мөләков Зөфәр Рәхимғол улы, 1950 йылғы

135. Мәғәсүмова Вәлиә Хәмзә ҡыҙы, 1923 йылғы, сыраҡай нәҫеле

136. Мәғәсүмова Миниғәйшә Сотанғәли ҡыҙы, 1926 йылғы, ябалаҡ нәҫеле

137. Рәсәйева Зөбәйҙә Йомағужа ҡыҙы, 1928 йылғы

138. Сафуанова Сибәрбикә Күсемхан ҡыҙы, 1906 йылғы

139. Солтанова Ҡарлуғас Мостафа ҡыҙы, 1903 йылғы

140. Солтанғолов Миниүәли Солтанғол улы, 1903 йылғы

141. Солтанғолова Закира Хөснулла ҡыҙы, 1917 йылғы

142. Солтанморатова Миңһылыу Сәитғәли ҡыҙы, 1927 йылғы

143. Сыртланов Баһаутдин Мөхөтдин улы, 1912 йылғы

144. Сыртланов Тимерйән Хәйретдин улы, 1912 йылғы

145. Сыртланов Шәрәфетдин Хәйретдин улы, 1895 йылғы

146. Сәфиуллин Рәис Ғәлимйән улы, 1964 йылғы, байраҡай нәҫеле

147. Сәфиуллина Мәликә Зариф ҡыҙы, 1926 йылғы

148. Таһиров Ниғмәтулла Сәфиулла улы, 1896 йылғы

149. Таһирова Мәндүҙә Ниғмәтулла ҡыҙы, 1925 йылғы, оҫта ҡумыҙ яһаусы

150. Хәлиуллин Хәтмулла Ғабдулла улы, 1931 йылғы

151. Хәлиуллина Ғәкиҙә Хәбибулла ҡыҙы, 1925 йылғы, дүәрән нәҫеле

152. Шаһиев Әхмәт Шаһи улы, 1897 йылғы

153. Шаһиев Талип Әхмәт улы, 1921 йылғы

154. Шаһиева Мәғмүзә Тимербулат ҡыҙы, 1920 йылғы, терәккәй нәҫеле

155. Шәйбәков Ғәбделнасир Баймөхәмәт улы, 1914 йылғы

156. Әхмәҙиева Сәрбинур Миниәхмәт ҡыҙы, 1932 йылғы

157. Әхмәтйәнов Рәүф Миңлебулат улы, 1946 йылғы

158. Әхмәтйәнова Зөлфиә Рәүф ҡыҙы, 1976 йылғы

159. Әхмәтйәнова Нәфисә Ахун ҡыҙы, 1909 йылғы

## ИСМӘҒИЛ АУЫЛЫ

160. Ғайсин Яхъя Ғайса улы, 1895 йылғы, аçылҡай нәçеле, белемле, Ырымбур кадет корпусын тамамлаған, шәжәрәһе һаҡланған.

161. Ғайсина Миннинур Шәйгәрҙән ҡыҙы, 1919 йылғы, аçылҡай нәçеле

162. Ғайсина Хәҙисә Мөхәмәтйән ҡыҙы, 1901 йылғы

163. Ғәлиәхмәтова Мәүлиха Күсәрбай ҡыҙы, 1910 йылғы

164. Сарбаева Хөсниямал Әхмәтсәлим ҡыҙы, 1915 йылғы

165. Сәхибгәрәева Файза Миңлеғәле ҡыҙы, 1921 йылғы

166. Хөснөтдинова Мәғүзә Мөхәмәҙғәли ҡыҙы, 1907 йылғы, ҡойҡа нәçеле

167. Шафиҡова Зөбәйҙә Шафиҡ ҡыҙы, 1916 йылғы

168. Әйүпов Әнүәр Яҡуп улы, 1919 йылғы (атаһы Әйүпов Яҡуп Әйүп улынан, 1875 йылғы, яҙып алған)

## ҠӘҘЕРҒОЛ АУЫЛЫ

169. Килмөхәмәтова Вәзифа Әлемғол ҡыҙы, 1902 йылғы

170. Килмөхәмәтова Ғәрифә Әлемғол ҡыҙы, 1908 йылғы

171. Хәмитов Миңлегәрәй Искәндәр улы, 1906 йылғы

172. Хәмитова Зөһрә Ғәрифулла ҡыҙы, 1905 йылғы

173. Әбелханова Суфия Сәйетгәрәй ҡыҙы, 1910 йылғы

## ИÇКЕ ӨÇӘЙЕН АУЫЛЫ

174. Абыҙгилдина Ғәйниямал Минефазыл ҡыҙы, 1911 йылғы

175. Ғәзизова Минизада Кәбир ҡыҙы, 1926 йылғы

176. Мөхәррәмова Кинйәбикә Ҡотлоәмбәт ҡыҙы, 1901 йылғы

177. Мусина Фәриҙә Шәмсетдин ҡыҙы, 1929 йылғы

178. Рәхимова Шәмсиямал Шәйхетдин ҡыҙы, 1916 йылғы

179. Сәғәҙәтгәрәев Кинйәбай Шәңгәрәй улы, 1910 йылғы

180. Сәлимгәрәева Фәрхинур Сәитгәрәй ҡыҙы, 1923 йылғы, сирмеш нәçеле

181. Сәлимгәрәева Фәүзиә Сәитгәрәй ҡыҙы, 1930 йылғы, сирмеш нәҫеле

## ЯҢЫ ӨҪӘЙЕН АУЫЛЫ

182. Ҡорбанғәлиева Гөлнәфис Ғирфан ҡыҙы, 1940 йылғы
183. Насыров Әхмәҙулла Ғәфүр улы, 1914 йылғы
184. Насырова Рәкиә Ҡаһарман ҡыҙы, 1917 йылғы
185. Төхвәтуллина Мәрзиә Мөхәррәм ҡыҙы
186. Уйылданова (Күсәрбаева) Мәфтуха Ғирфан ҡыҙы, 1925 йылғы
187. Фазылов Хәмит Абдрахман улы, 1929 йылғы
188. Фазылова Фәүзиә Вәли ҡыҙы, 1933 йылғы

## ЯППАР ЙӘНБӘГЕ АУЫЛЫ

189. Ҡотлоева Ғәйниямал Шәйарҫлан ҡыҙы, 1892 йылғы
190. Минибаева Сибәргөл Солтанбәк ҡыҙы, 1904 йылғы

## ЯҢЫ ЙӘНБӘК АУЫЛЫ

191. Сәфиуллина Мәүлиха Зариф ҡыҙы, 1910 йылғы
192. Уразбахтина Әлиә Әскәт ҡыҙы, 1975 йылғы
193. Хафизова Гөлйыһан Сәлимгәрәй ҡыҙы, 1904 йылғы, мырҙай нәҫеле
194. Хәйруллина Гөлсөм Сәитғәли ҡыҙы, 1915 йылғы

## ИҪКЕ МЕРӘҪ АУЫЛЫ

195. Ғәббәсова Гүзәл Муллағәли ҡыҙы, 1966 йылғы
196. Ғәйнуллин Фәтҡулла Ғәйфулла улы, 1888 йылғы
197. Дәүләтгәрәева Вазифа Әҙелгәрәй ҡыҙы, 1907 йылғы
198. Зөбәйҙуллин Вәлим Сәлимгәрәй улы, 1915 йылғы
199. Сөләйманова Мәфтуха Миңлеғәли ҡыҙы, 1909 йылғы
200. Усманов Ибраһим Ибраһим улы, 1905 йылғы
201. Усманова Хәнифә Садиҡ ҡыҙы, 1910 йылғы
202. Хәкимова Алмабикә Әхмәт ҡыҙы, 1895 йылғы
203. Хәкимова Мәрйәм Әхмәтйән ҡыҙы, 1923 йылғы

## ЯҢЫ МЕРӘҪ АУЫЛЫ

204. Ғәббәсова Минсара Ҡасим ҡыҙы, 1928 йылғы

205. Дәүләтова Факия Ғиниәтулла ҡыҙы, 1926 йылғы

206. Суфиянова Миңлеямал Хәкимйән ҡыҙы, 1917 йылғы

## ДҮРТӨЙЛӨ АУЫЛЫ

207. Ғәбделмәнов Ҡотлоәхмәт Ғәлиәкбәр улы, 1897 йылғы. Уҫман аймағы, бөрйән ырыуы. Иҫке төркисә яҡшы уҡый белә.

208. Ғәбделмәнов Садиҡ Хәйрулла улы, 1969 йылғы

209. Ғәбделмәнова Рәйсә Ҡотлоәхмәт ҡыҙы, 1929 йылғы. Уҫман аймағы нәҫеле, бөрйән ырыуынан

210. Күсемханова Динә Аллаяр ҡыҙы, 1926 йылғы

211. Минибаев Минихан Минихажи улы, 1932 йылғы, бөрйән нәҫеле

212. Минибаева Рәйсә Әхмәтғәли ҡыҙы, 1941 йылғы, Уҫман аймағы, бөрйән ырыуы

213. Мәүлийәров Валерйән Әхмәтйән улы, 1954 йылғы. Сығышы – бөрйән ырыуы, өндәшмәҫ нәҫеленән

214. Нәғимова Сафия Әбделнәғим ҡыҙы, 1925 йылғы

215. Сәфәрғәлин Ҡотлоәхмәт Сәфәрғәле улы, 1904 йылғы

216. Тиникеев Шаймырҙан Ғәлимырҙан улы, 1923 йылғы

217. Әбделмәнов Батыргәрәй Әбделмән улы, 1910 йылғы

218. Әбделмәнова Мәрйәм Ҡасим ҡыҙы, 1925 йылғы

219. Әбделнәғимова Гөлнәфисә Таип ҡыҙы, 1905 йылғы

220. Әхмәҙиев Закуан Әхмәтйән улы, 1932 йылғы, оҫта ҡурайсы

221. Әхмәтова Шәмсиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы, 1910 йылғы

222. Юнысов Миңйән Имаметдин улы, 1935 йылғы

## ИҪКЕ ШӘРИП АУЫЛЫ

223. Галина Ғәйшә Муллабай ҡыҙы, 1916 йылғы

224. Кузеева Фәриҙә Шәмсетдин ҡыҙы, 1934 йылғы

225. Латыпова Рәшиҙә Бәкир ҡыҙы, 1936 йылғы

226. Минибаев Мотаһар Минибай улы, 1922 йылғы,
227. Минибаева Туйбикә Вәлиәхмәт ҡыҙы, 1916 йылғы
228. Минийәрова Ынйыбикә Вәлиәхмәт ҡыҙы, 1922 йылғы
229. Минийәров Мөхтәр Миннийәр улы, 1924 йылғы
230. Ноғоманова Миңлегөл Солтангәрәй ҡыҙы, 1948 йылғы
231. Ноғоманова Фатима Миңнемөхәмәт ҡыҙы, 1900 йылғы
232. Әсфәндийәров Ҡотлояр, мулла-сәсән, 1892 йылғы

## ЯҢЫ ШӘРИП АУЫЛЫ

233. Фәхретдинов Йәғәфәр Шәмсетдин улы, 1926 йылғы. Тирә-яҡта данлыҡлы умартасы (40-50-ләп умарта тота)
234. Шәйгәрҙәнова Ғәйниямал Яхъя ҡыҙы, 1929 йылғы

## ИГЕНСЕ АУЫЛЫ

235. Ғабдрахманов Абдрахман Мөхәмәтдин улы, 1892 йылғы. Ҡаңлы-табын ырыуы, буранғол нәҫеленән

## ИҪКЕ КӨРМӘНКӘЙ АУЫЛЫ

236. Арыҫланбәков Миниүәли Арыҫланбәк улы, 1918 йылғы
237. Аҡбирҙин Хәмит Нәбиулла улы, 1909 йылғы
238. Булатова Римма Биктимер ҡыҙы, 1967 йылғы
239. Сөләйманова Мөһөрбаныу Суфиян ҡыҙы, 1915 йылғы
240. Шафиҡова Рәшиҙә Яҡуп ҡыҙы, 1924 йылғы

## АХУН АУЫЛЫ

241. Нәғимйәнова Хәмдиә Ғәбделгәрәй ҡыҙы, 1909 йылғы

## ГОРЧАК (КӨРШӘК) АУЫЛЫ

242. Галина Миңһылыу Миңлегәрәй ҡыҙы, 1924 йылғы.
243. Ғабдрахманова Нурзидә Фәйзрахман ҡыҙы, 1906 йылғы
244. Тимерова Фәрхизада Миңлеғәле ҡыҙы, 1907 йылғы
245. Фәттәхова Йәмилә Миннеәхмәт ҡыҙы, 1902 йылғы

## МӘКӘШ АУЫЛЫ

246. Вәлиуллин Биктимер Вәлиулла улы, 1894 йылғы
247. Вәлиуллина Сабира Әхмәт ҡыҙы, 1902 йылғы
248. Ғәниева Хәҙисә Мөхәмәтсадиҡ ҡыҙы, 1928 йылғы
249. Ғилманов Биктимер Мөхәмәтсафа улы, 1918 йылғы
250. Ғилманов Сафа Ғилем улы, 1882 йылғы
251. Ғилманова Миңлехәжәр Әһлиулла ҡыҙы, 1918 йылғы
252. Зыяева Ғәйниямал Шәйгәрҙән ҡыҙы, 1889 йылғы
253. Зыяева Зөләйха Закир ҡыҙы, 1927 йылғы
254. Йосопова Сафаҡай Сәғәҙәткирәй ҡыҙы, 1892 йылғы
255. Йосопова Фәнисә Мәүлитҡол ҡыҙы, 1958 йылғы, уйылдан нәҫеле
256. Ҡадырова Рәзилә Кинйәбай ҡыҙы, 1955 йылғы, сыуаш нәҫеле
257. Ҡолоева Фәриҙә Сәйетғәли ҡыҙы, 1951 йылғы, ҡалмаҡ нәҫеле
258. Ҡотлоәхмәтова Рәшиҙә Хисаметдин ҡыҙы, 1912 йылғы, урмансы нәҫеле
259. Рәшитова Әҡлимә Мөхәмәтхәбиб ҡыҙы, 1928 йылғы
260. Саматова Гөлшат Ҡотлоәхмәт ҡыҙы, 1952 йылғы, ыраҡай нәҫеле
261. Солтанова Миңзифа Минийәр ҡыҙы, 1911 йылғы, сыуаш нәҫеле
262. Әхмәтрәхимова Әлисә Вәкил ҡыҙы, 1988 йылғы, ыраҡай нәҫеле
263. Әхмәтрәхимова Рәйҙә Зәйҙулла ҡыҙы, 1960 йылғы

## ҠЫҘРАС АУЫЛЫ

264. Алтынғужина Хәҙисә Ғәфүр ҡыҙы, 1913 йылғы, ил ҡаймағы нәҫеле
265. Гәрәева Сәлиха Мөхәмәтрәфиҡ ҡыҙы, 1911 йылғы, тауыҡ нәҫеленән
266. Әкимбәтова Ғәйшә Мостафа ҡыҙы, 1930 йылғы

## САПАЙ АУЫЛЫ

267. Абдрахманов Солтан Абдрахман улы, 1891 йылғы
268. Хәбиәхмәтов Миңлеәхмәт Хәжиәхмәт улы, 1922 йылғы
269. Хәбиәхмәтова Менәүәрә Вәлиәхмәт ҡыҙы, 1930 йылғы
270. Әминева Гәүһәр Мөхитдин ҡыҙы, 1933 йылғы

## ТАШЛЫ АУЫЛЫ

271. Баймурзина Асия Тәминдәр ҡыҙы, 1953 йылғы

## БОРАНҒОЛ АУЫЛЫ

272. Ҡорбанғәлиева Заһира Хажиәхмәт ҡыҙы, 1934 йылғы
273. Ҡотлогилдина Ғәйшә Минимөхәмәт ҡыҙы, 1928 йылғы
274. Ҡотлогилдина Гөлъямал Бикмөхәмәт ҡыҙы, 1886 йылғы
275. Мөхәмәтйәнова Талиә Абдулла ҡыҙы, 1933 йылғы
276. Шафиҡова Фәүзиә, 1931 йылғы

## АЛҒА АУЫЛЫ

277. Арыҫланов Яҡуп Аҫылгәрәй улы, 1926 йылғы
278. Мөхәмәткирәйева Тимербикә, 1916 йылғы
279. Мөхәррәмов Зыяйетдин Мөхәррәм улы, 1885 йылғы
280. Сәлихова Фәрхиямал Вафиҡ ҡыҙы, 1910 йылғы
281. Фәйзуллина Сәлимә Фәйзулла ҡыҙы, 1912 йылғы

## ЯҢЫ ТОРМОШ АУЫЛЫ

282. Ҡасимов Солтан Ҡасим улы, 1896
283. Әхмәрова Мөнәфирә Муллагәрәй ҡыҙы, 1924 йылғы

## ЯҢЫ АҠҠОЛАЙ АУЫЛЫ

284. Бикбулатов Рәхимйән Бикбулат улы, 1895 йылғы
285. Садиҡов Мөхәмәҙи Садиҡ улы, 1897 йылғы

## ИҪКЕ ЯБАЛАҠЛЫ АУЫЛЫ

286. Уйылданов Йәғәфәр Уйылдан улы, 1893 йылғы

## ҠОРЪЯТМАҪ АУЫЛЫ

287. Арыҫланова Йәмилә Тимербай ҡыҙы, 1923 йылғы
288. Арыҫланова Хәбирә Мәғәлим ҡыҙы, 1897 йылғы
289. Вәлиуллина Хәҙисә Зиязитдин ҡыҙы, 1924 йылғы
290. Лоҡманова Гөлйыһан Абдулла ҡыҙы, 1926 йылғы
291. Мәжитова Хөсниямал Әхмәҙи ҡыҙы, 1924 йылғы
292. Мәҙийәров Миңлеғәли Минийәр улы, 1916 йылғы
293. Мәҙийәрова Рәшиҙә Ғирфан ҡыҙы, 1915 йылғы
294. Низаметдинова Сара Ноғман ҡыҙы, 1923 йылғы
295. Нурғәлиева Шәмсинур Шәмсетдин ҡыҙы, 1896 йылғы
296. Сәғитова Тәхиә Шакир ҡыҙы, 1932 йылғы

297. Сәфиуллин Шакир Сәфиулла улы, 1898 йылғы

298. Хәлилова Минзәлә Васил ҡыҙы, 1963 йылғы, бөрйән ырыуы, мәскәй араһы

299. Шафиҡова Әлифә Миңлеғәли ҡыҙы, 1937 йылғы

## ФӘРИҘУН АУЫЛЫ

300. Төхвәтуллина Фәриҙә Төхвәт ҡыҙы, 1926 йылғы

301. Ғәлиәхмәтова Рабиға Ямалетдин ҡыҙы, 1929 йылғы

302. Әхмәтғәлина Шәмсинур Исламғәли ҡыҙы, 1921 йылғы, сыуаш нәҫеленән

303. Әхмәтғәлин Миниғәли Әхмәтғәли улы, 1888 йылғы

## ДӘҮЛӘКӘН ҠАЛАҺЫ

304. Минибаева Сибәргөл Солтанбәк ҡыҙы, 1904 йылғы. Яппар-Йәнбәк ауылында тыуған

305. Минийәрова Аҫылбикә Ҡотлобулат ҡыҙы, 1902 йылғы

306. Миниғолов Хәмзә Муса улы, 1929 йылғы.

307. Мөхәмәтғәлина Тәржимә Йәһүд ҡыҙы, 1949 йылғы

308. Тугашева Зөләрәм Рәүеф ҡыҙы, 1952 йылғы

309. Хәйретдинов Ғәләүетдин Хәйретдин улы, 1889. Иҫке Ябалаҡлы ауылында тыуған. Иҫкесә уҡый-яҙа белә

310. Хәйретдинова Нәйлә Закуан ҡыҙы, уҡытыусы-методист булып эшләй

311. Хөсәйенова Мәрйәм Сәйетгәрәй ҡыҙы, 1924 йылғы

312. Хузиев Мөлкәмән Хоҙайәхмәт улы, 1905 йылғы. Ҡаңлы Төркәй ауылында тыуған.

313. Шәйхетдинова Вәсилә Миңлебулат ҡыҙы, 1952 йылғы

## ТАШТҮБӘ АУЫЛЫ

314. Миниғолова Миникамал Ҡорбанғәле ҡыҙы, 1914 йылғы.

## ЙӨКМӘТКЕ

Редакторҙан………………………………………………... 3

Төҙөүселәрҙән ……………………………………….. 4

Инеш һүҙ…………………………………………….. 6

Йолалар ………..……………………………………… 8

Йола поэзияһы ……………………………………… 28

Ғөрөф-ғәҙәт, ышаныуҙар, тыйыуҙар ……………… 48

Хөрәфәттәр ……………………………………………. 62

Им-том ……………………………………………... 63

Риүәйәттәр ………………………………..……….. 67

Ер-һыу атамалары, ырыу, нәҫел, ауылдар тарихы 74

Әкиәттәр ……………………………………………….. 100

Йырҙар ………………………………………………….. 108

Таҡмаҡтар ……………………………………………… 159

Уйындар ………………………………………………… 177

Мөнәжәттәр …………………………………………… 188

Бәйеттәр ……………………………………………….... 204

Ҡобайырҙар ………………………………………………. 256
Хәтирәләр ……………………………………………… 263
Дини мәғлүмәттәр ……………………………………….. 304
Төрлөһөнән ……………………………………………….. 307
Информанттар исемлеге …………………………... 315

Научное издание

**Жемчужины земли давлекановской**

На башкирском языке

Составители: А.М.Хакимьянова, Р.Г.Мухаметгалин

ISBN 978-5-91608-002-5

9 785916 080025

Технический редактор: А.М.Хакимьянова
Компьютерный набор и верстка: А.М.Хакимьянова
Разработка и дизайн обложки: Т.К.Сурина

Подписано к печати 11.11. 08.
Формат 60/84. Бумага офсетная. Усл. печ. л. 20
Тираж 300 экз.

Отпечатано на ризографе с готового оригинал-макета.

ООО «Деловая династия»
Уфа, пр. Октября, 71, тел. (347) 235-60-50